Айһылыу ЙӘҒӘФӘРОВА

# ТИРМӘКӘЙ





Айһылыу ЙӘҒӘФӘРОВА

# ТИРМӘКӘЙ

Пьесалар һәм әкиәттәр

КИТАП

Өфө — 2005

УДК 82-2-93=512.141
ББК 84 (2 Рос=Баш)
Й 98

**Йәғәфәрова Айһылыу**
Й 98 Тирмәкәй. Пьесалар һәм әкиәттәр. — Өфө: Китап, 2005. — 208 бит.

ISBN 5-295-03622-7

Киң танылыу яулап өлгөргән, ижад емештәре менән балаларҙы күп йылдар инде һөйөндөргән яҙыусы Айһылыу Йәғәфәрованың «Тирмәкәй» китабына пьесалар һәм әкиәттәр тупланды.

**УДК 82-2-93=512.141**

**ББК 84 (2 Рос=Баш)**

**ТП – 135/05**

**ISBN 5-295-03622-7**

© А. Ш. Йәғәфәрова, 2005

## *Баш һүҙ*

Мин, Йәғәфәрова Айһылыу Шәйхетдин ҡыҙы, Башҡортостандың гүзәл өстағаны — Әбйәлил, Баймаҡ, Бөрйән райондарын тоташтырған төбәктә — Әхмәт ауылында 1948 йылдың 3 сентябрендә тыуғанмын. Башланғыс мәктәпте — Әхмәттә, һигеҙ йыллыҡты — Ҡырҙаста, урта белемде — Ташбулатта алғас, 1966 йылда Ишембай ҡалаһында балалар баҡсалары өсөн тәрбиәселәр әҙерләгән мәктәптә уҡыным.

1967 йылдың 15 июнендә районлың «Красная Башкирия» совхозы балалар баҡсаһында хеҙмәт юлымды башлап ебәрҙем.

1976 йылдан алып шул уҡ балалар баҡсаһында хаҡлы ялға киткәнсе, мөдир вазифаһын башҡарҙым.

1968 йылды ситтән тороп БДУ-ның филология факультетына ситтән тороп уҡырға индем һәм 1974 йылда тамамланым.

Балаларҙы яратыу, уларҙың донъяһы эсендә йәшәү — минең ижадымдың бөтмәҫ-төкәнмәҫ сығанағы, күңелемә илһам өҫтәп тороусы, әҫәрҙәргә йәм биреүсе рухи байлыҡ та булды.

1972 йылда мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн тәүге китабым — шиғырҙар йыйынтығы «Муйынса» донъя күрҙе.

Кескәйҙәргә бағышланған хикәйәләр, әкиәттәр, пьесалар, шиғырҙар йыйынтығын Башҡортостан «Китап» нәшриәте төрлө йылдарҙа баҫтырып сығарып торҙо. «Һайыҫҡан-почтальон» — шиғырҙар, «Сәнскеле күлдәк» — «Колючее платье» (тәржемә), «Алтын тараҡ», «Ҡойон батшалығында», «Һандуғас моңо» — әкиәттәр, «Бөҙрәкәй» — пьеса, ике китаптан торған «Йәйғор» — балалар баҡсаһы өсөн хрестоматия йыйынтығы һәм «Зәңгәрсәс» /балалар өсөн республика конкурсында юғары баһаланған дөйөм драма әҫәрҙәре/.

«Килендәр» романының ике китабын да мин мәктәптең оло йәштәге балаларына тәғәйенләгәнмен.

Балалар менән 37 йыл эшләү дәүерендәге бөтә нәмә миндә һаҡлана: фотоальбомдар, кескәйҙәр хаҡында яҙған күҙәтеүҙәр, уҡыу-тәрбиә тураһындағы төрлө мәҡәләләр, күренекле иҫтәлектәр, бәләкәстәргә арналған хикәйә, әкиәт, шиғыр, пьесалар, тәржемә әҫәрҙәре, һүрәттәр, иртәлек өлгөләре, йырҙар, йыл миҙгелдәренә бағышланған сценкалар, халыҡ ижадынан тупланған гәүһәр ҡомартҡылар... Әле уйлайым да, минең яҙмышым балалар менән бәйләнмәһә, ошоларҙың барыһын да хазина һандығына тултыра алыр инемме икән, тип ғәжәпләнеп ҡуям. Юҡтыр. Тик ошо кескәй саф йөрәктәр генә күңелем ҡыңғырауын сыңлата алғандыр ҙа, эскерһеҙ йылмайыуы менән йомшаҡ күңелле диуанаға әйләндереп, тылсымлы әкиәт донъяһына юлыҡтырғандыр.

Йылдар үтеү менән мин шуны аңланым: бер ваҡытта ла үҙеңде баланан өҫтөн ҡуйырға ярамай. Баҡтиһәң, уларҙың үҙе кеүек һәр саҡ алсаҡ, ҡыҙыҡһыныусан, күп нәмәне белергә ынтылыусан да булырға тейешһең икән. Мин үҙем дә һүрәт төшөрөргә, бейергә, йырларға, улар кеүек әкиәт тыңларға яраттым. Кескәйҙәр күңеле иге-сиге булмаған мөғжизә менән тулы, әгәр ҙә һин шул тормошто ҡабул итә алмаһаң, ни тиклем аҡыллы, талапсан булма, улар донъяһы һине үҙенә тиң итмәйәсәк. Ошо йәшемә тиклем мин бала шәхесен яҡланым, иреген быуманым, уларҙы тупаҫлыҡтан, насарлыҡтан ҡурсаларға тырыштым. Ниндәй генә жанрҙа яҙһам да, ҡәләмем менән яуызлыҡты еңергә, көсһөҙҙө яҡларға, көслөнө ғәҙел, батыр итергә тырыштым. Ололар өсөн берәй нәмә ижад итһәм, балалар хаҡында һүҙ сыҡһа, күңелем ирене, үҙенән-үҙе яғымлы һүҙҙәр теҙелде, иркенлек хасил булды, гүзәл образдар тыуҙы. Кескәйҙәр өсөн миңә яҙыуы күңелле. Бер генә матур шиғыр яҙһам да аҙналар буйы ҡыуанып йөрөйөм. Эшем менән ижадымды айырып ҡарай алманым. Сөнки уларҙы донъя йөҙөндәге иң ғәзиз нәмә — балалар бәйләне.

Балаларға, ер-һыуға изгелекле булығыҙ, өлкәндәр! Изгелек, ҡасандыр, кире үҙегеҙгә, ысыҡ тамсыһындай, йөрәк тажығыҙға тамасаҡ.

# САЛАУАТ БАТЫР

ҠАТНАШАЛАР:

Салауат батыр
Юлай — Салауаттың атаһы
Әминә — Салауаттың яратҡан ҡыҙы
Әлибай, Иштимер, Сабирйән — Салауаттың иптәштәре
Батшабикә
Ҡыҙылсәс, Һарысәс — Батшабикәне хеҙмәтләндереүселәр
Мәскәй әбей
Ҡарағош
Зөһрә — тәрбиәсе ҡыҙ
Аҡһаҡал
Салауат — малай
Әминә — ҡыҙ
Малайҙар, ҡыҙҙар

Тәбиғәт һүрәтләнгән шаршау алдында бик матур сәскәле ялан. Бер яҡ ситтә, ҡайын аҫтында, башҡорт биҙәктәре менән биҙәлгән тирмәнең алғы яғы күренә. Әле ул йәшел япма менән ябылған. Ҡоштар, балаларҙың шаулашҡан тауыштары ишетелә. Бер аҙҙан балалар инә, Зөһрә уларҙы бергә йыя.

Зөһрә. Балалар, әйҙәгеҙ, әҙерәк ял итеп алайыҡ. Аҡланға килеп еткәнсе тирә-яҡты күҙәттек, матурлығына һоҡландыҡ. Ә хәҙер үҙегеҙ күргән һоҡланғыс күренештәрҙе матур һүҙҙәр менән әйтеп ҡарағыҙ. (*Балалар бер-бер артлы тау-урманға, йылға-күлгә, сәскәләргә төбәп, күркәм һүҙҙәр әйтә. Зөһрә уларҙы маҡтап тора.*) Тыңлағыҙ әле, һеҙгә бер шиғыр уҡыйым. (*Уҡый.*)

Минең тыуған ҡырҙарым,
Балдай татлы һыуҙарым,
Яландарым, урманым,
Күккә ашҡан Уралым,
Минең изге төйәгем,
Һеҙҙе һөйә йөрәгем.

Күгәреп күккә үрелгән
Ҡарлы башын Уралдың,
Күҙҙең яуын алырҙай
Матурлығын ҡырҙарҙың
Мәңге маҡтар инем мин,
Мәңге данлар инем мин.

Балалар, был шиғырҙы илен ныҡ яратыусы, ошо ерҙәрҙе мәңге данлаусы батырыбыҙ Салауат Юлаев яҙған, һеҙ уның хаҡында әҙ беләһегеҙ, шуға күрә бөгөн мин һеҙҙе оло аҡланға, тарихсы Аҡһаҡал олатай янына саҡырҙым. (*Балалар шаулаша башлай, ҡыҙыҡһынып тирә-яғына ҡарай.*)

С а л а у а т. Ҡайҙа ул Аҡһаҡал олатай?

Ә м и н ә. Ул Салауат батырҙы күргәнме?

Б а л а л а р (*Зөһрәне уратып ала, бер-бер артлы һорау бирә*). Аҡһаҡал олатай нимә менән килә? Машина менәнме, әллә әкиәт келәме өҫтөндәме, әллә Аҡбуҙатты менепме?

З ө һ р ә. Балалар, йә, йә, шаулашмағыҙ. Аҡһаҡал олатайҙы саҡырыу өсөн сыңлы ҡумыҙҙа уйнарға кәрәк, һеҙ минең ҡумыҙҙа уйнағанымды ишеткәнегеҙ бар бит, шулаймы?.. Тик уның тылсымлы икәнен белмәйһегеҙҙер әле, хәҙер... (*Ҡумыҙын сығарып, талғын ғына уйнай, йәшенгән тирмә өҫтөнән яй ғына япма төшә, балалар тәбрикләй.*) Балалар, был кемдең тирмәһе икән?.. Һеҙ бының кеүек аҡ тирмәләрҙе һабантуй байрамдарында күргәнегеҙ бар, эйе бит?.. Бына ошондай тирмәлә йәй көнө ата-әсәһе, ағалары, туғандары менән Салауат батырыбыҙ йәшәгән. Икһеҙсикһеҙ яландары, урман-тауҙары, йылға-күлдәре булған башҡорт халҡының. Болондарҙа утлап, өйөр-өйөр аттары йөрөгән, көтөүкөтөү эркелгән һыйыр-һарыҡтары менән туғайҙары тулған. Бик бай көн күргәндәр, күршеләре менән алыш-биреш иткәндәр, хатта сит илдәрҙән — Ҡытайҙан, Һиндостандан йөк тейәгән карауандар Башҡорт иленә юлланғандар. Улар тартып килгән юлды «Ебәк юлы» тип атағандар. Сауҙагәрҙәр хөрмәтенә һәр тирмә алдында оло ҡаҙан аҫылған, бишбармаҡ бешкән, көбөләрҙән алып, баҙыян ағас һауыттарға ҡымыҙ тултырылған, тирә-яҡтан күпләп ҡунаҡ саҡырылған. Юлаусылар башҡорт халҡының ҡунаҡсыллығына аптыраған, ҡыҙҙарҙың матур, егеттәрҙең батыр, ҡарттарҙың аҡыллы булыуына һоҡланған, Урал тәбиғәтенең хозурлығына таң ҡалған, бигерәк тә халыҡтың сәсәнлеге алдында баш эйгән. Хатта балаларға тиклем майҙан алдына сығып, үҙе сығарған һамағын

әйткән, шиғырын уҡыған. Балалар, әйҙәгеҙ, тирмәгә яҡыныраҡ барайыҡ. Ана шундай малайҙарҙың береһе Салауат Юлаев булған. Ул, атаһы Юлайға оҡшап, батыр булһа, әсәһе Аҙнабикәгә оҡшап, сәсән дә булған. Хәҙер мин һеҙгә «Тирмәмдә» тигән шиғырын һөйләйем.

Тирмәм тора көмөш кеүек
Йылға ярында.
Хуш еҫле сәскәләр үҫә
Тирә-яғында.

Көтөүҙәр йөрөй. Мин үҙем
Ятам тирмәмдә.
Туғандарым, яҡындарым
Минең эргәмдә.

Шул саҡ тирмәм ишеген
Асырға ҡуштым.
Төнө буйы тыңланым моңон
Һандуғас ҡоштоң.

Ниндәй яҡшы, ниндәй татлы
Булды бөгөн төн.
Керпек тә ҡаҡмай үткәрҙем
Ошо төндө мин.

Ниндәй матур шиғыр! Тәбиғәт тыныс... һандуғас моңо, туғандары янында булған Салауат батырҙың... (*ҡумыҙҙа тағы уйнай, алыҫтан ҡурай тауышы һыҙыла*). Аҡһаҡал олатай беҙҙе ишетте...

Тирә-яғына ҡарай-ҡарай, мине кем саҡыра, тигән йөҙ менән тирмәнән Аҡһаҡал ҡарт күренә. Ул башҡорт халҡының милли, сағыу байрам кейемендә. Балаларҙы күргәс, йылмая, ҡулын күкрәгенә ҡуйып сәләмләй, тегеләр ҙә уның хәрәкәтен ҡабатлай.

Аҡһаҡал. Әссәләмәғәләйкүм, балалар!

Балалар, Зөһрә. Һаумыһығыҙ, Аҡһаҡал олатай!

Зөһрә. Тарих төпкөлөнән саҡыртып, борсоғаныбыҙ өсөн берүк ғәфү итегеҙ инде, олатай. Беҙ...

Балалар шаулашып Аҡһаҡалды уратып ала.

Салауат. Беҙҙең Салауат Юлаев хаҡында күберәк беләһебеҙ килә, олатай.

Әминә. Аҡһаҡал олатай, Әминә тураһында ла һөйләгеҙсе...

1-се малай. Аҡһаҡал олатай, ниңә уны башҡорт халҡының милли геройы тиҙәр?

2-се малай. Минең олатайым да герой, ул Ерәнсәйе менән фашистарға ҡаршы һуғышҡан. Орден, миҙалдары бик күп. Салауат Юлаевтың миҙалдары бармы?

3-сө малай. Салауаттың дошмандары кемдәр?

Ә м и н ә (*оялып ҡына*). Әминәнең балалары булғанмы?

Аҡһаҡал ҡарт йылмайып тора.

А ҡ һ а ҡ а л ҡ а р т. Осрашыуға саҡырыу сәбәбен аңланым, Зөһрә һылыу. Балаларҙың һорауына яуап эҙләйһең икән... Эйе...

2 - с е м а л а й. Салауат өс йәшендә атҡа менгән, тине олатайым...

Ә м и н ә (*оялып ҡына*). Әминә бик һылыу булған, ти өләсәйем... Шуға күрә уның исемен миңә ҡушҡан...

С а л а у а т. Һин, ысынлап та, бик матурһың, Әминә...

1 - с е м а л а й. Аҡһаҡал олатай, Салауат Юлаевтың бала сағы тураһында кино бармы икән?

А ҡ һ а ҡ а л. Салауат Юлаев хаҡында кино бар, балалар, тик ул күптән төшөрөлгән.

С а л а у а т. Йәл...

А ҡ һ а ҡ а л. Балалар, һеҙ театр ҡарарға яратаһығыҙмы?

Б а л а л а р. Яратабыҙ! Һылыу ҡыҙҙар, батыр егеттәр хаҡында!..

С а л а у а т. Тик Салауат батыр — әкиәт түгел. Ул булған хәл. Тик элек батшалар заманында. Атайым шулай ти. Ә беҙ театрҙа әкиәт ҡарайбыҙ.

З ө һ р ә. Балалар, мин һеҙгә Урал батыр хаҡында әкиәт уҡығайным, яратып тыңлағайнығыҙ, ҡасандыр ул да булған тиҙәр...

А ҡ һ а ҡ а л. Эйе, Салауат Юлаев та һеҙҙең кеүек саҡта боронғо батырҙар тураһында әкиәттәр, хикәйәттәр тыңлап үҫә, туған халҡының баҫҡынсыларҙан йәбер күреүе ирекә, ғәҙеллеккә үҫмер саҡтан уҡ ынтылыш уята. Ә халыҡ үҙенең яратҡан батырҙарына һәр саҡ әкиәт сығара.

З ө һ р ә. Би-и-к борондан... һәм хәҙер ҙә...

Ә м и н ә. Батырҙар онотолмаһын өсөнмө, олатай?

А ҡ һ а ҡ а л. Эйе, ҡыҙым, бер ваҡытта ла хәтерҙән юйылмаһын өсөн. Балалар, Урал батыр кемдәр менән һуғыша, хәтерләйһегеҙме?

С а л а у а т. Урал батыр Аҡбуҙатына атланып, илде ҡоротоусы дейеүҙәр менән һуғыша.

Ә м и н ә. Тыуған илен, ҡыҙҙарҙы һаҡлай.

А ҡ һ а ҡ а л. Эйе, Салауат батыр ҙа Башҡорт иленең байлығын талаусы, халҡын иҙеүсе дошмандар менән көрәшә. Үҙ батырын халыҡ онотмай — йырҙар сығара, китаптар яҙа, кино төшөрә

һәм... драма ҡуя. Балалар, һеҙ театрҙа күрһәтелгән әкиәттәрҙе яратаһығыҙ. Бөгөн мин һеҙгә ҡунаҡҡа килгәнегеҙ өсөн ҡыуанып, Салауат батыр тураһында пьеса-әкиәт бүләк итәм. Эйе, эйе, ул — әкиәт, ләкин үҫә төшкәс, һеҙ был аҡланды һағынып иҫкә төшөрөрһөгөҙ һәм... барыһын да аңларһығыҙ. Эйе, эйе, аңларһығыҙ. Әкиәт булдымы икән ул? (*Тирмә эсенән моңло ҡурай тауышы ишетелә.*) Ә хәҙергә һау булығыҙ! Мине тағы кемдер саҡыра, Салауат Юлаев хаҡында һөйләүемде үтенә.

С а л а у а т. Олатай, ҡалығыҙ беҙҙең менән, китмәгеҙ!

Ә м и н ә. Олатай, беҙҙең менән булығыҙ!..

А ҡ һ а ҡ а л. Һеҙҙең менән Зөһрә апайығыҙ ҡала, балалар. Мине үткән быуаттар тарта.

Б а л а л а р. Аҡһаҡал олатай, беҙгә бүләк итеп ҡалдырған әкиәтегеҙ ҡайҙа һуң? Үҙегеҙ китәһегеҙ бит...

А ҡ һ а ҡ а л. Борсолмағыҙ, балалар, был тәүге осрашыу ғына. Һеҙ — Башҡорт иленең киләсәге! Үткән тарихығыҙҙы белмәйенсә, Салауат батыр кеүек ил терәге була алмаясаҡһығыҙ! Тиҙҙән мәктәпкә уҡырға барасаҡһығыҙ, күп тапҡырҙар саҡырырһығыҙ әле һеҙ мине! Ә әкиәткә килгәндә — бына ул! (*Эске шаршау әкрен генә ҡыбырлай башлай.*) Мин һеҙҙе театр ҡарарға саҡырам!.. Ә хәҙергә һау булығыҙ! Мәктәптә күрешкәнгә тиклем!..

Балалар менән хушлаша-хушлаша Аҡһаҡал тирмә яғына ыңғайлай. Ут тоҡана, балалар Зөһрә апайҙары менән сәхнәнән төшөп, залдағы беренсе рәттәге ултырғысҡа ултыра. Яй ғына ҡурай моңо тына.

## БЕРЕНСЕ ШАРШАУ

Батшалар һарайы. Ул бик ҡиммәтле Урал тауының аҫыл таштары менән биҙәлгән. Түрбашта — алтын тәхет. Алдында зиннәтле һауыттарҙа тәмле-татлы аҙыҡтар, шараптар, баллы-шәрбәтле әсемлектәр һалынған өҫтәл. Өҙләкһеҙ ниндәйҙер ят көй уйнай.

Тәхеттә батшабикә ултыра. Башында алтын таж ялтырай. Ул тәкәббер, үҙен үҙе яратыусы ҡатын. Янында ике ҡатын тора, төҫтәре менән уға оҡшаған. Уң яҡтағыһының сәсе ҡыҙыл, кейеме лә ҡара ҡыҙыл төҫтә, ҡулында ҡамсы, ҡиәфәте ҡурҡыныс. Һул яҡтағыһының сәсе һары, күлдәге лә шул төҫтә, ҡулында — елпеүес, үҙе ҡурсаҡ кеүек буянған, ҡупшы. Инеп-сығып йөрөйҙәр. Илселәр ҡабул ителгәндә, ҡатындар тәхет артына йәшенә, әммә шыбырлап Батшабикәгә аҡыл биреп торалар. Әле музыка тынған. Батшабикә серем итә. Ҡыҙылсәс менән Һарысәс әңгәмә ҡора. Хужабикәләре ҡыбырлап ҡуйһа, башын һыйпап, ойотҡос көй көйләйҙәр, шымып торалар.

Һ а р ы с ә с. Арыны Батшабикәм... Ә үҙе, Мәскәй әбей ҡайтһа, уятырға ҡушты... Минең дә йоҡом килә (*елпеүесен ауыҙы алдында иркәләп елпетә, иҫнәй*). Эй, нәмәгә кәрәк ул батша йортона Мәскәй әбей? Килә лә башҡалар хаҡында ғәйбәт һөйләй, көнө буйы Батшабикәнең ҡолағына нимәлер шыбырлай, хатта, беҙ ҙә ишетмәй ҡалабыҙ. Аҙаҡ һарай эсе, бал ҡортоноң умартаһы кеүек, мыжғый башлай. Кемделер зинданға ябалар, кемдеңдер байлығын тартып алып, баш ҡаланан ҡыуып ебәрәләр.

Ҡ ы ҙ ы л с ә с. Йоҡла, йоҡла. Мин һинең йоҡлағаныңды яратам. Һин юҡта, майҙанда ғауға-һуғыш сығарам. Тыныс тормошто күрә алмайым, тонсоғам.

Һ а р ы с ә с. Ҡысҡырып һөйләшмә, Батшабикәне уятаһың... Әйҙә, шым ғына берәй йыр йырлайыҡ, юғиһә, минең дә йоҡом килә...

Ҡ ы ҙ ы л с ә с. Мин йыр яратмайым. Гел генә барабан, борғо тауышын ишетәһем килә. Һуғыш көйҙәрен уйнаһындар минең өсөн!.. Ух!.. Күпме сит ерҙе баҫып инәһең, күпме байлыҡ талайһың, халҡын баш эйҙерәһең! Бына, был, исмаһам, байрам! Үҙеңде Ер йөҙөнөң берҙән-бер хужаһы итеп тоя башлайһың, барыһы һинең алдыңда дер ҡалтырай. Ошо Еңеү йыры, аңланыңмы?

Һ а р ы с ә с. Туҡта, етте... тағы ҡысҡырһаң, уятаһың... Ә миңә Батшабикә ойошторған балдар оҡшай! Их, рәхәтлек! Таң атҡансы бейейһең, үҙеңде иҫ киткес бәхетле тояһың! Их!..

Ҡ ы ҙ ы л с ә с. Шаулама! Ниндәйҙер тауыш ишетелә, Мәскәй әбей ҡайтып килә түгелме?

Батшабикә лә йоҡо аралаш ҡыбырлап ҡуя.

Һ а р ы с ә с. Килә... Миңә көн бөттө. (*Тыңлай.*) Үҙенең ятратҡан баҡсаһына туҡтаны...

Ҡ ы ҙ ы л с ә с. Ҡурҡма, минең менән һәр саҡ бергә бул. Әле Мәскәй әбейең йыуынып, кейенеп, төҙәнеп аласаҡ, шунан һуң ғына һарайға инәсәк. Мин үҙем Мәскәй әбейҙе хөрмәт итәм, барыһын белә ул, бер солтан икенсеһенә һуғыш асҡан, бер батшаның аҡса һандығын юлбаҫарҙар таҙартҡан...

Һ а р ы с ә с. Етте, етте, һуғыш тураһында Мәскәй әбей менән һөйләшерһең, әйҙә, киске балды нисек ойоштороу хаҡында уйлашайыҡ.

Ҡ ы ҙ ы л с ә с. Ул турала үҙең уйла. Шым... һарай ишектәре асыла башланы (*Батшабикәнең еңенән тарта*). Батшабикә, уян,

ана, сәфәрҙән әбекәй ҡайтып килә. (*Батшабикә күҙҙәрен асып, бер нөктәгә төбәп тора ла кире йома.*)

Һ а р ы с ә с (*иркәләнеп, Батшабикәне үбеп ала*). Хәйерле көн, Батшабикәм!.. (*Сәсенән һыйпай.*) Ниндәй матур төштәр күрҙең? Йә, йә, зинһар, уян, Батшабикәм!.. (*Елпеүес менән наҙлай.*)

Б а т ш а б и к ә (*уянырға тырыша*). Хәҙер... Әбекәй ҡайтып киләме? Инергә ҡушығыҙ. (*Ҡапыл күҙҙәрен аса.*) Тиҙерәк саҡырығыҙ!

Һ а р ы с ә с (*йомшаҡ тауыш менән һаҡсыларға*). Саҡырығыҙ, әбекәйҙе, Батшабикә көтә.

Ҡ ы ҙ ы л с ә с (*ҡаты тауыш менән*). Саҡырығыҙ әбейҙе! Тиҙ булығыҙ!.. Батшабикәне асыуландырмағыҙ! (*Һаҡсылар юҡ була.*)

М ә с к ә й ә б е й (*тауышы ишетелә*). Киләм! Осам! Еләм!

Ҡарсыҡ ҡиәфәтендә булһа ла йылғыр, әкиәттәрҙә һүрәтләнгән Мәскәй әбей пәйҙә була.

М ә с к ә й ә б е й. Һағындым өсөгөҙҙө лә! (*Барыһын үҙенсә сәләмләй.*) Көттөгөҙмө? (*Батшабикә лә уға баш эйә. Ҡыҙылсәс ауыҙын йыра — шатлығын белдерә, Һарысәс елпеүесе менән битен ҡаплай.*) Донъяла нимәләр барлығын тиҙерәк белгегеҙ киләме? Үҙегеҙҙә ниндәй яңылыҡтар бар? (*Һарай эсен пыр туҙҙырып әйләнеп сыға.*)

Ҡ ы ҙ ы л с ә с (*ҡамсыһын уйната*). Ана шулай, ана шулай!

Һ а р ы с ә с (*тәхет артына йәшенә*). Етте, етте, Әбекәйем!..

Б а т ш а б и к ә (*шатлығын белдерә*). Һин минең көтөп алған ҡунағым, Әбекәй. Һинһеҙ йәшәү — ҡолаҡһыҙ, күҙһеҙ булыу, тигән һүҙ. Йә, бар донъяны урап сыҡтыңмы?.. Күршеләр ни хәлдә? Кемдәр беҙгә теш ҡайрай?

М ә с к ә й ә б е й (*уның янына, үҙе өсөн эшләп ҡуйылған кескәй тәхеткә барып ултыра*). Кешеләргә килгәндә, Батшабикәм, хәлдәр ошолайыраҡ тора... (*Батшабикәнең ҡолағына нимәлер шыбырлай башлай. Тегеләр тыңларға теләп, әле бер яҡтан, әле икенсе яҡтан тәхеткә һырыға, Батшабикә асыуланып, ҡулын ҡырҡа һелтәй.*) Шунан, шунан. Шулай икән... Ә хәҙер үҙебеҙҙең хәлдәргә күсәйек. Урманым, далаларым, тау-йылғаларым ни хәлдә? Боласылар төнөн усаҡ яндырмайҙармы? Батшалыҡҡа ҡурҡыныс янамайҙармы? Уралда тағы бола сыҡманымы?

М ә с к ә й ә б е й. Тыныслан, Батшабикәм, тыныслан. Теге ваҡытта «Беҙҙең азатлығыбыҙҙы тартып алмағыҙ!» — тип ҡысҡыр-

ғандарҙың бөтәһен дә зинданға яптыҡ, аяҡ-ҡулдарына бығау һалдыҡ. Әлегә Урал тауындағы Башҡорт иле тыныс...

Б а т ш а б и к ә. Тсс! Шулай ҙа, Әбекәй, тылсымлы көҙгөңдө ҡарайыҡ әле. Ни эш бөтөрә икән теге баш бирмәҫ башҡорттар? Мин белгән Юлай Аҙналин төйәген күрһәт!

М ә с к ә й  ә б е й. Ғәфү итегеҙ, Батшабикәм... Яңы йылда мин һеҙгә башҡа батшаларҙың нисек байрам иткәндәрен күрһәткәйнем бит... Бер кешегә көҙгөнө йылына ике тапҡыр күрһәтергә ярамай — көсө бөтә. Көҙгө бүләк иткән Иблис был турала ҡаты иҫкәрткәйне...

Б а т ш а б и к ә. Минән көҙгөңдө йәлләйһеңме?! (*Таяғы менән иҙәнгә һуға, тирә-яҡта ҡара таптар ялт-йолт итеп китә.*) Кем менән һөйләшкәнеңде онотоп китәһеңме әллә?!

М ә с к ә й  ә б е й. Ярай, ярай, Батшабикәм... (*Серле музыка уйнай, ситтәрәк балаларға арты менән торған тылсымлы көҙгө хасил була.*) Ҡарағыҙ, Батшабикәм, ана ул Башҡорт иле! Һай, тәбиғәте лә тәбиғәте! Өҫтө тулы емеш-еләк, мең төрлө ағас, аҫты тулы ер майы, алтын-көмөш, алмас-мәрмәр, аҫыл таштары! Быуаттан быуатҡа сит әҙәмдең ҡулы ошо байлыҡҡа һуҙыласаҡ!.. (*Хәрәкәт яһап күрһәтә.*)

Б а т ш а б и к ә (*таяғы менән иҙәнгә һуға*). Тсс! Ниңә күрәҙәлегеңде алдан ҡысҡыраһың... Әйҙә ҡарайыҡ! Ана, Уралтау балҡып тора! Әбекәй, ҡайҙа бындағы кешеләр? Ҡайҙа Юлай старшина?

М ә с к ә й  ә б е й. Ана, ана, ҡайын төбөндә бер малай йөрөй!

Б а т ш а б и к ә. Малаймы һуң ул? Сәскә йыя түгелме? Хи-хихи...

Һ а р ы с ә с. Әй, малай булһа ла ҡалай наҙлы ғына!.. Үҫкәс, ниндәйерәк егет булыр икән? Үҙе уйсан...

Ҡ ы ҙ ы л с ә с. Шул да булдымы малай! Ниндәй һуғышсы сыҡһын унан! Үҙең, Батшабикәм, бер походты ла башҡорттарһыҙ үткәрмәйһең...

Б а т ш а б и к ә. Шулай кәрәк! Улар ҡурҡыу белмәй! Миңә арыҫландай ажғырып, йән аямай ташланған бөркөттәр кәрәк!

Ҡ ы ҙ ы л с ә с. Был бөркөт түгел!

Һ а р ы с ә с. Эйе... Малай нескә күңелле. Ҡара әле, Батшабикәм, уның ҡулында бал ҡорто ултыра — саҡмай, малай уның безелдәүен тыңлай. Хатта, болондағы ҡоштар, сәскәләр менән дә һөйләшә. (*Сәпәкәй итә.*) Тағы... тағы һылыу ғына ҡатын менән

бер ир килә, һөйләшәләр кеүек... Их, белһәң ине нимә һөйләшкәндәрен!

Б а т ш а б и к ә. Әбекәй, ошо ҡатын менән ирҙең һөйләшкәндәрен ишеткем килә! Малай ҙа ҡоштар менән нимә тураһында ләпелдәй икән?

М ә с к ә й ә б е й (*ҡурҡып китә*). Батшабикәм, үҙең беләһең, зинһар өсөн, ундай һорауыңды үтәй алмайым мин. Тылсымлы көҙгө йылына бер тапҡыр ғына кеше һөйләшкәнен ишеттерә ала бит. Беҙ яҙ көнө сит ил батшаһының беҙҙең хаҡта ғәйбәт һатҡанын ишеттек бит. Хәҙер булмай... Көҙгөнөң көсө бөтә, ун йыл бер нәмә лә күрһәтмәйәсәк. Күҙһеҙ, ҡолаҡһыҙ ҡаласаҡбыҙ, Батшабикәм! Сит илдә генә түгел, үҙебеҙҙә ни ҡылғандарын белмәйәсәкбеҙ.

Б а т ш а б и к ә. Алтын-көмөш биреп, һөнәрселәрҙән төҙәттерербеҙ көҙгөндө!

Һ а р ы с ә с. Ҡайғырма, Әбекәй, Батшабикә бар нәмәне эшләтә ала.

Ҡ ы ҙ ы л с ә с. Эйе, уның ҡөҙрәте көслө! (*Ҡамсыһын болғай.*)

М ә с к ә й ә б е й. Тылсым бөтә нәмәнән дә юғары, Батшабикәм! Алтын-көмөш көҙгө алдында сүп кенә. Башҡорттар барыбер үҙҙәренсә һөйләшә бит, аңламаҫһың... Шулай булғас, ни файҙа...

Б а т ш а б и к ә. Һин бөтә телде беләһең — аңлат! Бар халыҡтың әкиәтендә һинән дә шәп герой юҡ! Ишеттер! (*Таяҡ күтәрә.*)

М ә с к ә й ә б е й. Батшабикәм... (*Теҙләнергә уйлай, ләкин ғорурлығы еңә.*) Ярай, Батшабикәм, ярай... һеҙҙеңсә булһын... Тик миңә ун йылға ете диңгеҙ аръяғында йәшәгән ун ике башлы Дейеү ағайыма ҡунаҡҡа китергә рөхсәт итегеҙ. Мин киткәс, көҙгөмдө ҡара ебәк ҡорған менән ябып ҡуйығыҙ. Көс туплаһын.

Мәскәй әбей төрлө хәрәкәттәр яһай, ҡапыл көҙгөнән ҡара нур балҡый, һөйләшкән тауыш ишетелә башлағас, аҡҡа әйләнә.

Ю л а й. Эй, әсәһе, был бала ҡыҙмы, малаймы? Исеме — Салауат, үҙе ҡыҙҙар кеүек сәскә йыя, һандуғас һайрағанын тыңлай, йылға аҡҡанын күҙәтә...

А ҙ н а б и к ә. Салауатыбыҙ бигерәк нескә күңелле шул, беҙ уға тәүфиҡ, оҙон ғүмер теләйек, атаһы.

Ю л а й. Уныһы шулай, әсәһе, һәр бала үҙ бәхете менән тыуа донъяға... Ә миңә батыр, ҡурҡыу белмәҫ егеттәр кәрәк... Сала-



уатҡа күптән өс тулды, нисек атҡа ултыртырға малайҙы, ҡурҡмаҫмы?

А ҙ н а б и к ә. Ул ҡурҡаҡ түгел, атаһы. Ағайҙары, ана, бал ҡорттарынан да ҡурҡа, ә Салауатыбыҙ уларҙы усында алып йөрөтә.

Ю л а й. Әйтте һүҙ, бал ҡорттарынан ҡурҡмай, имеш! Миңә Уралды һаҡларҙай ирҙәр кәрәк! Ҡайҙа, саҡыр әле шул малайыңды!

А ҙ н а б и к ә. Салауат улым, күбәләгеңде ҡалдырып тор, әйҙә, атайың һине атҡа ултыртам, ти. Йүгер, йүгер, ана шулай, ана шулай... (*Шатланып көлгән малай тауышы, кешенләп ат килеп туҡтағаны ишетелә.*)

Ю л а й. Йә әле, улым, ултыр, һоп!.. Йүгәнеңде нығыраҡ тот! Н-на-а!

А ҙ н а б и к ә. Атаһы, ҡара әле, малайыбыҙ ниндәй шатлана. Эй, балаҡайым, ҡолай күрмә, ниңә, атаһы, атты шулай шәп ҡыуҙың?

Ю л а й (*ҡәнәғәт*). Атты мин түгел, малай үҙе шулай ҡыуа. (*«На-на» тип шатланған тауыш ишетелә.*) Шайтан малай, осоп ҡалаһың бит!.. Шәп ҡыума, улым, бир йүгәнде! (*«На-на!»*) Туҡта! Т-ррр!..

А ҙ н а б и к ә. Эй, йөрәгем өҙөлә, тип торам... Атаһы, Саптарың өҫтөнә кемде ултыртҡанын белә.

Ю л а й. Теҙгенде тот әле, әсәһе. Кил, улым, бөркөт кеүек һауаға сорнайым үҙеңде! Һоп-һоп! Юҡ, юҡ, ҡыҙ түгел, һин — малай! (*Шатланып, ҡысҡырып көлгән малай тауышы ишетелә.*) Ишетәһегеҙме, Башҡорт илендә батыр тыуҙы! Батыр тыуҙы!

Көҙгөлә селпәрәмә килгән тауыш ишетелә. Бөтәһе лә артҡа сигенә.

М ә с к ә й ә б е й (*ҡурҡып китә*). Бөттө... Көҙгөмдөң көсө бөттө... Ҡара ебәк пәрҙә менән тиҙерәк ябығыҙ! Көс йыйһын! Бер яҡ сите сатнаны, бигерәк нык ҡысҡырҙы старшинаң! Тауышы, хатта, баш ҡалаға ишетелде.

Б а т ш а б и к ә. Уның ҡарауы, тәүге тапҡыр өс йәшлек малайҙың атҡа ултырғанын күрҙем! Үҫә, үҫә, көнсығыш сикте һаҡлаясаҡ егеттәр! Улар ышаныслы, ил өсөн йәнен аямаусы һуғышсылар. Батыр бөркөттәр менән бар донъяны яулап була!

Бар ғаләмде ҡосаҡлағандай, ҡулдарын өҫкә күтәрә. Тегеләре лә уның хәрәкәтен ҡабатлай.

Мәскәй әбей (*аптырап, башын һелкеп тора*). Башҡорт ирҙәренең билен тота башлаған малайҙарын өс йәштә генә ниңә атҡа мендергәнен аңламайһың әле, Батшабикәм... белмәйһең... Ах, белмәйһең!

## ИКЕНСЕ ШАРШАУ

Батшабикә һарайы. Шаршау әле асылмаған. Күңелле вальс яңғырай. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың көлгәне, ирҙәрҙең һөйләшкәне ишетелеп ҡала. «Ура!» тип ҡысҡырған тауыштарға гәлсәр бокалдар сыңлауы ҡушыла. Ҙур тантана барлығы һиҙелә. Бер аҙҙан был тамаша шауҡымы әкренләп тоноҡлана. Шаршау асылғанда тәхетендә арыған Батшабикә ултыра.

Ҡыҙылсәс. Һуғыш ҡаты булды, беҙ барыбер еңдек!

Һарысәс. Күңелле итеп Еңеү балын да үткәрҙек (*башын бейетә*).

Батшабикә. Еңеү ҙә, байрам да башты әйләндерҙе. Арыным... Үҙемә тоғро, ышаныслы яугирҙәргә үҙ ҡулым менән миҙал тағып арыным. Батыр, йән аямай һуғышҡаны өсөн Юлай Аҙналин старшинаға ла бирҙем. Артабан да тоғро хеҙмәт ит, тинем. Йылмайҙы...

Һарысәс. Һеҙгә, Батшабикәм, ял итергә кәрәк. Ял... Ял...

Батшабикә (*күҙҙәрен йома*). Эйе, серем итергә.

Һарысәс. Ана шулай, ял ит, Батшабикәм. Ә һин, ҡысҡырып һөйләшмә. Йоҡланы... Тс-с-с! (*Елпеүесе менән елпеп тора.*) Ҡыҙылсәс, миңә башҡорт егеттәренең бейеүе оҡшаны. Ҡулдарын бөркөт ҡанаты кеүек йәйеп ебәрәләр ҙә... осалар ғына! Эх...

Ҡыҙылсәс. Ә миңә уларҙың ҡылыс тағып, һөңгө тотоп, һыбай йөрөүҙәре оҡшай. Үҙҙәренең ҡурҡыу белмәүе менән дошманға ҡурҡыу һалалар.

Һарысәс. Тс-с... Миңә сер генә итеп әйт әле. Ниңә уларҙың батшалары юҡ? Тс-с... Улар үҙҙәрен ғорур, ирекле халыҡ, тип йөрөтә, ти, Мәскәй әбей, шул дөрөҫмө?

Ҡыҙылсәс. Эйе, шуға күрә бер батшаға ла, ханға ла буйһоноорға теләмәйҙәр. Ил менән старшиналары идара итә, ерҙәрен егеттәре һаҡлай. Берәй хәл булһа, кәңәшләшергә ҡор йыялар. Хатта көндөң сығышынан байышына тиклем ерҙе емереп, юлында осраған халыҡты йотоп килгән Аждаһа Ханға ла бирешмәгәндәр. Сөнки уларҙы ниндәйҙер атлант Урал батыр кәүҙәһенән хасил

булған тауҙар һаҡлай, ти. Етмәһә, Ерҙең кендеге лә шул тирәлә икән.

Һ а р ы с ә с. Беҙҙеке кеүек түңәрәкме? (*Кендеген һыйпай.*)

Ҡ ы ҙ ы л с ә с. Тс-с-с... Тик ул Тәгәрмәс ҡала, тип атала. Кендек бауы сиселһә, Ер ситкә сыға икән. Шулай, ике тапҡыр сиселә яҙған, ике тапҡыр туфан һыуы ҡалҡҡан. Үҙҙәрен Кендек халҡы тип йөрөткән башҡорттар Ерҙең баш халҡы икән. Мәскәй әбей шулай ти. Улар бөтһә, өсөнсө туфан һыуы ҡалҡа икән.

Һ а р ы с ә с. Тс-с... Шым... Батшабикә ял итһен. (*Алыҫтан һыбайлылар сапҡаны ишетелә.*) Кемдер берәү Батшабикә һарайына яҡынлаша. Тыныслыҡ бөттө. Ҡарағошҡа оҡшай был. Килә!..

Ҡ ы ҙ ы л с ә с. Килә! Хәбәр алып килә! Батшабикә уны Уралтау яғына осорғайны. Сәләме яҡшынан түгелдер... Ашыға!.. Әһһә!

Ашығып, юл кейемендә Ҡарағош — ҡара кейемле һуғышсы инә. Батшабикәнең ял итеп ултырыуына ла иғтибар итмәй.

Ҡ а р а ғ о ш. Батшабикәм, яҙалама мине, башта тыңла, зинһар! (*Батшабикәнең аяҡ аҫтына килеп йығыла.*)

Б а т ш а б и к ә (*тертләй*). Нимә?! Әллә Уралтауҙа янғын сыҡҡанмы? (*Ҡыҙылсәс ҡыуана, Һарысәс ризаһыҙлыҡ белдерә.*)

Ҡ а р а ғ о ш (*сак тын ала*). Ы-ы-ы-ы.

Б а т ш а б и к ә. Тын ал, беҙ һине аңламайбыҙ! Һөйлә!

Ҡ а р а ғ о ш. Батшабикәм, мине теге... шымсы Мәскәй әбей урынына... Башҡорт иленә ебәргән инегеҙ... күҙәтеп йөрөргә...

Б а т ш а б и к ә. Эйе, шунан нимә булды? Әллә ҡурҡыттылармы? (*Көлә.*) Илдә ирҙәр ҡалдымы әле? Мин уларҙы һәр саҡ һуғышҡа алам бит!

Ҡ а р а ғ о ш. Батшабикәм... был һүҙҙәрҙе һеҙгә еткергәнсе... юлда үҙем үлһәмсе... ишетмәҫ инегеҙ... яҡты йөҙөгөҙ боҙолмаҫ ине...

Б а т ш а б и к ә. Һөйлә! Ҡурҡма! Һин бит һуғышсы!

Ҡ ы ҙ ы л с ә с. Ниңә һуҙаһың? Батшабикәне көттөрмә!

Һ а р ы с ә с. Тыныслан, Ҡарағош, ашыҡма, матур итеп һөйлә!

Ҡ а р а ғ о ш. Әҙерәк тын алайым да (*тора, арлы-бирле йөрөй*). Эйе, Батшабикәм, һөйләйем. Һинең Уралдағы ҡолдарың тамам ҡоторҙо, тағы ла бола сыға күрмәһен. Теге өс йәшендә атҡа ултырған малай остоғо үҫеп килә. Атаһы әле беҙҙең һуғыштан Урал-

ға ҡайтып етмәгән, ә ул баяр Ҡаты Бәгергә ике тапҡыр һөжүм иткән!

Һ а р ы с ә с. Теге, беҙ күҙгөлә күргән малаймы?

Ҡ ы ҙ ы л с ә с. Соҡоп алам мин уның йөрәген! (*Хәнйәрен ялтырата.*)

Б а т ш а б и к ә (*ярһыу*). Ни ҡылған минең башҡорттарыма Себер баяры — Ҡаты Бәгер?!

Ҡ а р а ғ о ш. Башҡорттарҙан урман һатыуҙарын һораған — улары һатмаған. Шунан... Баяр ерҙе баҫып алған да — ағас йыға башлаған. Каторжниктарҙы эшкә ҡыуған, балта тыҡылдауы бөтә Уралға ишетелгән. Бигерәк тә каторжниктарҙың бығау тауышына ҡоторған халыҡ. Башҡорттарҙа бығаулы кеше юҡ. Ирҙәре ерһыуын һаҡлай, бисәләре бала үҫтерә.

Б а т ш а б и к ә. Һе! Шулаймы? Ә мин баяр ауылдарына ҡыҙыл әтәс ҡундырғанмы, тип уйлап торам. Яндыра башлаһа, ул ҡыҙып китә торған.

Ҡ а р а ғ о ш. Һуң? Ул бит Башҡорт ере, Батшабикәм...

Б а т ш а б и к ә. Булһа ни!

Ҡ а р а ғ о ш. Ә... башҡорттоң ер-һыуына теймәҫкә, тигән беҙҙең Грозный батшаның Бөйөк Килешеүен нисек аңларға? Кисә Аҙналин кешеләре минән шуны талап итте. Баярҙан яҡлау таптырып, баш ҡалаға ҡыуҙы.

Б а т ш а б и к ә. Грозный Батшаның ул ҡағыҙы күптән һарғайған инде! Онот ул турала! Халыҡ менән ни ҡылһаҡ та — хөкөм беҙҙең ҡулда! Баш күтәрһәләр — ҡыҫырбыҙ! Йә, аңланыңмы!

Ҡ а р а ғ о ш. Аңланым, Батшабикәм, аңланым!

Б а т ш а б и к ә. Ярай, хуп... Ә теге малайҙы нимә эшләттең?

Ҡ а р а ғ о ш. Һалдаттар саҡыртып, зинданға ташлаттым, Батшабикәм!

Б а т ш а б и к ә. Шунан, артабан нимә эшләтәйем, тип миңә йүгереп килдеңме? Яҙаһын үҙең эшлә, һин бит Ҡарағош!

Ҡ ы ҙ ы л с ә с. Башын киҫәйек малайҙың!

Һ а р ы с ә с. Йәл... Йәш кенә егет бит.

Б а т ш а б и к ә. Йә, малайҙы нимә эшләтәйек?! (*Урынынан тора.*) Кем ниндәй кәңәш бирә?! Ниңә шымдығыҙ?!

Ҡ а р а ғ о ш. Һеҙҙән бойороҡ кәрәк, Батшабикәм... Нимә әйтһәгеҙ ҙә үтәрбеҙ. Дарға аҫырға ҡушһағыҙ — аҫырбыҙ, башын киҫергә ҡушһағыҙ — киҫербеҙ. Башҡорт илендә йылғалар күп — һыуға батырырға ла була!

Б а т ш а б и к ә. Бына ҡайҙа ул Мәскәй әбейҙең булмауы! Ул ғына минең алтын кәңәшсем булған икән! Йүнһеҙҙәр! Башһыҙҙар!

Һ а р ы с ә с. Көҙгөһө бында бит, әйҙә асып ҡарайыҡ.

Ҡ а р а ғ о ш (*көҙгө янына барып, ике ҡулын йәйә*). Мәскәй әбей көҙгөгә теймәҫкә ҡушты! Ярамай!..

Ҡ ы ҙ ы л с ә с. Ҡарағош дөрөҫ әйтә — ярамай. Ләкин Әбейҙең һүҙе беҙҙең өсөн бойороҡ түгел! Батшабикә ни әйтер — шул булыр!

Б а т ш а б и к ә. Ҡарағош, һиңә көҙгөнө асырға бойорам! Сөнки һинең кейемең дә, көҙгөнөң япмаһы ла ҡара! Ҡара көскә ҡара көс ҡушылһа, тағы ла ҙур ҡара көс була! Ҡурҡма, бер нәмә лә булмаҫ, көсөң артыр!

Ҡарағош башҡаларға ҡурҡып ҡарай-ҡарай, көҙгөгә ябылған япманы аса. Ялт-йолт итеп, ҡара уттар ялтырай. Еләк-емеш кәрзине тотҡан, башына сәскәнән таж кейгән бер ҡыҙ көҙгө эсенән шап итеп иҙәнгә килеп төшә лә аптырап тирә-яғына ҡарай, быларҙы күргәс, сығырынан сыға.

Ҡ а р а ғ о ш. Ниндәй һылыу ҡыҙ! Тик күҙҙәре уҫал... Әллә...

М ә с к ә й ә б е й (*ҡыҙ*). Ахмаҡтар, ниңә мине эшемдән айырҙығыҙ?! Ҡарағош, ниңә көҙгөмдөң япмаһын алып ташланың?!

Ҡ а р а ғ о ш. Ҡайҙан килеп төштөң?

Һ а р ы с ә с. Тауышың Әбекәйҙекенә оҡшаған... (*Батшабикәнең артына йәшенә, ә икенсеһе хәнйәр тотоп, уның алдына сыға — һаҡлай.*)

Ҡ ы ҙ ы л с ә с. Яҡын килмә! Кем һин, һылыу ҡыҙ?!

М ә с к ә й ә б е й (*ҡыҙ*). Кем булһын! Был — мин! Һеҙҙең Әбекәйегеҙ! Солтан баҡсаһында алма-хөрмә йыя инем, хозурҙы боҙҙоғоҙ, тфү!

Б а т ш а б и к ә. Мин саҡырттым һине! Кәңәш кәрәк! Ун йыл үткәненә ни заман, килешеү буйынса күптән бында булырға тейешһең! Әллә оноттоңмо?

М ә с к ә й ә б е й (*ҡыҙ*). Уныһы шулай... Солтандың ожмах баҡсаһында йәшәп, ғүмерҙең үткәнен һиҙмәй ҙә ҡалғанмын. Йәл... Ҡарағош! Көҙгөнө кире яп! Теге йылды, өс йәшлек малайҙың атҡа ултырғанын ҡараған саҡта, ныҡ сатнаны, тағы бер-ике йыл күрһәтмәҫ. (*Ҡарағош ҡурҡа-ҡурҡа ғына көҙгөнө яба. Мәскәй әбей кире инеп китә лә башҡалар ауыҙ асып, аптырап торған арала килеп сыға.*) Бына шулай, Батшабикәм, мин һиңә яңынан хеҙмәт итергә әҙермен.

Батшабикә ҡулынан тотоп, ҡарсыҡты бәләкәй тәхеткә ултырта.

Мәскәй әбей. Ниңә саҡыртҡаныңды мин беләм, Батшабикәм. Хәтерләйһеңме, өс йәшлек башҡорт малайы атҡа ултырғанда, миңә батыр һуғышсы үҫә, тип ҡыуанғайның. Мин был эштең кире яғын да һиҙҙертеп ҡуйған инем. Тик, Батшабикәм, быға иғтибар итмәнең. Атаһы хәҙер беҙгә ҡурҡыныс түгел, ҡартая, һиңә тоғролоҡ һаҡлаған яугир, ә малайы үҫә — ҡурҡыныс! Өс йәштә атҡа менде, ун дүрт йәшендә баяр кешеләренә ҡамсы күтәрҙе, үҫә килә... беҙгә ҡылыс һелтәмәҫ, тимә! Әле һуң түгел, берәй әмәлен күрергә кәрәк!

Батшабикә. Мине һаҡлаған батыр һуғышсының малайын кеше алдында үлтереп булмай. Сөнки бөтә халыҡ алдында старшина Юлай Аҙналиндың абруйы көслө. Белеп ҡалһалар, ебәргән һәр кемде ботарлап ташлаясаҡтар! Баяр үҙе хата яһаған, ерҙе йә алдап, йә хәйлә ҡороп, йә юғары хаҡ ҡуйып алалар уны! Үҙе Себер сауҙагәре, белә бит, Башҡорт илен һатмай. Үлһә-үлә, бирмәй!

Батшабикә. Йә, ниндәй кәңәш?

Ҡарағош. Ул малайканы юҡ итергә кәрәк! Башҡа сара юҡ!

Бөтәһе бергә. Эйе, Ҡарағош дөрөҫ әйтә! Юҡ итергә!

Батшабикә. Был эште мин һиңә ышанып тапшырам, Ҡарағош! Һиңә лә, Әбекәй, Ҡарағош менән бергә Уралға китергә тура килер! Хәйләһен табығыҙ, әмәлен күрегеҙ, минең бойороҡто үтәмәйенсә, баш ҡалаға башығыҙҙы тыҡмағыҙ! Тик шуны онотмағыҙ, бер үҙен тап килтерегеҙ, шаһиттар булмаһын! Ишеттегеҙме? Юҡ итегеҙ старшина көсөгөн!

## ӨСӨНСӨ ШАРШАУ

Аҡлан сите. Уң яҡта урман башлана, һул яҡта — Аҡташ ҡаяһы. Йылға сылтыраған, һандуғас һайраған тауышҡа ҡурай моңо ла ҡушыла. Артта оло тирәктең суҡтары һалбырап тора. Ярһыған Салауат менән 14—16 йәшлек тиҫтер малайҙар килеп инә. Ҡулдарында ҡамсы, ҡайһы берәүҙәрендә һөңгө ялтырай.

Әлибай. Салауат, атайың һуғыштан күптән ҡайтты, ә урманды һаман ҡырҡалар. Ниңә ул Баярға бер һүҙ өндәшмәй? Сит-яттарҙан беҙҙе старшина яҡламағас, кем яҡлаһын? Ниңә өндәшмәйһең?

И ш т и м е р. Батшабикәне һаҡлап, дошмандарҙы ҡырған, бергә ултырып сәй ҙә эскән, тиҙәр, шул дөрөҫмө?

С а л а у а т (*йөҙө ҡараңғы*). Эйе... Батшабикә миҙал да таҡҡан.

Ә л и б а й. Шулай булғас, нимәнән ҡурҡа һуң атайың? Батшабикәгә хат яҙып, Баярҙың ҡулын ҡыҫҡартһын! Һәм — вәссәләм!

С а л а у а т. Беҙҙең өсөн ҡурҡа...

И ш т и м е р. Беҙ нимә? Үҙебеҙҙе яҡларлыҡ ҡына көсөбөҙ бар, бер ҡулда — ҡамсы, икенсеһендә — һөңгө!

С а л а у а т. Ҡамсы бар ҙа ул... «Һеҙгә, малайҙарға, әҙерәк үҫергә, егет булырға, аҡыл йыйырға, билде нығытырға, туҙған донъяны бөтәйтергә, кәләш алырға, Батшабикәнән ҡасып, Уралға килеп ултырған башҡа халыҡ менән дуҫлашырға кәрәк», — ти атайым. Түрәләргә ат биреп, мине зиндандан барып алғас та, атайым Силәбегә лә, Ырымбурға ла хат яҙып, сапҡын ебәрҙе, ике яҡтан да яуап булманы. Балыҡ кеүек шымды үрҙәге Батшабикәнең ярандары. Аҙаҡ, Батшабикәнең үҙенә хәбәр ебәрҙе. «Йәнемде аямай, ҡан дошмандарыңдан мин һине һаҡланым, хәҙер һин мине дошмандарымдан яҡла», — тигән ул. Яуап көтә.

С а б и р й ә н. Моғайын, үрҙәге түрәләр атайыңдың хатына ҡолаҡ һалмаған, һалһа, Баяр урман ҡырҡыуын дауам итмәҫ ине!

И ш т и м е р. Ҡырҡалар ҙа — оҙаталар, аҡса һуғалар!

Ә л и б а й. Салауат, урман беҙҙеке. Тиҙҙән түмәрҙәр генә ҡаласаҡ.

С а б и р й ә н. Беҙ Баярҙың урманын баҫып алмағанбыҙ, ул беҙгә килеп тығылған, килмешәк! Күпме түҙергә мөмкин!

И ш т и м е р. Берәй төн барып баҫабыҙ ҙа ҡырып сығабыҙ үҙҙәрен!

С а л а у а т (*ҡулын күтәрә*). Ҡыҙмағыҙ, егеттәр! Атайым беҙҙең ана шул ярһыулыҡтан ҡурҡа ла инде. Ә урман ҡырҡыусылар — Баяр ҡолдары. Үҙҙәрен тәүге баҫҡанда күрҙегеҙ бит — аяҡтарында бығау. Ҡасып китмәһен өсөн, бығау һалғандар... Егеттәр, шуны ла аңларға кәрәк!

С а б и р й ә н. Ҡаты бәғер түгел ул — таш бәғер. Йөрөй кеше ерен тапап, үҙенеке әҙме ни?

С а л а у а т. Таш Бәғер — Баяр алйот түгел. Ерҙе Батшабикәнән һораһа — юғары хаҡҡа алырға кәрәк, ә беҙҙекен талап ала. Атайҙың хатына Батшабикәнән һаман яуап юҡ. Атай ғына һаман

өмөт итә «Мин боласы түгел, мин — старшина», — тип, ике арала тәртип һаҡлауҙы хуп күрә.

Әлибай. Башҡорт ерен баҫып алып, хужа булып йөрөү тәртипһеҙлек түгелме? Әйт, Салауат!

Салауат. Әйе, егеттәр! Был тәртипһеҙлек кенә түгел, был — оятһыҙлыҡ! Мин һеҙҙең ҡыйыу булғанығыҙҙы күрҙем, шуға күрә лә Аҡташ янына йыйҙым. (*Малайҙар шаулаша, Салауат янына йыйыла.*) Әйе, беҙ рөхсәтһеҙ урман ҡырҡыусыларҙы ҡамсы менән ярҙыҡ, икенсе тапҡыр ҡыуып ебәрҙек. Ләкин хужалары Баяр уларҙы эттән һөсләтеп, һаҡсыларынан туҡматып, тағы ебәрҙе.

Иштимер. Ебәреүен-ебәрә, ләкин каторжниктар көндән-көн күбәйә, урман гөж килә. Етте!

Салауат. Егеттәр! Минеңсә, беҙҙең урманды ҡырҡырға Батшабикә үҙе рөхсәт иткәндер. Итмәһә, старшина ҡулына әллә ҡасан хат килеп еткән булыр ине. Әйе, атай әйтмешләй, беҙгә әле үсәһе бар. Ләкин беҙ, егеттәр, Башҡорт илен яҡлар, һаҡлар өсөн үҙебеҙҙе бөгөндән башлап әҙерләргә тейешбеҙ! (*Салауат ҡая итәгенә барып баҫа.*) Егеттәр! (*Ҡуйынынан янған ағас күмере сығара.*) Тыңлағыҙ мине! Бына был, минең ҡулымдағы күмер киҫәге — әле генә мейестән сыҡҡан күмер түгел! Был — (*күмерен йоҙроғонда ҡыҫып тотоп, һауала уйната*) яндырылған ауылдың күмере! Олатайымдың өйөнөң күмере!.. Иҙеүселәргә баш эймәгәнгә, ут һалғандар ауылдарға!.. Егеттәр, ата-олатайҙарыбыҙҙың изге нигеҙенең күмере алдында ант итәйек!..

Әлибай. Ант итергә беҙ әҙербеҙ, Салауат!

Сабирйән. Ант һүҙҙәрен әйт, Салауат!

Иштимер. Һиңә ҡушылабыҙ, Салауат!

Малайҙар. Ант итәбеҙ, Салауат!

Салауат (*күмерҙе өҫкә күтәрә*). Әгәр ҙә мин атай-олатайҙарымдың иле, ғәзиз Уралымды талатып, илбаҫарҙарҙан һаҡлай алмаһам, дошманымдың алдында ҡаушап ҡалһам, йән аямай, ерен-һыуын һаҡлап ҡорбан булған батырҙарыбыҙҙың данын, рухын онотһам, ошо күмер менән Хоҙай минең күкрәгемдә өтөп, яндырып, көлгә әйләндерһен! Ант итәйек, егеттәр!

Салауат ҡая итәгенән төшөп, малайҙар алдына баҫа. Артында — өс дуҫы, арыраҡ — малайҙар.

Бөтәһе бергә. Күҙ ҡараһы кеүек Башҡорт илен — Уралды дошмандан һаҡларға! Тыуып-үҫкән йәнтөйәкте — атай-олатайҙар

нигеҙен һатмаҫҡа! Батырҙар данын онотмаҫҡа, улар рухы менән йәшәргә! Ант итәбеҙ! Ант итәбеҙ! Ант итәбеҙ!

Малайҙар яй ғына артҡа китеп юғала. Ант итәбеҙ, тигән тауыштарға һуғыла-һуғыла, таң шаңдауҙары алыҫҡа тарала... Тулҡынланып, өс дуҫ ҡосаҡлаша, бер-береһенең яурындарынан ҡағалар.

Әлибай. Ә һин, Салауат, ҡайтмайһыңмы?

Салауат. Әҙерәк йөрөйөм әле йылға буйында. Күңел тула...

Әлибай. Эй, сәсән дуҫҡайым! Ярай, беҙ ҡайттыҡ, һин дә оҙаҡлама... һөйләшәһе һүҙ бар, айырым ғына.

Малайҙар хушлаша-хушлаша, ҡул болғап, сығып китәләр.

Салауат. Ҡайттылар... Ә мин Әминәне көтәм... (*Ялбыр тирәк янына килә. Йылға аҡкан, әкрен генә уйнаған ҡурай моңо тауышы ишетелеп ҡала.*) Килерме икән?.. (*Салауат моңлана. Ҡапыл һандуғас һайрап ебәрә.*) Эй! Һандуғас!.. Урал һандуғасынан да моңло, ярһыу ҡош бармы икән башҡа яҡтарҙа?! Юҡтыр... һандуғасым, бөгөн мин төнөн йоҡлай алманым, һинең моңондо тыңланым... һәм үҙеңә арнап, шиғыр сығарҙым, зинһар, тыңла әле. (*Уҡый.*)

Төнгө тынлыҡ. Ағаслыҡта
Һандуғас моңо.
Күктеме, ерҙеме данлай,
Кем белә уны?..

Әминә күренә, ул һоҡланып Салауаттың шиғырын тыңлай.

Әминә. Ә мин беләм, Салауат, беҙгә арналған ул йыр...

Салауат. Әминә... Килдеңме?.. Ҡурҡманыңмы?

Әминә. Мин бер кемдән дә ҡурҡмайым, Салауат!

Салауат. Батыр икәнһең... һандуғасым!

Әминә (*йөҙө яҡтырып китә*). Кем тип әйттең мине, Салауат?..

Салауат (*йылмая*). Һандуғасҡа тиңләйем... Әминә, мин һинең йырлағаныңды ишеткәнем бар. Һандуғас кеүек матур йырлайһың, ҡайҙан шул тиклем йыр беләһең?

Әминә. Әсәйем өйрәтте. Ә һин ҡайҙан беләһең минең йырлағанды?

Салауат. Шишмәгә һыу алырға төшкәндә һәр саҡ йырлайһың бит. Минең кеүек һин дә һандуғас йырын тыңлайһың.

Э м и н ә (*иркә*). Салауат, һин һәр саҡ шулай мине күҙәтеп йөрөйһөңмө, йә, әйт әле?

Бер-береһенә ҡарап йылмаялар, тирәктең икенсе яғына сығып, һөйәлеп, донъяларын онотоп һөйләшәләр, Мәскәй әбей менән Ҡарағоштоң ингәнен дә һиҙмәйҙәр.

М ә с к ә й ә б е й. Был маңҡа малайҙы үлтерергә бөтәһе ҡамасаулай. Бая иптәштәре ошо тирәлә бутала ине, хәҙер бынау бисураһы янында тора... Йәнәһе, бер-береһен яраталар... Салауат... Әминә... Әминә... Салауат... Ғашиҡтар! Тфү!..

Ҡ а р а ғ о ш. Әллә был юлы малайҡаны үлтермәйекме? Минең дә йәш саҡтар иҫемә төштө.

М ә с к ә й ә б е й. Йә, йә, ниңә килгәнеңде онотма... Юғиһә, Батшабикә танауыңды өҙөр, бар халыҡ алдында ҡурҡаҡ исеме тағыр.

Ҡ а р а ғ о ш. Бөттө, бөттө, Әбекәй... Ана, сығып киләләр... Әйҙә, йәшенәйек. (*Йәшенәләр, Салауат менән Әминә сыға, бәхетләләр.*)

Ә м и н ә. Салауат, һин миңә йөҙөк бүләк иттең. Ә минең бүләгем... һиңә тигән ебәк ҡулъяулығым өйҙә — һандыҡҡа йәшерелгән.

С а л а у а т. Ә һин алып кил, Әминә... көтөрмөн, йәме.

Ә м и н ә (*ҡыуана*). Мин хәҙер, Салауат. (*Йүгереп сығып китә.*)

Ҡ а р а ғ о ш (*йәшенгән урынынан пәйҙә була*). Ха-ха-ха! (*Көлә.*)

С а л а у а т (*һиҫкәнеп китә*). Һин кем?

Ҡ а р а ғ о ш. Мин Батшабикә илсеһе!

С а л а у а т. Ибн Фаҙлан кеүекме? Тик һин ниңә аҡ кейемдә түгел? Ҡулыңда ҡылыс...

Ҡ а р а ғ о ш. Таптың сәйәхәтсене! Мин һинең йәнеңде алырға килдем! Алышмы, атышмы?

С а л а у а т (*аптырай, ләкин үҙен тиҙ ҡулға ала*). Атыш — атаң башына! Алыш та кәрәкмәй! Ҡунаҡ булһаң — тыйнаҡ бул! Әйҙә, бәйгеләге батырҙар кеүек көрәшәйек!

Ҡ а р а ғ о ш. Нимәгә ул көрәш, миңә алыш кәрәк!

С а л а у а т. Яр аҫтынан яу сыҡҡан, тигән кеүек әллә ҡайҙан килеп сыҡтың да минең еремдә, минең йортомда һуғыш асырға уйлайһың! Исем-атыңды әйт, кем һин!

Ҡ а р а ғ о ш. Нимәгә кәрәк ул һиңә минең исемем? Алыш тигәс — алыш! Әллә ҡулыңда таяғың да юҡмы, ғашиҡ малай? (*Шарҡылдап көлә.*)

С а л а у а т. Беҙҙә малайҙар өс йәштә атҡа менә, ете йәшендә биленә ҡылыс таға. Башта маңҡа малай менән көрәшеп ҡара, шунан һөйләшербеҙ. Хужаның теләген ҡабул итә ҡунаҡ.

Ҡ а р а ғ о ш. Ҡайһылай һөйләшә, ә? Ярай, маңҡа малай, һиненсә булһын, тик биленде һындырһаң — илама!

С а л а у а т. Себеште көҙ һанайҙар! Беҙҙә шулай, ә һеҙҙә?

Көрәш башлана, сос Салауат үҙен йығырға ирек бирмәй, тегене ыһылдатып бөтөрә. Бер аҙҙан Ҡарағош арып еңелә, тиҙ генә ҡылысына йәбешә, ҡылыс һуғышында, әлбиттә, ул оҫта. Шулай ҙа Салауаттың етеҙлеге өҫтөнлөк итә.

Ҡ а р а ғ о ш (*ҡулы яраланған*). Әбекәй, ҡарағошҡа әйләндер тиҙерәк! Күҙҙәрен соҡоп алайым был дошмандың! (*Ҡыуаҡ араһына инеп китә, Мәскәй әбейҙең «ҡарҡ-ҡарҡ» тигән тауышы ишетелә.*)

С а л а у а т (*күккә ҡарай*). Был... был нимә? Ниндәй сихыр был? Кеше ҡарҡылдаҡ ҡарағошҡа әйләнде! Атылып миңә килә! (*Тиҙ генә янына уҡ терәп атып ебәрә.*) Булды! Күҙенә эләкте! (*Икенсе уғын төҙәй, ләкин атып өлгөрмәй, гөрһөлдәгән тауыш ишетелә.*) Барып ҡарайым әле, үлдеме икән?..

Сыға, Мәскәй әбей инә.

М ә с к ә й ә б е й. Был маңҡа малайҙы һуғыш ҡоралы менән еңеп булмаҫ... Ҡырағай етеҙлеге бар үҙендә, торғаны менән сос һеләүһен! Ҡарағошто урман йыртҡысы — ҡара айыуға әйләндерергә кәрәк! Ҡурҡып йөрәге ярылһын әйҙә маңҡа малайҙың! Эйе, уға айыу кәрәк!

Мәскәй әбей юҡ була, ҡапыл көслө итеп айыу үкереп ебәрә. Арты менән һаҡ ҡына килеп сыҡҡан Салауат ҡынынан яй ғына хәнйәрен сығара.

С а л а у а т. Яҡын-тирәлә ғүмере ҡара айыуҙы күргәнем юҡ ине. Был... әллә теге... ҡара кейемле... әҙәмме икән? Әллә айыу сүрәтендәге ен-шайтанмы? Әминәм генә килеп сыҡмаһын. Ҡурҡыр.

Салауат ҡысҡырып айыуға ташлана. Гөрһөлдәгән тауыш ишетелә. Ҡолаған малайҙың ҡыуаҡ эсенән башы ғына күренеп ята. Ул йыртҡыс аҫтында ҡалған, иҫен юғалтҡан, Мәскәй әбей ҡыуанып ҡысҡырып ебәрә, ен кеүек бейей.

М ә с к ә й ә б е й. Йөрәге туҡтаны Ҡарағоштоң — туҡтаны! (*Тегеләрҙе барып ҡарай.*) Икеһе лә дөмөктө! Хәнйәр ҡаҙалған айыу ҙа маңҡа малайға һуғып өлгөрҙө. Малай — батыр! Йыртҡыстан да ҡурҡманы, ҡуш йөрәк икән! Хи-хи-хи! Батшабикә юрамал Ҡарағошто Уралға ебәрҙе, бында үлем табасағын белде ул, һай, башың бар ҙа инде, Хужабикәм! Осайым-осайым, шатлыҡлы хәбәр еткерәйем Батшабикәмә!

Ялт-йолт итеп сығып китә. Йүгереп, шат Әминә инә.

Ә м и н ә. Салауат, минең дә бүләгемде ҡабул ит! (*Айыу менән Салауатты күреп, саҡ ҡолап китмәй.*) Са-ла-уат! (*Ҡапыл ниндәйҙер көс менән Салауатты айыу аҫтынан һөйрәтеп сығара.*) Ниңә? Ниңә ҡасып китмәнең? Йәйләү яҡында ғына бит... Са-ла-уат...

Илай-илай сәсен һыйпай, битенә өрә лә, ҡапыл йүгереп сығып китеп, услап һыу алып килеп, маңлайына, битенә һирпә. Салауат күҙҙәрен аса, ҡыҙҙы күргәс, йылмайырға итә, ләкин ыңғыраша.

С а л а у а т. Мин... Мин тереме, Әминә?

Ә м и н ә. Эйе, эйе, һин тере, Салауат... (*Күҙ йәштәре аша йылмая, сәсенән һыйпарға уйлай — тыйыла.*)

С а л а у а т. Ә-ми-нә... Һин дә бында ... Ә айыу ҡайҙа?

Ә м и н ә (*ҡурҡа*). Ана... ана ята... һинең өҫтөңә ҡолаған ине... ҡара айыу... ҙ-ҙур икән.

С а л а у а т. Ә нисек... (*Әминә ярҙамында тора, йылмайырға тырыша*). Нисек һөйрәтеп сығарҙың мине? Көслөһөң икән үҙең дә.

Ә м и н ә. Үҙем дә белмәй ҡалдым, әле аптырайым. Ҡурҡтым.

С а л а у а т. Айыуҙанмы?

Ә м и н ә. Юҡ, айыуҙан ҡурҡманым... һин үлеп ҡуймаһын, тип ҡурҡтым...

С а л а у а т (*йөҙөндә һоҡланыу ҡатыш йылмайыу*). Әминә... саҡ ҡына көтөп тор. Мин йылғаға төшөп, йыуынып алайым... Бергә ҡайтырбыҙ. Ә һин ял ит, анау (*шаярта*) айыу өҫтөндә ултырып тор.

Ә м и н ә. Юҡ, юҡ... Үлһә лә, ҡурҡыныс ул. Мин ошонда, түмәргә генә ултырайым, яраймы?

С а л а у а т. Ҡурҡма, аҙаҡ ағайҙар берәй нәмә эшләтерҙәр әле үҙен. (*Сыға, бер аҙҙан һыу супылдаған тауыш ишетелә.*) Ә-минәү! Ҡара әле, бөтә йәрәхәттәрем уңалды! Беҙ бит Урал балаһы! Йылға ла мине йәлләй!

Әминә ҡыҙыҡһынып, ҡулъяулығын күкрәгенә ҡыҫып, Салауаттың һыуға төшкәнен ҡарап тора.

Ә м и н ә. Салауат... (*оялып ҡына*), батырым минең...

С а л а у а т (*тауышы*). Нимә тинең, Әминә? Ҡысҡырып әйт!

Ә м и н ә (*кулъяулыгын Салауат ягына осора*). Салауат, тот, битеңде һөрт! Был минең бүләгем һиңә!

С а л а у а т. Рәхмәт, Әминә! Бүләгеңде ҡәҙерләп һаҡлармын!

Ә м и н ә (*кулдары күкрәгендә*). Салауатым...

С а л а у а т (*һыуҙан сыга, ҡулында ал ҡулъяулыҡ*).

Минең тыуған ҡырҙарым,
Балдай татлы һыуҙарым!..
Яландарым, урманым,
Күккә ашҡан Уралым —
Минең изге төйәгем,
Һеҙҙе һөйә йөрәгем!..

Әминәү! Һине лә һөйә йөрәгем! (*Әминәгә ҡулдарын бирә.*)

Ә м и н ә (*шат*). Минең изге төйәгем, һеҙҙе һөйә йөрәгем!..

## ДҮРТЕНСЕ ШАРШАУ

Төнгә усаҡ. Уның тирә-яғы хәрби торошта. Арыраҡ, унда-бында, башҡорт, урыҫ һәм башҡа баш күтәреүселәрҙең йоҡлап ятҡаны һиҙелә. Шым ғына Мәскәй әбей инә, ян-яғына ҡарай-ҡарай, еҫкәнеп йөрөй.

М ә с к ә й  ә б е й. Әһ-һә! Бына ҡайҙа икән боласыларҙың төйәге! Ҡаты алышҡандар... Ял итәләр... Йоҡлайҙар... Батшабикә мине ялған батша — Ҡарғаның көстәрен һынарға ебәрҙе. Старшина малайы үлмәгән булып сыкты. Батшабикәне, уны урман шаманы терелткән, тип алданым. (*Тыңлай.*) Һөйләшәләр... Ҡарға батша менән Юлай Аҙналин һөйләшә, һаман йоҡламайҙар. (*Һагая*). Нимә хаҡында план ҡоралар икән? Батшабикәнең хәйләһе барып сыҡманы. Үҙен Батшабикәнең иремен тип йөрөткән ялған Ҡарға батшаға ҡаршы Салауат ғәскәрен ебәреп, бер-береһен һуғыштырып, ике яҡты ла ҡырҙырырға уйлағайны... булманы... Ҡарға батша башҡорттарға ирек бирәм, тип вәғәҙә иткән ине, тегеләр уға ҡушылды ла ҡуйҙы, тфү! Туҡта. Анау килгән Салауат үҙе ту-

гелме? Эй, ҡайһылай күркәм ир-егеткә әйләнгән! Теге ваҡытта күргән маңҡа малай түгел инде. Туҡта, йәшенәйем... Ҡара тал, йәшер мине... (*Сыға.*)

С а л а у а т. Атай килгән. Үҙе менән егеттәр алып килгән.

Йөҙө борсоулы. Күренеп тора, миңә әйтер һүҙе бар кеүек... (*Көрһөнә, ултыра.*) Эйе, беҙ Батшабикә ғәскәренә ҡушылырға тейеш инек, ярты юлда Ҡарға батша илсеһе ҡаршыға сыҡты. Минең ҡулда — ҡылыс, уның ҡулында — аҡ ҡағыҙ ине. Бар халыҡҡа ирек, ер-һыуға үҙебеҙҙең хужалыҡ вәғәҙә ителә ине унда — Ҡарға батша өндәмәһендә. Алдамаҫмы? (*Уйлай.*)

М ә с к ә й ә б е й (*ҡыуаҡ эсенән башын сығарып, шым ғына кеткелдәп көлә*). Азатлыҡ — эскән һыу, һулаған һыу менән бер инде һеҙгә! Ерҙә ул Алла түгел, үҙегеҙгә генә ышанығыҙ, ал-йоттар... Тфү! Ҡайһылай аҡыл өйрәтә башланым, улар миңә кем! Тфү!

Салауат тауыш сыҡҡан яҡҡа ҡарай, Мәскәй әбей юҡ була.

С а л а у а т. Атайым туғандарымдан, Әминәмдән сәләм килтергән... Сәләм шатландырһа ла һағышымды көсәйтте. Бигерәк тә улым — Рамазанымды һағындым... Бер туҡтауһыҙ төштәремә керә.

Көрһөнә, һағышлана, башын аҫҡа эйә.

М ә с к ә й ә б е й (*башын күрһәтә*). Һағышлана... Миңә Салауаттың һәр аҙымын күҙәтеп йөрөргә, нимә һөйләгәнен тыңларға ҡушылған. Егеттәренә шиғыр уҡый. Көйгә һала ла йырлай, ҡурай уйнай. Бер үҙенә күпме һөнәр. Егеттәренә оран һалһа, көсдарман өҫтәлә үҙҙәренә! Минең сихри доғамдан да көслө яңғырай. Оҡшатам шиғырҙарын... Тфү! Тфү! Эйе, кисә яу алдынан ярһып, бер шиғырын уҡыны. Йөҙ егет урынына меңе ҡалҡып сыҡҡандай булды! «Сал бөркөттәй, егет, батыр бул!» — тип ҡысҡырғайны, һуғышсы егеткә әйләнеп, үҙем ғәскәр рәтенә торғом килде!

Яуҙа, арыҫландай ажғырып,
Йән аямай ташлан дошманға! —

тип оран һалғайны, саҡ арыҫланға әйләнмәй ҡалдым. Үәт, әй!

Һуңғы һүҙҙәрен ҡысҡырып әйтә, Мәскәй әбей юҡ була.

С а л а у а т. Эй, кем йөрөй унда? (*Тирә-яғына ҡарай.*) Ә-ә-ә... Атай килә икән... (*Усаҡты буташтыра.*) А-тай! Кил бында!

Ю л а й (*инә, аптырап китә*). Улым, һин һаман да йоҡламағанһыңмы? Арығанһыңдыр... Кисә Батшабикәнең ғәскәре менән алыш булған икән.

С а л а у а т. Эйе, атай, еңелдән булманы бәрелеш... Оҫта һуғышалар, ә Ҡарға батшаның ҡайһы бер һуғышсылары ҡылыс та тота белмәй, ҡулдарында балта ла һәнәк. Ниңә килгәндәрҙер бында?

Ю л а й (*көрһөнә*). Уларҙың да Батшабикәнән азат булғылары килә. Ә инде Батшабикәнең һуғышсыларына килгәндә — улар өйрәтелгән хәрбиҙәр, етмәһә, һайланған ғәскәр. Һин шуларға ҡушылырға тейеш инең.

С а л а у а т. Атай! (*Көрһөнә.*) Атай, һин... мине...

Ю л а й. Һөйлә, улым, һөйлә, күңелеңде бушат, мин тыңлайым. (*Ултыра.*)

С а л а у а т. Атай, һин мине яратып үҫтерҙең, һәр саҡ минең менән ғорурландың. Ә мин һинең һүҙеңде тыңламаным. Егеттәрҙе Ҡарға батша ғәскәренә ҡуштым. Ғәфү итмәҫһең инде. Сөнки, һин, атай, Батшабикәнең тоғро старшинаһы.

Ю л а й. Эйе, уныһын йәшерә алмайым. Ғәскәрем менән Батшабикәнең намыҫын, ғүмерен, илен һаҡлап, хәрби походтарҙа күп йөрөнөм. Шуның өсөн ул да беҙҙе йәберһетмәҫ, илбаҫарҙарҙан яҡлар, тип уйланым. Яҡлау хатын оҙаҡ көттөм, көтөк булдым, барыбер килмәне. Бөйөк Килешеүҙе, Грозный батша аманатын боҙа, Урал байлығын талай, төрлө юлдар менән еребеҙҙе тартып ала башланы. Уның был ҡылығына түҙеү мөмкин түгел. Шуға күрә мин һинең ниңә Ҡарға батшаға ҡушылғаныңды аңлайым, улым.

С а л а у а т. Эйе, ул беҙгә, Уралда йәшәгән бар халыҡҡа азатлыҡ вәғәҙә итте, атай! (*Атаһын ышандырырлыҡ итеп шиғыр уҡый.*)

Ул миңә хәбәр ебәргән,
Быҕаулының ҡулынан
Быҕауын йолҡам, тигән ул.
Тышаулының аяғынан
Тышауын йолҡам, тигән ул.
Ерһеҙ ҡалған башҡортҡа
Ерен бирәм, тигән ул.

Һыуһыҙ ҡалған башҡортҡа
Һыуын бирәм, тигән ул,
Башҡорттар үҙ ерендә,
Тыуып-үҫкән илендә
Ҡош булып күккә менһендәр,
Балыҡтай һыуҙа йөҙһөндәр,
Ана шулай тигән ул...

Эйе, атай, мин уға ҡушылдым... Ирек һөйә бит башҡорт. Асылыма, намыҫыма хыянат итә алманым. Атай! Һин мине ғүмер буйы: «Күрше хаҡы — Тәңре хаҡы!» — тип өйрәттең, күршеләр менән татыу йәшәргә ҡуштың, Уралда йәшәгән башҡа халыҡтарға һөйөү тәрбиәләнең. Иҙеүселәренә баш күтәргән күршеләремдең — сыуаш, татар, урыҫ, мариҙың башын ошо ҡылысым менән киҫә алмайым мин! (*Тулҡынланған Юлай ҡапыл урынынан тора, арты менән Салауатҡа борола. Ҡамсыһын күтәрә. Егет, малайҙар кеүек ҡурҡыңҡырап, артҡа сигенә, ләкин атаһының йәшләнгән күҙҙәрен, йәйелгән ҡоласын күргәс, уға ташлана.*) Ғәфү иттеңме, атай? Мин ышандым. Мин һиҙҙем. Эйе, эйе, ирек һөйгән, азатлыҡ даулаған Урал халҡына ҡылысымды күтәрә алманым мин!

Ю л а й. Тыныслан, улым, тыныслан... Беҙҙең йөрәктәр былай ҙа күптән бергә тибә, улым. Шуның өсөн дә мин һине ғәскәр башлығы итеп ҡуйҙым, үҙ ирегең менән азатлыҡ һөйөүселәргә ҡушылыуыңды белдем... Халыҡ бәхете өсөн йөрәгең яна, улым. (*Ултыралар.*) Уралдағы Оло Дуҫлыҡ — Башҡорт иленең аҡылына, данына, туған халҡын һөйөүенә, үҙе менән бергә йәшәгән башҡаларҙы ҡәҙер итеүенә, ерен күҙ ҡараһы кеүек һаҡлауына бәйләнгән! Беҙ — иркле халыҡ! Иректе беҙгә Хоҙай тәғәлә үҙе биргән. Уны тартып алырға бер кемдең дә хаҡы юҡ! Илдә батырҙар бар икән — Башҡорт иле йәшәйәсәк! Ә батырҙарҙы — батыр халыҡ ҡына тыуҙыра. Тик бына...

С а л а у а т. Нимә йөрәгеңде телә, атай?

Ю л а й. Улым, һин үҙ илеңде, ата-бабаңды, телеңде, үҙеңдең кем икәнеңде беләһең... (*Көрһөнә, уйсанлана.*) Ә бына минең ейәндәремде ниндәй яҙмыш көтә?

С а л а у а т (*тертләп китә*). Һин... атай... Нимә тураһында?

Ю л а й. Мин дә атай, һин дә атай, улым, был — бәхет. Мин Хоҙай тәғәләнән көнөн-төнөн ейәнем Рамазандың үҙ халҡы менән йәшәүен, беҙҙе онотмауын, үҙенең кем икәнен белеүен теләйем.

С а л а у а т (*аптырай*). Сәйер һүҙҙәр һөйләйһең һин, атай. (*Атаһы янына ултыра, һыйына.*) Әллә ауылға ҡайтып китәһеңме? Әсәм, Әминәм, Рамазаным янына. Уларға ла күҙ-ҡолаҡ булырға кәрәк. Ғәскәрҙә һинең кеүектәр юҡ, атай, барыһы ла тыуған төйәктә.

Ю л а й. Кирегә юл юҡ, улым. Һинең яҙмыш — минең яҙмыш. Мин һине, Салауатым, ташлап китә алмайым. Ҡарға батша баш ҡалаға — тәхеткә ынтыла, ә беҙҙең өсөн алтын тәхет — ул ғәзиз

Урал... (*Ҡапыл.*) Улым, һин арығанһың, бар ял итеп ал. Тиҙҙән таң ата бит. Мин дә усаҡ янында серем итеп алайым. Иртәгә, бәлки, тағы яуға күтәрелербеҙ.

Салауат. Ярай, атай, мин киттем, Әлибай менән Иштимер араһына сумайым. Үҙеңә лә тыныс йоҡо, атай! (*Китә.*)

Юлай. Һиңә асыуланырға хаҡым юҡ, улым. Һин бойороҡ буйынса түгел, ә йөрәгең, аҡылың ҡушыуы буйынса эшләгәнһең. Эх, йәшһең шул әле.

Мәскәйәбей. Эйе, улың йәш әле, шуға күрә лә хаталанған, әле лә һуң түгел ахмаҡлыҡты төҙәтергә! Хи-хи-хи!

Юлай (*ырғып тора*). Һин ҡайҙан килеп сыҡтың, нимә эшләп йөрөйһөң бында? Батшабикә һарайындағы кеүек кеше дошманлаштырырға килдеңме? (*Ҡылысының ҡынына тотона.*) Нимәгә күҙеңде ялтыратаһың?

Мәскәй әбей. Хи-хи-хи! Ҡурҡытты! Һин минең ҡырҡ һүрәткә ингәнемде беләһең бит! Тик бөгөн эш икенсе. Салауатыңа Батшабикә генералынан хат алып килдем. Мә, тапшыр!

Юлай (*хатты уҡый ҙа ярһып-ярһып йыртып ташлай*). Бына, бына, күр! Тимәк, барыһына ла Салауат ғәйепле! Батшабикә үҙе Бөйөк Килешеүҙе боҙа — Салауат ғәйепле! Һалған һалымын халыҡ күтәрә алмай — Салауат ғәйепле! Баярҙары башҡорт ерен тапай — Салауат ғәйепле!

Мәскәй әбей. Шаулама, Аҙналин! «Эйелгән башты ҡылыс киҫмәй», — тип оран һалған Аждаһа Хан. Был бик дөрөҫ!

Юлай (*хат киҫәктәрен тапай*). Ә ниңә был хатты генерал Ҡарға батшаға түгел, Салауатҡа ебәргән?

Мәскәй әбей (*хихылдап көлә*). Кем ул беҙҙең өсөн Ҡарға батша? Бо-ла-сы! Ундай боласыларҙы беҙ күп күрҙек! Ә һинең Салауатың йәш булһа ла һәләтле юлбашсы! Ҡурҡыу белмәҫ батыр, етмәһә, шағир! Азатлыҡ ораны менән Уралдағы бар халыҡты үҙ артынан эйәртеп алып йөрөй! Быға, хатта, мин дә һоҡланам! Тфү-тфү! Батшабикәнең шымсылары ишетеп ҡалмаһын. (*Тирә-яғына ҡарай.*) Эх, Аҙналин, Аҙналин! Һин ҡарт баш, башҡорт ихтилалдарының нисек бөткәнен белһәң дә, тотҡонлоҡтоң әсе михнәтен, зиндандарҙың тамуҡ икәнен белмәйһең! Кире бор юлыңды, Аҙналин!

Юлай. Азатлыҡҡа хыянат итергәме?

Мәскәй әбей. Алйот! Аңыңа кил, Аҙналин! Һин үҙеңдең кем икәнеңде онотаһыңмы әллә? Ҡулыңда байлыҡ эркелеп тора,

илең — ожмах түре, мал-тыуарың донъя ҡаплай, бисәләрең, бала-сағаларың янында өйөрөлөп йөрөй, туған-тыумасаң күп, яҡын-тирәлә дуҫтарың, сит яҡтарҙа таныштарың тулы. Ереңәҙме ни һинең! Аһ-һа-һа-һа! Теттереп йәшә, Аҙналин! Салауатың уҡымышлы, сос, ҡыйыу. Хәрби походҡа киткәндә, ағайҙарын түгел, йәш кенә булһа ла, үҙең урынына старшина итеп ҡалдырып китәһең икән. Бар булмышы һөйләп тора, киләсәктә Салауатың ил старшинаһы буласаҡ! Ете үлсә, бер ҡат киҫ юлыңды, түрә!

Юлай. Дөрөҫ әйтәһең, Мәскәй әбей! Уралым, халҡым минең — оло байлығым! Ләкин улар һатылмай! Ишетәһеңме?

Мәскәй әбей. Ах, Аҙналин, Аҙналин! Һин бит үҙеңде ниндәй яҙмыш көткәнен белмәйһең...

Юлай. Ҡарҡылдап торма! Мине ниндәй яҙмыш көткәнен Хоҙай тәғәлә үҙе генә белә! Ә һин Иблис затынан! Юғал күҙемдән!

Мәскәй әбей. Әйе, Иблис мине үҙе ер йөҙөнә сығарып ебәрҙе. Унда йәшәгән әҙәмдәрҙе мин һуғыштырырға, боҙорға, ыҙғыштырырға, мейеләренә ҡара уйҙар һалырға тейешмен. Ләкин һинең кеүек Арҡайым ҡоҙоғонан һыу эсеп, рухи көс йыйған кешеләрҙе йығып булмай. Тамырҙарың Уралыңа ныҡ йәбешкән. Ләкин Батшабикә язаһынан һәм... хи-хи-хи, Иблис эсемлегенән ҡотола алмаясаҡһығыҙ! Минең серле көҙгөм бар, ул киләсәкте күрһәтә, һеҙҙең икегеҙҙе лә Батшабикә бойороғо буйынса ҡаты язаға тарттырасаҡтар, ҡамсы менән ярасаҡтар!

Юлай. Хоҙай үҙе еңеллек бирһен, ярҙам итһен. Ә һин, Батшабикә шымсыһы, алдан юрап торма!

Мәскәй әбей. Юра-юрама, был шулай буласаҡ — үҙең беләһең! Салауатыңдың исемен халыҡ күңеленән юйыр өсөн, был исемде башҡа бер кемгә лә ҡушмаҫҡа! Батшабикә ҡаты бойороҡ сығарасаҡ! Әмер үтәлмәһә — ҡоллоҡ, Себер көтә ул кешене!

Юлай. Ышанмайым мин һиңә, Мәскәй! Халыҡ бәхете өсөн көрәшкән батырҙарҙы халыҡ онотмай! Юлай улы Салауат хаҡында олаталары ейәндәренә һөйләр! Йөрөмә бында, ҡара зат!

Мәскәй әбей. Үлек киләсәгеңде уйлағансы — бөгөнгөңдө уйла, Аҙналин! Һеҙҙең маңлайығыҙға «боласы», «хыянатсы», «яуыз» тигәнде аңлатҡан тамғалар һуғыласаҡ. Бүре ситлегендә, аяҡ-ҡулығыҙға бығау һалып, кеше аяғы баҫмаған утрау зинданына ташлатасаҡ һеҙҙе Батшабикә. Ғазабығыҙ башығыҙҙан ашһын, аһ-зарығыҙ тулҡыны Уралығыҙға ҡағылып, башҡаларҙа йәшәү өмөтө һүнһен, тип уйлай Хужабикәм.

Ю л а й (*ныҡ асыулы*). Хыянатсы булып, беҙ Бөйөк Килешеүҙе боҙманыҡ! Батшабикәне дошмандарҙан һаҡланыҡ, уның сик буйҙарында торҙоҡ, хеҙмәт иттек. Уралыбыҙ байлығы йылға булып уның һарайына аҡты! Беҙ боласы булып, баш ҡаланы тапаманыҡ, ә тик үҙебеҙҙең таланған еребеҙҙе кире ҡайтарырға, халыҡҡа ирек бирергә көрәштек. Беҙ яуыз булып, алтын көмбәҙле, ҡыңғыраулы һарайҙарҙы — сиркәүҙәрҙе емермәнек, үҙебеҙ менән көн иткән халыҡҡа теймәнек!..

М ә с к ә й ә б е й. Ниндәй тоҡом һеҙ! Буйһона ла, хәйләләй ҙә белмәйһегеҙ! Танау япраҡтарығыҙҙы өҙөп алһалар ҙа ирек һауаһын һуларға тырышаһығыҙ!

Ю л а й. Етте, ҡарҡылдама! Уға тиклем беҙ әле көрәшәсәкбеҙ! Беҙҙең яуҙы баҫтырып, ҡурҡыттыҡ тип ҡыуанмағыҙ! Батыр ирҙәр тағы тыуыр, Башҡорт илен илбаҫарҙарҙан һаҡлар, Ватанын яҡлап, утлы һүҙ әйтер!

М ә с к ә й ә б е й. Үҙеңә, Салауатыңа, үҙең хөкөм сығарҙың, Аҙналин! Шулай ҙа мин ысын хатты Салауатҡа бирәм, бәлки, аҡылына килер... Быныһын йыртып ташлаясағыңды белдем, шуға күрә икәүҙе яҙҙырттым. Мәскәй әбейҙе алдап булмай!

Ю л а й (*сығырынан сыға*). Хәҙер башыңды өҙәм! (*Ҡылыс менән Мәскәй әбейгә ташлана.*) Яуыз! Хыянатсы! Боласы! Иблисеңә һыпырт!

М ә с к ә й ә б е й. Хат барыбер Салауат ҡулында буласаҡ! (*Шарылдай-шарылдай күҙҙән юғала.*)

С а л а у а т (*йүгереп килеп инә*). Ниндәй тауыш был, атай?

Ю л а й. Таң ата. Аттар кешнәй. (*Улы алдында тыныс булырға тырыша.*) Тауыштарҙы... йоҡола ишеткәнһеңдер, улым.

С а л а у а т. Эйе... Атай, мин Әминәмдең, Рамазанымдың тауышын ишеттем. (*Әминә тауышы: «Йәнем... һағындым... тиҙерәк ҡайт...» Малай тауышы: «Атай! Миңә өс йәш тулды, мине лә атҡа ултырт!» Салауат менән Юлай тулҡынлана.*) Атай, һин дә мине үҙең атҡа ултыртҡайның, хәтерләйһеңме?

Ю л а й. Эйе, улым...

Алыҫтан Аҙнабикәнең тауышы ишетелә: «Эй, балаҡайым, ҡолай күрмә...» Юлай тауышы: «Ишетәһегеҙме, Башҡорт илендә батыр тыуҙы! Батыр тыуҙы!» Юлай Салауатты ҡосаҡлай, улы атаһының арҡаһынан ҡаға.

С а л а у а т. Эйе, атай, беҙ көрәшкә күтәрелдек! Яу оранын Урал тауҙары быуаттарға күтәрһен! Аманатымды балаларға еткер-

һен! (*Салауат ҡуйынынан күмер сығара.*) Килер быуыным! Урал таштарынан ҡоролған ата-бабаларыбыҙҙың нигеҙен туҙҙырмағыҙ, һатмағыҙ! Халыҡ азатлығы өсөн һәр саҡ көрәшегеҙ! Еребеҙҙе, Башҡорт илен, күҙ ҡараһы кеүек һаҡлағыҙ! Ватаныбыҙҙы яратығыҙ! Батырҙар данын онотмағыҙ, улар рухы менән йәшәгеҙ!

Юлай. Салауат исемен йөрәгегеҙҙә һаҡлағыҙ, быуын һайын Башҡорт илендә Салауаттар тыуыр!

Салауат. Эйе, атай, илдә батыр егеттәр, матур ҡыҙҙар тыуыр!

Юлай. Таң атты... Аттар кешнәй... Әйҙә, Салауатым, ултыр атыңа! Азатлыҡҡа ҡарай юл күрһәт!

Зәңгәр, алһыу таң яҡтылығында ҡул болғай-болғай Салауат менән Юлай алыҫлаша бара, сәхнә түренә әкрен генә Салауат Юлаевтың Ағиҙел ярында торған һәйкәле төшөрөлгән шаршау төшә. Салауат маршы яңғырай. Балалар урынынан тора, алҡышлай, «аҡлан»ға сыға.

Зөһрә. Балалар, беҙҙе Аҡһаҡал ҡарт Салауат Юлаев, атаһы Юлай Аҙналин, Әминә һәм уның дуҫтары менән таныштырҙы. Ҙур рәхмәт уға. (*Балалар тирмә яғына ҡарап ҡул болғайҙар.*) Эйе, Батшабикә азатлыҡ өсөн көрәшеүсе Салауаттың исемен телгә алмаҫҡа ҡуша. Бөгөн уның бойороғо үтәләме? Ни өсөн? (*Балалар яуап бирә.*) Эйе... Шулай...

Салауат. Минең исемем Салауат. Олатайым ҡушҡан.

Әминә. Беҙ ирекле Башҡортостанда йәшәйбеҙ. Салауат исеме бөтә ерҙә бар. Халыҡ шағиры Мостай Кәримгә Салауат Юлаев ордены бирелгән.

Беренсе ҡыҙ. Салауат ҡалаһы бар. Унда минең инәйем йәшәй.

Икенсе ҡыҙ. Һәр ҡала-ауылдарҙа Салауат Юлаев исеме ҡушылған урамдар бар тиерлек.

Беренсе малай. Салауат Юлаев исемендәге хоккей командаһы бар. Унда минең ағайым уйнай.

Әминә. Салауат районы бар.

Салауат. Унда Салауаттың музейы бар.

Зөһрә. Һәм... Ағиҙелдең бейек ярында батырыбыҙ Салауат Юлаевҡа һәйкәл ҡуйылған! (*Балалар боролоп һәйкәлгә ҡарай.*) Бына ул беҙҙең Салауат! Ҡорос атына атланып, үҙе даулашҡан азатлыҡты юғалтмаҫҡа өндәп, оран һалып тора!

Салауат. Зөһрә апай, йөрәгемде нимәлер өтә... (*Ҡуйынынан*

*күмер киҫәге сығара.*) Салауат күмере?.. Са-ла-уат күмере! (*Сәхнәне урап сыға, башҡалар уның янына йыйыла.*) Зөһрә апай, минең йөрәкте Салауат күмере яндырған! (*Зөһрә уйсанланып, нимәлер әйтергә теләгәндәй уға төбәлгән.*) Мин аңланым, Зөһрә апай... Әйҙәгеҙ, беҙ ҙә Салауат Юлаев һәйкәле янында Ант итәйек!

Ҡыҙҙар. Беҙ ҙә, беҙ ҙә! Һүҙҙәрен әйт, Салауат!

Балалар уңға-һулға, ике рәткә теҙелә. Уртала ҡулына күмер тотҡан Салауат малай. Бөтәһе бергә Ант итә.

Балалар. Салауат антына тоғро буласаҡбыҙ!
Аманатын киләсәккә аласаҡбыҙ!
Батыр рухын йөрәктә һаҡлаясаҡбыҙ!
Мәңге йәшә, сәскә ат, ирекле Башҡортостан!

Музыка яңғырай.

# ЯҘ БҮЛӘГЕ

Ҡ А Т Н А Ш А Л А Р:

Ҡ о я ш
У м ы р з а я
Ҡ у я н
К ү б ә л ә к
Ҡ ы р м ы ҫ ҡ а
Ҡ ы ҙ ы ҡ а й

Аҡ ҡайынлы урман. Бәләкәй генә ҡалҡыулыҡтан күк Умырзая башын ҡалҡыта. Яҙ менән бергә килгән ҡоштарҙың тауышы ишетелә. Күңелле. Сәскәгә ҡаршы, бейектә, Ҡояш апай йылмая.

У м ы р з а я. Ниндәй рәхәт тын алыуы, ниндәй саф һауа! Тик күҙемде асырға ғына ҡурҡам, йә һыуыҡ тейеп ҡуйыр, йә ел ҡағыр.

Ҡ о я ш. Ә һин ҡурҡма, Ер биҙәге, ас күҙеңде, батыр бул! Яҙ килгән бит: тирә-яғыңа ҡара әле, күптән боҙ тамсылары йылтырай-йылтырай тамып бөттө — тып-тып, тып-тып. Яҙ һулышына шатланған турғайҙар күңелле сырҡылдашты — сырҡ-сырыҡ, сырҡ-сырыҡ!.. Ҡарҙан эшләнгән Ҡыш бабайҙар шаулап, гөрләүек булып аҡты. Фьют-фьют!.. Фьют-фьют!.. Тыуған яғын һағынып, йылы яҡтан сыйырсыҡтар ҡайтты. Улар аҙыҡ эҙләп урманға ла килеп сығалар. Бөгөн мин бында ҡышлаған тумырҡа менән сыйырсыҡтың һөйләшкәнен тыңлап торҙом.

У м ы р з а я. Нимә тураһында һөйләштеләр улар, Ҡояшҡай?.. Бик беләһем килә, ошоға тиклем мин ер аҫтында ултырҙым бит, бер нәмә лә ишетмәнем, күрмәнем дә.

К о я ш. Тумыртҡа былай тип һораны:
— Һаумы, һаумы, Сыйырсығым,
Йә, нисек кенә ҡайттың?
Алыҫтан Ҡояштың тауышы ишетелә.
Беҙгә һин яҙ килтерҙеңме,
Талманымы ҡанатың?

Ә Сыйырсыҡ ҡанатын ҡағып, тирә-яҡты яңғыратып йырлап ебәрҙе.

С ы й ы р с ы ҡ. Алыҫтарҙан тыуған яҡҡа
Талпынып осоп ҡайттым.
Һөйөклө илем булғанда,
Талмаҫ минең ҡанатым.

Бына шулай, яҙ килде, шатлыҡ килде, ас, ас күҙеңде, ҡурҡма! Һинең әлегә бер кемде лә күргәнең юҡ.

У м ы р з а я. Хәҙер... Хәҙер... (*Умырзая йайлап ҡына күҙҙәрен аса, ашыҡмай ғына тирә-яғына ҡарай. Ҡояшҡа ҡулдарын һуҙа.*) Һаумы, ҡояш! Нурҙарың һинең ниндәй йылы, ҡара, ҡара, үҫә башланым! Ел дә еләҫ кенә, Ер йөҙө бик матур икән! (*Аҡ ҡайынға күрһәтә.*) Ә был нимә?

Ҡ о я ш. Ул — аҡ ҡайын. Һәр йыл һайын йәшел япраҡтарға күмелә. Урман һылыуы булып наҙланып ултыра. Уның тураһында бик күп йырҙар йырлайҙар, һиңә лә йыр бағышларҙар, ишетерһең әле.

Ҡапыл ҡыуаҡ артынан Ҡуян килеп сыға, Умырзая ҡурҡып, сайҡалып ҡуя.

Ҡ у я н. Эй, һин ҡайҙан килеп сыҡтың, исемең нисек?

У м ы р з а я. Минме? Мин ер аҫтынан ҡалҡтым, ә ... исемемде белмәйем... Үҙең кем һүң?

Ҡ у я н. Мин йүгерек ҡуянмын,
Үлән ашап туямын.
Йәйен — һоро, ҡышын — аҡ,
Йәшенәм, йә, эҙләп тап!..
(*Һикергеләп ала.*)
Туным икәү — һоро, аҡ!..

Ҡыҙыҡ. Исемдәрен белмәгәндәр ҙә урманда бар икән. Һин нимә яратаһың?

У м ы р з а я. Ҡояш нурҙарын яратам. Улар миңә үҫергә ярҙам итә. Ә ерҙән һут алам.

Ҡ у я н. Тимәк, һиңә йылы ямғыр ҙа кәрәк. Ә мин кишер яратам. Йәш кенә үлән ҡыяҡтары ла тәмле. Мин әле үҙем дә бәләкәй, һине лә тәүгә күрәм, шуға күрә исемеңде белмәйем, ғәфү ит.

Ҡайын артынан Ҡырмыҫҡа килеп сыға, ул ҙур «бүрәнә» күтәреп алған.

Ҡ ы р м ы ҫ ҡ а. Хәҙер мин һинең исемеңде әсәйемдән һорап киләм.

Ҡ у я н. Ә һин кем? Үҙеңдән дә ҙур бүрәнә күтәреп алғанһың! Көслө икәнең күренеп тора.

Ҡ ы р м ы ҫ ҡ а. Мин бик көслө — баһадир,
Нәҙек билле, эшсән ир!..
Бер көн эшһеҙ тормайым,
Өйгә бура бурайым,
Алыҫ юлдар урайым!..

Мин дә көндәр йылыныу менән ҡырмыҫҡа иләүендә — үҙебеҙҙең өйҙә — донъяға килгәнмен. Һеҙҙе лә тәүгә күрәм.

Ҡ у я н. Ә... Ярай, таныштыҡ. Бар, һора, тик тиҙ йөрө. Моғайын, ҡайын аҫтында нимә үҫкәнен әсәйең беләлер.

Ҡ ы р м ы ҫ ҡ а. Мин хәҙер...

Ҡырмыҫҡа китә, шул саҡ матур ғына бер Күбәләк осоп килеп инә.

К ү б ә л ә к. Һаумыһығыҙ! Ҡуян, һин нимәгә аптырап тораһың?

Ҡ ы р м ы ҫ ҡ а. Эй, Күбәләк, бына баш ватып торам әле, әйт әле, был нимә ул? (*Умырзаяға күрһәтә.*)

К ү б ә л ә к (*зыңғырлатып көлөп ебәрә*). Шуны ла белмәйһеңме?.. Сәскә бит ул, Сәскә!.. Ниндәй матур Сәскә!.. Таныш булайыҡ, Сәскә! (*Сәскә тирәләй йөрөй, йырлай, ҡосаҡлап-ҡосаҡлап ала.*)

Мин сыбар йәш Күбәләк,
Беҙ үҙебеҙ бик күмәк.
Рәхәтләнеп осабыҙ,
Сәскәләрҙе ҡосабыҙ!

Матур ғына күк Сәскә, тәмле еҫтәрен сәсә! Эй генә, матурҡайым!

Ҡ у я н (*иҫе китмәй генә*). Сәскә икәнен үҙем дә беләм. Һәр сәскәнең исеме була бит! (*Ҡапыл балалар һөйләшкән тауыштар ишетелә.*) Ниндәйҙер тауыш ишетелә, йәшенәйек ҡыуаҡ артына, тиҙ бул, Күбәләк!

Ҡуян менән Күбәләк ҡыуаҡлыҡ артына йәшенә.

У м ы р з а я. Тағы ла кемдер килә. Шаулашалар. Ҡурҡам. (*Ҡулына кәрзин тотҡан ҡыҙыҡай күренә, ниндәйҙер күңелле көй көйләй.*)

Ҡ ы ҙ ы ҡ а й. Бөгөн беҙ урманға ҡайын бөрөләрен йыйырға килдек. Уларҙан дарыу үләне эшләйәсәктәр, ауырыуҙарҙы дауалаясаҡтар. (*Бер нисә ҡайын бөрөһөн кәрзиненә һала, Умырзаяны күреп ҡала.*) Умырзая! Ниндәй матур күк Умырзая үҫеп сыҡҡан бында! (*Умырзаяға эйелә.*)

Ҡ у я н (*шыбырлай*). Өҙмәһә генә ярар ине...

К ү б ә л ә к (*шыбырлай*). Эй, һәләк була инде Сәскәкәй...

Ҡ ы ҙ ы ҡ а й (*ҡул болғап ҡысҡыра*). Эй, бында килегеҙ! Умырзая үҫә бында. Тик өҙмәгеҙ! Өҙмәгеҙ Умырзаяны! (*Умырзаяны һыйпай, яғымлы өндәшә.*)

Ҡ у я н (*шыбырлай*). Ҡара әле, Күбәләк, урманға ниндәй аҡыллы ҡыҙыҡай килгән, Умырзаяны өҙмәне.

К ү б ә л ә к. Ана, был яҡҡа башҡалары ла йүгерә, улар ҙа Умырзаяны йәлләһә ярар ине...

Ҡ у я н (*бөтә балаларға өндәшә*). Балалар, һеҙ Умырзаяны өҙмәçһегеҙ бит? Мин һеҙгә ышанам. Һеҙ Ер биҙәге — яҙ бүләге күк Умырзаяны һаҡлағыҙ, яраймы!

К ү б ә л ә к. Ышанабыҙ һеҙгә, балалар, ышанабыҙ! Һаҡлағыҙ беҙҙе!

# НАҘЛЫГӨЛ

Ҡ А Т Н А Ш А Л А Р:

Н а ҙ л ы г ө л — батша ҡыҙы
Һ а н д у ғ а с
Ш и ш м ә
Р о з а с ә с к ә һ е, с ә с к ә л ә р
1 - с е ҡ ы ҙ, 2-с е ҡ ы ҙ — Наҙлыгөлдө хеҙмәтләндереүсе ҡыҙҙар

Йәйге матур көн. Йәшел баҡса. Арттараҡ Наҙлыгөлдөң семәрле, зауыҡ менән биҙәлгән йоҡо беседкаһы. Ятҡан урыны атлас түшәк-юрғанлы, ҡабарып торған мендәрле. Оло-оло вазаларҙа — сәскәләр. Әле генә йоҡоһонан торған Наҙлыгөл ап-аҡ һығылмалы ҡулдарына үҙе һоҡланып ҡарап ултыра. Янында, уны кейендерергә тип, арып бөткән ҡыҙҙар тора. Береһе ебәк күлдәк, икенсеһе ялтырап торған туфли тотҡан. Алғы планда төрлө сәскәләр араһында Роза сәскәһе үҫә. Ботаҡтарын аҫҡа эйгән ҡара тал аҫтында аҡҡан Шишмә тауышы ишетелә. Яҡында ғына һандуғас һайрай.

Н а ҙ л ы г ө л. Ҡарағыҙ әле, минең ҡулдарым ниндәй матур, ап-аҡ ҡына, үҙҙәре шундай йомшаҡ, наҙлы. Йә, әйтегеҙ, бындай ҡулдар кемдә бар?

1 - с е ҡ ы ҙ. Һиндә генә, Наҙлыгөл, һиндә генә. Кейенәйек инде...

2 - с е ҡ ы ҙ. Ундай наҙлы ҡулдар — батша ҡыҙында ғына... Кейенәйек...

Н а ҙ л ы г ө л. Йә... (*Йыбанып, ҡыҙҙар ярҙамында саҡ кейенә.*)

1 - с е ҡ ы ҙ. Сәсеңде тарайыҡ, Наҙлыгөл.

2- с е ҡ ы ҙ. Сулпылар тағайыҡ, Наҙлыгөл. Бигерәк килешә үҙеңә. Сибәрлегеңде арттыра.

Н а ҙ л ы г ө л. Әйтегеҙ, быҥдай оҙон толомдар кемдә бар?

1 - с е ҡ ы ҙ. Быҥдай оҙон, ебәк кеүек толомдар батша ҡыҙында ғына. Табындағы алма-хөрмәләр һине көтә, Наҙлыгөл. Ашап ал.

2 - с е ҡ ы ҙ. Эйе, эйе, һиндә генә, Наҙлыгөл. Шәрбәт һыуҙары гәлсәр һауыттарға күптән ҡойолған. Эсеп ал, Наҙлыгөл.

Н а ҙ л ы г ө л (*теләр-теләмәҫ кенә битен йыуа ла үҙен күптән көткән өҫтәл янына барып ултыра.*) Ашағым килмәй...

1 - с е ҡ ы ҙ. Бына, виноград тәлгәше, Наҙлыгөл, тәмләп кенә ҡара, бик бешкән, йомшаҡ ҡына.

2 - с е ҡ ы ҙ. Ҡара әле бынау алманы, ҡыҙарып, балҡып ҡына һиңә ҡарап тора. Бер генә тешлә, Наҙлыгөл.

Н а ҙ л ы г ө л. Һут эсәм!

Ҡ ы ҙ ҙ а р. Мә, мә, Наҙлыгөл. (*Икеһе бер юлы һут һуҙа.*) Эсеп ебәр. Хәҙер баҡсаға ял итергә сығабыҙ. (*Ҡыҙҙар уға алмашлап һут эсерә.*)

Н а ҙ л ы г ө л. Етте! Баҡсаға сығайыҡ! (*Наҙлыгөл артынан елпеүес тотоп, ҡыҙҙар ҙа сыға.*)

1 - с е ҡ ы ҙ. Наҙлыгөл, ҡара әле, Роза сәскә атҡан!

2 - с е ҡ ы ҙ. Баҡса күркәмләнеп киткән! Бына мөғжизә!

Н а з л ы г ө л (*башын юғары тотоп, иренен турһайта*). Минең янып торған сикәм Роза сәскәһенән матурыраҡ! Бына, ҡарағыҙ! (*Ҡыҙҙар аптырай, ләкин һүҙ ҡатмай.*) Ниңә яуап бирмәйһегеҙ, телһеҙ ҡалдығыҙмы әллә?

1 - с е ҡ ы ҙ. Сәскә — сәскә инде.

2 - с е ҡ ы ҙ. Роза ла, һин дә матур, Наҙлыгөл...

Н а ҙ л ы г ө л (*башын әле бер яҡҡа, әле икенсе яҡҡа бора*). Апаҡ ҡына битемдә алһыу сикәм нур бөркә!.. Шуға ла баҡса күркәм!..

Р о з а с ә с к ә һ е. Эй, Наҙлыгөл, Наҙлыгөл!.. Һин бик сибәр ҡыҙһың, ләкин... (*Сәскәләр башын сайҡай.*)

Н а ҙ л ы г ө л. Кит! (*Ҡулдарын һелтәй.*) Өндәшмә бер нәмә лә!

Р о з а г ө л ө. Эй, Наҙлыгөл, Наҙлыгөл!

Н а ҙ л ы г ө л. Һинең менән һөйләшкем килмәй! Минең матурлығымдан көнләшәһең һин. Үәт!..

Р о з а с ә с к ә һ е. Эй, Наҙлыгөл, Наҙлыгөл!

Н а ҙ л ы г ө л. Һандуғас янына барам, әйҙә, һылыулығымды маҡтап, йырҙар сығарһын, донъяға таратһын.

Р о з а с ә с к ә һ е. Һандуғас маҡтансыҡтарҙы яратмай.

Н а ҙ л ы г ө л (*Роза сәскәһенә телен сығарып күрһәтә*). Эйе шул, һине яратмай ул, үәт! Аңланыңмы?.. (*Башын юғары күтәреп, эре генә китеп бара, һандуғас янына килә*.) Эй, һандуғас, ә, һандуғас, ниңә һин көнө буйы бер төрлө йыр йырлайһың? Ә бына батша ҡыҙының (*күкрәгенә төртөп күрһәтә*), минең матурлығым тураһында йырларға оноттоң. Ишетәһеңме минең нимә әйткәнде?

Наҙлыгөл асыуын белдереп аяҡтарын тыпырлата.

Һ а н д у ғ а с. Донъя матурлығына ғашиҡмын мин, Наҙлыгөл! Бер генә түгел, мең төрлө йыр бар минең йөрәгемдә. Моңға күмеләм!

Н а ҙ л ы г ө л. Ә мин үҙем тураһында ишеткәнем юҡ!.. Йә, миңә бағышланған йырыңды йырла әле! Минең генә матурлығымды данла! Бынау торған ҡыҙҙар ҙа ишетһен! Юғиһә, үҙем иҫкәртеп тормаһам, Наҙлыгөл — сибәр ҡыҙ, тип әйтергә ялҡауҙары килә.

Һ а н д у ғ а с. Күңел күтәрелгәндә генә илһам килә, Наҙлыгөл! Йылы һүҙ ишеткәндә генә күңел тула, Наҙлыгөл! Ғашиҡ булһаң ғына.

Н а ҙ л ы г ө л (*буй-һынын уйната, ҡулдарын һығылдыра*). Ә һин миңә ғашиҡ түгелһеңме һуң? Һуҡырһыңмы әллә, минең иҫ китмәле сибәр икәнемде күрмәйһеңме әллә? Әйт әле! Тиҙерәк!

Һ а н д у ғ а с. Һин матур ҙа ул, Наҙлыгөл, тик...

Н а ҙ л ы г ө л (*аяҡ тибеп ҡысҡыра*). Етте! Башымды ҡатырып сырҡылдама! Кит минең баҡсамдан, теләһәң, ете диңгеҙ аръяғына осоп кит, һине эҙләп бераү ҙә йөрөмәҫ! Шыҡырлаҡ һайыҫҡан һин!

Һ а н д у ғ а с. Эй, Наҙлыгөл, Наҙлыгөл! Үпкәләттең һин мине...

Н а ҙ л ы г ө л. Үпкәләй бир, әйҙә, үпкәлә! Тутыйғошом һинән мең тапҡыр яҡшы! Ул минең генә һүҙемде ҡабатлай, көнө буйы: «Наҙлыгөл — сибәр ҡыҙ! Наҙлыгөл — матур ҡыҙ! Наҙлыгөл — һылыу ҡыҙ!» — тип кенә тора. Ишеттеңме? Ә һинең ул һүҙҙәрҙе әйтергә телең әйләнмәй! Йырсы ҡош, имеш! (*Ҡулъяулығын сығарып һелтәй, һандуғас үпкәләп осоп китә, баҡса эсендәге яҡтылыҡ кәмегәндәй була*.) Баҡсала һинән башҡа ҡош бөткәнме?.. Үҙем бейермен, үҙем йырлармын, минең тауышым һинекенән дә шәп, үәт! Ҡыҙҙар, минең ял иткем килә, бынау сырҡылдаҡ менән һүҙ көрәштереп, арып киттем! (*Йомшаҡ ултырғысҡа барып ултыра*.) Серем иткем дә килә.

Р о з а  с ә с к ә һ е. Япраҡтарым һулый башланы. Һәләк булабыҙ... Ҡояшҡай, ниңә беҙҙе ташлап киттең?

Б ө т ә һ е  б е р г ә. Ҡояшҡай, ташлама беҙҙе!

Н а ҙ л ы г ө л. Ҡайһылай инәләләр. (*Кире йоҡо урынына барып ултыра, өшөүҙән ҡалтырай башлай.*) Юрғанымды өҫтөмә ябығыҙ.

1 - с е  ҡ ы ҙ. Наҙлыгөл!.. (*Ҡурҡып ҡына.*) Алһыуланып торған сикәң күгәрә башлаған.

2 - с е  ҡ ы ҙ. Сәсең йоҡарған.

Н а ҙ л ы г ө л. Көҙгөмдө алып килегеҙ! (*Көҙгөгә ҡарай, бер нәмә лә күрмәй.*) Ҡараңғы... Бер нәмә лә күрмәйем.

1 - с е  ҡ ы ҙ. Ҡояш апай юҡ бит.

2 - с е  ҡ ы ҙ. Ҡояш апай, килсе. (*Илай.*)

1 - с е  ҡ ы ҙ. Наҙлыгөл! Ҡояш апайҙан ғәфү үтен.

Н а ҙ л ы г ө л. Юҡ! Мин бит батша ҡыҙы!

2 - с е  ҡ ы ҙ. Наҙлыгөл! Беҙ бөтәбеҙ ҙә һәләк буласаҡбыҙ.

Н а ҙ л ы г ө л. Шәм яндырығыҙ!

Ҡ ы ҙ ҙ а р. Беҙ бик өшөнөк. Беҙ бер нәмә лә эшләй алмайбыҙ. Беҙ киттек... (*Наҙлыгөлдөң сәбәләнеүенә ҡарамай сығып китәләр.*)

Н а ҙ л ы г ө л. Ташлап киттеләр. Барыһы ла мине ташланы. Ни өсөн? Әйтегеҙ, кем белә? Ниңә мине ташланылар? (*Илай башлай, әкрен генә Һандуғас йыры ишетелә, көн асылғандай була.*) Һандуғас! Һандуғас, яныма кил... Ташлама мине. Ташлама...

Һ а н д у ғ а с (*инә, аптырай*). Наҙлыгөл, ниңә һин бер үҙең?

Н а ҙ л ы г ө л. Мин үҙем генә. Үҙем генә ғәйепле был хәлгә. Матурмын тип маҡтандым. Үҙемде... бөтәһенән дә... Хатта, Ҡояштан да өҫтөн ҡуйҙым. (*Илай.*) Һандуғас, Ҡояш апай мине ғәфү итерме икән?

Һ а н д у ғ а с. Ҡояш апай бөтәбеҙҙе лә тигеҙ ярата. Бөтә матурлыҡ Ҡояштан килә, Наҙлыгөл, аңланыңмы?

Н а ҙ л ы г ө л. Аңланым... Һандуғас, миңә матурлығым ҡайтырмы икән? (*Ҡулдарына ҡарай.*) Йәмһеҙләндем. Ҡарсыҡҡа әйләндем.

Һ а н д у ғ а с. Ҡояш апай ғәфү итә белә. Әгәр ысын күңелдән ғәфү үтенә белһәң. Үҙен яратып, ягымлы тауыш менән.

Н а ҙ л ы г ө л. Мин һеҙҙең барығыҙҙан да ғәфү үтенер инем. (*Башын аҫҡа эйә.*) Иң беренсе Ҡояш апайҙан.

Һ а н д у ғ а с. Аңлағасың, тиҙерәк ғәфү үтен һуң.

Н а ҙ л ы г ө л (*Ҡояшҡа ҡулдарын һуҙа.*) Ҡояш апай, ғәфү ит һин мине? Һинһеҙ Ерҙә йәшәү юҡ икән. Бөгөн генә, бөтә матурлыҡтың һинән, Ҡояштан булыуын аңланым. Мең-мең рәхмәт һиңә, Ҡояш апай! Килсе йәшел баҡсама.

Ҡояш нуры баҡса эсенә тула. Өҙҙөрөп һандуғас һайрай башлай, сәскәләр күтәрелә, Роза сәскәһе өҙләкһеҙ йылмая, шишмә сылтырай, шатланып, ҡыҙҙар ҡайта. Бөтәһе бергә рәхмәт әйтеп, Ҡояшҡа баш эйәләр.

# БАЛ ҠОРТО НӘҘЕКӘЙБИЛ

ҠАТНАШАЛАР:

Себен
Нәҙекәйбил — бал ҡорто
Сәскәләр
Ал сәскә

Матур аҡлан уртаһы. Сәскәләр менән биҙәлгән аҡланға йүгереп Нәҙекәйбил килеп инә. Ҡулында матур ғына силәк. Ул дәртләнеп бал йыя.

Ал сәскә (*йырлай*).

Сәскәнән сәскәгә ҡунып,
Бал йыя
Бал ҡорто.
Эшсән булған өсөн тулған
Бал менән
Бар йорто.

Нәҙекәйбил (*йырлай, бейей, сәскәләрҙең баштарынан һыйпай, үбә, уларҙы йоҡоһонан уята*).

Таң ата, таң ата,
Таңды ҡояш уята.
Сәскәләрҙә йылмайып,
Ысыҡ тамсыһы ята.

Сәскәләрем-матурҙарым,
Асығыҙ күҙегеҙҙе.
Көмөш нурҙар иркәләһен
Наҙланып үҙегеҙҙе.

Сәскәләр яйлап ҡына урынынан тора, Нәҙекәйбилде уратып, бейей башлайҙар. Барған һайын хәрәкәттәре етеҙләнә.

Сәскәләр.

Нәҙекәйбил, Нәҙекәйбил
Беҙгә ҡунаҡҡа килгән.
Зәңгәр силәген элгән дә
Алһыу күлдәген кейгән.

Нәҙекәйбил, Нәҙекәйбил,
Беҙ һине яратабыҙ.
Тирбәлеп, килер юлыңа
Хуш еҫтәр таратабыҙ.

Нәҙекәйбил әле бер сәскә, әле икенсеһе янына бара. Һаман бал йыя, сәскәләргә ҡушылып, бейеп тә китә.

Нәҙекәйбил.
Быныһы аҡ, был күк сәскә,
Быныһы — умырзая.
Силәгем дә тулып килә,
Шәрбәт һут йыя-йыя.

Рәхмәт һеҙгә, матурҡайҙарым!.. Әсәйем янына ҡайтайым инде, саҡ ҡына оҙағыраҡ йөрөһәм, борсола башлай.

Нәҙекәйбил сәскәләр араһынан сығып та өлгөрмәй, ҡайҙандыр килеп сыҡҡан Себен уға ташлана, бал силәген тарта башлай, сәскәләр шаулай.

Себен.
Күптән эҙләй инем һине,
Тотолдоң — яҡшы булды.
Асыуланмаҫ элек йәһәт
Бир миңә тигән балды.

Нәҙекәйбил унан ысҡына, тиҙ генә үҙен уратып алған сәскәләр араһына инеп китә. Сәбен уны баҫтыра, ләкин тота алмай.

Сәскәләр.
Ҡурҡма, ҡурҡма, Нәҙекәйбил,
Шәп оса алмай Себен.
Һинең кеүек етеҙкәйҙе
Кем тота ала, тиһең!

Себен.
Уф, арыным, тирләнем,
Һис тә бал ашап булмай.
Нәҙекәйбилегеҙ һаран,
Бал силәген ташламай.

Нәҙекәйбил.
Һин үҙең ялҡауланма,
Минең кеүек шәрбәт йый.
Хеҙмәт итһәң тырышып,
Өҫтәлеңдә булыр һый.
Сәскәләр ҙә үҙеңде

Шатланып ҡаршы алыр.
Һиңә бирһәм балымды,
Ҡышҡыға нимә ҡалыр?

С ә с к ә л ә р. Нәҙекәйбил — уңған ҡыҙ,
Себен, унан үрнәк ал.
Әҙерҙе көтөп торма,
Үҙең күнәгеңде ал.

Себен, башын эйеп, сығып китә.

Н ә ҙ е к ә й б и л. Һин дә силәгеңде ал,
Йәй ҡыҫҡа — бал йыйып ҡал. (*Сәскәләргә.*)
Рәхмәт һеҙгә, сәскәләр,
Ҡотҡарҙығыҙ бәләнән.
Әсәйемә ҡайтайым —
Силәк тулы бал менән. (*Хушлашып, китә башлай.*)

С ә с к ә л ә р. Нәҙекәйбил, Нәҙекәйбил,
Иртәгә тағы ла кил!
Иртәгә тағы ла кил!..

# ХУШЛАШЫУ

Ҡ А Т Н А Ш А Л А Р:

С ы й ы р с ы ҡ — әсә
Ҡ о ш с о ҡ — сыйырсыҡ балаһы
К ү г ә р с е н
Э т ә с
Ҡ а й ы н
С ә с к ә л ә р

Баҡса. Ялбыр ҡайын ботағында сыйырсыҡ ояһы. Түтәлдә — сәскәләр. Артҡы планда ҡойма буйы, ҡапҡа ҡыйығы күренә. Сыйырсыҡ ҡошсоғо менән әле генә урмандан ҡайтып төшкән. Ҡошсоҡ аптырап түтәлгә ҡарай.

Ҡ о ш с о ҡ. Сәскәләр, һеҙгә нимә булды? Беҙ урманға киткәндә матур булып үҫеп ҡалғайнығыҙ. Бөгөн ниңә башығыҙ аҫҡа эйелгән?

С ә с к ә л ә р (*моңһоу*).

Йәй буйы ҡояш йылмайҙы,
Нурға тулып таң атты.
Йылы ямғыр яуып үтте,
Балҡып йәйғоро ҡалҡты.

Ә бөгөн ниңәлер һалҡын,
Өшөй нәҙек билебеҙ.
Күҙебеҙҙе йоҡо баҫа,
Нимә булды — белмәйбеҙ.

Ҡ о ш с о ҡ. Мин дә белмәйем шул. (*Ҡайынға.*) Ә һиңә нимә булды, ҡайынҡайым? Яҙ көнө йәм-йәшел булып, суҡтарың менән беҙҙең ояны иркәләй торғайның. Ә бөгөн япраҡтарың һарғайған, саҡ ҡына иҫкән елгә лә өҙөлөп, осоп төшөргә тора.

Ҡ а й ы н.

Йәм-йәшел япраҡтарымды
Көҙ алтынға буяны.

Һарғайып ултырыуымды
Матур тиеп уйланы.

Йәй артынан яйлап ҡына
Көҙ айы килә шулай.
Япраҡтарын ҡоя-ҡоя,
Елгә урман да шаулай.
Көҙ килә, ҡошсоҡ, шулай...

Аңланыңмы?

Ҡ о ш с о ҡ. Аңланым, көҙ шулай була икән... (*Ҡошсоҡ янына әсәhе килеп ултыра, күрhөнә.*)

С ы й ы р с ы ҡ. Ҡайын дөрөҫ әйтә, ҡошсоғом, беҙҙе йылы яҡҡа ҡыуа торған көҙ килде, әҙерлән, бөгөн осабыҙ.

Ҡ о ш с о ҡ. Бөгөн осабыҙ?! Әсәй, ысынмы? (*Шатлана, hикергеләй.*)

С ы й ы р с ы ҡ. Эйе, осорға ваҡыт етте.

Ҡ о ш с о ҡ (*хисләнә*).

Беҙ осабыҙ йылы яҡҡа,
Мәңге йәшел урманға.
Ҡып-ҡыҙыл еләктәр менән
Емеш бешкән урынға.
Ҡылансыҡ hоро маймылдар
Көлә ағас башында.
Тау йылғалары hикереп,
Уйнай ҡая ташында.

Эйеме, әсәй? Йылы яҡ тураhында hин миңә шулай тигән инең.

С ы й ы р с ы ҡ. Эйе, эйе, ҡошсоғом.
Зәңгәр күге шундай бейек,
Хазина — тутыйғошо.
Күбәләктәре иҫ киткес,
Мең төрлө башҡа ҡошо.

Ҡ о ш с о ҡ. Әсәй, йылы яҡ алыҫмы? Иртәгә барып етеп буламы?

С ы й ы р с ы ҡ. Иртәгә генә барып етә алмабыҙ, ҡошсоғом. Йылы яҡ бик алыҫ. Һинең әле ҡанаттарың да нығынмаған. Арырhың, туҡтаған hайын ашарға hорарhың.

Ҡ о ш с о ҡ. Бына күрерhең, әсәй, мин ашарға кис еткәнсе hорамам, тик йылы яҡҡа тиҙерәк китәйек инде.

С ы й ы р с ы ҡ. Эй, балаҡайым... Ярай, мин юлға әҙерләнә торайым... Ә hин дуҫтарың менән хушлаш. (*Китә.*)

Ҡ о ш с о ҡ (*күңелле итеп hыҙғырып ебәрә*). Фью-фьют!.. Фью-фьют!..

Уның янына Күгәрсен килеп ултыра.

К ү г ә р с е н. Гөлдөр-гөлдөр! Һаумы, дуҫҡайым, ниңә шул тиклем шатланаhың?

Ҡ о ш с о ҡ. Нисек шатланмаҫҡа? Беҙ бит йылы яҡҡа осабыҙ!

К ү г ә р с е н. Әйеме?

Ҡ о ш с о ҡ. Әйе, ә һинең йылы яҡ тураһында ишеткәнең бармы?

К ү г ә р с е н. Әсәйемдең ул турала һөйләгәне юҡ шул.

Ҡ о ш с о ҡ. Ә мин беләм. Һәр ваҡыт йылы булғаны өсөн йылы яҡ, тиҙәр. Ҡайҙа барма — йәшеллек, ҡайҙа ҡарама — ҡыҙыл еләктәр бешә, ти. Нимә ашарға теләйһең — һайлап ал ғына.

К ү г ә р с е н. Бик бәхетле һин, дуҫҡайым,
Сит ерҙәрҙе күрәһең.
Мин генә йәшәрмен инде
Баҡсабыҙҙа, күрәһең.
Осор инек бергә-бергә,
Ебәрмәҫ шул әсәйем.
Һинһеҙ күңелһеҙ буласаҡ —
Әйтһәңсе, ни эшләйем?..

Эх, минең дә йылы яҡты күргем килә! Тик күгәрсендәр йылы яҡҡа осмайҙар шул, бында ҡалалар.

Ҡ о ш с о ҡ. Бергә булһаҡ, бик күңелле булыр ине, үҙең әйткәнсә, әсәйең ебәрмәҫ шул. Хуш бул, дуҫҡайым.

К ү г ә р с е н. Һау бул, онотма!

Ҡ о ш с о ҡ. Онотмам. Минең өсөн ҡайғырма, дуҫым. (*Ергә осоп төшә.*) Әтәс менән дә хушлашырға кәрәк. Бәләкәй саҡта кем мине йоҡонан уятты? Әтәс. (*Ҡойма буйында ем суплап йөрөгән Әтәс янына килә.*) Хәйерле иртә, Әтәс!

Ә т ә с. Хәйерле иртә, ҡошсоҡ. Урмандан ҡайттығыҙмы? Бик шат күренәһең, хәлеңде һөйләп ебәр!

Ҡ о ш с о ҡ. Беләһегеҙме, мин бөгөн әсәйем менән йылы яҡҡа осам.

Ә т ә с. Шулаймы ни? Осабыҙ, тиһең инде... Ҡанатлы ҡоштар көҙ етеү менән йылы яҡҡа осалар шул.

Ҡ о ш с о ҡ. Һеҙҙең дә ҡанатығыҙ бар бит, ә ниңә йылы яҡҡа осмайһығыҙ, бында ҡалаһығыҙ?

Ә т ә с. Беҙме?

Күгәрсен, һайыҫҡан, турғай
Бында ҡала ҡышларға.
Уларҙан да сәләм тапшыр
Алыҫтағы ҡоштарға.
Ә йорт ҡошо тип атайҙар
Тауыҡ, өйрәк, күркәне.

Уларҙың һис булмағандыр
Йылы яҡты күргәне.
Буранына, һыуығына
Беҙ түҙеп өйрәнгәнбеҙ.
Тыуған илде ташламайбыҙ —
Бында беҙҙең өйөбөҙ.

Ҡ о ш с о ҡ. Ә бына йылы яҡта бер ваҡытта ла һыуыҡ булмай, — әсәйем шулай ти.

Ә т ә с. Үҙем күрмәгәс, уныһын әйтә алмайым, ә һин хушлашырға килдеңме, ҡошсоҡ?

Ҡ о ш с о ҡ. Эйе, хушлашырға килдем. Һау булығыҙ!

Ә т ә с. Хуш, ҡошсоҡ... Хәйерле юл һиңә!

Ҡ о ш с о ҡ (*сәскәләр янына килә, улар менән дә хушлаша*). Һау булығыҙ, сәскәләр!..

Сыйырсыҡ осоп төшә.

С ы й ы р с ы ҡ. Яҙға тиклем ҡар аҫтында тыныс йоҡлағыҙ.

С ә с к ә л ә р. Һау булығыҙ! Һау булығыҙ!

С ы й ы р с ы ҡ. Әйҙә, балаҡайым, йыйын. (*Ҡайын ботағына осоп менәләр.*) Ауыл ситендәге ҡайынлыҡта беҙҙе башҡа сыйырсыҡтар көтә.

Ҡ о ш с о ҡ. Улар бөтәһе лә йылы яҡҡа осамы?

С ы й ы р с ы ҡ. Эйе, бөтәһе лә... Һыуыҡ ҡыш килә.

Ҡ о ш с о ҡ. Нимә ул ҡыш, әсәй?

С ы й ы р с ы ҡ.

Ҡышты матур тиҙәр, балам,
Күктән йондоҙҙар яуа.
Иҫең китер күплегенә,
Һәр ҡайһыһы ут яна.
Ҡыш бабай баҫыу, урманға
Ап-аҡ тунын яба, ти.
Ҡурҡып һалҡын бурандарҙан
Айыу өңгә ҡайта, ти.
Ергә түшәлә үләндәр,
Выжылдап ел һыҙғыра.
Матур булһа ла һалҡын ҡыш,
Һәр кем яҙҙы һағына...

Бына шулай, бәләкәсем... Тәңкә ҡарҙар иҫ киткес матур булһалар ҙа, һалҡын, беҙ һыуыҡҡа түҙә алмайбыҙ, һәләк булабыҙ...

Ҡ о ш с о ҡ. Борсолма, әсәкәйем, беҙ былай ҙа бында ҡалмайбыҙ бит. Ә йылы яҡта йылы, бик күңелле! Эйе бит!

С ы й ы р с ы ҡ. Эйе, унда күңелле... (*Әсәләре оялары янына барып ултыра.*) Кил әле бында, балаҡайым. Яныма ултыр. Хуш...

Ҡ о ш с о ҡ (*әсәһе янына килә, аптырай*). Әсәй, кем менән хушлаштың?

С ы й ы р с ы ҡ. Оябыҙ менән, бәләкәсем!

Ҡ о ш с о ҡ. Ниңә, әсәй? Ул бит оя ғына...

С ы й ы р с ы ҡ.

Ошо өйҙә, балаҡайым,
Яҙ көнө тыуған инең.
Ҡанатыңды саҡ күтәреп,
Тәпәйҙә торған инең.
Сырҡ-сырҡ килеп, иркәләнеп,
Мамыҡ түшәктә үҫтең.

Иптәш кеүек булды ояң,
Ҡалған саҡта бер үҙең.
Ямғырҙан, әсе елдәрҙән
Ояң һине һаҡланы.
Тәүге йырыңды ишеткәс,
Минең кеүек һоҡланды.

К о ш с о ҡ. Мин дә оябыҙ менән хушлашам. Хуш! Хуш, оябыҙ! Әсәй!

С ы й ы р с ы ҡ. Әү, балам...

Ҡ о ш с о ҡ. Әсәй, йылы яҡта беҙҙеке кеүек оялар бармы?

С ы й ы р с ы ҡ. Һинең тыуған ояң ошо, донъяла берәү генә ул. (*Әсәһе ҡайын тирәләп осоп йөрөй.*) Хуш, ҡайынҡайым! Көт беҙҙе...

Ҡ а й ы н. Хәйерле юл, хәйерле юл һеҙгә! Киләһе яҙ менән бергә тиҙерәк әйләнеп ҡайтығыҙ, көтәм һеҙҙе!

Ҡ о ш с о ҡ (*моңһоулана*). Ана, Әтәс... Ана, Күгәрсен... Сәскәләр... Әсәй, беҙ йылы яҡтан тиҙ ҡайтырбыҙмы?

С ы й ы р с ы ҡ (*йылмая*). Әле генә һинең тиҙерәк йылы яҡҡа киткең килә ине бит.

Ҡ о ш с о ҡ. Киткем килә ине лә...

С ы й ы р с ы ҡ. Шулай булғас...

Ҡ о ш с о ҡ. Дуҫтарымдан, аҡ ҡайындан, оябыҙҙан ниңәлер айырылғым килмәй, һағынырмын инде уларҙы, әсәй.

С ы й ы р с ы ҡ. Эй бәләкәсем, матурым минең, аҡыллым минең. Тыуған илде барыһы ла һағына.

Ҡ о ш с о ҡ. Нимә ул тыуған ил, әсәй?

С ы й ы р с ы ҡ.

Алыҫ урмандар үтербеҙ,
Төрлө ерҙәр гиҙербеҙ.
Береһенә лә оҡшамаҫ
Беҙҙең тыуған илебеҙ.
Беҙҙә генә аҡ ҡайындар
Шундай һомғол, бөҙ(ө)рә.
Шишмәләре тау битенән
Сылтыр-сылтыр йүгерә.
Ә күгебеҙ зәңгәрлеге
Булмаҫ башҡа ерҙәрҙә.

Тыуған әсәләй саҡыра
Төштәрҙә лә үҙенә.
Сәскәләр тирбәлеп бәүелер,
Хуш еҫле болондары.
Күкһел тауҙарҙа ял итер
Иҫ киткес боландары.
Тыуған ерҙең саф һауаһы
Көс бирер ҡанатыңа.
Күгәрсен һағынып гөрләр:
«Дуҫҡайым, тиҙ ҡайт ҡына!..»

Былар бөтәһе лә һинең Тыуған илең, бәләкәсем. Уны бер нәмәгә лә алмаштырып булмай. Яҙ етеү менән беҙ ошо ергә кире әйләнеп ҡайтырбыҙ. Аҡ ҡайынды тирбәтеп, Тыуған ил хаҡындағы мин өйрәткән йырҙарҙы йырларһың. Хуш бул, Тыуған илем!

Ҡ о ш с о ҡ (*тулҡынлана*). Хуш бул, Тыуған ерем!

Осоп китәләр. Алыҫтан ҡошсоҡтоң тағы тауышы ишетелә: «Һау бул, Тыуған илем, көт беҙҙе!..»

# БӨҘРӘКӘЙ

ҠАТНАШАЛАР:

Кәзә
Бөҙрәкәй — кесе кәзә бәрәсе
Һырлымөгөҙ — уртансыһы
Етеҙтояҡ — өлкәне
Оҙонғолаҡ — ҡуян
Оҙонғойроҡ — тейен
Терпеш — терпе
Бүребай — бүре
Һайыҫҡан апай

## БЕРЕНСЕ КҮРЕНЕШ

Кәзә өйөнөң ишек алды. Түтәлдәрҙә сәскәләр үҫә, аяҡ аҫтында йомшаҡ үлән. Шаршау асылғанда Бөҙрәкәй йүгереп килеп инә. Уның артынан Һайыҫҡан апай күренә. Ул асыулы. Бәрәс ҙур мискә артына йәшеренә.

Һайыҫҡан. Ах, мин һине! Тағы үҙеңдең көсөңдө күрһәтәһеңме? Әсәйеңә генә әйтеп, кәрәгендә бирҙертәйем әле!

Кәзә (*тауышҡа килеп сыға*). Һаумы, күрше? Нимә булды?

Һайыҫҡан апай. Һаумы, һаумы, күршекәйем. Ошоға тиклем шымып йөрөһәм дә, был юлы әйтәйем инде. Өсөнсө тапҡыр шаян Бөҙрәкәйең оям торған ағасты төкөй. Бәләкәстәрем ҡурҡа, сырылдаша. Ниңә улай эшләйһең, тип һораһаң: «Күрҙеңме, һайыҫҡан апай, мин ниндәй көслө, ел кеүек ағастарҙы һелкетәм!» — тип ҡысҡыра. Ә бөгөн хатта маҡтанып та алды, асыуландырһағыҙ, тирәгегеҙҙе тамыры-ние менән йолҡоп сығарам, ти. Йә, шулай ҡыланырға яраймы инде, көслө булһаң — көстө файҙалы эшкә егергә кәрәк.

К ә з ә (*асыулы*). Бөҙрәкәй, һин ҡайҙа? (*Бөҙрәкәй башын күрһәтә лә кире боҫа, әсәһе уны күреп ҡала.*) Йәшенмә мискә артына, кил әле бында! (*Бөҙрәкәй башын эйгән килеш әкрен генә килеп сыға.*) Һин тағы ла көсөңдө күрһәтә башланыңмы? Әй, тыңламайһың да инде, балаҡайым, ул ҡошсоҡтарҙың һиңә ниндәй зыяны тейҙе? Йә, яуап бир әле!

Б ө ҙ р ә к ә й (*әкрен генә*). Әсәй, мин уларға теймәнем... Тик тирәктәрен генә... төкөп ҡарағайным... Ҡошсоҡтар ҡолап төшмәне, әсәй.

К ә з ә. Ҡолап төшһәләр, һиңә ҡыҙыҡ булыр инеме?

Б ө ҙ р ә к ә й. Юҡ...

К ә з ә. Әгәр имгәнеп ҡуйһалар?

Б ө ҙ р ә к ә й. Әсәй, мин башҡаса улай ҡыланмам, ғәфү ит.

К ә з ә. Ә һин, ана, Һайыҫҡан апайыңдан ғәфү үтен!

Б ө ҙ р ә к ә й. Ғәфү итегеҙ мине, Һайыҫҡан апай, башҡа тирәгегеҙгә теймәм, асыуланмағыҙ инде...

Һ а й ы ҫ ҡ а н  а п а й. Асыуланмайым инде хәҙер, тик һүҙеңдә тораһы бул. (*Һайыҫҡан китә, Бөҙрәкәй шатлана.*)

Б ө ҙ р ә к ә й. Әсәй, ул мине ғәфү итте, ишетәһеңме?

К ә з ә. Ишетеүен ишеттем дә ул, тик күршеләр һинең насар ҡыланышыңдан аптырап йөрөмәһендәр, яраймы? Аңланыңмы?

Б ө ҙ р ә к ә й. Аңланым, әсәй.

К ә з ә. Бына шулай.

Б ө ҙ р ә к ә й. Әсәй, шулай ҙа мин көслө, эйе бит? Ҡара әле, аяҡ аҫтындағы сыбыҡтар нисек шартлап һынып тора! (*Аяҡ аҫтындағы сыбыҡтарҙы һындыра.*) Күрҙеңме, әсәй?

К ә з ә (*көлә*). Эй көслөһөң дә инде!

Б ө ҙ р ә к ә й. Әсәй, әллә ышанмайһыңмы? Хәҙер күрһәтәм, бына, ҡара! (*Йүгереп барып, баҡса рәшәткәһендә эленеп торған ҙур кәрзинде эләктереп ала ла өҫкә бер нисә тапҡыр күтәреп төшөрә.*) Ағайымдарҙың көстәре етмәй, етмәй бит, әсәй?

К ә з ә (*көлә*). Улар һиңә ҡарағанда ҙурыраҡ, етмәһә, икәүҙәр, көстәре лә юҡ түгелдер, барҙыр...

Б ө ҙ р ә к ә й. Барыбер мин көслө. Әсәй, ҡана, үҙеңде күтәреп ҡарайым. (*Әсәһенә килеп һыйына, Кәзә уның бөҙрә сәстәренән һыйпай.*)

К ә з ә. Эй, улым, улым, бәләкәйһең шул әле, күп нәмәне аңлап еткермәйһең. Һин бер үҙең һис кенә көслө түгелһең, бына, ағайҙарың, дуҫтарың менән бергә бик көслөһөң, аңланыңмы?

Б ө ҙ р ә к ә й. Бергә булғандамы?

К ә з ә. Эйе... Ҡайҙа һуң әле ағайҙарың? Бар әле, тиҙ генә табып алып ҡайт, урманға япраҡҡа барабыҙ.

Б ө ҙ р ә к ә й. Ысынмы, әсәй?

К ә з ә. Эйе, мин ул турала кисә үк әйткәйнем түгелме һуң, уйынға әүрәп, онотоп та ҡуйҙыңмы?

Б ө ҙ р ә к ә й. Ә-ә, хәтерләнем, әсәй. Мин хәҙер! Улар йылға буйында уйнап ҡалдылар. Хәҙер, әсәй!.. (*Сығып барышлай.*) Әсәй, минең тояҡтарым көслө, тиҙ йүгерәм, хәҙер алып килермен үҙҙәрен!

К ә з ә. Эй балаҡайым, балаҡайым, бәләкәйһең шул әле, бәләкәйһең... Ҡышҡылыҡҡа япраҡ киптерергә лә ваҡыт етте. Йәйҙең бер айы бөтә йылды туйҙыра. (*Шаулашҡан тауыш ишетелә.*) Ана, ҡайтып киләләр!.. Тояҡтары, ысынлап та, етеҙ шул Бөҙрәкәйемдең. (*Шаярып балалары килеп инә.*)

Б ө ҙ р ә к ә й. Әсәй, беҙ килдек! Күрҙеңме, мин иң алдан йүгерҙем. Был минең көслө булғанымды күрһәтә, эйе бит, әсәй?

К ә з ә (*шаяртып*). Көслөһөң, көслөһөң, балаҡайым.

Е т е ҙ т о я ҡ. Ну, маҡтансыҡ! Мин көслөмөн, тип күпме һөйләргә мөмкин? Оят түгелме үҙеңә?

Һ ы р л ы м ө г ө ҙ. Көстө, ҡустым, эштә күрһәтәләр. Бөгөн мин сәскәләрҙе ҡойондорҙом, түтәлдәрҙе матурланым, ә Етеҙтояҡ йүгереп шишмәнән һыу ташыны, ә һин шул ваҡытта нимә эшләнең?

Б ө ҙ р ә к ә й. Минме? (*Әсәһенә ҡарай.*) Мине...

К ә з ә. Ҡаршылағы тауҙан таш тәгәрәттем.

Һ ы р л ы м ө г ө ҙ. Их, һин!.. Гел айырылырға, көсөңдө күрһәтеп, бер үҙең генә йөрөргә яратаһың, улай ярамай.

К ә з ә. Бергә, һәр ваҡыт бергә йөрөгөҙ, балаҡайҙарым. Айырылғанды айыу ашар, бүленгәнде бүре быуыр, тиҙәр. Юҡҡа ғына әйтмәгәндәр был мәҡәлде, аңланығыҙмы?..

Б а л а л а р ы (*бергә*). Аңланыҡ, әсәй, аңланыҡ!

К ә з ә. Аңлаһағыҙ, кәрзиндәрегеҙҙе күтәрегеҙ ҙә — урманға!

Б ө ҙ р ә к ә й. Их, ниндәй күңелле буласаҡ!

Һ ы р л ы м ө г ө ҙ. Туйғансы ełәк ашарбыҙ!

Е т е ҙ т о я ҡ. Ә мин күбәләктәр менән уйнармын. Арттарынан йүгереп йөрөргә яратам.

К ә з ә. Йыйындығыҙмы?

Б а л а л а р ы (*бергә*). Беҙ әҙер, әсәй! (*Шатланып, йырлай-йырлай сығып китәләр.*)

Беҙ барабыҙ урманға, урманға,
Йәшел япраҡ булғанға, булғанға.
Еләген дә йыйырбыҙ, йыйырбыҙ,
Шат яңғырар йырыбыҙ, йырыбыҙ.

## ИКЕНСЕ КҮРЕНЕШ

Аҡ ҡайынлы матур аҡлан. Оҙонғолаҡ — ҡуян балаһы еләк йыйып йөрөй. Саҡ ҡына тауыш ишетелһә лә һағая, йәшенә.

О ҙ о н ғ о л а ҡ. Әсәйем оҙаҡ йөрөргә ҡушманы. Тиҙ генә ҡайт, Бүребайға эләгеп ҡуйма, тине. Һауытым да тулып килә, әҙерәк кенә йөрөйөм дә — ҡайтайым. (*Шау-шыу ишетелә.*) Кемдер килә, тауыш ауыл һуҡмағында ишетелә, Бүребай түгелдер. Шулай ҙа йәшенәйем әле, кем белә...

Ҡуян йәшенә, һуҡмаҡтан балалары менән Кәзә килеп сыға.

Б ө ҙ р ә к ә й. Әсәй, аҡланға иң алда мин килеп еттем. Ҡарағыҙ әле, ниндәй матур аҡлан икән! Сәскәләре!.. (*Еҫкәй.*) Хәс беҙҙең бал ҡорттары йыйған бал кеүек. Ниндәй генә төҫлөһө юҡ бында: күк эшләпәле ҡыңғырау сәскәһе лә, аҡ күлдәк кейгән оҙон аяҡлы аҡсәскә лә, кәнфит еҫе сығып торған ялбыр башлы алһыу сәскә лә бар.

К ә з ә. Матур шул аҡланда. (*Бөҙрәкәйгә.*) Ә һин арыманыңмы? Килеп еткәнсе йүгерҙең дә йүгерҙең.

Б ө ҙ р ә к ә й. Юҡ. Тамсы ла арыманым. Мин бит көслө, әсәй.

К ә з ә (*көлә*). Көслөһөң, көслөһөң.

Е т е ҙ т о я ҡ. Әсәй, ҡара әле, сыбар күбәләк осоп бара, тотоп әҙерәк уйнайыммы?

К ә з ә. Япраҡ йыяйыҡ та, шунан туйғансы уйнарһығыҙ, балаҡайҙарым.

Ҡыуаҡ ҡыбырлай, Оҙонғолаҡ икенсе урынға күсеп ултыра.

Б ө ҙ р ә к ә й. Эй, ниңә йәшендең? Барыбер ҡолағың күренеп тора. Сыҡ беҙҙең янға. Мин — Бөҙрәкәй.

О ҙ о н ғ о л а ҡ. Ҡурҡам, сыҡмайым... (*Ҡолаҡтарын ныҡыраҡ ҡыбырлата.*) Ни эшләп бында йөрөйһөгөҙ?

Б ө ҙ р ә к ә й (*әсәһенә ҡаршы йүгерә*). Әсәй, ана тегендә оҙон ҡолаҡлы берәү ултыра, беҙҙән ҡурҡа, кем ул?

К ә з ә. Ә-ә-ә, ҡуянды, Оҙонғолаҡты әйтәһеңме, ул һеҙҙе белмәй, шуға ҡурҡҡандыр. Оҙонғолаҡ, кил бында, минең малайҙарым менән таныш, улар һинең дуҫтарың булыр. (*Ҡыуаҡ һелкенеп ҡуя, ҡурҡа-ҡурҡа ғына Оҙонғолаҡ күренә.*) Яҡыныраҡ кил, Оҙонғолаҡ.

Һ ы р л ы м ө г ө ҙ. Беҙҙең менән бергә япраҡ йыяһыңмы?

К ә з ә. Әсәһенән һорап сыҡһа, ярҙам итһен әйҙә, күңеллерәк булыр.

О ҙ о н ғ о л а ҡ. Әсәйем мине үҙе еләк йыйырға сығарҙы.

К ә з ә. Шулаймы, һауытыңды тултырҙыңмы һуң?

О ҙ о н ғ о л а ҡ. Саҡ ҡына ҡалды.

К ә з ә. Иптәштәрең һиңә ярҙам итер, аҙаҡ — һин уларға. Бер-берегеҙ менән яҡындан танышырһығыҙ ҙа, килештекме?

О ҙ о н ғ о л а ҡ. Килештек! Килештек! Күңелле булып китте!

Ярыша-ярыша, һөйләнә-һөйләнә Оҙонғолаҡҡа еләк йыялар.

Һ ы р л ы м ө г ө ҙ. Әсәй, мин бер-ике ус һалғайным, һауыт тула яҙҙы, бына, ҡара әле.

Б ө ҙ р ә к ә й. Мин дә эреләрен генә йыйҙым.

Е т е ҙ т о я ҡ. Бына, тағы бер ус еләк, Оҙонғолаҡ, ҡана, һалайым.

О ҙ о н ғ о л а ҡ. Ҡарағыҙ, һауытым тулып та ҡуйҙы.

К ә з ә. Әсәйең шатланыр инде, Озонғолаҡ, ул бит еләк ярата.

О ҙ о н ғ о л а ҡ. Эйе, еләкте беҙ ҡышҡылыҡҡа киптерәбеҙ, ҡаҡ та ҡоябыҙ.

Б ө ҙ р ә к ә й. Ә беҙ япраҡ әҙерләйбеҙ!

К ә з ә. Эйе, эйе, йәй бик ҡыҫҡа, ә хәҙер япраҡ йыя башлайыҡ, балалар.

Кәзә артынан бөтәһе япраҡ йыя башлай.

Б ө ҙ р ә к ә й. (*Оҙонғолаҡҡа.*) Оҙонғолаҡ, ниңә һин аҡланда бер үҙең генә йөрөйһөң? Минеке кеүек туғандарың ҡайҙа? Иптәштәрең юҡмы?

О ҙ о н ғ о л а ҡ (*көрһөнә*). Туғаным бар ине лә...

Б ө ҙ р ә к ә й. Ҡайҙа һуң?

О ҙ о н ғ о л а ҡ. Әсәйемдән рөхсәт һорамай әллә ҡайҙа киткән дә аҙашҡан, аҙаҡ уны Бүре алып киткән...

Б ө ҙ р ә к ә й. Бүре?! Әсәйем миңә Бүре тураһында әкиәт һөйләгәйне, ағайҙарым ҡурҡты, ә мин ҡурҡманым, ниңә тиһеңме?

Сөнки мин көслө! Бына, ҡара әле! (*Бер генә ҡулына кәрзин тотоп ала ла өйөрөлә башлай.*)

О ҙ о н ғ о л а ҡ. Өйөрөлмә, башың әйләнер ҙә ҡолап китерһең!

Б ө ҙ р ә к ә й. Һе! Ҡоланы, ти. Баш түбән тәгәрәгәндә лә башым әйләнгәне юҡ минең! Йә, хәҙер күрҙеңме минең көслө икәнемде!

Е т е ҙ т о я ҡ. Шулай ҙа Бүре һинән көслө.

О ҙ о н ғ о л а ҡ. Эйе, ағайың дөрөҫ әйтә, Бүре һинән көслө.

К ә з ә. Бөҙрәкәй һаман үҙенең көсө тураһында һөйләйме?

Е т е ҙ т о я ҡ. Бөҙрәкәй Бүрене күргәне юҡ, шуға күрә унан көслөмөн, ти.

Һ ы р л ы м ө г ө ҙ. Бүре — беҙҙең дошман.

Б ө ҙ р ә к ә й. Бүренән ҡурҡһаң — урманға барма, Бүренән ҡурҡһаң — урманға барма!.. (*Ҡапыл аяҡ аҫтына туп кеүек тәгәрләп, бер нәмә килеп ята.*) Уй, был нимә, Оҙонғолаҡ, әллә һинең тубыңмы?

О ҙ о н ғ о л а ҡ (*көлә*). Туп түгел ул, минең дуҫым — Терпеш! Батыр егет ул. Терпеш, тор әле, Бөҙрәкәй менән таныш.

Т е р п е ш (*аяҡ өҫтө баҫа*). Һаумыһығыҙ!

Б ө ҙ р ә к ә й, О ҙ о н ғ о л а ҡ. Һаумы, Терпеш!

Б ө ҙ р ә к ә й. Терпеш, ниңә һин туп кеүек йомарланғанһың?

Т е р п е ш. Һин, дуҫҡай, урманда йәшәмәгәс, белмәйһеңдер ҙә, бында Оҙонғолаҡтан башҡа Төлкөбикә менән Бүребай ҙа бар. Улар килеп сыҡһа, мин йомарланам да ятам, сәнскеле күлдәгем дошмандан һаҡлай.

Б ө ҙ р ә к ә й. Минең сәнскеле күлдәгем юҡ, шулай ҙа Бүренән ҡурҡмайым, баҫтыра башлаһа, ҡыуып етә алмаясаҡ.

О ҙ о н ғ о л а ҡ. Ул һинән шәп йүгерә, Бөҙрәкәй! Күргәнең булмағас, белмәйһең. Яуыз ул!

Т е р п е ш. Белмәйһең Бүрене, белмәйһең... Ярай, һау булығыҙ.

Б ө ҙ р ә к ә й. Әллә үпкәләне инде.

О ҙ о н ғ о л а ҡ. Терпеш үпкәләй белмәй ул, ваҡыты юҡ. Ҡарағай урманында йәшәгән ауырыу өләсәһенә ашыға.

Б ө ҙ р ә к ә й. Ҡарағай урманына? Күңеллеме унда?

О ҙ о н ғ о л а ҡ. Күңелле! Тик әҙерәк ҡурҡынысыраҡ.

Б ө ҙ р ә к ә й. Их, минең дә шунда булғым килә!

К ә з ә (*балаларын саҡыра*). Балалар, кәрзиндәрегеҙ тулды, әҙерәк ял итеп алығыҙ, уйнағыҙ.

Е т е ҙ т о я ҡ. Ял итәбеҙ! Ял итәбеҙ!

Һ ы р л ы м ө г ө ҙ. Ә мин күбәләк күҙәтәм, тик ҡайын төбөнә

генә ятып ҡарармын, ярармы, әсәй, күләгәлә рәхәт, һалҡынса, юғиһә, эҫе була башланы.

Кәзә. Улайһа, әйҙәгеҙ, ҡайын төбөнә йыйылайыҡ. Серем итеп алырға ла мөмкин. Кәрзиндәрегеҙҙе ҡайһылай тиҙ тултырҙығыҙ. Бына рәхмәт.

Бөҙрәкәй. Әсәй, минекен ҡара әле!

Кәзә. Бөҙрәкәйҙең дә һауыты туп-тулы.

Бөҙрәкәй. Миңә Оҙонғолаҡ ярҙам итте, әсәй.

Кәзә. Бик һәйбәт, дуҫтар бер-береһенә ярҙам итергә тейеш.

Оҙонғолаҡ менән Бөҙрәкәй. Беҙ дуҫтар булдыҡ.

Кәзә. Ял итегеҙ, ял итегеҙ, балаҡайҙарым. (*Ял итергә ултыралар.*)

Етеҙтояҡ. Ниңәлер йоҡо килә.

Кәзә. Әҙерәк серем итеп ал, балаҡайым.

Һырлымөгөҙ. Мин дә ял итәм, күбәләктәр менән аҙаҡ уйнармын. Улар ҙа, барыбер, һалҡынға ҡасҡан.

Кәзә. Ял итегеҙ, ял итегеҙ, балаҡайҙарым. (*Йоҡомһорай.*)

Бөҙрәкәй (*әсәһе менән ағаларының йоҡоға китеүенә шатлана*). Оҙонғолаҡ, һинең тағы ла дуҫтарың бармы?

Оҙонғолаҡ. Бар. Ана теге ҡарағай урманында йәшәй. Уның исеме — Оҙонғойроҡ.

Бөҙрәкәй. Әйҙә, уның янына барайыҡ.

Оҙонғолаҡ. Ярамай, әсәйең алыҫҡа китергә ҡушманы.

Бөҙрәкәй. Эй, әсәйем уянғансы, килеп тә етәбеҙ беҙ.

Оҙонғолаҡ. Әйҙә, улайһа, тиҙ генә барып киләйек.

Бөҙрәкәй. Тик шым ғына. (*Ипләп кенә китә башлайҙар.*)

Һырлымөгөҙ (*йоҡо аралаш*). Һеҙ ҡайҙа?

Бөҙрәкәй. Беҙ хәҙер киләбеҙ... киләбеҙ... (*Сығып китәләр.*)

## ӨСӨНСӨ КҮРЕНЕШ

Ҡарағай урманы. Яҡында ғына ҡоштар тауышы ишетелә. Ботаҡтан ботаҡҡа тейендәр һикергеләй. Оҙонғолаҡ менән Бөҙрәкәй инә.

Бөҙрәкәй. Их, ниндәй саф һауа! Быңдай матур урманды күргәнем юҡ ине. Күтәрелеп ҡараһаң — баш әйләнә.

Оҙонғолаҡ. Күңелле, матур булһа ла әҙерәк ҡурҡыныс бында.

Ҡарағай ботағында: «Һаумыһығыҙ, һаумыһығыҙ!» — тигән тауыш ишетелә.



О ҙ о н ғ о л а ҡ. Ошонда йәшәй минең дуҫым Оҙонғойроҡ. (*Өҫкә ҡарай.*) Оҙонғойроҡ, төш әле бында!

Б ө ҙ р ә к ә й (*өҫкә ҡарай, ләкин бер кемде лә күрмәй*). Оҙонғолаҡ, ҡайҙа дуҫың?

Оҙонғолаҡ. Ә һин аяҡ аҫтына ҡара, күрерһең. (*Ерҙә ҡойроғон уйнатып Оҙонғойроҡ тора.*)

Оҙонғойроҡ. Таныш булайыҡ, мин — Оҙонғойроҡ. (*Ҡул бирә.*)

Бөҙрәкәй. Минең исемем Бөҙрәкәй, һин ҡайҙа йәшәйһең һуң?

Оҙонғойроҡ. Ана, тегендә, йыуан ҡарағай эсендә йылы ҡыуыш бар, күмәкләп шунда йәшәйбеҙ. Әле мин бәшмәк киптереп йөрөйөм, әсәйемә ярҙам итәм.

Бөҙрәкәй. Беҙ ҙә ҡышҡылыҡҡа япраҡ киптерәбеҙ.

Оҙонғолаҡ. Миңә лә әсәйем еләк йыйырға ҡушты.

Бөҙрәкәй. Һеҙ бында әсәйегеҙ менән генә йәшәйһегеҙме?

Оҙонғойроҡ. Дуҫтарым да күп минең. Ана, күрәһеңме, ағастан ағасҡа һикереп йөрөйҙәр.

Бөҙрәкәй. Һеҙҙә бик күңелле икән!

Ҡапыл бер тейен: «Оҙонғойроҡ, һаҡланығыҙ, Бүре килә!» — тип ҡысҡыра.

Оҙонғойроҡ. Ай, тиҙерәк ҡасайыҡ!

Оҙонғойроҡ ҡарағай ботағына һикерә, Оҙонғолаҡ ҡыуаҡ эсенә ташлана.

Бөҙрәкәй (*баҫҡан урынынан ҡуҙғала алмай*). Минең аяҡтарым урынынан ҡуҙғалмай. Нимәләр булды, ҡурҡыныс...

Бүребай (*күренә*). Ә, эләктеңме?!. Күптәнән бирле һинең кеүек-тәрҙе күргәнем юҡ ине. Ха-ха-ха! Ҡайҙан килеп сыҡтың, тәмлекәй?

Бөҙрәкәй. Әсәй, әсәкәйем!

Бүребай. Ҡурҡтыңмы? Ниңә әсәйеңде саҡыраһың, көсөңдән килһә, үҙең көрәшеп ҡара минең менән! Ха-ха-ха!

Бөҙрәкәй. Әсәй, һин ҡайҙа? (*Илап ебәрә.*) Әсәкәйем, ҡотҡар!

Бүребай. Әсәйең һинең тауышты ишетмәй, ул алыҫта, ә һин яҡында ғына, тәмлекәй. Эх, ҡайһылай йомшаҡ ҡына, ҡайһылай тәмле генә!

Бөҙрәкәй. Етеҙтояҡ... Һырлымөгөҙ... Ниңә генә һеҙҙән айырылдым икән? Оҙонғолаҡ, һин ҡайҙа?

Оҙонғолаҡтың: «Тиҙерәк ҡотҡарайыҡ Бөҙрәкәйҙе!» — тигән тауышы ишетелә.

Бөҙрәкәй (*ҡалтыранып*). Бүребай... Ниңә һинең күҙҙәрең ут кеүек яна?

Бүребай. Ха-ха-ха! Сөнки мин ҡаҙанды үҙем менән бергә алып йөрөйөм, бына ул (*эсенә күрһәтә*), аңланыңмы? Ә хәҙергә,

әйҙә, бында ятып тор. (*Бөҙрәкәйҙе әләктереп ала ла тоғона һалып ҡуя.*) Бына шулай!

Бөҙрәкәй (*ҡысҡыра*). Әсәй!.. Әсәкәйем!..

Бүребай. Ҡысҡырма!.. Тауышыңды сығарма!

Ҡарағай башынан тейен тауыштары ишетелә: «Ҡотҡарайыҡ, ҡотҡарайыҡ!»

Бүребай. Кемде ҡотҡарырға уйлайһығыҙ? Минеме? Ха-ха!

Тейен тауыштары: «Тоҡ эсендәме?», «Эйе, тоҡ эсендә ята, алып китмәҫ элек берәй нәмә эшләйек», «Оҙонғолаҡ ҡайҙа?», «Бөҙрәкәйҙең әсәһенә йүгерҙе», «Тиҙ генә килһә ярар ине», «Килер...»

Бүребай. Һеҙ ҙә әләгерһегеҙ әле! (*Йоҙроҡ күрһәтә.*)

Оҙонғойроҡ. Ә беҙ һиңә бер ваҡытта ла әләкмәйәсәкбеҙ! Һин ерҙә, ә беҙ ҡарағай башында. Шуның өсөн күстәнәс кенә ебәрә алабыҙ! Башланыҡ, дуҫтар!

Бүребай башына тып итеп тубырсыҡ төшә.

Бүребай. Эй, нимә эшләүегеҙ был!..

Оҙонғойроҡтоң дуҫтары берҙәм булып Бүребайҙы туҡмай башлай.

Оҙонғойроҡ. Бына һиңә! Башҡа минең дуҫыма теймә!

Тейендәр: «Беҙҙән дә мул күстәнәс һиңә, Бүре!.. Башҡаса беҙҙең урманға аяғыңды баҫаһы булма!», «Бәләкәйҙәргә рәнйетмә!» — тиҙәр.

Бүребай (*аҡыра*). Туҡтағыҙ!.. Туҡтағыҙ, тим!

Оҙонғойроҡ. Һорама! Уйламайбыҙ ҙа!

Бөҙрәкәй. Сығар! Сығар мине тоҡтан!

Оҙонғойроҡ. Борсолма, Бөҙрәкәй! Беҙ һиңә ярҙам итербеҙ! Бүре беҙҙән ҡотола алмаҫ! Ишетәһеңме, тубырсыҡтар ҡайһылай оса!

Бүре ҡайһы яҡҡа ынтыла, шул яҡҡа тубырсыҡтар яуа.

Бүребай. Етер һеҙгә, етер!.. (*Бүре уларҙан ҡасып ҡыуаҡ эсенә инеп китә лә кире килеп сыға, ҡысҡыра.*) Ой! Ой!.. Аяғымды бысаҡ менән телделәр! Ниндәй юлбаҫар ята унда?

Ҡыуаҡ эсенән Терпеш килеп сыға, энәләрен тырпайтып, Бүрегә яҡынлаша, асыулы.

Терпеш. Һин минең дуҫымды нимә эшләтергә уйлайһың? Тейеп кенә ҡара! Ҡотола алмаҫһың минән! Белдеңме?

Б ү р е б а й. Ҡурҡытма! Ҡурҡытма! Һинән генә ҡурҡып торорға мин ҡуян түгел!

Т е р п е ш. Тик һин бер үҙең, ә беҙ күмәк. Эй, Оҙонғойроҡ, ниңә шымдығыҙ?

Тубырсыҡтар тағы яуа, тоҡ эсенән Бөҙрәкәйҙең: «Терпеш, ҡотҡар мине!» — тигән тауышы ишетелә.

Б ү р е б а й. Етер һеҙгә! Ҡасып ҡотолоп булмаҫ быларҙан... Барыбер мин һеҙгә тәмлекәйҙе бирмәйем!

Түңгәк өҫтөнә барып ултыра, тоғон сисә башлай, артында Оҙонғойроҡ, Етеҙтояҡ, Һырлымөгөҙ күренә. Бышылдашып ҡына һөйләшәләр.

О ҙ о н ғ о л а ҡ. Бына улар. Ипләп кенә эш итәйек.

Е т е ҙ т о я ҡ. Тот әсәйҙең кәрзинен... башына кейҙерәйек...

Һ ы р л ы м ө г ө ҙ. Әйҙә, тиҙ генә, ҡапыл...

Б ү р е б а й. Кем бар? Кем йөрөй тағы? (*Тегеләр йәшенә, Бүре тирә-яғына ҡарай, шымып ҡалған Терпешкә.*) Ә!.. Һин дә шымып ҡалдыңмы? Шулай кәрәк!.. Минән ҡурҡып, һин дә дерелдәп торорға тейешһең. Хәҙер төшкө ашты тәмләп ҡарайыҡ. (*Тоғонан Бөҙрәкәйҙе сығарған арала Һырлымөгөҙ менән Етеҙтояҡ уның башына кәрзин кейҙереп өлгөрә.*) О-оо... Кем минең менән шаяра? (*Тоғон ташлап ебәрә лә кәрзингә тотона.*) О!.. Хәҙер кәрәгегеҙҙе бирәм мин һеҙҙең!

О ҙ о н ғ о л а ҡ. Бөҙрәкәй, кил бында! (*Бүребай тоғонан ысҡынған Бөҙрәкәй иптәштәре янына йүгерә.*) Тиҙерәк бул!

Б ү р е б а й. Алығыҙ кәрзинегеҙҙе!

Һ ы р л ы м ө г ө ҙ. Тиҙерәк әйләндерәйек үҙен!

Һырлымөгөҙ менән Етеҙтояҡ йүгерә-йүгерә бау менән Бүрене урата. Оҙонғолаҡ менән Оҙонғойроҡ осон ныҡ итеп бәйләп ҡуя.

Т е р п е ш. Шул кәрәк һиңә, яуыз, шул кәрәк!

Б ү р е б а й (*бар көсөнә аҡыра*). Бауығыҙҙы сисегеҙ!

Е т е ҙ т о я ҡ. Ә беҙ сисергә уйламайбыҙ! Үәт!..

Һ ы р л ы м ө г ө ҙ. Һин бит, Бүребай, Бөҙрәкәйҙе тоғондан сығарырға уйламаның, теләмәнең дә. Шулай булғас, ҡысҡырма ла, һорама ла!

Б ү р е б а й. О! О! О! Ниңә улай ҡаты ҡыланаһығыҙ!.. Йәлләгеҙсе... Башҡа мин һеҙгә теймәм! Күктәге Ҡояш менән ант итәм!

О ҙ о н ғ о й р о ҡ. Күктәге Ҡояшҡа теймә! Беҙ һиңә ышанмайбыҙ! Сөнки һин һәр ваҡыт алдашаһың!

О ҙ о н ғ о л а ҡ. Дөрөҫ әйтәһең. Бүрегә ышанырға ярамай. Ул үҙе беҙҙе йәлләмәй бит.

Т е р п е ш. Бына шулай, Бүребай.

Ҡыҫҡыра-ҡыҫҡыра Кәзә килеп инә.

К ә з ә. Эй, балаҡайым, ниңә генә киттең был яҡҡа? Ниңә генә тыңламаның әйткән һүҙемде?

Б ө ҙ р ә к ә й (*әсәһенә ташлана*). Әсәй!.. Әсәкәйем!.. Мин бик ҡурҡтым! Эйе, эйе, ҡурҡтым...

К ә з ә. Ҡурҡҡанһыңдыр шул, балаҡайым. Ярай әле, янында дуҫтарың булған. Улар булмаһа, ни эшләр инең? Бүребай үҙеңде күптән алып киткән булыр ине. Эй, балаҡайым...

Б ө ҙ р ә к ә й. Әсәй, әсәкәйем, ғәфү ит мине, бынан һуң гел генә әйткән һүҙеңде тыңлап йөрөрмөн... Ағайҙарымды ла...

Б ү р е б а й. Мине лә ебәрегеҙ, мин дә һүҙ бирәм!.. Башҡаса һеҙҙең кеүектәргә теймәм! Бөгөн үк тоғомдо йыртып ташлайым...

Т е р п е ш. Эш тоҡта түгел!

Б ү р е б а й (*олой*). О!.. О!..

Б ө ҙ р ә к ә й. Аңланым, әсәкәйем, аңланым. Ағайҙарым, дуҫтарым менән һәр ваҡыт бергә булырмын.

Б ө т ә һ е б е р г ә. Бергә булһаҡ, көслө булырбыҙ!

К ә з ә. Быны иҫегеҙҙән сығармағыҙ, берлектә — тереклек!

Б ү р е б а й (*олой*). О!.. О!.. Мин генә һәр ваҡыт яңғыҙ! О!.. О!..

К ә з ә. Бер кемде лә йәберһетмә — дуҫтар табылыр!

Б ү р е б а й. О!.. О!.. Кем минең менән дуҫлашһын... Яуыз, тиҙәр...

Бүре башына кейҙерелгән кәрзин өҫтөнә ҡоштар осоп төшә, бөтәһе бергә еңелгән Бүребайҙы уратып, әйләнәләр. Кәзә шатланып сәпәкәй итә, йырлайҙар.

Ысын дуҫтарың булһа
Эргәлә, эргәлә,
Ҡурҡыныс түгел яуыз
Бүре лә, бүре лә.

# КЕМДЕҢ КҮЛДӘГЕ МАТУР

Ҡ А Т Н А Ш А Л А Р:

Т е р п е — әсә
Т е р п е ш — балаһы
Ҡ у я н — тегенсе
Ҡ ы ҫ ҡ а ғ о й р о ҡ
Й ы л ғ ы р а я ҡ
Һ а ҡ ҡ о л а ҡ
Һ а й ы ҫ ҡ а н
Т ө л к ө б и к ә

**БЕРЕНСЕ КҮРЕНЕШ**

Сәскәгә күмелгән аҡлан уртаһында тегенсе Ҡуяндың өйө. Тәҙрә алдында, оҙон өҫтәл өҫтөндә күҙҙең яуын алып төрлө биҙәкле күлдәклектәр ята. Ҡуяндың өс ҡыҙы уйнап йөрөй, дүртенсеһенә, бәләкәй ҡыҙына, әсәһе яңы ғына күлдәк тегеп кейҙергән.

Ҡ у я н. Бына, Ҡыҫҡағойроҡҡа ла күлдәк тектек.

Ҡыҙын әйләндереп-әйләндереп ҡарай, башҡалары ла йүгереп килә, күлдәкте маҡтарға тотона.

Һ а ҡ ҡ о л а ҡ (*сәпәкәй итә, һикергеләп ала*). Эй ниндәй матур!
Й ы л ғ ы р а я ҡ (*күлдәкте тотоп, һыйпап-һыйпап ҡарай*). Хәҙер һин дә беҙгә оҡшап ҡалдың. Рәхмәт әйт әсәйгә.
Ҡ ы ҫ ҡ а ғ о й р о ҡ. Рәхмәт, әсәй.

Үбергә ынтылғас, башҡалары ла, беҙ ҙә, беҙ тип, әсәләрен үбеп ала, түңәрәк яһап, йырлап бейейҙәр.

Б ө т ә һ е б е р г ә. Матур ғына был күлдәкте
Әсәйем тегеп бирҙе.
Рәхмәт, әсәй, рәхмәт, әсәй,
Шатландырҙың һин беҙҙе.

Ҡ у я н. Йылы тәнегеҙҙә туҙһын
Өр-яңы күлдәгегеҙ.
Ҡояш кеүек йылы булһын
Һәр кемгә күңелегеҙ.

Дүртеһен дә ҡосаҡлап һөйә, ҡыҙҙары уны тағы үбә.

Б а л а л а р ы. Һәр ваҡыт беҙҙең менән бул, әсәй!
Ҡ у я н. Батыр булығыҙ. Бер-берегеҙгә ярҙам итеп йәшәгеҙ.

Шул саҡ һайыҫҡан осоп төшә, һикергеләп йөрөй.

Һ а й ы ҫ ҡ а н. Һаумыһығыҙ, күршеләрем. Билдәләнгән көнгә килеп еттем. Яулығым әҙерме икән?

Ҡ у я н. Әҙер, әҙер, күршекәйем. Бына, сәскәләр төшөрөп, биҙәктәр һырыным. (*Матур ғына яулыҡ бирә.*)

Һ а й ы ҫ ҡ а н (*ябына ла көҙгөгә ҡарай*). Ай-һай!.. Көҙгөнән кем ҡарап тора? Ниндәй һылыу булып киткәнмен, ә? Кит, шул тиклем сибәр булырмын икән, ә?

Ҡ у я н. Ябынып ҡыуан, күршекәйем.

Һ а й ы ҫ ҡ а н. Рәхмәт йылы һүҙеңә. Ай-һай, бигерәк матур шул. Ҡана, урман араһынан йөрөп әйләнәйем. Бөтәһе лә күрһен яулығымды! Рәхмәт, рәхмәт, күршекәйем! Бигерәк тә оҫта шул ҡулдарың, күҙ теймәһен. Урманға бер яулыҡ бит ул!.. (*Һөйләнә-һөйләнә осоп китә, ҡуян балалары көлә.*)

Й ы л ғ ы р а я ҡ. Әсәй, ҡайһылай ҡыуанды һайыҫҡан, хушлашырға ла онотто.

Ҡ ы ҫ ҡ а ғ о й р о ҡ. Килешә шул үҙенә сәскәле яулығы.

Һ а ҡ ҡ о л а ҡ. Ни эшләргә лә белмәне.

Ҡ у я н. Ул да һеҙҙең кеүек инде, матур нәмә күрһә, шатланып бөтә алмай. Ҙурая төшһәгеҙ, тегенсе һөнәренә һеҙҙе лә өйрәтермен. Урмандағы һәр кемде ҡыуандырырһығыҙ. (*Бөтәһе лә әсәһенә һыйына.*)

Һ а ҡ ҡ о л а ҡ. Әсәй... тағы кемдер килә... Нәҙек тауыш менән йырлай. Үҙе ашыҡмай...

Ҡ у я н. Эй, әйтергә онотҡанмын, бөгөн беҙгә ҡунаҡ килә.

Ҡ у я н б а л а л а р ы (*сәбәкәй итә*). Әсәй, кем килә, эй, ниндәй күңелле буласаҡ!

Ҡ у я н. Терпе апайығыҙ ҡыҙына күлдәк тектерергә киләсәк.

Й ы л ғ ы р а я ҡ. Әйҙәгеҙ, ҡаршы алайыҡ үҙҙәрен!

Бәләкәй Терпеште етәкләп, һуҡмаҡтан Терпе күренә.

К у я н. Рәхим итегеҙ, рәхим итегеҙ, ҡәҙерлеләрем!

Т е р п е. Һаулығығыҙ нисек, әхирәт, балалар үҫәме?

Ҡ у я н. Ана, йүгереп йөрөйҙәр, һеҙҙе күргәс, баштары күккә тейҙе.

Т е р п е. Тиҙерәк барайыҡ тип, минең Терпешем дә түҙмәне, килеп еткәс, йырлап ебәрҙе, күлдәк тураһында ишеткәс, бөтөнләй ҡанатланды.

Ҡ у я н. Бөгөн үҙебеҙгә лә тектек. Терпеште лә шатландырайыҡ, улайһа. (*Балаларға.*) Балаҡайҙарым, килегеҙ әле бында! Терпеш һеңлегеҙгә күлдәклек һайлайыҡ.

Т е р п е (*ҡуяндың ҡолағына нимәлер шыбырлай*). Яраймы?

Ҡ у я н. Эйе, эйе, үҙем дә шул турала уйлап тора инем. (*Балалар әсәләренә бер-бер артлы күлдәклектәр күрһәтә.*)

Һ а ҡ ҡ о л а ҡ. Әсәй, әйҙә, беҙҙеке кеүек йомшаҡ күлдәклекте һайлайыҡ. Терпеш беҙгә оҡшаһын.

Ҡ ы ҫ ҡ а ғ о й р о ҡ. Йәй көнө күбеһе йәшелдән тектерә, әйҙә, йәшелдән һайлайыҡ. (*Барыһы ла күлдәклек янына йыйыла, топ-тотоп ҡарай.*)

Т е р п е. Ялтыр нәмәгә ҡыҙма, ҡыҙым, һиңә тигәне, ана, ситтәрәк ята.

Т е р п е ш (*шатланып, ситтәрәк ятҡан сыбар күбәләк төшөрөлгәнен тотоп ала*). Әсәкәйем, ҡара әле, ниндәй матур! Мин дә күбәләк шикелле, сәскәләр араһында күлдәгемдә кейеп, уйнап йөрөрмөн.

Т е р п е. Кәрәклеһен тапманың әле, ҡыҙым, эҙлә...

Й ы л ғ ы р а я ҡ. Ҡарағыҙ әле, мин еләктәр төшөрөлгәнен таптым!.. Ҡыҙыл еләк, ҡыҙыл еләк, тип башҡалар Терпештең артынан йүгереп йөрөрҙәр. (*Барыһы ла ҡыуанып ҡул саба. Терпеште түңәрәкләп бейейҙәр.*)

Т е р п е. Матур булһа ла бик йоҡа, балаҡайым. Ботаҡҡа эләгеп, йыртылып бөтөр, көҙ етә башлаһа, өшөрһөң. Мин һиңә бына ошоно һайлайым. (*Иң ситтә ятҡан сәнскеле күлдәкте ала.*) Оҡшар, тип уйлайым, эйе, эйе...

Т е р п е ш (*илап ебәрә*). Кәрәкмәй миңә ул сәнскеле нәмәкәй! Оҙонғолаҡтарҙың күлдәге үҙе йомшаҡ, үҙе еңел, бына тигән! Ә минеке... Бөтәһе лә көлөр инде!..

Т е р п е. Һинең иптәштәрең бик тә аҡыллы, бер ҙә көлмәҫтәр. Аҙаҡ үҙең дә ҡыуанып бөтә алмаҫһың күлдәгең өсөн.

Ҡ у я н. Әсәйең дөрөҫ әйтә, кил әле, буй-һыныңды үлсәйек. (*Ҡуян тиҙ генә күлдәк тегеп кейҙерә.*) Бына, тап-тамам булды. Ҙурайып киттең, Терпеш! Әсәйеңә оҡшаның, уның кеүек батыр ҙа бул. Илама.

Т е р п е ш (*башын һелкә*). Рәхмәт, Ҡуян апай!

Ҡ у я н. Ҙур үҫ, бәләкәс!

Б ө т ә һ е  б е р г ә. Ниндәй килешә үҙенә күлдәге!.. (*Һоҡланалар.*)

Ҡ ы ҫ ҡ а ғ о й р о ҡ. Әйҙәгеҙ, аҡланға уйнарға сығайыҡ!

Ҡ у я н. Барығыҙ, балаҡайҙарым, барығыҙ! Төшкө сәйгә тиклем йөрөгөҙ!

## ИКЕНСЕ КҮРЕНЕШ

Урманға терәлеп торған аҡлан. Терпеште етәкләп, ҡуян балалары килеп сыға. Улар һаман терпе балаһын йыуата.

О ҙ о н ғ о л а ҡ. Урман кейектәренә һинең күлдәгең оҡшаны, Терпеш. Тейенгә тиклем: «Күлдәге лә күлдәге, Терпеш ҙурайып киткән!» — тип маҡтаны.

Һ а ҡ ҡ о л а ҡ. Әсәйең дә һине ярата, Терпеш. Тик уны асыуландырырға ярамай, гел генә тыңлап йөрөргә кәрәк.

Ҡ ы ҫ ҡ а ғ о й р о ҡ. Әйҙәгеҙ, йәшенмәк уйнайыҡ.

Б ө т ә һ е  б е р г ә. Әйҙәгеҙ, әйҙәгеҙ, уйнайыҡ. (*Һикергеләйҙәр, сәпәкәй итәләр, шаулашалар.*)

Һ а й ы ҫ ҡ а н. Ниндәй тауыш урманда? Әллә янғын сыҡҡанмы?

Һ а ҡ ҡ о л а ҡ. Беҙ йәшенмәк уйнайбыҙ.

Һ а й ы ҫ ҡ а н. Минең дә уйнағым килә, төшәйемме янығыҙға?

Й ы л ғ ы р а я ҡ. Төш әйҙә, йәшенмәктең һүҙҙәрен әйтерһең.

Һ а й ы ҫ ҡ а н (*яндарына төшә*). Тиҙ генә түңәрәккә тороғоҙ!

Терпеш тары бутҡаһын
Бутыр-бутыр бешергән.
Уртаһына һары майҙы
Йәлләмәйсә төшөргән.

Шунан ҡунаҡ саҡырырға
Урманға сығып киткән.
Берәү, икәү, өсәү, дүртәү,
Көткән ҡунаҡ һин икән!..

(*Һайыҫҡан Ҡыҫҡағойроҡҡа төртә.*)

Б ө т ә һ е  б е р г ә. Беҙ ҡастыҡ, йом күҙеңде!

Ҡыҫҡағойроҡ күҙен баҫып, ҡайынға арты менән тора, башҡалар төрлөһө төрлө ергә ҡаса, бер аҙҙан ҡасыусының тауышы ишетелә.

Ҡ ы ҫ ҡ а ғ о й р о ҡ. Күҙҙәремде хәҙер асам,
Сәғәтем унды һуҡты.
Алыҫҡа йәшенһәгеҙ ҙә,
Ҡарармын һәр ҡыуаҡты.

Ҡыҫҡағойроҡ ҡыуаҡтарҙы, үлән араларын асып ҡарай. Оҙонғолаҡтың оҙон ҡолағын күреп ҡала. Ҡулдарын ыуып шатлана.

К ы ҫ к а ғ о й р о к. Бына һин ҡайҙа икән! Ҡолағыңды йәшерергә онотҡанһың бит. Сыҡ! (*Ҡайынға йүгерә.*) Мин һине күрҙем. Ләп-пә!

О ҙ о н ғ о л а ҡ. Үҙем гәйепле, ҡолағымды бөтөнләй онотҡанмын, һәр ерҙә ҡамасаулай. (*Йәшенгән урынынан сыға.*) Ә һин башҡаларҙы эҙлә!

Ҡ ы ҫ к а ғ о й р о к. Эҙләйем! Эҙләйем! (*Ары йүгерә, бире йүгерә, ипләп кенә ағас янына килә.*) Бәлки, ошондалыр.... (*Унда Йылғыраяҡ ята, һеңлеһен күргәс, артҡа сигенә, ағасты урап сығып, ҡапыл алға ынтыла.*)

Й ы л ғ ы р а я ҡ. Ләп-пә!.. Ләп-пә!.. Мине күрмәнең! Күрһәң дә ҡыуып етә алмаҫ инең! (*Оҙонғолаҡ янына ултыра.*) Һине иң алдан күрҙеме? Ниңә ныҡыраҡ йәшенмәнең?

О ҙ о н ғ о л а ҡ. Эй, үҙем йәшенгәнмен, үҙем ҡолағымды йәшерергә онотҡанмын. (*Көлә.*) Ә бына башҡаларҙы табыуы еңел булмаҫ: Һайыҫҡан шар кеүек аҫылынып торасаҡ, Терпе туп кеүек ерҙә ятасаҡ, ә Һаҡҡолаҡ тауыш килгән һайын боҫасаҡ. Эҙлә, Ҡыҫҡағойроҡ, эҙлә!

Ҡ ы ҫ к а ғ о й р о к. Эҙләйем... Был Һайыҫҡанға берәй хәйлә табырға кәрәк! (*Уйланып тора.*) Эһ-һә!.. Былай итәйек. Йәшенмәк уйнағанда, хәйлә ҡулланырға мөмкин. Һа-йыҫ-ҡан!.. Һин яулығыңды бөтәһенә лә күрһәтеп бөтмәнең бит. Ана, ҡырмыҫҡалар шул турала шаулаша! Һайыҫҡандың яулығы матур тиҙәр, ә беҙ һаман күрмәгәнбеҙ, тип ҡыҫҡыралар!.. (*Һайыҫҡан йәшенгән урынынан тауыш бирә.*)

Һ а й ы ҫ ҡ а н. Кемдәр минең яулығым менән ҡыҙыҡһына? Ҡайҙа? (*Башын күрһәтә.*) Бына, ҡарағыҙ!

Ҡ ы ҫ к а ғ о й р о к. Эй, һайыҫҡан! Мин һине күрҙем! (*Йүгерә.*) Ләп-пә!.. Ләп-пә!

Һ а й ы ҫ ҡ а н. Ниңә алдап саҡырҙың? (*Үпкәләй.*) Яңынан йәшенәм.

Ҡ ы ҫ к а ғ о й р о к. Йәшенмәк уйнағанда хәйләләшергә лә ярай. Ниңә сыҡтың һуң, яңынан йәшенһәң — эҙләмәйем! Үәт!

Һ а й ы ҫ ҡ а н. Ә хәҙер Терпеште табып ҡара, уның ҡайҙа йәшенгәнен мин генә күрҙем. Күпме эҙләһәң дә таба алмаҫһың.

Ҡ ы ҫ к а ғ о й р о к (*көлә*). Тимәк, Терпеш һин йәшенгән яҡта, шулаймы, Һайыҫҡан?

Һ а й ы ҫ ҡ а н (*сабырһыҙланып һикергеләй*). Ул яҡта түгел! Барма унда! Эй... Терпеш асыуланыр инде.

Ҡ ы ҫ к а ғ о й р о к. Хәҙер!.. Эһ-һә! Бынау түңгәккә баҫам да

ҡарайым. (*Баҫа ла ҡысҡырып ебәрә.*) Ай! Ауыр-та! Аяғымды харап иттем! Нимә ҡаҙалды минең аяғыма?

Терпеш йомарланып ятҡан еренән тора, өҫтөндәге япраҡтарын ҡаға.

Т е р п е ш. Ғәфү ит, Ҡыҫҡағойроҡ. Һин күрмәһен тип, күлдәгемде япраҡтар менән ҡаплағайным. Ныҡ ауыртамы?

Ҡ ы ҫ ҡ а ғ о й р о ҡ. Ауырта шул... (*Эргәләренә башҡалары килә.*)

Һ а й ы ҫ ҡ а н. Минең яулығым кеүек күлдәк кәрәк һиңә, Терпеш.

Й ы л ғ ы р а я ҡ. Әллә яңынан тектертәйекме?

Т е р п е ш. Әсәйем барыбер риза булмаҫ... Ул мине яратмай шикелле.

Һ а й ы ҫ ҡ а н. Ярата ул, ярата. Тик һин ҡысҡырып ила, илаған баланы әсәйҙәр һәр саҡ йәлләй ул. Йәлләр ҙә икенсене тегеп бирер.

Шул саҡ Һаҡҡолаҡ ҡыуаҡлыҡ эсенән атлығып килеп сыға.

Һ а ҡ ҡ о л а ҡ. Төлкөбикә килә, йүгерҙек өйгә ҡарай! Әй, Терпеш, һин шәп йүгерә алмайһың бит. (*Һайыҫҡанға.*) Ә һин тиҙ генә әсәйҙәргә хәбәр ит. Аптырап торма, бар, тиҙ бул! (*Һайыҫҡан осоп китә.*)

Т е р п е ш. Ҡурҡам... Әсәй!

О ҙ о н ғ о л а ҡ. Ҡурҡма, беҙ һинең менән, Терпеш! Баяғы кеүек йомарланып тик ят, тиҙерәк бул!

Терпеш йомарланып ята, сәнскеле шар кеүек була. Ҡуян балалары яҡындағы ҡыуаҡлыҡ араһына боҫа. Һаҡ ҡына баҫып, Төлкөбикә инә.

Т ө л к ө б и к ә. Ошо тирәлә шаулашалар ине, ҡайҙа ҡасып бөттөләр, ә? Әҙҙәре лә ҡалмаған. Эх, яратам мин ҡуяндарҙы! Бына, тоғом да әҙер: ҡолағынан ғына эләктереп алаһың да, һоп иттереп, һалып та ҡуяһың. Хе-хе-хе!.. Ҡайҙа юғалды һуң үҙҙәре? (*Тирәяғына ҡарана.*) Үҙ ҡолаҡтарым менән ишеттем, ошо аҡланда ине улар. (*Эҙләнә. Терпешкә эләгеп ҡолап китә, үҙе бер яҡҡа, тоғо икенсе яҡҡа оса.*) Был нимә? (*Тора, ентекләп ҡарай, аҙаҡ, терпе икәненә ышанғас, шатлана.*) Әһ-һә!.. Был бит терпе, ҡуяндар ҡасты тип, ниңә миңә ҡайғырырға? Был да табыш!.. (*Тоғон барып ала, терпене еҫкәп ҡарай.*) Тәмле генә еҫ сыға. Һоп!.. (*Тоторға үрелә, ҡулы ауыртыуҙан ҡысҡырып ебәрә, һикергеләй.*) Әйәй-әй! Ҡанатты бит ҡулымды!.. Шулаймы әле, тороп тор, мин

һине ошонда ғына ашайым! (*Ҡулына таяҡ тотҡан ҡуян балалары ҡыуаҡ эсенән башын күрһәтә, ләкин Йылғыраяҡ, әлегә ярамай, тигәнде белдергәс, кире боҫалар.*) Әм! (*Төлкөбикә Терпеште ашарға итә, тағы ҡысҡыра, ултыра төшә, ауыҙын йәлләп баҫа.*) Ә-ә-ә!.. Ҡайһылай ныҡ сәнсә... Ауыҙымды ла ҡанатты, шешеп йөрөр инде, башҡалар танымаҫ... Ух, һине! (*Терпешкә йоҙроҡ күрһәтә, ҡуян балалары көлөп тора.*) Ашап та булмай, тоҡҡа һалып та булмай, кем текте һиңә был сәнскеле күлдәкте? (*Тора, тоғон ала.*) Ҡана, аяғым менән әйләндереп ҡарайым әле, һоп! Ай-ай-ай!.. Сәнсмә, аяҡты сәнсмә! Ах, бөтә тәнем һыҙлай ... (*Китергә йыйына.*) Тфү, шул да булдымы күлдәк! Сәнскеле күлдәгең булмаһа, мин һине күптән ашаған булыр инем... (*Аҡһап, тоғон алып, урман эсенә инеп китә, шатланып, ҡыуаҡ эсенән ҡуян балалары килеп сыға.*)

Оҙонғолаҡ. Терпеш! Терпеш, тор инде, Төлкөбикә китте.

Һаҡҡолаҡ. Терпеш, беҙ килдек, тор. Ҡурҡтыңмы?

Терпеш (*тора, илай*). Хәҙер белдем. Хәҙер белдем ниңә әсәйемдең ошо күлдәкте тектергәнен... Ярата мине әсәйем, бик ярата.

Оҙонғолаҡ. Хәҙер беҙ ҙә аңланыҡ.

Ҡыҫҡағойроҡ. Төлкө тиклем Төлкөнө ҡурҡытты! Үәт!

Йылғыраяҡ. Урманды ете тапҡыр әйләнеп сыҡ, бындай яҡшы күлдәкте таба алмаҫһың!

Бөтәһе бергә. Әсәйҙәргә рәхмәт! Йәшәһен әсәйҙәребеҙ!

Һайыҫҡан (*осоп инә*). Сәй эсеп ултыралар ине, бар нәмәләрен ташланылар ҙа йүгерҙеләр. Ә мин туранан һеҙгә ярҙамға ашыҡтым! Киләләр! Әсәйҙәрегеҙ килә!

Оҙонғолаҡ. Әсәй, әсәй, беҙ Төлкөнө күрҙек!

Ҡыҫҡағойроҡ. Әсәй, ул кәрәген алды, яраланып ҡасты!

Йылғыраяҡ. Терпеште күлдәге үлемдән ҡотҡарҙы!..

Шаулашып сығып китәләр. Һайыҫҡан улар артынан эйәрә.

Һайыҫҡан. Минең яулығымдан да шәп икән Терпештең сәнскеле күлдәге. Эйе, эйе, иң матуры терпенең күлдәге!

Шаршау

# КҮСТӘНӘС

*Яҡташым Әсхәл Әхмәт-Хужаға*

Ҡ А Т Н А Ш А Л А Р:

А з а м а т — яҙыусының улы
Е т е ҙ а я ҡ — Азаматтың дуҫ ҡуяны
Й ә н л е к т ә р — Айһылыу Йәғәфәрованың әкиәт геройҙары

Йәй айы. Матур ғына аҡлан. Аҡ ҡайын, төрлө сәскәләр. Күңелле һайраған ҡоштар тауышы ишетелә. Бер яҡ ситтә — ағас түңгәге. Ҡуян балалары — Етеҙаяҡ, Оҙонғолаҡ, Ҡыҫҡағойроҡ туп уйнап йөрөй.

Е т е ҙ а я ҡ (*уның аяғына туп килеп тейә*). Эй, ошо аяҡты, һаман да төҙәлеп етмәй, саҡ ҡына берәй нәмә тейһә, бөттө — ауырта.

О ҙ о н ғ о л а ҡ. Ә һин шәп йүгермә, Етеҙаяҡ, тупты ипләп кенә тип, яраймы?

Ҡ ы ҫ ҡ а ғ о й р о ҡ. Теге һинең малайың... Э-э... (*Уйланып тора.*) Исеме кем әле? Әлегә туп уйнамаҫҡа ҡушҡан бит үҙеңә.

Е т е ҙ а я ҡ. Азамат! Азамат исемле малай ул. Мин һиңә көн һайын тигәндәй шул исемде ҡабатлайым.

Ҡ ы ҫ ҡ а ғ о й р о ҡ. Эй, шулай бит әле, ҡойроҡ ҡыҫҡа булһа, хәтер ҙә ҡыҫҡа була икән, онотам да ҡуям... Ә-һә!.. А-за-мат!

Е т е ҙ а я ҡ (*һикрәндәй-һикрәндәй түңгәккә барып ултыра*). Ә һин онотма. Тағы бер тапҡыр ҡабатлайым: Азамат исемле малай мине үлемдән ҡотҡарҙы, эттәр тырнағынан алып ҡалды, яраланған аяғымды дауаланы, ҡыш үткәнсе үҙҙәрендә тотто. (*Аяғын ыуа.*)

Ҡуян балалары Етеҙаяҡтың ике яғына, түңгәк янына килеп ултыра.

Ҡыҫҡағойроҡ. Етеҙаяҡ, һөйлә әле, уларҙың өйө бик матурмы? Баҡсалары бармы? Ә баҡсаларында кәбеҫтә үҫәме?

Оҙонғолаҡ (*ҡулын һелтәй*). Кит әле, кәбеҫтә түгел, кишер үҫәме, тип һора!

Ҡыҫҡағойроҡ. Ә мин кәбеҫтә яратам!

Оҙонғолаҡ. Һин кәзәме әллә?

Ҡыҫҡағойроҡ. Кәзә тип үсектермә әле! Мин — ҡуян!

Оҙонғолаҡ. Үәт! Шуға ла беҙ кишер кимерәбеҙ!

Ҡыҫҡағойроҡ. Ә мин барыбер кәбеҫтә яратам! Белдеңме?

Етеҙаяҡ. Етте, етте, егеттәр, бер һүҙҙе эләктереп алаһығыҙ ҙа көндәр буйы бәхәсләшеп тик йөрөйһөгөҙ.

Оҙонғолаҡ. Эй, һин үҙең дә элек шулай инең, Етеҙаяҡ, Азаматтарҙа ҡышлағас ҡына тыйнаҡ булып киттең, торғаны менән аҡыл эйәһе.

Ҡыҫҡағойроҡ. Сөнки, А-а-замат уға китаптар уҡыған!

Оҙонғолаҡ. Бер китап бик тә оҡшаған, шулай бит, Етеҙаяҡ?

Ҡыҫҡағойроҡ. Эй, тороп тор әле, Ҡыҫҡағойроҡ — мин әйтәм: Етеҙаяҡ, Азаматтың ҡуяндар тураһында китабы бармы?

Етеҙаяҡ. Эй, егеттәр, мин һеҙгә был хаҡта йөҙ тапҡыр, юҡ, юҡ, мең тапҡыр һөйләгәнем бар. Хатта, атаһы, яҙыусы Әсхәл Әхмәт-Хужа яҙған китапты ла күрһәттем бит мин һеҙгә. Хушлашҡан саҡта Азамат миңә уны бүләк иткәйне. Әллә нисә тапҡыр ҡараның бит инде. «Азамат менән ҡуян балаһы» тип атала ул. «Кәбеҫтә кеүек ҡатлы-ҡатлы икән был китап» — тигән инең үҙең, Ҡыҫҡағойроҡ. Еҫкәп тә ҡараның.

Ҡыҫҡағойроҡ. (*Оҙонғолаҡҡа*). Ә һин, кишер һүрәте юҡмы икән, тип китапты тартып алдың!.. (*Үрелеп, Оҙонғолаҡтың маңлайына сиртә.*)

Оҙонғолаҡ (*маңлайын ыуа*). Әләй-әләй! Ауырта бит! Ҡара әле, хәтерем юҡ, тигән була, алдаша, был хаҡта онотмағанһың бит... Ҡыҫҡағойроҡ. Нисек онотайым, китаптың биттәре ҡатлы-ҡатлы, мин яратҡан кәбеҫтәгә оҡшаған бит. Үәт, шуға хәтеремдә тора!

Оҙонғолаҡ. Ҡара һин уны, донъялағы бар нәмәне онота, ә китапты онотмаған, һаман иҫләй.

Ҡыҫҡағойроҡ. Кәбеҫтәгә оҡшауынан да бигерәк, китаптың һүрәттәре матур ине шул. Азамат менән Етеҙаяҡ тора унда, үәт, белгең килһә, аңланыңмы? (*Етеҙаяҡҡа.*) Етеҙаяҡ, ә, Етеҙаяҡ, тағы бер генә күрһәт әле шул китабыңды, һыңар күҙ менән

булһа ла ҡарап алайыҡ, сумкаңды алып бирәйемме? (*Ҡайын ботағында эленеп торған сумканы алырға һикрәнләй, буйы етмәй.*) Эй, ҡойроғом ҡыҫҡаҡ булған кеүек, буйым да бәләкәй шул... (*Янында ятҡан таяҡты ала, сумканы төрткөләй.*) Эй, сумка эсендә барыбер китаптан башҡа бер нәмә лә юҡ, һин барыбер Азамат биреп ебәргән күстәнәстәрҙе беҙгә ашатып бөтөрҙөң... (*Ныҕыраҡ төртә.*)

Оҙонғолаҡ (*һикереп килеп тора*). Ҡана үҙем! Кит әле! Буйың етмәгән көйөнә алып маташаһың!

Ҡыҫҡағойроҡ. Үҙем тигәс, үҙем! Кит, ҡамасаулама!

Етеҙаяҡ. Юҡҡа, һатыулашмағыҙ, китапты йыртып ҡуйырһығыҙ. Азаматтың бүләге — минең өсөн ҡиммәтле хазина, ул — кәбеҫтә лә, кишер ҙә түгел, аңланыңмы?

Оҙонғолаҡ. Ҡана, үҙем алып бирәм!

Ҡыҫҡағойроҡ. Үҙем! Етеҙаяҡтан тәүҙә мин һораным! Һинең буйың да барыбер минеке кеүек. Тик ҡолағың ғына оҙон, вәт!

Оҙонғолаҡ. Ә мин бейегерәк һикерәм!

Шаулашалар. Тауышҡа ашығып һайыҫҡан-почтальон инә, башында яулыҡ.

Һайыҫҡан. Ниңә шаулашаһығыҙ, әллә урманда янғын сыҡҡанмы?

Етеҙаяҡ. Ут сығыуын сыҡмаған, егеттәр сумка өсөн талаша. Мин һиңә лә һөйләгәйнәм бит, Һайыҫҡан, унда Азаматтың миңә бүләк иткән китабы ята. Ҡарағыҙ әле (*тегеләргә*), берегеҙ генә алығыҙ, тамашаны бөтөрөгөҙ, ысынлап та, һеҙ ни ҡыланаһығыҙ?..

Һайыҫҡан (*Етеҙаяҡҡа*). Һин уларҙың кем икәнен белмәйһеңме әллә? (*Сабырһыҙлана, үҙе сумка янына килеп етә.*) Ниңә Етеҙаяҡтың әйткәнен тыңламайһығыҙ, йыртаһығыҙ бит сумканы! Эй, егеттәр, ҡарағыҙ әле, әйҙәгеҙ мин һеҙгә кишер менән кәбеҫтә күрһәтәм. Әйҙәгеҙ, әйҙәгеҙ! (*Яулығын сисеп, болғай-болғай йүгерә, түңәрәк яһай, тегеләр — уның артынан. Етеҙаяҡ ипләп кенә тороп, сумкаһын үҙе ала.*) Ана шулай! Ана шулай!

Оҙонғолаҡ. Ҡайҙа кишер?! Мин күрмәйем.

Ҡыҫҡағойроҡ. Ә кәбеҫтә?

Һайыҫҡан. Бына, яулығыма төшөрөлгән, ҡарағыҙ әле, күрмәйһегеҙме ни? Әл-лә-лә! Бына кишер, бына кәбеҫтә!

Ҡыҫҡағойроҡ. Яулыҡҡа төшөрөлгән кәбеҫтәне ашап булмай бит! Ниңә алдашаһың, Һайыҫҡан? Яратмайым үҙеңде!

Оҙонғолаҡ. Мин ысындыр тип уйлағайным. Их, булманы!

Һ а й ы ҫ ҡ а н. Бушҡа үпкәләмәгеҙ, ана, Етеҙаяҡ беҙгә китап бирә, әйҙә, ҡарап алайыҡ.

Е т е ҙ а я ҡ. Һайыҫҡан, һин уртаға ултыр, китаптың биттәрен үҙең генә ас, ипләп кенә һүрәттәрен ҡарағыҙ.

Китап ҡарарға ултыралар, һөйләнәләр.

Ҡ ы ҫ ҡ а ғ о й р о ҡ. Бына, бына, Етеҙаяҡ тора, һөйләшәләр.

Һ а й ы ҫ ҡ а н. Азаматҡа рәхмәт әйтеп тора ул. Үлемдән ҡотҡарғаны, дауалағаны, ашатып-эсергәне өсөн... (*Ҡапыл Һайыҫҡан һикереп тора, китапты тиҙ генә сумкаға һалып ҡуя ла Етеҙаяҡҡа тоттора.*) Ҡарағыҙ әле, ҡарағыҙ, әйтергә бөтөнләй онотҡанмын! (*Яулығын ябына ла матур итеп, шатланып, бер-ике өйөрөлөп ала.*) Шаулашаһығыҙ бит (*теге икәүгә бармаҡ янай*), хәтеремдән бөтөнләй сыҡҡан. Тик иң алда әйтегеҙ әле миңә. Терпештең әсәһе тегеп биргән яулыҡты мин ҡайһы ваҡытта ябынып йөрөйөм? Йә, йә, кемегеҙ әйтә, көн һайын түгел бит инде... Кем тиҙерәк!

О ҙ о н ғ о л а ҡ (*ҡулын һуҙа*). Мин әйтәм!..

Ҡ ы ҫ ҡ а ғ о й р о ҡ (*уның ҡулына һуға*). Иҫемә төштө, иң алда мин әйтәм!

Шаулашалар, Һайыҫҡан тирәләп йүгереп йөрөйҙәр.

Е т е ҙ а я ҡ. Байрам ваҡытында ғына ябынаһың, Һайыҫҡан!

Һ а й ы ҫ ҡ а н. Дөрөҫ әйттең, Етеҙаяҡ! Тыңлағыҙ, барығыҙ ҙа тыңлағыҙ! Бөгөн Азаматтың атаһының, шағир Әсхәл Әхмәт-Хужаның оло байрамы — уның тыуған көнө, үәт! Иртәнсәк үк Азамат Асҡар буйлап, өйҙән өйгә инеп, ҡунаҡ саҡырып йөрөй ине.

Е т е ҙ а я ҡ. Асҡар — ҙур ауыл!.. Ҡунаҡ саҡыра-саҡыра арып бөткәндер инде Азамат... Мин дә янында булһам, был эште тиҙ башҡарыр инек. Үҙен дә һағындым.

Һ а й ы ҫ ҡ а н. Етеҙаяҡ, кеше ҡунаҡҡа барыһын да саҡырмай, туғандарҙы, дуҫтарҙы ғына йыя, аңланыңмы? Ҡайғырма, арымағандыр әле дуҫың, беҙҙең кеүек малайҙар арымай ул.

Е т е ҙ а я ҡ. Йә, йә, һөйлә, Һайыҫҡан, өйҙәге хәлде, башҡалар нимә эшләйҙәр, күңеллеме үҙҙәрендә?

Һ а й ы ҫ ҡ а н. Өс көн инде байрамға әҙерләнәләр, миңә иң оҡшағаны — табынға тәмле-татлы нәмә әҙерләүҙәре. Берәй нәмә бирмәҫтәрме икән тип ҡойма буйында шыҡырлап ҡарайым, ә улар: «Ана, Һайыҫҡан ҡунаҡ саҡыра ла башланы», — тип көлә

лә ҡуялар... Аңламайҙар... Шыҡырлай-шыҡырлай, үҙемдең башым ауыртып бөттө... Яулығымды ябынмағайным шул... Ҡайтып әҙерәк ял итәйем әле, ауыл яғына кискәрәк барырмын: ҡунаҡ кискә килә. Унығын беләм. (*Һайыҫҡан сығып китә.*)

Е т е ҙ а я ҡ. Их, беҙ ҙә шул байрамға барһаҡ ине! Шатланыр ине Азамат. Ул бит йәнлектәрҙе бигерәк ныҡ ярата.

О ҙ о н ғ о л а ҡ. Эйе шул... (*Һағая.*) Шым... Кемдеңдер был яҡҡа килгәне ишетелә. Әллә илай ҙа инде...

Ҡ ы ҫ ҡ а ғ о й р о ҡ. Әйҙә, ҡасайыҡ. Бүребай булып ҡуймаһын. (*Өсөһө лә ҡыуаҡ артына йәшенә.*) Тиҙерәк... Тиҙерәк...

Азамат инә, уның илағаны һиҙелә, тирә-яғына ҡарай ҙа ағас түңгәгенә барып ултыра. Малайҙы Етеҙаяҡ таный. Ҡыуанысынан һикергеләп ала, дуҫтарына нимәлер шыбырлай, улары сәпәкәй итә.

А з а м а т (*ҡайғыра*). Миңә хәҙер нимә эшләргә инде? Кеше күҙенә күренергә оят. Төҙәтә алмаҫлыҡ хата эшләнем. (*Башын баҫып ултыра.*)

Е т е ҙ а я ҡ. Нимә булды икән Азаматҡа? (*Шым ғына.*) Ҡайғырып ултыра бит, башын да күтәрә алмай дуҫҡайым.

О ҙ о н ғ о л а ҡ. Әйҙә, һорайыҡ.

Ҡ ы ҫ ҡ а ғ о й р о ҡ. Ә мин ҡурҡам. Ҡойроғом дерелдәй башланы. Әйҙә, икенсе урынға күсәйек.

Е т е ҙ а я ҡ. Әйҙә, әйҙә, ҡурҡмағыҙ, сығайыҡ. Ул бит минең дуҫым! (*Үҙе иң алдан, башҡалар ҡурҡа-ҡурҡа ғына уның артынан сыға.*) Азамат! Һаумы, дуҫҡайым! Хәлдәрең нисек?

О ҙ о н ғ о л а ҡ, Ҡ ы ҫ ҡ а ғ о й р о ҡ. Эйе... Эйе, хәлең нисек?

А з а м а т (*күтәрелеп ҡарай, ҡыуанысынан да, аптырап та ҡуянын ҡосаҡлап ала*). Етеҙаяҡ... Һаумы, Етеҙаяҡ!.. Дуҫҡайым минең!

Е т е ҙ а я ҡ. Таныш бул, Азамат. Былар минең дуҫтарым — Оҙонғолаҡ менән Ҡыҫҡағойроҡ. (*Азамат улар менән ҡул биреп йә ҡосаҡлап таныша.*) Азамат, тик һин ниңәлер бик бойоҡ күренәһең, берәй хәл булдымы, ҡайғың бармы?

О ҙ о н ғ о л а ҡ. Эй, бушты һөйләмә, Етеҙаяҡ, байрам көндө ниндәй ҡайғы булһын, ти!..

Ҡ ы ҫ ҡ а ғ о й р о ҡ. Әллә.... Үҙенән һорайыҡ.

А з а м а т (*тағы түңгәккә барып ултыра*). Эй, дуҫтарым, байрам көндө лә күңелһеҙ хәлдәр була икән шул. Эх, үҙем генә ғәйепле...

Б ө т ә һ е  б е р г ә. Һөйлә... Һөйлә, Азамат. Бәлки, һиңә беҙ ярҙам итә алырбыҙ.

А з а м а т. Ярҙам итә алмаҫһығыҙ шул, дуҫтарым. (*Көрһөнә.*) Иртәнсәк атайым кискелеккә ҡунаҡ саҡырырға әйткәйне. Мин ни... урамға сыҡҡас... туғандар... таныштар күп булғас... Асҡар ауылы ҙур бит бигерәк... Өйҙәрҙе бутап бөтөрҙөм дә... араларында саҡырылғандары булыр әле, тип барыһына ла әйттем дә бөттөм. (*Ҡуяндар аптырап тора: Оҙонғолаҡ ҡолағын һелкетеп баш сайҡай, Ҡыҫҡағойроҡ ҡурҡып китә, Етеҙаяҡ ауыҙын баҫа.*) Ҡайтып, хәлде һөйләп биргәс, ул тиклем ҡунаҡтарға һыйҙы мин ҡасан әҙерләп бөтәм, тип әсәйем ауырып китте, атайым: «Эште үҙең боҙғанһың — үҙең хәҙер төҙәт!» — тип асыуланды. Ул ғына ла түгел, ҡунаҡтар башҡа ауылдарҙан да, башҡаланан да киләсәк. Бөттөм... Инде нимә эшләргә? (*Башын ныгыраҡ баҫа, сайҡай, иларға етешә, ҡуяндар уны йыуата, ҡапыл Етеҙаяҡ ҡысҡырып ебәрә.*)

Е т е ҙ а я ҡ. Булды! Мин әмәлен таптым, Азамат! Беҙ хәҙер өсөбөҙ, Һайыҫҡанды ла алып, үҙебеҙ йәшәгән Әбйәлил урмандарын йөрөп сығабыҙ! Барыһына ла һинән сәләм әйтербеҙ һәм... (*Иптәштәренә нимәлер шыбырлай*) тиҙ генә янына килеп етербеҙ.

А з а м а т. Нимә эшләһәгеҙ ҙә эшләгеҙ, ә мин ауылға ҡайтмайым, кеше күҙенә күренергә оят.

Е т е ҙ а я ҡ. Барыһы ла һәйбәт буласаҡ, Азамат! Беҙгә ышан. Һин мине ауыр хәлгә ҡалғанда ташламаның бит, мин дә һине ташламайым, көт беҙҙе!..

Өсәүләп һөйләнә-һөйләнә сығып китәләр. Бер аҙ ваҡыт үтә.

А з а м а т. Нимә эшләргә уйлайҙар икән был ҡуяндар? Етмәһә, бөгөн мәктәптә атайымдың юбилейына арналған ҙур концерт була. Унда мин дә ҡатнашам... Бындай хәлгә ҡалғас, иптәштәрем янында нисек йөрөрмөн? Эй-й-й!.. Үҙем генә ғәйепле шул, үҙем генә! (*Тороп китә, сыҙамай йөрөй, ҡапыл шау-шыу, һөйләшкән тауыштар ишетелә.*) Йәнлектәр тауышымы шул? Ҡайҙа булды әле минең ҡуяндарым? Етеҙаяҡ, һеҙ ҡайҙа?

«Беҙ бында!» тигән тауыштар ишетелә. Бер аҙҙан бер төркөм йәнлектәр: Оҙонғойроҡ-тейен, Бүребай-бүре, Тайыштабан-айыу, Һайыҫҡан-почтальон, Төлкөбикә-төлкө, Сибәркәй-болан, ҡуяндар килеп инә. Һәр береһенең ҡулында — аҙыҡ тултырылған һауыт-һаба.

Е т е ҙ а я ҡ. Азамат, ҡайғырма, урман йәнлектәре һиңә ярҙам итергә теләй. Улар барыһы ла миңә изгелек эшләгәнеңде белә. Ҡара әле, быңдай һый менән ҡунаҡтарыңды өс көн, өс төн һыйлаһаң да бөтөрлөк түгел. Әйҙәгеҙ! (*Барыһы ла Азамат алдына аҙыҡ һалынған һауыт алып килеп ултырта.*) Рәхим ит, дуҫҡайым!

Т а й ы ш т а б а н. Мин һиңә бал килтерҙем. Ҡунаҡтарыңа ғына түгел, бер йылға етәсәк ул! (*Азамат һәр береһенә рәхмәт әйтеп, йә ҡулдарын ҡыҫып, йә ҡосаҡлап тора.*)

С и б ә р к ә й. Ә мин һөт аҙығынан һыйҙың төрлөһөн әҙерләнем. Баш ҡала ҡунаҡтары нимә теләй — барыһы ла бар! Әйҙә, һыйланһындар танһыҡ аҙыҡтан.

Б ү р е б а й. Ә мин ит аҙығы алып килдем, өҫтәлеңде тултыр!

Т ө л к ө б и к ә. Ә мин, Азамат, тауыҡ, ҡаҙ ите алып килдем. Тик урламаным, үҙем үҫтерҙем. Ишек алдым тулы ҡош-ҡорт, үәт!

О ҙ о н ғ о й р о ҡ. Ә минән киптерелгән сәтләүек, алма. Ауыҙ итһендәр, бик тәмле улар!

Ҡ у я н д а р. Ә беҙҙән емеш-еләк. Һайыҫҡандан да!

Һ а й ы ҫ ҡ а н. Әйе, әйе, минән дә күстәнәс яҙыусы ағайға!

А з а м а т. Барығыҙға ла меҙ рәхмәт!.. (*Ҡулын ҡаушарып, башын әйә.*) Тик был һыйҙы бер үҙем нисек ауылға алып ҡайтырмын икән?

Е т е ҙ а я ҡ. Ҡайғырма, дуҫҡайым, күстәнәстәрҙе ауылға беҙ үҙебеҙ алып барырбыҙ, рөхсәт итһәгеҙ, балалар концертын да ҡарарбыҙ.

А з а м а т. Рәхмәт һеҙгә, дуҫтарым (*ҡуяндарҙы ҡосаҡлай*), әйҙәгеҙ, барығыҙҙы ла ауылға, атайымдың оло байрамына, ҡунаҡҡа саҡырам! (*Көлә.*) Был юлы атайым шатланыр ғына. Ул да йәнлектәрҙе, балаларҙы бик ярата. Әйҙәгеҙ, дуҫтарым, байрамға! Рәхим итегеҙ!

Нәмәләрен алып, барыһы бергә, шаулаша-көлөшә сығып китәләр. Күңелле музыка.

Ш а р ш а у

# АЛТЫН ТАРАҠ

ҠАТНАШАЛАР:

Әтәс — бик ярҙамсыл, аҡыллы малай
Аҡ тауыҡ, Ҡара тауыҡ, Сыбар тауыҡ — йәш ҡыҙҙар
Терпе — Әсәй
Терпин — Терпенең ҡыҙы
Төйләгән — уҫал, ҡара малай

## БЕРЕНСЕ КҮРЕНЕШ

Матур ғына аҡлан. Йүгерешеп, кәрзиндәрен ҡулдарына тотҡан ҡыҙҙар-тауыҡтар инә. Улар йәйге аҡ, ҡара, сыбар күлдәктә.

Аҡ тауыҡ. Эх, ҡыҙҙар, ниндәй күңелле! Күпме йәшеллек, күпме сәскә аҡланда!

Ҡара тауыҡ. Ә еләктең күплеге! Аяҡ аҫты тулған! Әре, үҙе шул тиклем һутлы!

Сыбар тауыҡ. Еләк, сәскәгә иҫегеҙ китәме? Ҡарағыҙ әле бынау күбәләктәргә! Хоҙайым, ниндәйе генә юҡ: күге, һарыһы, сыбары! Миңә үҙем кеүек сыбары оҡшай.

Аҡ тауыҡ. Ҡыҙҙар, тәбиғәткә ҡараныҡ та иҫебеҙ китте. Ә ҡайҙа һуң әле беҙҙең Әтәсебеҙ? Уға ышанып, әсәйҙәр беҙҙе аҡланға еләккә ебәрҙе, ә уның ҡурҡыуынан йөрәге тәпәйенә төшкән. Ана, саҡ-саҡ килә, бөтөнләй артта ҡалған.

Сыбар тауыҡ (*ҡулын маңлайына ҡуйып, килгән юлға ҡарай*). Беҙҙең алда ҡурҡыуын белдермәҫкә тырышып, сәскә йыйып йөрөгән була.

А ҡ т а у ы ҡ. Сәстәре туҙып киткән булған. Башҡа егеттәрҙеке кеүек ялтырап торған тарағы ла юҡ бит, бахырҙың!

Этәс инә, ул шат, бер ҡосаҡ гөлләмә тотоп алған.

Э т ә с. Ҡыҙҙар, әллә кәрзинегеҙ тулған да инде, бик шат күренәһегеҙ.

А ҡ т а у ы ҡ. Үҙебеҙ сәскә кеүек матур булғас, сәскә йыйып, ваҡыт әрәм итмәнек, еләк йыйҙыҡ шул. (*Тиҙ генә эйелеп, еләк өҙөп кәрзиненә һала, үҙе әхирәттәренә күҙ ҡыҫа.*) Һин бит ауылда иң егәрле ҡыҙҙар икәнебеҙҙе яҡшы беләһең.

С ы б а р т а у ы ҡ. Аҡһылыу дөрөҫ әйтә. Әсәйҙәр беҙгә оҙаҡ йөрөргә ҡушманы. Тары бутҡаһы бешеп сығыуға ҡайтып етегеҙ, тине.

Ҡ а р а тауыҡ. Һин дә тиҙ генә йый, әллә ялбыр сәсең еләктәрҙе күрергә ҡамасаулаймы? Мә, минең тарағымды алып тор, сәсеңде тарай-тарай йөрөрһөң.

Э т ә с. Ҡыҙҙар, көлмәгеҙ әле, хәҙер йыя башлайым. Ә сәскәләрҙе мин бит һеҙгә килтерҙем. (*Ҡыҙҙарға сәскә һуҙа, улары көлә, алмай.*)

А ҡ т а у ы ҡ. Беҙ сәскәләрҙән матурыраҡ, тип әйттем бит инде. Үҙеңә булһын сәскәң. Кәрәкһә, үҙебеҙ йыйырбыҙ.

Э т ә с. Ярай, ҡайтҡанда алырмын да әсәйемә бүләк итермен. Ул бер ваҡытта ла бүләкте кире ҡаҡмай, киреһенсә, шатланып китә. (*Гөлләмәһен ҡәҙерләп кенә ҡайын төбөнә һала.*) Тиҙерәк булайым.

Ситкәрәк китеп, ашығып еләк йыя башлай.

С ы б а р т а у ы ҡ (*ҡыҙҙар янына килеп, еләк йыйыуҙы ла онотоп, ләстит һата*). Ҡарағыҙ әле, бынау сыбар күбәләк янымдан үтеп китте лә яңынан боролдо. Өйөрөлөп-өйөрөлөп, баш өҫтөмдә оҙаҡ йөрөнө. Ниңә тиһегеҙ, сәбәбен белдем: күлдәгемә күҙе төшкән икән тегенең. Үҙенекенә сағыштырып ҡараны ла көнләште. Шунан ары осоп китте. Минекеләй матур күлдәк юҡ шул донъяла.

А ҡ т а у ы ҡ. Күлдәк һөйләйһең. Минең кофтам менән сағыштырғанда, сүп кенә ул! Хатта аҡ сәскәләрҙең күҙе сағыла бит аҡлығына. Хайран ҡалып, баш сайҡап ултыралар.

Ҡ а р а т а у ы ҡ. Ә минең ҡара бәрхәт халатым һуң! Яҡын-тирәлә берәүҙең дә ундай кейеме юҡ! Тимәк, мин батша нәҫеленән!

С ы б а р т а у ы ҡ. Маҡтанма, беҙ ҙә һинән кәм түгел!

А ҡ т а у ы ҡ. Ниңә үҙеңде беҙҙән юғары ҡуяһың? Харап икән, берәү ҡара халат кейгән, имеш!

Икәүләп Ҡара тауыҡҡа барып йәбешәләр, халатын тартҡылайҙар. Әтәс тиҙ генә йүгереп килеп етеп, улар араһына төшә. Тауыҡтар үҙ-ара бәхәсләшкәндәрен онотоп, уға ташлана.

А ҡ т а у ы ҡ. Ниңә беҙгә бәйләнәһең, хәстрүш?

Ҡ а р а т а у ы ҡ. Яҡын килмә, ялбыр баш!

С ы б а р т а у ы ҡ. Күлдәк түгел, сәсеңде тарап йөрөргә тарағың да юҡ бит һинең!.. Меҫкен!

Ә т ә с (*аптырап баш сайҡай, ҡанаттарын ҡаға*). Эй, һеҙҙең арағa ингән мин йүләр! Берәй ваҡыт, ысынлап та, аҡыл ултырырмы икән үҙегеҙгә?

Бошоноп, урман эсенә инеп китә.

А ҡ т а у ы ҡ. Эй, бигерәк үпкәсел икәнһең! Бер һүҙ әйтеп булмай үҙеңә, ҡылт итеп ҡалдың.

С ы б а р т а у ы ҡ. Оялды... Егет башы менән тараҡһыҙ йөрөгәненә ғәрләнде. Ни тиһәң дә, беҙ — гүзәл ҡыҙҙар. Аҫыл заттанбыҙ.

А ҡ т а у ы ҡ. Ана бара юлы! Китә бирһен, ҡурҡаҡ!

С ы б а р т а у ы ҡ. Унһыҙ ҙа күңелле! Егет, имеш! Сәскә бүләк иткән була... Хи-хи-хи!

Ҡ а р а т а у ы ҡ. Әй, ҡуйығыҙ әле шуны! Арытты, әҙерәк ял итеп алайыҡ.

А ҡ т а у ы ҡ. Һауыттарҙы тултыра бирәйек тә...

С ы б а р т а у ы ҡ. Кит, тултырырбыҙ әле. Ана, Әтәстең дә һауыты буп-буш. Ялҡау. Хи-хи-хи...

Көләшә-көләшә ҡайын төбөнә ял итергә ултыралар.

## ИКЕНСЕ КҮРЕНЕШ

Урман. Алғы планда Терпенең матур өйө. Артҡы планда — ҡалҡыулыҡ. Әтәс менән кемдеңдер һөйләшкән тауышы ишетелә. Ул — Терпе балаһы Терпин. Терпин илай, аҙашҡан.

Ә т ә с т а у ы ш ы. Ниңә илайһың, бәләкәс, әллә үҙеңде берәйһе йәберләнеме?

Т е р п и н т а у ы ш ы. Мин... Мин аҙаштым, ҡайҙа минең әсәйем?.. Ә-сә-кә-йем!.. Ҡайҙа һин?..

Ә т ә с т а у ы ш ы. Ҡурҡма, бәләкәс, мин һиңә ярҙам итермен. Тауышым көслө, тирә-яҡҡа тиҙ тарала. Бына, тыңла әле, ки-ке-ри-күк! Ки-ке-ри-күк!.. Илама, йәме, хәҙер әсәйең йүгереп килеп етер. Эйе, ки-ке-ри-күк!..

Т е р п и н т а у ы ш ы. Тауышың көслө булһа ла, әсәйем барыбер ишетмәне.

Ә т ә с т а у ы ш ы. Әйҙә, анау ҡалҡыулыҡҡа менәйек!.. Түбәнән тауыш йыраҡҡа ишетелә. (*Әтәстең башы күренә.*) Ки-ке-ри-күк!

Т е р п и н т а у ы ш ы. Тауышың ниндәй матур, Әтәс ағай, тик әсәйем генә һаман ишетмәй.

Ә т ә с (*ҡалҡыулыҡҡа килеп баҫа*). Ки-ке-ри-күк! Ниндәй Терпе Әсә үҙенең балаһын юғалтты. Ки-ке-ри-күк!

Т е р п е т а у ы ш ы. Ҡайҙа минең бәләкәсем? Ҡайҙа минең йомороҡайым? (*Алыҫтан тауыш ишетелә.*)

Т е р п и н (*ҡалҡыулыҡҡа менә*). Әсәй, беҙ бында!.. (*Өйҙәрен күреп ҡала.*) Әтәс ағай, ҡара әле, ана, өйөбөҙ ултыра! (*Әсәһенә ҡаршы йүгерә.*)

Т е р п е (*йүгереп килеп балаһын ҡосаҡлай*). Эй, балаҡайым, күпме эҙләнем һине. Юғалғанһыңдыр тип, ҡурҡып бөттөм.

Т е р п и н. Әсәй, миңә Әтәс ағай ярҙам итте. Ул янымда булғас, тамсы ла ҡурҡманым.

Т е р п е. Рәхмәт һиңә, Әтәс! Әгәр тауышыңды ишетмәһәм, Терпинде күпме эҙләр, әллә ҡайҙарға сығып китер инем. Әйҙә, өйгә инәйек, ҡунаҡ булып ҡайт. Еләк менән рәхәтләнеп сәй эсәйек. Рәхим ит!

Т е р п и н. Әйҙә, Әтәс ағай, мин еләкте бик яратам.

Ә т ә с. Көн дә эҫе... Тамаҡ кипте, сәйҙән баш тартып булмаҫ.

Т е р п е. Әтәс, һин нисек беҙҙең яҡҡа килеп сыҡтың? Үҙең аҙашманыңмы?

Ә т ә с. Юҡ, юҡ, Терпе апай. Хәҙер барыһын да һөйләрмен.

Һөйләшә-һөйләшә өйгә инәләр. Дәртле музыка тауышы ишетелә. Тәҙрә аша сәй эскәндәре күренә. Күңелле гөрләшәләр.

Ә т ә с. Терпе апай, мин ҡайтайым инде, ҡыҙҙарға берәй хәл булып ҡуймаһын. Аҡланда үҙҙәре генә ҡалғайны.

Т е р п е. Үпкәләтһәләр ҙә, яратаһың икән үҙҙәрен.

Ә т ә с. Эй, шул тараҡ өсөн генә инде. Минең дә берәй ваҡыт тарағым булыр әле. Әсәйем шулай, ти. Тик әҙерәк көтөргә кәрәк инде. Тауышым ҡалынайғанды, тим.

Терпе. Һин миңә бик оҡшаның, Этәс улым. Ҡыҙым, мөйөштә торған тылсымлы ҡумтаны алып кил әле. Ярҙамы өсөн ҡунаҡҡа алтын тараҡ бүләк итәйек.

Өй эсе яҡтырып китә, бер аҙҙан башында алтын тарағы ялтырап торған Этәс менән Терпе-әсә, Терпин өйҙән сығалар.

Терпин. Әсәй, ҡара әле, Этәс ағайға алтын тарағы нindәй килешеп тора.

Терпе. Ниңә килешмәһен? Этәс ағайың кеүек батыр, ярҙамсыл булһаң, һин дә аҫыл бүләккә эйә булырһың, ҡыҙым.

Этәс. Сәйегеҙ, бүләгегеҙ өсөн үҙегеҙгә рәхмәт. Ғүмергә онотмам был көндө.

Терпе. Этәс улым, урманға килгән һайын беҙгә инеп кит, онотма. Һәр саҡ ҡәҙерле ҡунағыбыҙ булырһың. Һау бул, иҫән йөрө.

Терпин. Вәғәҙә бир, Этәс ағай, беҙгә тағы килерһең бит?!

Этәс (*көлә-көлә башын эйә*). Һис шикһеҙ, Терпин. Һау бул! (*Сыға, алыҫтан уның ҡысҡырған тауышы ишетелә.*)

Терпе. Алтын тарағы уны һәр саҡ бәләнән ҡотҡарыр, ярҙам итер. Хәйер, ул үҙе лә батыр егет. Аҡыллы ла, бирешмәҫ.

Терпин. Һау бул, Этәс ағай! (*Ҡулын болғай.*) Һау бул!

## ӨСӨНСӨ КҮРЕНЕШ

Ҡайын аҫтында ҡыҙҙар ултыра. Ҡара тауыҡ йоҡомһораған. Аҡ тауыҡ менән Сыбар тауыҡ хәбәр һата.

Сыбар тауыҡ. Ҡара әле, беҙҙең һаҡсы әллә аҙашып ҡуйҙы инде, күптәнән бирле тауышы сыҡмай. Ҡайтыр ваҡыт етте, ә кәрзиненең төбө лә күмелмәгән.

Аҡ тауыҡ. Беләһеңме, әхирәт, әйҙә уны ҡыҙыҡ итәйек. Бер үҙен урманда ҡалдырайыҡ та китәйек.

Сыбар тауыҡ. Әйҙә, шулай булһын! (*Сәпәкәй итә.*) Егет башы менән урманда аҙашҡан, тип ауылдағы башҡа ҡыҙҙар көлһөн әйҙә.

Аҡ тауыҡ. Әй ҡыҙыҡ буласаҡ!

Шул саҡ ботаҡтар һынған, яман итеп ҡысҡырған тауыштар ишетелә.

Ҡара тауыҡ. Ниндәй тауыш? Йоҡлап ҡына бара инем.

Аҡ тауыҡ. Ҡурҡам! (*Тирә-яғына ҡарай.*)

Сыбар тауыҡ. Тиҙерәк ҡасайыҡ.

Ҡ а р а  т а у ы ҡ (*ҡысҡыра*). Әтәс ҡайҙа һуң? Һаман күренмәйме? Ҡайҙа ҡасып йөрөй ул?

Шул саҡ ҡурҡыныс ҡиәфәттә ҡанаттарын ҡаға-ҡаға Төйләгән инә.

Т ө й л ә г ә н. Бына ҡайҙа йөрөй икән һылыу ҡыҙҙар! Күптән һағалап йөрөй инем. Әтәсегеҙҙең киткәнен генә аңдып торҙом! Хәҙер!

Ҡ а р а  т а у ы ҡ. Теймә беҙгә! Мин — батша нәҫеленән!

Т ө й л ә г ә н (*ҡыҙҙарҙы баҫтыра башлай*). Миңә нәҫел кәрәкмәй, һеҙ кәрәк! Ҡол итәсәкмен үҙегеҙҙе! Йүгереп кенә йөрөрһөгөҙ алдымда. Ни ҡушһам, шуны эшләрһегеҙ! У... У... У!.. (*Ике ҡыҙҙы бер юлы тота ла ҡысҡыртып алып китә башлай.*)

А ҡ  т а у ы ҡ. Әтәс, һин ҡайҙа, ниңә беҙҙе ташлап киттең?

Ҡ а р а  т а у ы ҡ. Әтәс, ишетәһеңме, беҙ Төйләгән ҡулынан һәләк булабыҙ! Ҡотҡар, зинһар!

С ы б а р  т а у ы ҡ (*арыбире йүгерә*). Әтәскәй! Һөйөклө, батыр Әтәскәй! Ташлама беҙҙе!

Алыҫтан Әтәстең тауышы ишетелә.

Т ө й л ә г ә н (*алан-йолан ҡарана, ләкин ҡыҙҙарҙы ысҡындырмай*). Әтәстән генә ҡурҡып тороп булмаҫ инде! Минең тырнаҡтарым уныҡынан үткер, көсөм дә етерлек!

Ҡыҙҙарҙы алып сыға башлай, улары сәбәләнә. Сыбар тауыҡ ни эшләргә белмәй, улар янында урала, ҡурҡа-ҡурҡа ғына Төйләгәнгә һуҡҡан була.

Ә т ә с (*йүгереп килеп инә*). Ебәр ҡыҙҙарҙы! Мин бар саҡта береүһен дә ҡол итә алмаҫһың.

Т ө й л ә г ә н. Һиңә бирешеп торорға ни... Кил, көрәш, шәп булһаң! (*Әтәскә ҡарай ҙа үҙе ҡыҙҙарҙы ҡулынан ысҡындыра.*) Был нимә? Тарағыңа күҙем сағыла. А-а-а-а! Көсөм кәмегәнен тоям. Тырнаҡтарым да үҙенән-үҙе яҙыла... (*Ҡыҙҙар ҡурҡып ҡайын артына йәшенә.*) Шулай ҙа көрәшәм! (*Әтәс менән әҙерәк көрәшеп ала, еңелә, артҡа сигенә.*)

Ә т ә с. Һыпырт! Башҡа эҙең булмаһын был яҡта! Ҡара һин уны, ҡыҙҙар кәрәк булған уға! Бер ваҡытта ла яуыз уйың тормошҡа ашмаясаҡ. Бар, бар, юлыңда бул!

Т ө й л ә г ә н. Мин барыбер киләсәкмен ҡыҙҙар артынан! Ғүмер буйы һаҡлап ултыра алмаҫһың!

Ә т ә с. Ҡарҡылдама! Был яҡҡа юлды онот! (*Төйләгәнде ҡыуып сығарып ебәрә, бая ултыртып киткән буш кәрзиненә күҙе төшә.*) Еләк тә йыя алманым, әсәй асыуланмаҫмы икән?

Сәстәрен рәтләй-рәтләй ҡайын артынан ҡыҙҙар сыға. Этәстең кәрзинен алып, еләк йыя башлайҙар.

А ҡ т а у ы ҡ. Әтәс, мең рәхмәт һиңә, үлемдән ҡотҡарҙың.

Ҡ а р а т а у ы ҡ. Бынан һуң һинән бер аҙым да ҡалмабыҙ. Көслө егет икәнһең!

С ы б а р т а у ы ҡ. Беҙҙе ҡотҡарғаныңды бөтә ауыл беләсәк! Батыр Әтәс һин!

Һөйләнә-һөйләнә башынан һыйпап алалар.

А ҡ т а у ы ҡ. Бая сәскәңде алмаған өсөн ғәфү ит, Әтәскәй... (*Ҡайын төбөнән сәскәне барып ала.*)

Ҡ а р а т а у ы ҡ. Беҙ башҡа маҡтанмабыҙ.

С ы б а р т а у ы ҡ. Үҙеңә ауыр һүҙ әйтмәбеҙ.

Ө с ө һ ө б е р г ә. Ғәфү ит беҙҙе, Әтәскәй!

Ә т ә с. Ярай, ярай, ҡыҙҙар, ғәфү итәм.

Ҡыҙҙар ҡыуанып китә, еләк тулы кәрзинде Әтәскә һуҙалар.

А ҡ т а у ы ҡ. Бына, «һә» тигәнсе, һиңә лә еләк йыйҙыҡ.

Ҡ а р а т а у ы ҡ. Беҙ ялҡау түгел, Әтәскәй. Тик әҙерәк бәхәсләшергә яратабыҙ.

Ә т ә с (*көлә*). Беләм, беләм, ҡыҙҙар... Һауыттар ҙа тулды, әсәйҙәр ҙә көтә торғандыр, әйҙәгеҙ, ҡайтайыҡ.

С ы б а р т а у ы ҡ. Әтәскәй, кем бирҙе һиңә был алтын тараҡты? Ниндәй матур, ҡояштың яуын алып тора!

А ҡ т а у ы ҡ. Тирә-яҡта, донъяла юҡтыр ундай тараҡ!

Ҡ а р а т а у ы ҡ. Башҡа егеттәр көнләшер инде!

Ә т ә с (*көлә, шелтәле тауыш менән.*) Ҡыҙ-ҙар!.. Баш әйләнә, етте! Ә алтын тараҡ тураһында мин һеҙгә юлда һөйләрмен. Әйҙәгеҙ!

Әтәс алдан сыға, ҡыҙҙар уның артынан эйәрә лә кире борола.

Ҡ ы ҙ ҙ а р (*бергә*). Бына ниндәй ул беҙҙең Әтәс! Шуға ла үҙен бик-бик яратабыҙ!

Көлөшә-көлөшә сығып китәләр.

# ҠАЙНАР ҠОЯШ АҪТЫНДА

Ҡ А Т Н А Ш А Л А Р:

Д ө й ә
Й ә й ғ о р т ү ш
Ҡ а р а б а ш
Й ы л а н

Япраҡһыҙ ғына тәпәш ағас аҫтында сүл йыланы ята. Тирә-яҡта ҡомлоҡ. Ауыр тын алып, хәлһеҙләнгән Дөйә килеп инә.

Д ө й ә. Арыным, һыу эсәһе килә. Тирә-яҡта күл дә, йылға ла, шишмә лә юҡ. Хәҙер йығылам. Ял итергә ятһам, тора алмам...

Й ы л а н. Шул кәрәк һиңә. (*Ыҫылдай.*) Ашамай-эсмәй сүллектә аҙна буйы йөрөй алам, тип маҡтана инең. Йәнәһе, тырыша, кешеләргә хеҙмәт итә. Тфү!

Д ө й ә. Кешегә һүҙ тейҙермә, Йылан. Килер ваҡыт, ошо сүллек тә алма-хөрмә баҡсаһына әйләнер. Кешенең ҡулы етмеш төрлө һөнәргә эйә. Көслө, аҡыллы ул Кеше! Ул тәбиғәтте тағы ла матурлаясаҡ.

Й ы л а н (*ыҫылдап көлә*). Кеше яуыз ул, ышанма! Хатта балаһына тиклем ағастарҙы һындыра, күбәләкте илата, ҡоштарҙы йәберһетә, йылғаны бысрата, тирә-яҡ матурлығын туҙҙыра, емерә. Мин беләм Кешене!

Д ө й ә. Юҡ-юҡ, балалар тәбиғәтте һаҡлай. Һин дөрөҫ һөйләмәйһең, Йылан. Һыу... Һыу! Һыу эсәһе килә. Ярҙам итегеҙ. Исмаһам, бер генә минутҡа ямғыр яуһасы... Һыу... Йығылам...

үҙең ҡайнар ҡояш аҫтында һәләк булырһың. Ос иптәшең артынан...

Й ә й ғ о р т ү ш. Эй, ҡояш байығансы беҙ йылға буйына барып та етәбеҙ. Бына, күрерһең. Ана, ана, үҙең дә шәберәк атлай башланың бит...

Й ы л а н. Мин бер ваҡытта ла эҫегә бирешмәйем. Ә Дөйә, ысынлап та, барып етерме икән? Дөйә ҡайһылай ҡошҡа ышанды. Ахмаҡ! Тороп торогоҙ, һеҙгә аяғығыҙҙы һуҙырға ла күп ҡалманы. Ҡайнар ҡояш аҫтында тере ҡалыуы икеле...

Дөйә менән ҡошсоҡ атлаған һайын тәбиғәт күренештәре үҙгәрә бара.

Й ә й ғ о р т ү ш. Беләһеңме, Дөйә, беҙ тиҙҙән Тыуған илебеҙгә осасаҡбыҙ. Унда яҙ килә, аҡ ҡайындар шаулап япраҡ ярасаҡ, бик матур сәскәләр — умырзаялар баш ҡалҡытасаҡ. Ундай сәскәләр башҡа бер ерҙә лә юҡ.

Д ө й ә. Һинең Тыуған илең бында түгелме һуң?

Й ә й ғ о р т ү ш. Юҡ, беҙҙең Тыуған илебеҙ Урал тигән тауҙарҙа. Әле унда һыуыҡ, бәлки, ҡар ҙа яталыр...

Д ө й ә. Нимә ул ҡар?

Й ә й ғ о р т ү ш. Ҡар ул һин эшләгән баҫыуҙағы мамыҡ кеүек: үҙе аҡ, үҙе йомшаҡ, үҙе еңел, тик шул тиклем һыуыҡ.

Д ө й ә. Ҡыҙыҡ... Һыу... Һыу эсәһем килә.

Й ы л а н (*ыҫылдап улар артынан эйәрә*). Әһ-һә... Тиҙҙән бының башы әйләнә башлаясаҡ, унан һуң ҡолаясаҡ.

Й ә й ғ о р т ү ш. Беләһеңме, Дөйә, беҙ Тыуған илгә барып еткәс тә ҙур байрам ойоштораbыҙ. Һөйөклө илгә имен-һау килеп еткәнгә шатланабыҙ, йәштәрҙең күңелле туйҙарын үткәрәбеҙ, оя ҡорабыҙ.

Д ө й ә. Арыным, ҡошсоҡ... Бер үҙең генә кит...

Й ә й ғ о р т ү ш. Ә һин әҙерәк ял ит, яйыраҡ атла... Мин һиңә үҙемдең бейеүемде күрһәтәйем. (*Алға бара-бара ҡошсоҡ матур хәрәкәттәр яһап бейей. Үҙенең арығанлығы ла һиҙелә. Көй дәртле.*)

Й ы л а н. Үҙе ниндәй арыған, шулай булһа ла көлә-көлә һикрәндәгән була. Туҡта, кискә тиклем нимә эшләрһегеҙ икән?

Й ә й ғ о р т ү ш. Беләһеңме, Дөйә, ҡояш байыуға ла күп ҡалманы, тимәк, беҙ йылғаға яҡынлашып киләбеҙ. Хәҙер мин тиҙ генә юғарыға күтәрелеп киләйем. Йәшел урманға тиклем тағы күпме барырбыҙ икән? Ә һин яй ғына атлай тор. (*Осоп китә.*)

Й ы л а н. Уйланым да инде, берәй хәйләһен табып, барыбер

ташлап китәсәк, тип. Бына, күрҙеңме, төкөрҙө ул һиңә, һүҙ менән бутҡа бешерергә, маҡтанырға барыһы ла ярата.

Д ө й ә. Ул мине ташламаны, ышанмайым мин һиңә, Йылан.

Й ы л а н. Дөрөҫөн әйткәндә, һәр кемгә үҙ ғүмере ҡәҙерле. Ниңә әле ул һинең менән бергә ҡайнар ҡояш аҫтында янырға тейеш? Эҫе! Ана, аяҡтарың да һине бөтөнләй тыңламай башланы, гөбөргәйел кеүек шыуышаһың. Былай булһа, бер аҙҙан йығыласаҡһың!..

Ҡошсоҡтоң һайраған тауышы ишетелә.

Д ө й ә (*шатланып китә*). Ҡошсоҡ алдамаған, ана, осоп килә.

Й ә й ғ о р т у ш. Һөйөнсө, Дөйә, һөйөнсө! (*Шатланып килеп инә.*) Бейектән-бейектән мин йәшел урман ситен күрҙем. Ә урман араһынан ҙур йылға ағып ята. Шарлауығы ла бар! Тиҙҙән етәбеҙ, әйҙә, атлайыҡ! Барып еткәс тә һыуҙа ҡойонорбоҙ. Бына бит, килеп еттек.

Д ө й ә (*күңелләнеп, ҡошсоҡтоң артынан атлай*). Атлайым...

Й ы л а н. Бушҡа тырышаһың, бушҡа ынтылаһың, Дөйә. Күҙҙәреңә инде күк дүңгәләктәр күренә башланы, башың әйләнә... Аяғыңа көсөң етмәй. Һыу... Һыу эсәһең килә...

Ваҡ япраҡлы ағастар күренә башлай, гөрөлдәп ағып төшкән шарлауыҡ тауышы ишетелә.

Й ы л а н. Ҡара һин уны, үҙенә күрә түгел был ҡошсоҡ, барыбер Дөйәне урманға алып килеп еткерҙе. Ҡыуманы, һөйрәмәне, барыбер еткерҙе. Нисек килеп сыҡты әле ул?

Й ә й ғ о р т у ш. Хәҙер бөтөнләй яҡын ҡалды, түҙ инде.

Й ы л а н (*Дөйәгә*). Ғүмерең бар икән әле, бер юлға үлмәй ҡалдың...

Д ө й ә. Ә һин донъя тик яуызлыҡтан ғына тора, тип ыҫылдағайның. Юҡ, ер йөҙөндә изгелек барыбер күберәк. Мин дә кеше балаһының тәбиғәтте һаҡлауына ышанам.

Й ы л а н. Ышан, ышан... Һауа еүешләнә, миңә ҡомлоҡҡа тайырға ваҡыт. Икенсе минең хужалыҡтан алыҫ йөрө, һәр саҡ янында йәйғор түшле ҡоштар булмаҫ. Тирә-яҡта ҡара башлылары ла бар... Ҡара, ҡара, нимә булды миңә. Дөйәгә кәңәш бирә башланым... (*Кирегә шыуыша.*)

Й ә й ғ о р т у ш. Бына, урманға килеп тә еттек. Һау бул, Дөйә! Хуш бул!

Д ө й ә. Туҡта, ҡошсоҡ! Туҡта, беҙ тағы осрашырбыҙмы?

Й ә й ғ о р т ү ш (*алыҫтан тауышы ишетелә*). Белмәйем. Миңә Тыуған яҡҡа, Уралыма, осорға ваҡыт!.. Шарлауыҡ ташында иптәштәрем көтә мине. Хуш! Хуш... Тыуған илем көтә мине. Хуш!

Д ө й ә. Рәхмәт һиңә, ҡошсоҡ! Бәләкәй генә кәүҙәндә мине үлемдән тартып алырлыҡ ниндәй генә көс булды икән? Ниндәй көс бар һиндә, Йәйғортүш, әйтсе...

Дөйә атлай, шарлауыҡ тауышы яҡыная, һыу тамсылары сәсрәй.

# ШҮЛГӘН БАТШАЛА ҠУНАҠТА

ҠАТНАШАЛАР:

Шүлгән батша — күлдәр, йылғалар батшаһы
Нәркәс — Шүлгән батшаның ҡыҙы
Әбйәлил — балаларҙы йөҙөргә өйрәтеүсе тренер
Малайҙар, ҡыҙҙар
Шайтан малайҙары
Алтын сабаҡ, балыҡ-ҡыҙҙар

Матур итеп биҙәлгән бассейн. Ул Шүлгән батша һарайын — мәмерйәне хәтерләтә. Ишек төбөндә ҙур«таш». Унда Шүлгән батша мәмерйәһе тураһында мәғлүмәттәр яҙылған. Бер яҡ стенала ҙур, сәйер әҙҙәр өҫкә менеп китә. Ул — «аждаһа» эҙе. Икенсе яҡ стенала — ат, мамонт һүрәте. Улар матур ҡыҙғылт буяу менән төшөрөлгән. Ә бер яҡта сит-ят фамилияларҙан теҙелгән ҡара яҙыуҙар һыҙылған. Шүлгән батша инә. Ул өс асалы һәнәк тотҡан. Һәнәк осонда — айыу, бүре, арыҫлан һүрәтле баштар. Батша тәхете сәскә-гөлдәре булған ылымыҡ, ҡамыш, үрмәле сырмалсыҡтар, ялтыр балыҡ тәңкәләре менән биҙәлгән.

Шүлгән батша. Бөгөн мин Ер балаларын — Урал ҡустымдың тоҡомдарын һыу байрамына ҡунаҡҡа саҡырҙым. Ҡыҙым Нәркәс үҙенең яратҡан бүлмәһен бик матур итеп биҙәгән. Тулҡынлана ул. Урал ағаһының тоҡомон бик ярата. Урал ҡустым... Урал батыр... (*Тәхеткә барып ултыра.*) Олатайым Нух, улы Йәнбирҙе, килене Йәнбикә менән Ер шарының берҙән-бер ҡоро биләмәһенә килеп туҡтағас, беҙ тыуғанбыҙ. Бергә уйнап, һөйкөмлө балалар булып үҫтек. Урал ҡустым батыр ғына түгел, атай менән әсәйҙең әйткәнен тыңлап үҫкән аҡыллы малай ҙа ине. Ә минең, ағай булғанға күрә, тиҙерәк ҙурайғым, атай кеүек һунарға йөрөйһөм килде. Бер көндө сихырсы Юха миңә, тиҙ буйға

етәсәкһең, батыр буласаҡһың, тип йыртҡыс ҡанын эсерҙе... Һәм мин насар затҡа әйләндем. Бала саҡтан ниндәй малайҙың тиҙерәк үҫәһе, батыр булғыһы килмәй икән һуң? Һәр саҡ ололарҙың һүҙенә ҡолаҡ һалырға кәрәк икән... Атай бит турһыҡтағы ҡанды эсмә тине. Ҡайҙан беләйем алданасағымды? Хәҙер үкенәм. Ә Урал ҡустым аҡыллы ине. (*Урынынан тора.*) Ер һурығып, халҡына һыу етмәй башлағас, өс улын Башҡортостан буйлап сығарып ебәрҙе. Иҙел, Яйыҡ, Һаҡмар батырҙар артынан мул һыулы йылғалар аҡты. Ләкин илгә тағы афәт килде. Бар тереклекте үлем — Әжәл батша ҡыра башланы. Мин дә, Урал ҡустым да үлемһеҙ инек. Сөнки беҙ Тереһыу шишмәһенең һыуын эстек. Тыуған төйәгенең һәләк булыуына сыҙай алмай, Урал үҙенә тигән тереһыуҙың бер тамсыһын да ҡалдырмай тирә-яғына, халҡына бөрктө. Уларҙы үлемһеҙ итте. Ҡустымдың ҡәберенән халыҡ өҙөлмәне. Услап-услап тупраҡ һала торғас, күккә олғашҡан тауҙар хасил булды. Халыҡ уны яратып, Урал тауҙары тип атаны һәм мәңгелеккә ошонда йәнтөйәген һайланы. Күпме быуаттар үтте, күпме һыуҙар аҡты. Мин һаман да үлемһеҙ. Күлдәр, йылғалар батшаһы. Урал ҡустым үлгән саҡта тыуған төйәкте, тәбиғәтте күҙ ҡараһы кеүек һаҡларға васыят әйтте. Быуындар бәйләнешен өҙмәҫкә ҡушты ул. Мин әле йә айыу, бүре, йә арыҫлан һүрәтенә инеп, ер өҫтөндә йөрөп инәм. Һауаның бысраныуы, һыуҙарҙың эсергә яраҡһыҙ булыуы борсой мине. Барыбыҙ ҙа ағыуланабыҙ бит! Бөгөн мин Урал батырҙың тоҡомон һыу байрамына саҡырҙым, әйтер һүҙем бар уларға. (*Кире ултыра.*) Эйе, һүҙем бар.

Н ә р к ә с (*инә*). Атай, һин бик борсоулы күренәһең. Тыныслан, тиҙҙән ҡунаҡтар ҙа килеп етер... Байрамса һаман кейенмәгәнһең дә.

Ш ү л г ә н б а т ш а. Уйландыра, ҡыҙым, уйландыра. Етмәһә, тулҡынланам... Ә һин балаларға йомаҡ әҙерләнеңме?

Н ә р к ә с. Эйе, атай. Атай, әгәр яуап бирә алмаһалар... Беҙ уларҙы мәмерйәгә индермәйбеҙме? Бик йәл буласаҡ бит.

Ш ү л г ә н б а т ш а. Борсолма, ҡыҙым. Урал ағайың бик аҡыллы булды, моғайын, тоҡомо зирәктер. Ярай, мин әҙерәк ял итеп алайым. Кейенермен дә... Балалар килһә — әйтерһең. (*Инеп китә.*)

Н ә р к ә с (*шат, бассейн тирәләп, еңел музыка көйөнә бейеп тә ала*). Тиҙҙән балалар киләсәк, беҙҙә байрам буласаҡ!

Уның һүҙҙәрен әле генә килеп ингән шайтан малайҙары тыңлап тора.

Туҡта, Алтын сабаҡҡа ла инеп сығайым әле, байрамға әҙерләнеп бөттөләрме икән? Ҡыҙҙарын бейетәм, тигән ине, күлдәктәре әҙерме икән?

Нәркәс инеп китә, тирә-яғына ҡарана-ҡарана шайтан малайҙары һөйләшә.

1-се шайтан. Ниндәй байрам ул, ниңә беҙ бер нәмә лә белмәйбеҙ, ниңә беҙҙән йәшерәләр икән?

2-се шайтан. Ҡара әле, кеше балалары килә, тиме? Ух, бик насар, хәйләкәр улар! Хәтерләйһеңме, Әбйәлил тигән бер егет Яҡтыгүлегеҙҙе арҡан менән күккә аҫып ҡуям, тип ҡурҡытып, Аҡбуҙат тоҡомонан булған бер айғырҙы алып киткәйне. Алдашҡан, күлгә уның нисек көсө етһен, ти. Шүлгән батша ла күтәрә алмай уны!

1-се шайтан (*бармағын иренenә ҡуя*). Тс-с... Ул һине генә алдаманы, мине лә кәкре ҡайынға терәтте... Йөҙйәшәр олатайы менән көрәштереп, яңы тыуған ҡустыһы менән сабыштырып (*күкрәгенә төртә*), һин еңелдең, тине лә, ярыш шарты буйынса бер кәпәс алтын һораны. Еңелгәс, риза булмай ҡайҙа бараһың? Ә кәпәсе! Тулмай ҙа тулмай! Күлдән алтын ташыйым да алтын ташыйым. Шүлгән батша һиҙеп ҡалмаһын, тип, үҙем ҡурҡам шул тиклем. Урал илендәге бар күлгә лә ул хужа бит, ҡайҙа нимә эшләнгәнен белеп тора.

2-се шайтан. Һе, ә ниңә кәпәс тулмаған һуң? Төбө тишелмәгәндер бит!..

1-се шайтан. Тап өҫтөнә баҫтың! Төбө тишелгән шул! Ғүмере (*башына һуғып ала*) башыңа ла килмәҫ ул хәйлә!

2-се шайтан. Йә, йә, беҙ белмәгән ниндәй хәйлә бар донъяла?

1-се шайтан. Соҡор ҡаҙған да, кәпәсенең төбөн тишеп, шунда тотҡан да торған. Үәт! Ә мин, алйот, ташы ла ташы! Ярай әле, атай һиҙеп ҡалды, юғиһә Шүлгән батша кәрәкте бирә ине!

2-се шайтан. Шулай булғас, беҙгә балалар менән көрәшергә кәрәк.

1-се шайтан. Нисек?

2-се шайтан (*асыулы*). Нисек? Нисек? Нимә эшләһәләр ҙә ҡаршы торабыҙ! Аңланыңмы?

1-се шайтан. Аңланым, баш бар икән үҙеңдә! Туҡта, ана,

йырлаған тауыш ишетелә. Моғайын, балалар киләләрҙер! Әйҙә, шаулайыҡ, ҡурҡып ҡайтып китһендәр!

Һөйләнә-һөйләнә бассейен эсенә төшәләр ҙә, һыу шапылдатып, ҡысҡыра башлайҙар. Тауышҡа йүгереп, Нәркәс сыға.

Н ә р к ә с. Һеҙ нимә, аҡылдан яҙҙығыҙмы әллә? Туҡтағыҙ, балалар етеп килә бит, ҡурҡытмағыҙ!

1-с е ш а й т а н Йөрөмәһендәр! Йөрөмәһендәр!

2-с е ш а й т а н. Йөрөмәһендәр! Экскурсия, тиҙәр ҙә йәй буйы тынғылыҡ бирмәйҙәр! Шүлгән батша үҙе быға нисек түҙәлер?

Н ә р к ә с. Кешелек тарихын белергә, тыуған яғы менән яҡындан танышырға теләгән балаларҙы атайым борсомай ул, һарайҙарын бысраҡандарҙы ғына яратмай. Сығығыҙ һыуҙан, әйҙә, балаларҙы ҡаршы алайыҡ. Тиҙерәк булығыҙ!

Тегеләр теләр-теләмәҫ кенә һыуҙан сыға, тышта балаларҙың йырлап килеп туҡтаған тауышы ишетелә.

1-с е б а л а. Әбйәлил ағай, беҙ мәмерйәгә килеп еттекме?

Ә б й ә л и л. Эйе, балалар, беҙ мәмерйәгә килеп еттек! Донъялағы иң матур мәмерйәнең алдында торабыҙ беҙ. Йә, исемен миңә кем әйтә?

2-с е б а л а. Мин! Мин! Шүлгәнташ мәмерйәһе был!

Ә б й ә л и л. Дөрөҫ әйттең, Шүлгән батша һарайының алдында торабыҙ беҙ. Балалар, ҡарағыҙ әле, бында бер таш та ята! Нимәлер яҙылған, уҡыйыҡ әле. Шүлгән мәмерйәһенең оҙонлоғо 6 саҡрым, 4 ҡатлы, 15 залы бар... (*Балаларҙың аптыраған тауышы ишетелә.*) Бынау уҡ мәмерйәгә күрһәтә. Мөмкинме, хужалар!

Шайтандар сыҙамай, бокс хәрәкәте яһайҙар, һикерәләр. Нәркәс балаларҙы ҡаршы ала.

Н ә р к ә с. Һаумыһығыҙ, балалар! (*Яуап.*) Мине атайым, Шүлгән батша, һеҙҙе ҡаршы алырға ҡушты. Инегеҙ, инегеҙ!

Күңелле марш көйө аҫтында балалар залға инә. Тигеҙ атлап, матур итеп стена буйына торалар ҙа, йөҙө менән Нәркәскә ҡарай боролалар.

Н ә р к ә с. Бына ниндәй икәнһегеҙ һеҙ — Урал батыр тоҡомо! (*Һоҡлана.*) Балалар, атайымдың һеҙгә бер шарты бар.

Ә б й ә л и л. Ниндәй шарт, Нәркәс һылыу?

Н ә р к ә с. Атайым һеҙгә йомаҡ әйтергә ҡушты. Әгәр сисә ал-

һағыҙ ғына байрамда ҡатнашаһығыҙ, әгәр яуабын әйтә алмаһағыҙ, кире ҡайтып китәһегеҙ. Әлбиттә, минең өсөн был хәл бик йәл буласаҡ...

Ә б й ә л и л. Борсолма, Нәркәс. Беҙҙең балалар бик зирәк, йомаҡтарыңды әйт кенә!..

Ш а й т а н м а л а й ҙ а р ы. Белмәйҙәр улар, белмәйҙәр! Тиҙерәк ҡайтып китһендәр! Нәркәстең йомаҡтары бик ауыр ул!

Н ә р к ә с. Ҡарайыҡ... Тыңлағыҙ, балалар, уйлағыҙ!

Булмаған ере һирәк,
Үҙе һәр ваҡыт кәрәк.

1-с е ш а й т а н. Үҙе һәр ваҡыт кәрәк. Алтын!

2-с е ш а й т а н. Алйот, алтын һәр ерҙә буламы, балыҡтыр был.

1-с е б а л а. Нәркәс апай, мин әйтәм, йомаҡтың яуабы — һыу!

Н ә р к ә с. Дөрөҫ, ә хәҙер икенсе йомаҡты әйтәм, уйлағыҙ!

Еҫе юҡ, төҫө юҡ,
Унан башҡа тормош юҡ!

1-с е ш а й т а н. Унан башҡа тормош юҡ. Мин белдем, балаларҙан алда белдем. Шүлгән мәмерйәһе был!

2-с е ш а й т а н. Алйот, мәмерйәнең тышында ла тормош бар бит, моғайын, был... (*Уйлана.*)

2-с е б а л а. Нәркәс апай, әйтәйемме? Һыу был!

Н ә р к ә с. Ҡара һин уларҙы, Урал ағайымдың тоҡомо бик зирәк икән. Йә, өсөнсө йомағыма яуап уйлағыҙ.

Башы — тауҙа,
Аяғы — диңгеҙҙә.

1-с е ш а й т а н. Белдем, белдем! Диңгеҙ ярында тамыры булған, Урал тауының башына еткәнсе бейек булып үҫкән ағас!

2-с е ш а й т а н. Алйот, әкиәт һөйләп тораһың, ундай ағас буламы?

1-с е ш а й т а н. Була, була, мин күрҙем! (*Тарткылашалар*).

3-с ө б а л а. Яйыҡ йылғаһы ул, Нәркәс апай!

Н ә р к ә с. Был яуап та дөрөҫ. Йәгеҙ, ары киттек.

Ҡыш буйы тик тора,
Яҙ еттеме — ҡотора!

2-с е ш а й т а н (*беренсеһенә бармағы менән төртә*). Был — һин! Ҡыш буйы шым ғына йөрөйһөң дә, яҙ етһә — ҡотора башлайһың!

1-с е ш а й т а н. Кем әйтте уны һиңә! Мин улай түгел! (*Көрмәкләшә башлайҙар.*)

2-с е ш а й т а н. Кем әйтһен, әсәй әйтте!

4-се б а л а. Һуғышмағыҙ, шайтандар! Йомаҡтың яуабы — йылға!

Н ә р к ә с. Дөрөҫ. Яҙ булһа, йылға һәр саҡ таша. Ә хәҙер һуңғы йомағыма яуап әҙерләгеҙ. Тыңлағыҙ.

Туҫтаҡ тулы һыу,
Һыуҙың өҫтө быу.

Әбйәлил балаларға йүнәлеш биреп, ярҙам итеп тора.

1-с е ш а й т а н. Анау, анау! (*Бассейнға төртөп күрһәтә.*)

5-с е б а л а. Күл! Күл була, Нәркәс апай!

1-с е ш а й т а н. Мин әйтәйем тигәйнем! Бынһы ҡушылмай!

Н ә р к ә с. Ҡушылыуын ҡушыла ул. Әйҙә, шайтандың да күңеле булһын, һыу тураһында мәҡәлдәр әйтегеҙ, балалар. Беләһегеҙме?

Ә б й ә л и л. Балалар, өләсәйҙәрегеҙҙең мәҡәлдәрен хәтергә төшөрөгөҙ әле, һыу тураһында нимә тип әйтәләр улар?

1-с е ш а й т а н. Әлиләү-бәлиләү (*бейеп тора*). Белмәйҙәр!

2-с е ш а й т а н (*ҡулдарын шапылдата*). Мәҡәлде өләсәйҙәр генә белә. Үәт! Ә һеҙ белмәйһегеҙ!..

Балалар бер-бер артлы һыу хаҡында мәҡәлдәр әйтәләр.

Б а л а л а р. Һыуһағанда — һыу тәмле,
Арығанда — йоҡо тәмле.

Һөттән-аҡ, һыуҙан пак булып булмай.

Һыуҙы исрафлама, гонаһ булыр.

Н ә р к ә с. Һеҙ бик белемле икән, балалар. Мин һеҙҙе һыу байрамында ҡатнашырға саҡырам. Һыу хаҡында йомаҡтар ҙа сисегеҙ, мәҡәлдәр ҙә беләһегеҙ, юлда арығанһығыҙҙыр, ял итеп алығыҙ. (*Ултыралар.*)

1-с е ш а й т а н. Батша ҡыҙы быларҙы барыбер байрамға ҡалдырҙы, әйҙә, беҙ ҙә берәй шарт ҡуяйыҡ.

2-с е ш а й т а н. Өләсәләренән ишеткәс, йомаҡ-мәҡәлдәрҙе беләләр, ә бына урман ҡағиҙәләрен белмәйҙәр. Хи-хи! Әйе, бер ваҡыт

күмәк әҙәмдәр картуф бешерергә ут яҡтылар ҙа, ашап туйғас, уттарын һүндермәй киттеләр ҙә барҙылар. Урман яна яҙҙы, бесәнселәр күреп, һүндереп өлгөрмәһә, күпме ҡош-ҡорт, йәнлек һәләк булыр ине...

1-се шайтан. Әһәлүк! Нәркәс быларҙы ҡыуып ҡайтарасаҡ!

Шайтандар ҡыуанып, бейей башлайҙар, балалар көлә.

Әбйәлил. Урман ҡағиҙәләрен дә беләбеҙ беҙ!

Балалар бер-бер артлы тороп, урман ҡағиҙәләрен әйтә.

Урманда ут яғырға ярамай.
Ағас ботаҡтарын һындырырға ярамай.
Сәскәләрҙе күп итеп йыйырға ярамай.
Ағастың ҡабығын һыҙырырға ярамай.
Дарыу үләндәрен һаҡла!
Ҡош ояһын туҙҙырма!
Уларға рогатканан атма!
Ҡырмыҫҡаларҙы һаҡла! Улар — урман санитары.
Йылға, күлдәргә бысраҡ ташлама.

2-се шайтан. Булды, булды, урман ҡағиҙәләрен беләһегеҙ икән!

1-се шайтан. Хатта, ҡайһы бер нәмәләрҙе үҙебеҙ белеп ҡалдыҡ. (*Икенсеһенә.*) Һин бит әле теге көндө ҡош ояһын туҙҙырҙың!

2-се шайтан. Һин үҙең ҡош ояһын туҙҙырҙың! Үәт! Етмәһә, ҡырмыҫҡа иләүен тапап киттең! Ә мин тапаманым! Аҡыллы мин! (*Тегеләр тартҡылаша башлай.*)

Әбйәлил. Булды, булды, егеттәр!

Нәркәс. Шауламағыҙ, ниңә һеҙ һәр саҡ шулай бәхәсләшәһегеҙ! Етер, ана, үҙегеҙҙән балалар көлә башланы. (*Шайтан малайҙары турһая-турһая бер як ситкә барып ултыра.*) Балалар, миңә һеҙҙең күнегеү яһап, матур баҫып йөрөгәнегеҙ бик оҡшай. Иҫем китеп ҡарап торҙом бая.

Әбйәлил. Беҙ хәҙер, Нәркәс! Балалар, бер, ике, өс! (*Балалар теҙелеп тора. Байрамдың тәүге өлөшө башлана.*) Балалар, бөгөн беҙ Урал батырҙың ағаһы — Шүлгән батша менән уның ҡыҙы — Нәркәс һылыу күленә, һыу байрамына килдек. Әйҙәгеҙ әле, Нәркәс апайығыҙға үҙебеҙҙең етеҙ, көслө икәнебеҙҙе күрһәтәйек.

Шайтан малайҙарының көлгән тауышы ишетелә: «Ҡара, ҡара, беҙҙән дә көслөләр бар икән!.. Хи-хи-хи!..»

Ә б й ә л и л.

Дин-дин-дин!
Шөңгөр тауышы
Яңғырап китте залда.
Күнегеүҙәр!
Күнегеүҙәр!
Кемегеҙ баҫа алда!

Бер, ике —
Уңға борол!
Бер, ике —
Һул яҡҡа!
Бер, ике —
Ҡулдарыңды
Тейҙереп ал аяҡҡа!

Бер, ике —
Эйеләйек!
Бер, ике —
Үҫәйек.
Бер, ике —
Теҙелешеп,
Түңәрәктән
Үтәйек.

Бер, ике —
Тура баҫып,
Атлайыҡ бергә-бергә!
Бер, ике —
Ҡояш, йылға
Дуҫ булһын һәр саҡ бергә!

Балалар күнегеү яһай, шайтандар ҡамасаулап йөрөй, үҙҙәре лә яһап маташа, килеп сыҡмағас, ҡул һелтәп, бер яҡ ситкә барып ултыра.

Н ә р к ә с. Бына күрҙегеҙме Урал ағайымдың тоҡомдарын! Ҡайҙа һеҙгә уларға етеү! Их, һеҙ! Маҡтана ғына беләһегеҙ!

1-с е б а л а. Нәркәс апай, ҡасан Шүлгән батша үҙе килә һуң?

Н ә р к ә с. Ял иткәндер инде атайым... Әйҙәгеҙ, балалар, беҙ уны саҡырайыҡ. Сәпәкәй итәйек!..

1—1,2 темпына сәпәкәй һуғалар. Ҡурай моңо ишетелә. Яйлап ҡына байрам кейемендә Шүлгән батша сыға. Балалар дәррәү ҡул саба.

Ш ү л г ә н б а т ш а. Һаумыһығыҙ, ҡәҙерле ҡунаҡтарым! Һаумыһығыҙ, Урал батыр тоҡомо! (*Балалар яуап бирә.*) Бөгөн мин һеҙҙе үҙемдең һарайымдағы күлемә ҡунаҡҡа саҡырҙым. Һеҙ мине беләһегеҙҙер, мин — Урал батырҙың ағаһы — Шүлгән батша булам. Мин йәшәгән төбәкте Шүлгәнташ мәмерйәһе тип атайҙар. Ул бер ниндәй ҙә Капова түгел, балалар. Байрамдан ҡайтҡас, олатайөләсәйҙәрегеҙҙән һорағыҙ, улар ҙа минең һүҙемде раҫлар. Ҡунаҡҡа килгәс, иң алда өй менән танышалар, шулаймы, Әбйәлил!..

Ә б й ә л и л. Дөрөҫ әйтәһең, Шүлгән батша!

Ш ү л г ә н б а т ш а. Был мәмерйәлә, балалар, данлы толпар — Буҙ ат бар! Уны тик башҡорт илен яратыусы, халҡын бар

золомдан ҡурсалаусы, Шүлгән мәмерйәһен күҙ ҡараһы кеүек һаҡлаусы ир-егет кенә эйәрләй алыр. Был турала мәңге онотмағыҙ, малайҙар! Хәҙер тирә-яғығыҙға күҙ һалығыҙ ҙа бынау һүрәттәргә ҡарағыҙ. Минең һорауым буйынса уны ҡыҙыл балсыҡты иҙеп, Ер йөҙөнөң тәүге рәссамы төшөрҙө. Уның ҡомартҡыһын һаҡлағыҙ, балалар. Ә хәҙер был яҡҡа ҡарағыҙ әле! Минең әкиәт һарайым — көмбәҙле бүлмәмде боҙоҡ әҙәмдәр нисек бысраҡтандар! Бындай ҡырағайлыҡ ғәфү итерлек түгел! (*Таяғы менән ергә һуға.*) Мине асыуландырһалар, язаһын аласаҡтар улар! (*Йомшара.*) Ә мин һеҙгә ышанам, балалар. Һеҙ минең һарайыма хыянат итмәҫһегеҙ. Хәҙер бөтәгеҙҙе лә байрамға саҡырам. Был минең мәмерйәмдәге күл. Ул шифалы, төрлө сир менән яфаланғандарға дауа. Һыуҙан ҡурҡмағыҙ. Мин һеҙҙең көсөгөҙҙө, етеҙ булыуығыҙҙы күргем килә. Ҡустым Урал кеүек батыр булып үҫәһегеҙме икән? Иң алда күлде ҡыҫалаларҙан таҙартығыҙ, улар ярыш үткәрергә ҡамасаулар, моғайын.

1-се шайтан. Шүлгән батша, беҙҙең дә ҡыҫала йыйғыбыҙ килә.

2-се шайтан. Батшам, бына күрерһең, беҙ был балаларҙан күберәк, шәберәк йыясаҡбыҙ!

Шүлгән батша. Маҡтанмағыҙ, шайтандар, кемдәр тиҙерәк йыйғанын хәҙер күрербеҙ. (*Урынына ултыра.*)

Нәркәс. Балалар, үҙегеҙҙең етеҙлегегеҙҙе күрһәтегеҙ әле! Бына һеҙгә ҡабырсаҡ-кәрзин. Шайтандарға ла бирәйек. (*Бассейн ситенә ике кәрзин ултырта.*) Йәгеҙ, йәгеҙ...

Әбйәлил. Балалар, хәтерегеҙҙән сығармағыҙ, дуҫлыҡ барыһын да еңә! Күрһәтегеҙ әле шайтан малайҙарына үҙегеҙҙең кем икәнегеҙҙе!

Ҡыҙыҡай менән малай һыуға төшә һәм шайтандар менән ярышып, «ҡыҫала» йыя башлай. Балалар берҙәм йыя, ә шайтандар бер ҡыҫалаға талашып та китә... Нәркәс менән Әбйәлил балаларҙы ҡеүәтләп тора. Шүлгән батша һоҡланыуын белдерә, шайтандарға ҡарап башын сайҡай.

Шүлгән батша. Афарин, Урал батыр тоҡомо! Һеҙҙең кәрзинегеҙ эсендәге ҡыҫалалар шайтан малайҙарыныҡына ҡарағанда күберәк булып сыҡты. Һеҙ — еңеүсе! (*Ҡыҙыҡай менән малай шатланып ҡулын күтәрә, балалар уларҙы алҡышлай, шайтан малайҙар турһая, һин гәйепле, тип бер-береһен төртә.*) Ә хәҙер төрлө ярыштарҙы башларға була. Ғәҙел хөкөм итер өсөн миңә ярҙамсы кәрәк булыр. Нәркәс ҡыҙым, әйҙә, түргә ултыр.



1-се шайтан. Батшам, беҙҙең дә ярышта ҡатнашҡыбыҙ килә.

2-се шайтан. Ризалығыңды бир, батшам.

Шүлгән батша. Уныһын, ана, Әбйәлил егеттән һорағыҙ. Ул риза булһа, ҡатнашырһығыҙ.

Әбйәлил. Ярай, мин риза. Беҙ — беренсе төркөм, һеҙ — икенсе төркөм булырһығыҙ.

1-се шайтан. Беренсеһе — балаларға. (*Бармаҡтарын бөгә.*) Икенсеһе (*үҙҙәренә төртә*) беҙгә! Юҡ, беҙҙең артта булғыбыҙ килмәй!

Әбйәлил (*көлә, балалар ҙа уға ҡушыла*). Ярай, ярай, һеҙҙеңсә булһын, һеҙ — беренсе команда, беҙ — икенсе команда булырбыҙ.

Шүлгән батша (*Нәркәс менән тәхет өҫтәле артына барып ултыра*). Ярай, балалар, мин һеҙгә еңеү теләйем.

Шайтандар. Ә беҙгә?!.

Нәркәс. Һеҙгә лә. Һеҙгә лә теләйбеҙ (*Көлә.*) Башлағыҙ!

Байрамдың төп өлөшө.

Әбйәлил. Балалар, еңеү һеҙгә!

Балалар бассейнға төшә торған баҫҡыс янына теҙеләләр.

Тренер (*иң алдағы балаға өндәшә*):

Яр башында ҡом, ҡом,
Балыҡ булһаң, сум, сум!..

Һыуға иң алда төшкән бала:

— Майы миңә!

Икенсеһе:

— Миңә ҡаймағы!

Бөтәһе бергә:

— Беҙгә һөтө! — ти.

Бер-бер артлы һыуға төшәләр. Шайтан малайҙары ла ҡыҫылып-ҡыҫылып улар араһынан үтә һәм һыу эсендә эҙләнәләр.

1-се шайтан. Ә ҡайҙа майы?

2-се шайтан. Ә ҡайҙа ҡаймағы?

Икеһе бергә: Һөтө лә юҡ, алдағандар! Алдағандар!

Ә б й ә л и л (*шайтандарға*). Хәтерләйһегеҙме, мин бер көндө Яҡтыгүл буйында арҡан ишә инем. Бына ул! (*Шайтандар ҡурҡып китә.*) Йәгеҙ әле, минең малайҙар менән арҡан тартышып ҡарағыҙ! Ниндәй яҡ көслө икән? Ҡарап ҡарайыҡ! Әҙерләнегеҙ! (*Ике шайтанға ике малай ҡаршы сыға. Әбйәлил арҡандың малайҙар торған яғын һиҙҙермәй генә беркетелгән түңгәләккә бәйләй.*) Бер, ике! Башланыҡ! Малайҙар, бирешмәгеҙ! (*Арҡан тартыш уйыны башлана.*)

1-с е ш а й т а н. Һоп! Һоп! Ҡара әле, көс етмәй!

2-с е ш а й т а н. Ҡара, ҡара, ниндәй көслөләр үҙҙәре! Арыттырҙы!

1-с е ш а й т а н. Әйҙә, үҙҙәре тартһын, хәл бөттө, ял итәйек.

Шайтандар тирҙәрен һөртә-һөртә барып ултыра, балалар ике төркөмгә бүленеп, хәйләһеҙ генә арҡан тарта. Ниндәй төркөм еңә, ул, әлбиттә, еңеүсе була. Жюри еңеүселәрҙе билдәләй, мәрәй ҡуя. Һыу уйындары барған саҡта Шүлгән батша менән Нәркәс уйнаусыларға һоҡланып, сәпәкәй итеп, ғәҙел хөкөм итеп ултыра. Шайтан малайҙар балаларға ҡамасаулап, уларҙы көлдөрөп-көйҙөрөп, уйын бөткәнсе шаулап йөрөй.

## У й ы н   ө л г ө л ә р е

### Аяҡтар менән сәпелдәтеү

Күнекмә таҡтаһы, туп йәки башҡа йөҙә торған әйбер алырға. Таҡта йәки туп тотҡан ҡулды алға һоноп, аяҡтар менән һыуға алмашлап сәпелдәтергә кәрәк. Кем финишҡа беренсе килә, ул еңеүсе.

### Туп артынан һыуға

Һыу ситендә баҫып торған ике уйнаусының ҡулында туп. Сигнал буйынса улар туптарын һыуға мөмкин тиклем алыҫҡа ташлайҙар. Шунан һыуға төшөп, береһе икенсеһенең тубы артынан йөҙөп китә. (*Йөҙә белмәүселәр атларға мөмкин.*) Тупты беренсе булып алып сыҡҡан кеше еңеүсе тип таныла. Был уйында һәйбәт йөҙөүҙән тыш, тупты алыҫҡа ташлай белергә лә кәрәк.

### Биҙрәгә һыу тултырыу

Буш ике биҙрә һыуҙан бер нисә аҙым алыҫлыҡта ултыра. Ярышта төркөмләп, ике яҡ ҡатнаша. Һәр ике яҡ берәр көрөшкә

ала. Уйын башланыу менән ике төркөмдән дә берәр йүгерек, һыу ситенә йүгереп барып, көрөшкәне тултырғас, йәнә биҙрә янына йүгерә. Һыуҙы биҙрәгә ҡойғас, көрөшкәне үҙ төркөмөндәге икенсе балаға бирә. Хәҙер теге һыуға йүгерә. Шулай итеп, бәләкәй биҙрәләр тулғансы ярыш дауам итә. Алда тултырған яҡ еңеүсе була.

### Таҡталар менән уҙышыу

Ике тигеҙ төркөм баҫып тора. «Уйынды башларға!» — тигән бойороҡ бирелеү менән беренсе бала таҡтаһын һыуға ташлай ҙа ҡулдары менән тотоноп, аяҡтары менән сәпелдәтеп, алдан билдәләнгән яҡҡа йөҙөп китә. Ара үтелгәс, кире яҡҡа борола. Килеп еткәс, икенсе булып баҫып торған иптәшенең ҡулына ҡағыла. Хәҙер уйынды ул дауам итә. Эстафетаны алдан бөтөргән яҡ еңеүсе була.

### Байрамдың һуңғы өлөшө

Һыуҙан сыҡҡан балаларға Әбйәлил теҙелергә ҡуша.

Б а л а л а р: Иҫәнлеккә-һаулыҡҡа,
Таҙалыҡҡа-байлыҡҡа! — ти.

Тренер һыу байрамы өсөн барыһына ла рәхмәт белдерә. Шүлгән батша урынынан тора.

Ш ү л г ә н б а т ш а. Балалар, бөгөн һеҙ мине шул тиклем шатландырҙығыҙ. Быуаттар буйы ошолай рәхәтләнеп, көлөп ултырғаным булмағайны. Рәхмәт үҙегеҙгә. Минең дә һеҙгә бүләгем бар. Алтын сабаҡ, ҡайҙа һеҙ? Ҡунаҡтарҙы күреп ҡалығыҙ!

Матур һыу кейемендә, муйындарына еңел, алтын тәңкәләре ялтырап торған еңһеҙ елән бәйләгән ҡыҙҙар сыға. Алтын сабаҡ — етәкселәре. Улар ҡурайҙа яңғыраған «Түңәрәк күл» көйөнә башҡорт ҡыҙҙарының нәфис, иҫ киткес зауыҡлы бейеүен башҡара. Көй алмашына, еләндәрен «ярҙа» ҡалдырып, ҡыҙҙар-балыҡтар һыуға төшә һәм унда «Йондоҙсоҡ» күнегеүен башҡара. Ул синхрон хәрәкәткә оҡшаған.

1-с е б а л а. Ниндәй матурлыҡ бында!

2-с е б а л а. Алтын балыҡтар иҫ китмәле!

Н ә р к ә с. Алтын балыҡ һоҡланғыс тәбиғәттең үҙе ул, балалар! Тәбиғәтте һаҡлағыҙ, ул шулай һәр саҡ гүзәл булыр!

Ш ү л г ә н б а т ш а. Мин һеҙҙең етеҙ, көслө, зирәк булыуығыҙ-

ҙы үҙ күҙем менән күрҙем. Урал батыр тоҡомо һеҙ, тип ғорурлыҡ менән әйтә алам.

Н ә р к ә с. Балалар, беҙҙең һеҙгә бүләгебеҙ бар. Алтын сабаҡ, күл төбөнән минең һандығымды алып сығығыҙ әле.

Алтын балыҡ һыу төбөнән иҫ киткес матур һандыҡ алып сыға. Шүлгән батша, Нәркәс, Алтын сабаҡ, Әбйәлил балаларҙың бөтәһенә лә бүләк, күстәнәс тарата. Шайтан малайҙарына ла өлөш сыға.

Ә б й ә л и л. Балалар, байрам тамамланды. Шүлгән батшаға, Нәркәскә, балыҡтарға рәхмәт әйтеп, хушлашайыҡ.

Балалар баш эйеп, барыһына ла рәхмәт әйтә.

Ш а й т а н м а л а й ҙ а р ы. Беҙгә лә, беҙгә лә рәхмәт кәрәк!

Ә б й ә л и л. Һеҙгә лә рәхмәт, шайтандар! Бик күңелле булды!

Ш ү л г ә н б а т ш а. Һуңғы һүҙем минең һеҙгә шул, балалар. Минең һарайымды (*ҡулын йәйә*) — Шүлгән мәмерйәһен күҙ ҡараһы кеүек һаҡлағыҙ. Татыу йәшәгеҙ. Тыуған ерҙә татыу йәшәһәгеҙ генә тормошоғоҙ матур булыр. Урал батыр тоҡомо күбәйер. Ерһыуҙың ҡәҙерен белегеҙ. Тәбиғәт — ул байлыҡ, йәшәү сығанағы. Урал батыр васыятына тоғро булығыҙ, балалар!..

Б а л а л а р. Урал батыр васыятына тоғро булырбыҙ! Йыл һайын һыу байрамына һиңә килербеҙ, Шүлгәнташ! Музыка яңғырай. Барыһы менән хушлаша-хушлаша балалар тигеҙ сафта мәмерйәнән сығалар.

1-се ш а й т а н (*илай*). Ҡайтмағыҙ?

2-се ш а й т а н (*илай*). Тағы ла килегеҙ!

Н ә р к ә с. Шүлгәнташ һеҙҙе һәр саҡ көтәсәк... Килегеҙ!

Ш ү л г ә н б а т ш а. Ата-олатайҙарығыҙҙың төйәге — Урал тауын, Шүлгән мәмерйәһен һаҡлауығыҙға ышанам мин, балалар! Эйе, ышанам!

# «ҠАРҒА БУТҠАҺЫ» БАЙРАМЫНДА

ҠАТНАШАЛАР:

Зөбәржәт — тәрбиәсе
Йәнбикә өләсәй — аш-һыу оҫтаһы
Урал — малай
Әминә — ҡыҙ
Инә ҡарға, Ҡарға-малай, ҡарғалар
Мәскәй әбей
Шүрәле
Малайҙар, ҡыҙҙар, инәйҙәр, апайҙар, ҡурайсы Салауат ағай

*Яҙ. Тау итәгенән башланған аҡлан. Уртала — башҡорт тирмәһе. Ул матур итеп биҙәлгән. Арыраҡ өстәлдә ҡаҙан аҫылған. Бер нисә урында аҡ ҡайынға сәңгелдәк, сағыу таҫтамалдар эленгән. Бер аҙҙан Инә ҡарға менән балалары «осоп» килеп инә.*

Ҡарға-малай. Әсәй, Урал малайҙың өләсәһе ошонда бутҡа бешерәме? Уны нәмәнән бешерәләр?

Инә ҡарға. Бутҡаны тары ярмаһынан бешерәләр, улым.

Ҡарға-малай. Әсәй, бутҡалары әҙерме икән?

*Ҡарға-малай йүгереп тирмә эсенә инеп китә. Башҡалары ҡаҙанды барып ҡарай, уның тирәһендә өйөрөләләр, сабырһыҙланып шаулашалар.*

Ҡарға балалары. Әсәй, ҡаҙандың эсе буш, һин әйткән тәмле бутҡа бешмәгән, беҙ байрамға иртә килдекме икән әллә?

Ҡарға-малай (*тирмәнән сыға*). Әсәй, ояларында ла ашарға бер нәмә лә күренмәй.

И н ә  ҡ а р ғ а. Әле кешеләр байрамға урын ғына әҙерләгәндәр. Был оя — тирмә тип атала, балаҡайҙарым. Ҡарағыҙ әле, ул ниндәй матур биҙәлгән. (*Тирмә япмаһын асып күрһәтә.*) Аяҡ аҫтына кейеҙ түшәлгән, түргә аҫалы балаҫтар эленгән. Ә бынау таҫтамал күҙҙең яуын алып тора. (*Таҫтамалды алып, балаларға күрһәтә.*) Ҡыҙҙарҙың ҡулы оҫта, уңғандар.

Ҡ а р ғ а-м а л а й. Барыһы ла матур, тик буҡкалары ғына юҡ.

И н ә  ҡ а р ғ а. Ашыҡма, улым, буҡкаһы ла, йыр-бейеүе лә, уйындары ла булыр.

Ҡ а р ғ а-м а л а й. Әсәй, ниңә улар беҙҙе байрамға саҡыралар ул?.. Беҙ — ҡоштар, улар — кешеләр.

И н ә  ҡ а р ғ а. Башҡорт халҡының шундай изге йолаһы бар: улар беҙҙе, үҙҙәренең кесе туғандарын ашҡа саҡырып, яҙҙы ҡаршы алалар. Ҡышты бергәләп, имен-һау сығыу менән ҡотлайҙар. Киләсәктә ашлыҡтың мул булыуын, ваҡытында ямғыр яуыуын теләйҙәр.

Ҡ а р ғ а-м а л а й. Ә ниңә үҙҙәре һаман күренмәй?

И н ә  ҡ а р ғ а. Әле улар ауыл урамында һөбә ҡолғаһына бүләк бәйләйҙәр, өйҙән-өйгә йөрөп, тары, май, тәмле-татлы йыялар.

Һөбә, һөбә, һөбә, һөбә,
Ҡарра ҡарр-ҡаррр-ҡарр!..
Ҡарға туйға бар, бар! —

тип ат өҫтөндә малай — Урал йөрөй. Ул барыһын да байрамға саҡыра. Тик беҙгә әле саҡырылмайынса, байрамға алдан осоп килеү килешмәҫ. Әйҙәгеҙ тау башына, сабыр ғына итеп, саҡырғандарын көтәйек.

Барыһы ла «осоп» сығып китә, ә Ҡарға-малай һиҙҙермәй генә тирмә эсенә йәшенә, бер аҙҙан башын сығарып һөйләнә.

Ҡ а р ғ а-м а л а й. Ә минең байрамды ҡарағым килә, ҡасан саҡыралар әле, көтһәң оҙаҡ була.

Ҡапыл ағастар һынған, әсе итеп һыҙғырған тауыш ишетелә. Ҡарға-малай башын тирмә эсенә йәшерә. Ашығып, алан-йолан ҡарап, ҡара кейемдә Шүрәле менән Мәскәй әбей инә.

М ә с к ә й  ә б е й. Һе!.. Ошонда йыйылалар икән!.. Ҡара һин уларҙы, ҡарғаларының яҙ килтереүенә ниндәй шатланған булалар, ә! Йәнәһе, байрам итәләр, күңел асалар, тфү!

Ш ү р ә л е. Матур-матур ҡыҙҙары ла киләләр әле, рәхәтләнеп ҡытый-ҡытый уйнайбыҙ икән!

М ә с к ә й ә б е й. Тот ҡапсығыңды киңерәк итеп, егеттәре ҡыҙҙарын һиңә тоттороп ҡуйыр тиһеңме? Улар көслө егеттәр!

Ш ү р ә л е. Алдашма, ышанмайым! Урманда минән дә көслө кем бар тағы?

М ә с к ә й ә б е й. Хе-хе-хе! Һин кешене белмәйһең әле!

Ш ү р ә л е. Ә мин уларға өс шарт ҡуям да, барыһын да еңәм, аҙаҡ бүләк урынына ҡыҙ һорайым. Минең талап ҡаты! Еңеүсегә улар күңеле ятҡан нәмәне бирергә тейештәр!

М ә с к ә й ә б е й. Ә мин һинең кеүек үҙемде генә ҡайғыртмайым. Мин кешеләрҙең ҡош-йәнлектәр менән дуҫлашыуын яратмайым! Әгәр улар бергә булмаһа, был ергә күптән мин хужа булыр инем. Яҙҙың килерен туҡтатыр инем, ямғыр яуҙырмай, ашлыҡтарын көйҙөрөр, йылғаларын ҡоротор инем. Әгәр ҙә бөгөнгө байрамдың рәте китһә, уларҙың теләктәре ҡабул булмаясаҡ. Бында мине Йәнбикә ҡарсыҡтан башҡа бер кем дә танымай. Шулай ҙа һаҡланыу әмәлен ҡарап, төрлө һүрәткә инеү кәрәктер. Хе-хе-хе!..

Ш ү р ә л е. Шулай ҙа балалар һине таныһа, ә?

М ә с к ә й ә б е й. Таныһалар, юҡҡа сығасаҡмын. Ләкин мин барыбер танытмаясаҡмын! Усаҡтарының утын һүндереп, ҡарғаларын ас ҡалдырасаҡмын. Ул саҡта ҡарғалар асыуланасаҡ, дуҫлыҡ бөтәсәк, ашлыҡ уңмаясаҡ, һәм... барыһы ла ҡырылып бөтәсәк! Шунда мин һине, Шүрәле, Еңеү байрамына саҡырасаҡмын!

Ш ү р ә л е. Ух-ух-ух! Һин бигерәк яуыз икәнһең, Мәскәй әбей. Ҡыҙҙар бөтһә, мин кемде ҡытыҡлармын һуң?

М ә с к ә й ә б е й. Тфү! Һаман үҙен генә уйлай! Туҡта! Кемдер берәү байрам урынына ҡот теләп, уҡына-уҡына бында килә. Шул изге китаптарының доғаһына башым әйләнә минең. Шылдыҡ! Байрам башланғас, һиҙҙермәй генә килеп етербеҙ.

Ш ү р ә л е. Тиҙерәк башланһа ине байрамдары. Матур ғына ҡыҙҙарын тиҙерәк ҡытыҡлағым килә! Ҡытый-ҡытый!..

Улар сығып китә. Бер аҙҙан уҡына-уҡына, теләк теләп, Йәнбикә өләсәй күренә. Ҡарға башын сығарып, уға ҡарап-ҡарап ала.

Й ә н б и к ә. Күҙ теймәһен, ниндәй матур урын, ә! Яҡында ғына, ҡул һуҙымы ерҙә — тау. Урын иркен! Башҡорт ерҙәре ожмах! Ҡыҙығырлыҡ шул. Туҡта, килендәрем шаулап, бутҡа беше-

ргә килеп тә етерҙәр, ҡана, һыуһап килеүҙәренә ҡымыҙ яҙа торайым. Бая, Зөбәржәт ҡыҙым, ҡымыҙ көбөһөн тирмә эсендә ҡалдырҙыҡ тигән ине. (*Тирмә эсенә инергә уйлай, ҡапыл Ҡарға-малайға тап була.*) Әй, Алла! Йөрәгемдең ҡотон алдың бит, ҡошҡайым, бутҡа ашарға килдеңме? (*Ҡарға-малай хәүефләнеп, Йәнбикәне урап йүгереп йөрөй.*) Нимәлер әйтергә теләй бит был ҡошсоҡ. Бигерәк өҙгөләнә. Ҡана, тыңлап ҡарайыҡ әле, ҡоштар һиҙгер була бит, байрам мәлендә берәй ғауға сыға күрмәһен тағы, һөйлә, ҡошсоҡ, һөйлә, тыңлайым. (*Тирмә янындағы оло түмәргә ултыра. Ҡарға-малай уның ҡолағына нимәлер шыбырлай. Йәнбикә, башын ҡағып, борсола.*) Ах, яуыздар! Шулай тиҙәрме? Был Мәскәй әбей ғүмер буйы яуызлыҡ эшләне инде, һаҡ булырға кәрәк! Был хаҡта белгертеүеңә ҙур рәхмәт, ҡошсоҡ! Әйҙә, ҡымыҙ эсерәйем үҙеңә.

Тирмә эсенә инеп китәләр, сығалар.

Ҡ а р ғ а-м а л а й. Рәхмәт һиңә, өләсәй. Туғандарым янына осайым инде, бутҡа бешкәс, саҡырырһығыҙ, бөтәбеҙ ҙә килербеҙ.

Йәнбикә Ҡарға-малайҙың башынан һыйпай, уныһы ҡыуанып «осоп» китә.

Й ә н б и к ә. Хәйерһеҙҙәр! Боҙҙорормон мин һеҙгә байрамдың тантанаһын! Тик был турала балаларға белгертмәҫкә кәрәк, шатлыҡтары күк сепрәккә төрөлмәһен. Һай, балалар былай ҙа кемдең кем икәнен тиҙ белерҙәр, бигерәк зирәк бит улар. Ә инде усаҡтағы утты мин һинән һүндертмәм, Мәскәй әбей. Күҙ ҡараһы кеүек һаҡлармын, барыһын да бутҡа менән һыйлармын. Ҡана, усаҡҡа ут алайым, ҡаҙан ҡыҙһын, аҙаҡ ярма, май төшөрөп ебәреүе ҡыйын булмаҫ. (*Ҡаҙанға һыу ҡоя, ҡаплай, усаҡҡа ут яға, алыҫта шау-шыу ишетелә.*) Әй, тау итәгенә менеп килә, балаҡайҙарым!.. Анау, һөбә ҡолғаһы тотоп, атта килгәне кем икән? Ҡара, танымай ҙа торам, үҙемдең Урал улым бит һуң, боронғо башҡорт егеттәренең кейеме ҡайһылай килешә үҙенә. Ҡыуанысымдан күңелем тулып китте. (*Күҙҙәрен һөртә, балаларҙың тауышы яҡыная. Әгәр байрам ҡырҙа үткәрелһә, Урал аты менән тирмә янына килеп туҡтай, сәхнәлә булһа, «аҡлан»да ҡалдыра.*) Урал улым, атыңды аҡланға ашатырға ебәр, һөбә ҡолғаһын бында алып мен!

Ҡурай тауышы яңғырай. Ҡатын-ҡыҙҙар, ҡурайсы Салауат ағай, балалар менән Зөбәржәт, ҡолға тотҡан Урал, Әминә инә.



Б а л а л а р: Һөбә, һөбә, һөбә, һөбә,
Ҡарр-ҡарр, ҡарр-ҡарр!
Ҡарға туйға бар, бар!
Ҡарға туйға бармағандың

Күңеле булыр тар, тар!
Ҡарға туйға бар, бар!

У р а л. Һөбә йыям күрегеҙ!
Аллы-гөллө һөлгө тағып,
Ҡарға бутҡаһына килегеҙ!

Й ә н б и к ә. Эләбеҙ, балаҡайҙарым, эләбеҙ! Еңеүселәребеҙгә бүләктәребеҙ мул булһын.

Ҡатын-ҡыҙҙар ҡолғаға өҫтәп бүләк элә.

Ҡатын-ҡыҙҙар (*йырлайҙар*).

Шау-гөр килә киң болондар,
Гөрләй Һаҡмар буйҙары.
Ҡотло булһын, балаҡайҙар,
Яҙғы ҡарға туйҙары!..

Й ә н б и к ә (*Уралға*). Иртә таңдан ат өҫтөндә ултырып, һыуһап киткәнһеңдер, улым, мә, яңы ғына яҙған ҡымыҙҙан ауыҙ ит.

У р а л (*эсә*). Эх, ҡымыҙы, ҡымыҙы,
Хәҙер инде ҡан ҡыҙҙы!
Эх, Салауат ағай, уйнап ебәрәһеңме әллә, берҙе бейеп алыр инем!
С а л а у а т а ғ а й. Әйҙә, ҡустым, елкенеп ал булмаһа!

Салауат ағай ҡурайҙа уйнай башлай, бейеү көйөнә Урал һамаҡлай.

У р а л. Тәмле ҡымыҙҙы эскәс,
Елкенеп китте йөрәк.
Яурындарҙы уйнатып,
Бейеп алырға кәрәк! Эх!

Урал бейей, барыһы ла ҡул саба. «Һай, афарин!» тигән тауыш ишетелә.

Ҡ а т ы н-ҡ ы ҙ ҙ а р (*бейеү көйөнә таҡмаҡ әйтәләр*).

Бейер ул, бейер ул,
Бейер өсөн килгән ул.
Уйнап-көлөп күңелдәрен
Асыр өсөн килгән ул.

З ө б ә р ж ә т. Рәхмәт, Урал, бик матур бейейһең икән! Бына үҙеңә бүләккә таҫтамал!

Сағыу биҙәкле бер таҫтамалды малайҙың биленә бәйләй. Урал шатланып, тағы бер бейеп әйләнә.

Й ә н б и к ә. Әхирәттәр, балалар күңел аса торһон, беҙ, әйҙәгеҙ, бутҡа бешереп алайыҡ.

Ололар ҡаҙан янына китә, Зөбәржәт балаларға тирә-яҡты күрһәтә.

З ө б ә р ж ә т. Балалар, ҡарағыҙ әле, ниндәй матур беҙҙең яҡтар! Ҡарағай тауы аҫтынан йәмле Һаҡмар аға, Урал тауы теҙмәләре күгәреп, алыҫтарҙан-алыҫтарға һуҙыла, йәшел үләнле, сәскәләргә күмелгән туғай-болондары күҙҙең яуын ала, аҡ ҡайындарҙың гүзәллеге барыһын таң ҡалдыра. Балалар, һеҙ беҙҙең район, тыуған яҡ тураһында бик күп йырҙар беләһегеҙ, әйҙәгеҙ, берәйһен йырлап ебәрәйек!

Б а л а л а р. Беләбеҙ! Әбйәлил тип атала ул йыр!

Һәр кемгә үҙ төйәгенә арналған йырҙы йырларға мөмкин.

З ө б ә р ж ә т. Йырланыҡ, хәҙер, әйҙәгеҙ, берәй уйын уйнап алайыҡ. Уйындарҙы ла һеҙ күп беләһегеҙ.

М а л а й ҙ а р. «Бармаҡ һанаш» уйынын уйнайыҡ!

Ҡ ы ҙ ҙ а р. «Йәшерәм яулыҡ»ты ла онотмайыҡ!

(*Балалар «Бармаҡ һанаш» уйынын уйнайҙар*).

Баш бармаҡ: «Бутҡа бешерәм», — ти.
Имән бармаҡ: «Ярма юҡ», — ти.
Урта бармаҡ: «Үтескә алайыҡ», — ти.
Атһыҙ бармаҡ: «Ҡасан түләрбеҙ», — ти.
Сәтәкәйе: «Ашайыҡ та ҡасайыҡ,
Беҙ бәләкәй, күрмәҫтәр!» — ти.
Ҡытый — ҡытый — ҡытый!..

(*Балалар үҙ-ара ҡытыҡлашалар, көлөшәләр*).

Был бармаҡ — олатай бармаҡ,
Был бармаҡ — өләсәй бармаҡ,
Был бармаҡ — атай бармаҡ,
Был бармаҡ — әсәй бармаҡ,

Был бармаҡ — сәтәкәй бармаҡ,
Уның исеме — Гүзәл!
(*Һәм башҡаларҙың исеме әйтелә, төртөп күрһәтелгән бала үҙ күңеленә хуш килгән һөнәрен күрһәтә.*)

Зөбәржәт. Малайҙар, һеҙ үҙегеҙ яратҡан «Бармаҡ» уйынын уйнағыҙ, ә ҡыҙҙар «Йәшерәм яулыҡ»ты башлап ебәрер.

Әминә. Әйҙәгеҙ, ҡыҙҙар, тиҙ генә түңәрәк яһап ултырығыҙ, уйынды мин башлап ебәрәйем (*йырлай*).

Йәшерәм, йәшерәм яулығымды
Йәшел ҡайын артында,
Һиҙҙермәйсә ташлап киттем
Бер иптәшем артына!

Уйын башлана. Ҡыҙҙар түңәрәк яһап ултыра. Әминәнең ҡулында — яулыҡ. Ул түңәрәк ситенән йөрөй. Йыр барышында һиҙҙермәйенсә генә бер иптәшенең артына яулыҡты һалып китә. Ул ҡыҙ яулыҡты ала ла Әминәне баҫтыра башлай, яулыҡ менән һуғырға тырыша. Әгәр ҙә Әминә эхирәтенең буш ҡалған урынына ултыра алһа, теге ҡыҙ уйын башлаусы була, ултыра алмаһа, тағы үҙе ҡала. Уйынды бер нисә тапҡыр ҡабатларға мөмкин. Был ваҡытта малайҙар ҙа үҙҙәренең «Бармаҡ» уйынын уйнайҙар. Шул саҡ тирмә артында Мәскәй әбей менән Шүрәле хасил була.

Мәскәй әбей. Икебеҙ ҙә бергә сыҡмайыҡ. Танырҙар ҙа шунда уҡ ҡыуып та ебәрерҙәр. Иң алда мин кейенәйем. Тик миңә анау әбейҙәр кеүек кейенергә кәрәк.

Балалар уйнап бөтөүгә, Мәскәй әбей Йәнбикәгә оҡшатып, боронғо ҡатын-ҡыҙҙар кейемендә сыға ла, уңай мәл көтөп тора.

Йәнбикә. Балалар, бутҡа бешеп кенә бара, май төшөрәһе генә ҡалды, Хәҙер беҙ һеҙгә йомаҡ ҡоя торабыҙ. Йәгеҙ, минең йомаҡҡа кемегеҙ яуап бирә?

Ауыҙы бар — көйшәмәҫ,
Теше бар — тешләмәҫ,
Ултырһаң — күтәрер,
Етәкләһәң — эйәрер.

Балалар. Ат! Уралдың аты!
Йәнбикә. Дөрөҫ, балалар, бигерәк зирәк икәнһегеҙ!..

Бер нисә өләсәй, апай балаларға яҙ, ҡоштар, йәнлектәр тураһында йомаҡ әйтә. Мәскәй әбей ҙә шым ғына улар араһына инеп тора.

М ә с к ә й ә б е й. Балаҡайҙарым... матурҡайҙарым...

Ә м и н ә. Өләсәй, һин дә беҙгә йомаҡ ҡой әле!

М ә с к ә й ә б е й. Йомаҡ?! Йомаҡты ла ҡоймаҡ кеүек ҡоялармы?.. Нимә була һуң ул йомаҡ, балаҡайҙарым? Түңәрәкме? Тәмлеме?

Ә м и н ә (*иптәштәренә ҡарай, аптырап, яурынын һелкетә*). Беҙҙең бөтә өләсәйҙәр ҙә йомаҡ белә, ә ниңә һеҙ белмәйһегеҙ?

М ә с к ә й ә б е й. Мин күрше ауылдан килдем, балаҡайым.

З ө б ә р ж ә т. Ундағы өләсәйҙәр ҙә йомаҡты күп белә.

Й ә н б и к ә. Дөрөҫ әйтәһегеҙ, балалар. Йомаҡты тик бер генә әбей белмәй, ул... (*Мәскәй әбейгә килә башлай.*) Ул әбей...

М ә с к ә й ә б е й. Әйтмә. Әйтмә. Үҙ иркем менән китәм! (*Мәскәй әбей артҡа сигенә-сигенә сығып китә.*) Башҡа килмәйем.

Ш ү р ә л е. Тынынылар. Мин дә Мәскәй әбей артынан һыҙайым... (*Ул да арты менән, осо ялбыр ҡойроғо менән битен елләтеп, сыға.*)

З ө б ә р ж ә т. Йәнбикә өләсәй (*шым ғына*) әллә ул Мәскәйме?

Й ә н б и к ә. Тик балалар белеп ҡалмаһын. Байрамдың йәмен боҙмайыҡ. Балалар, бутҡа бешеп сыҡты!

Балалар усаҡ янына йыйыла, әйлән-бәйлән итеп, йыр йырлайҙар.

Б а л а л а р.

Тирәклектән үтә төшә
Яҙғы ҡояш нурҙары.
Ҡарға бутҡаһына сыҡҡан
Беҙҙең ауыл ҡыҙҙары.
Ҡаҙандарҙа бутҡа бешә
Бутыр-бутыр итәлер,
Ағас башында ҡарғалар
Ҡар-ҡар-ҡар тип әйтәлер.

Йәнбикә бутҡаны бутап тора, тәмләп-тәмләп ҡарай.

Й ә н б и к ә. Балалар, бутҡа бик тәмле булып бешкән. Ашъяулыҡ тирәләп барығыҙ ҙа ултырығыҙ. Апайҙарығыҙ һеҙгә бутҡа таратыр.

Балалар ултыра башлай, шул саҡ ипләп кенә Ҡарға-малай инә.

Ҡ а р ғ а-м а л а й. Ниңә һаман беҙҙе ҡунаҡҡа саҡырмайҙар икән? Бөгөн байрамда ҡарға бутҡаһы ашамаһаҡ, беребеҙ ҙә ямғыр теләп

ҡысҡыра алмаҫ. Ул саҡта ҡоролоҡ киләсәк. Әллә берәй һауыт бутҡа урлап, бына беҙгә күстәнәс итеп бирҙеләр, тип, әсәйемә алып ҡайтып бирәйемме икән? Ул бөтәбеҙгә лә тигеҙ итеп таратып бирер ине.

Ҡарға-малай шым ғына ҡаҙан янына килә лә, иң ситтә ултырған сеүәтәне урлап ҡаса. «Бутҡаны урланылар!» — тип, балалар уны баҫтыра башлай. Ҡамап тотоп алғас, бутҡаны тартып алалар. Ҡарға-малай илай.

Й ә н б и к ә. Илама, ҡошсоғом, беҙ хәҙер бөтәгеҙҙе лә ҡунаҡҡа саҡырабыҙ, тик әлегә бутҡаның әҙ генә һыуынғанын көткән инек. Балалар, әйҙәгеҙ, ҡоштарҙы саҡырайыҡ!

Б а л а л а р.
Ҡара ҡарға ҡар-ҡар,
Ала ҡарға ҡар-ҡар!
Бергә-бергә йыйылышып,
Ҡарға бутҡаһына бар!
Осоп килә Инә ҡарға
Ҡар-ҡар, ҡар-ҡар!
Балаларын алып килә,
Ҡар-ҡар, ҡар-ҡар!

Ҡарғалар ҡарҡылдашып «осоп» инә лә, тирмә янындағы түмәрҙә ҡурай уйнап ултырған Салауат ағайҙың бейеү көйөнә бик матур итеп бейеү башҡаралар. Балалар ҙа уларға ҡушылып, урындарында хәрәкәт яһай.

З ө б ә р ж ә т. Рәхмәт, ҡошҡайҙар! Беҙҙең менән мәңге теләктәш булыуығыҙҙы күрһәттегеҙ, киләсәккә өмөт һалдығыҙ! Ә хәҙер табынға рәхим итегеҙ!

Оло табында бергә бутҡа ашайҙар, тәмле-татлы менән сәй эсәләр.

И н ә ҡ а р ғ а. Һый-хөрмәтегеҙгә бик ҙур рәхмәт, туғандар! Беҙҙе ныҡ ҡәҙерләнегеҙ, мәңге бай булығыҙ!

Инә ҡарға балаларына осоп китергә тигән ишара яһай.

Й ә н б и к ә. Ҡайҙа ҡабаланаһығыҙ, ҡәҙерле ҡунаҡтар, беҙҙең менән байрамды дауам итегеҙсе!

И н ә ҡ а р ғ а. Ашаныҡ-эстек, беҙгә лә оябыҙға ҡайтып, Аҡташ янында изге теләктәр теләргә ваҡыт, аҙаҡ үҙебеҙҙең байрамды — Ҡарғалар туйын башлап ебәрербеҙ. Һау булығыҙ! Һау булығыҙ! Ҡаррр!..

Ҡарғалар «осоп» сығып китә, Ҡарға-малай ҡалырға теләй, ләкин әсәһе унының башынан һыйпап, әүрәтеп, башҡаларға эйәртә.

Зөбәржәт. Ҡунаҡтарҙы һыйланыҡ, ҡәҙерләп оҙаттыҡ, байрамды дауам итәйек, балалар! Йыр-моңһоҙ, уйын-көлкөһөҙ ниндәй байрам булһын инде! Әйҙәгеҙ, күңел асып алайыҡ! Бейейекме, йырлайыҡмы?

Балалар. Бейейек! Бейейек тә йырлайыҡ!

Күмәк бейеү «Үҙән буйы». Парлы-парлы итеп, ҙур түңәрәк яһап торалар. Беренсе таҡмаҡҡа балалар бергәләп башта уң яҡҡа, аҙаҡ һул яҡҡа етеҙ хәрәкәттәр менән әйләнеп бейейҙәр. Икенсе таҡмаҡҡа ҡыҙҙар барыһы бергә уртаға төшәләр, аҙаҡ, малайҙарға ҡаршы киләләр, өсөнсө таҡмаҡта ҡултыҡлашып башта бер яҡҡа, аҙаҡ икенсе яҡҡа өйөрөләләр. Бейеү 2—3 тапҡыр ҡабатлана, тик икенсе урағанда уртаға төшкән ҡыҙҙарҙы малайҙар алмаштыра. Бер парҙа — малай менән ҡыҙ тора.

Үҙән буйы, Үҙән буйы,
Үҙән һыуҙары тәмле.
Үҙән буйына теҙелгән
Колхоз ҡырҙары йәмле.

Тау башында бөҙрә ҡайын
Япраҡ яра яҙ һайын.
Япраҡ ярған ҡайын кеүек,
Беҙ үҫәбеҙ яҙ һайын.

Күңелле, күңелле
Беҙҙең Үҙән буйҙары.
Сәскәле киң туғайҙары,
Матур иген ҡырҙары.

Әйҙә баҫайыҡ әле,
Бергә баҫайыҡ әле,
Бейейек тә, йырлайыҡ та
Күңел асайыҡ әле.

Ике матур һыуға бара,
Ем-ем итә силәге.
Беҙҙең ауылдың ҡыҙҙары —
Бешкән ҡурай еләге.

Күңелле, күңелле
Беҙҙең Үҙән буйҙары.
Сәскәле киң туғайҙары,
Матур иген ҡырҙары.

Таянабыҙ бөйөргә,
Тотонабыҙ бейергә.
Тыпыр-тыпыр тыпырҙатып,
Әйләнәбеҙ бит бергә.

Йәш егеттәр ҡайтып килә
Иген баҫыуҙарынан.
Егеттәрҙе беҙ һынайбыҙ
Аяҡ баҫыуҙарынан.

Күңелле, күңелле
Беҙҙең Үҙән буйҙары.
Сәскәле киң туғайҙары,
Матур иген ҡырҙары.

«Наза» күмәк бейеүен дә бейергә мөмкин.

З ө б ә р ж ә т. Балалар, һеҙ арып та киткәнһегеҙҙер инде, әҙерәк ял итеп алығыҙ, хәҙер апайҙар бейеһен!

Яңғыҙ бейеүҙәр башлана, балалар ҡул саба. Йәш ҡатындар, апайҙар бер-бер артлы, бер-береһенә баҫа-баҫа сығып бейейҙәр. Йәштәрсә кейенгән Мәскәй әбей ҙә килеп тора. Зөбәржәт үҙе бейегәндән һуң уға баҫа. Мәскәй әбей башта ҡурҡа, аҙаҡ, оялған булып ҡылана.

З ө б ә р ж ә т. Әйҙәгеҙ!

М ә с к ә й  ә б е й. Оялам бит әле, килештерерменме икән?

Балалар шаулап ҡул сабып, бейеүен һорайҙар. Зөбәржәт тағы бер әйләнеп, кире баҫа. Мәскәй әбейҙең түңәрәк эсенә сыҡмайынса рәте ҡалмай, ләкин ул бейей белмәй, пыр туҙып, елдереп йөрөй.

Ә м и н ә. Ниңә был апай бейей белмәй икән? Ауылдағы бөтә апайҙар ҙа матур бейей бит.

З ө б ә р ж ә т (*шым ғына Йәнбикә әбейгә*). Был теге Мәскәй әбей бит һуң! Изге ниәт менән йөрөмәйҙер, моғайын... (*Йәнбикә уның ҡолағына нәмәлер әйтә.*)

З ө б ә р ж ә т (*бейей-бейей Мәскәй әбейҙең ҡаршыһына бара*). Һин — Мәскәй әбей, мин һине таныным.

М ә с к ә й  ә б е й. Танынылар... Тағы танынылар... Өсөнсө тапҡыр килһәм дә танырҙар... Башҡа бында уралырға ярамай... Ух!..

Итәгенә ут ҡапҡандай, ҡысҡыра-ҡысҡыра сығып йүгерә.

Й ә н б и к ә (*әбейҙәргә, апайҙарға*). Әйҙәгеҙ, ял итеп алайыҡ. Балалар уйнаһындар әйҙә. Көнө буйы уйнаһалар ҙа ялҡмай улар. Салауат, беҙҙе бейетеп, һин дә арығанһыңдыр, әйҙә, тирмәгә, ҡымыҙ яҙып бирәйем, тамағың кипкәндер.

Ололар тирмә эсенә ял итергә инә, балалар үҙ-ара уйын һайлай, шул арала шым ғына Шүрәле инә.

Ш ү р ә л е. Мәскәй әбей йән-фарманға янымдан үтеп китте. Мине лә күрмәне. Өсөнсө тапҡыр ҙа таныһалар, сихыр көсөнөң кәмеүен белә ул. Шуға ҡурҡты. Ә мин өркәк түгел. Ана, малайҙар уйын башларға тора, яндарына барайым әле. (*Урал алдына барып баҫа.*) Ҡурҡтыңмы?..

У р а л. Ә ниңә ҡурҡырға? Беҙ һинең Шүрәле икәнеңде Туҡай әкиәтенән беләбеҙ.

Ш ү р ә л е. Ә мин китап уҡымайым. Көс булғанда аҡыл нимә-

гә кәрәк ул?.. Мин һеҙҙең менән көс һынашырға килдем. Тик өс шарт ҡуям.

Урал. Ниндәй?

Шүрәле. Әгәр ҙә ярышта мин һеҙҙе өс тапҡыр еңһәм, һеҙ миңә иң матур ҡыҙығыҙҙы бүләк итәһегеҙ. Мин уның менән ҡытый-ҡытый уйнайым. (*Сыҙамай, бер туҡтауһыҙ бармаҡтарын уйната.*)

Урал. Туҡта... Туҡта, ашыҡмай тор. (*Малайҙар менән кәңәшләшеп ала. Зөбәржәт апайҙары ла уларға нимәлер әйтә.*) Әйҙә, Шүрәле, беренсе шартыңды әйт, беҙ риза!

Шүрәле (*тирмә янында ятҡан арҡанға күрһәтә*). Арҡандың бер осон һеҙ тотоғоҙ, икенсе осон — мин. Билдәле — арҡан тартышабыҙ. Кем көслө — шул еңә. Еңеүсегә — бүләк!.. Ә көс тигәнең миндә етерлек!..

Шүрәле көс йыйған кеүек, ҡыҙҙарҙан күҙен алмай, ҡулы менән төрлө хәрәкәттәр яһай, маһая, ә малайҙар һиҙҙермәй генә арҡандың бер осон тирмә янындағы ағас түмәргә бәйләйҙәр, өйөлөшөп, Шүрәлегә күрһәтмәйҙәр.

Урал (*шым ғына*). Шүрәлелә — көс, беҙҙә — хәйлә (*ҡысҡыра*). Шүрәле, әйҙә, ярышты башлайыҡ! Беҙ әҙер!

Малайҙар менән Шүрәле арҡан тартыша, тик нисек кенә ҡыланмаһын, еңә алмай Шүрәле, ах-ух килә, аҙаҡ ергә ултыра төшә.

Шүрәле. Еңелдем. Көслө икәнһегеҙ.

Шүрәле ҡыҙҙарға ҡарай-ҡарай башын болғай, улары сырҡ-сырҡ көлөшә, малайҙар арҡанды һиҙҙермәй генә сисеп, икенсе яҡҡа алып ташлай.

Зөбәржәт. Икенсе шартың ниҙән тора, Шүрәле?

Шүрәле. Мин һеҙгә килгәндә утлауҙа ашап йөрөгән аттарҙы күргәйнем. Шуларҙың берәйһен күтәреп, ошо тауҙы урап сығырға кәрәк. Кем алдан килә — шул етеҙ була.

Урал. Шүрәле, һин Әбйәлил әкиәтен беләһеңме?

Шүрәле. Мин әкиәт тыңламайым. Мәскәй әбей ҙә һөйләмәй. Әбей булһа ла бер әкиәт тә белмәй.

Урал. Улайһа, әйҙә, тауҙы бер әйләнеп урайыҡ!..

Улар сығып китә. Балалар ҡул сабып: «Урал!.. Урал!..» — тип ҡысҡыра. Ат сабышҡан тауыштар ишетелә. Бер аҙҙан шатланып Урал килеп инә. Иптәштәре уны ҡосаҡлап ала, ҡулбашына еңелсә һуғалар.

У р а л. Хәс Әбйәлил әкиәтендәге кеүек тегене кәкре ҡайынға ултырттым. Көсө бар барлығын, тик аҡылы — һай!

З ө б ә р ж ә т. Бына, китап яратыуығыҙҙың кәрәге тейҙеме һеҙгә — тейҙе!..

Ах-ух итеп Шүрәле инә, тирен һөртә-һөртә түмәргә ултыра.

Ш ү р ә л е. Ғүмере былай арығаным юҡ ине. Атты күтәреп, билем ауыртып китте.

У р а л. Йә, Шүрәле, кем алдан килде?

Ш ү р ә л е. Һин! Әһ тә итмәй, атты ике ботоң араһына ғына ҡыҫтырып, йүгереп киттең дә барҙың.

Ә м и н ә. Әйт, Шүрәле, өсөнсө шартың нисек?

Ш ү р ә л е. Бик арыным, ултырып ҡына берәй ярыш ойошторайыҡ.

Ә м и н ә (*Зөбәржәт менән кәңәшләшеп ала*). Ярыш та ярыш, әйҙәгеҙ, «Үгеҙ йөҙөк» уйыны уйнайыҡ!

Ҡыҙҙар малайҙар менән дә кәңәшләшеп ала. Малайҙар бер яҡ осона шына ҡағылған бүрәнә индерә.

З ө б ә р ж ә т. Ҡыҙҙар, иҫләп кенә бөтәгеҙ ҙә бүрәнә өҫтөнә ултырығыҙ. Хәҙер Әминә бер ҡыҙҙың усына йөҙөк төшөрә, ә һин, Шүрәле, иғтибар менән генә шуны ҡарап тор, аҙаҡ, кемгә һалынғанын әйтерһең.

Ш ү р ә л е. Хәҙер! Хәҙер! (*Әминәнең артынан ҡалмай, ҡарап йөрөй.*) Бына, ошо ҡыҙҙа!

Ә м и н ә (*әхирәтенең усын ҡарай, унда бер нәмә лә юҡ*). Юҡ. Шүрәле, һин яңылыштың! Был юлы иғтибарлыраҡ бул! (*Бер ҡыҙға йөҙөк һалам ти ҙә, юрамал, бүрәнә ярығына төшөрөп ебәрә.*) Эй, йөҙөгөм ярыҡҡа төшөп китте! Малайҙар, тиҙерәк алып бирегеҙ! Шүрәленең беҙҙең менән уйнағыһы килә бит!

Бүрәнә янына малайҙар йыйылып китә, юрамал йөҙөктө «ала алмай» маташалар. Шүрәле сыҙамай, малайҙарҙы тирә-яҡҡа этәреп, бармағын тығып, йөҙөктө ярыҡтан эҙләй башлай. Шул саҡ Урал тиҙ генә бүрәнәнең шынаһын туп таяғы менән алып ташлай. Шүрәленең бармаҡтары «ҡыҫыла».

Ш ү р ә л е. Әй-әй-әй! Бармаҡтарымды, ҡыҙҙарҙы ҡытыҡлай ғына торған матур бармаҡтарымды ҡыҫтым! Ярҙам итегеҙ, ҡотҡарығыҙ!

У р а л. Нык ауыртамы?

Ш ү р ә л е. Ауырта! Ныҡ ауырта! Ниңә ҡыҫтың бармағымды?

У р а л. Кем ҡыҫҡан һинең бармағыңды? Минме?

Ш ү р ә л е. Әйе, һин! Исемеңде әйт?

У р а л. Былтыр минең исемем. Әгәр ҙә бынан һуң ҡыҙҙарҙы ҡытыҡламаҫҡа һүҙ бирһәң, ҡулыңды ысҡындырам!

Ш ү р ә л е. Былтыр, зинһар өсөн ысҡындыр мине! Һүҙ бирәм, бер ваҡытта ла ҡыҙҙарға теймәм!

Ҡыҙҙар уға бармаҡ янай, ә малайҙар шынаны кире урынына ҡуя. Шүрәле бармаҡтарын өрә-өрә: «Былтыр ҡыҫты бармағымды! Былтыр ҡыҫты бармағымды!» — тип ҡысҡыра-ҡысҡыра сығып йүгерә.

У р а л. Былтыр ҡыҫҡанға быйыл ҡысҡырмайҙар! (*Көлөшәләр.*)

З ө б ә р ж ә т. Балалар, хәҙер мин һеҙҙе, бөтәгеҙҙе лә, башҡорт халҡының милли уйындарын уйнарға саҡырам.

(*Балалар күңелләнеп уйнай башлай.*)

1. Атта сабышыу. (*Бәләкәй малайҙар ағас аттарҙа, һуйыл аттарҙа күрһәтелгән юлды уҙалар, кем тиҙерәк килә, шул еңеүсе була.*)

2. Тоҡ менән һуғышыу. (*Тоҡтарға йомшаҡ бесән тултырыла.*)

3. Йомортҡаны ҡалаҡҡа һалып йүгереү.

4. Аяҡҡа тоҡ кейеп йүгереү.

Зөбәржәт еңеүселәргә бүләк тапшырып тора, тирмәнән ололар сыға.

Й ә н б и к ә. Балалар, ҡояш кискелеккә ауыша башланы. Тугайҙағы байрамды тамамлайыҡ. Ҡалған бутҡаны ҡарғаларға ҡалдырып китәйек, теләктәр теләйек.

Балалар теҙелеп тора.

Б а л а л а р. Бығыр-бығыр бутҡа беште,
Уртаһына май төштө.
Яу, ямғырым, яу, яу, яу!
Кемдәр бутка ашаған,
Матур яҙға оҡшаһын!

Урал менән Әминә ҡалған бутҡаны ҡайын төбөнә, таштарға һалалар.

У р а л. Ағастарҙан ағастарға
Бутҡаларҙы һалдыҡ беҙ.

Ә м и н ә. Һеҙҙең өсөн дә ҡошҡайҙар,
Ҙур байрамдар ҡорҙоҡ беҙ.

З ө б ә р ж ә т. Бутҡа бешкән дан булып,
Хурламағыҙ ҡортҡаһын.
Бутҡа — ҡарға аҙығы,
Бутҡа — ҡарға аҙығы!
Шул бутҡаны хурлаһаң,
Башыңа төшөр яҙығы!
Ал ризыҡты, ал, ҡарғам,
Ҡыуанып аша, ҡарғам!

Алыҫтан ҡарғаларҙың ҡыуанып ҡысҡырған тауышы ишетелә.

Й ә н б и к ә. Яу, ямғырым, яу, яу,
Беҙ булайыҡ һау-һау!

З ө б ә р ж ә т. Ерҙә булһын именлек,
Ерҙә булһын изгелек!
Сәселһен бар яуызлыҡ,
Йәнселһен бар яуызлыҡ!
Арғы яҡта яҙ һайын,
Бирге яҡта яҙ һайын,
Имен торһон был донъялар,
Күрешербеҙ йыл һайын!

# ПУШКИН ИМӘНЕ ЯНЫНДА

ҠАТНАШАЛАР:

Зөһрә — тәрбиәсе (уҡытыусы)
Бесәй — тәрбиәсе (уҡытыусы)
Урал — бала
Руслан — бала
Айгөл — бала
Гөлдәр — бала
Пушкин әкиәттәренең геройҙары — балалар, тәрбиәселәр, ата-әсәләр.

Тәбиғәт һүрәтләнгән шаршау алдында бәләкәй генә матур аҡлан күренә. Балалар ял итергә туҡтай. Ҡоштар тауышы ишетелә. Зөһрә балаларҙы янына йыя.

Зөһрә. Балалар, әйҙәгеҙ, әҙерәк ял итеп алайыҡ. Аҡланға килеп еткәнсе ярайһы уҡ юл үттек. Тирә-яҡты күҙәттек, матурлығына һоҡландыҡ. (*Балалар менән үлән өҫтөнә ултыра.*) Ә хәҙер үҙебеҙ күргән һоҡланғыс күренештәрҙе матур һүҙҙәр менән әйтеп ҡарайыҡ. (*Балалар бер-бер артлы тау-урманға, йылға-күлгә, сәскә-гөлдәргә төбәп, күркәм һүҙҙәр әйтә. Зөһрә уларҙы маҡтап тора.*) Ә шағирҙар, балалар, ошо һүҙҙәрҙе төҙөп, матур-матур шиғырҙар яҙалар. Башҡорт халҡының бөйөк улы, Салауат Юлаев, милли батыр ғына түгел, шағир ҙа. Хәҙер мин һеҙгә уның «Тыуған яғым» тигән шиғырынан өҙөк уҡыйым, тыңлағыҙ.

Зөһрә хисләнеп, тирә-яғына ҡарай-ҡарай, шиғыр һөйләй.

Минең тыуған ҡырҙарым,
Балдай татлы һыуҙарым,
Яландарым, урманым,
Күккә ашҡан Уралым, —
Минең изге төйәгем,
Һеҙҙе һөйә йөрәгем.

Күгәреп күккә күтәрелгән
Ҡарлы башы Уралдың,
Күҙҙең яуын алырҙай
Матурлығын ҡырҙарҙың
Мәңге маҡтар инем мин,
Мәңге данлар инем мин!

Айгөл. Зөһрә апай, Салауат әкиәт яҙғанмы?

Зөһрә. Бәлки, яҙғандыр. Күп йылдар үткән бит, беҙгә тик шиғырҙары ғына килеп еткән.

Гөлнур. Тағы уҡығыҙ Салауат шиғырын.

Зөһрә. Ярай. Ул шиғыр «Тирмәмдә» тип атала. Һеҙ тирмәнең нимә икәнен беләһегеҙ бит. (*Яуап.*)

Тирмәм тора көмөш кеүек
Йылға ярында.
Хуш еҫле сәскәләр үҫә
Тирә яғында.
Көтөүҙәр йөрөй. Мин үҙем
Ятам тирмәмдә.
Туғандарым, яҡындарым
Минең эргәмдә.
Шул саҡ тирмәм ишеген
Асырға ҡуштым.
Төн буйы тыңланым моңон
Һандуғас ҡоштоң.
Ниндәй яҡшы,
Ниндәй татлы
Булды бөгөн төн.
Керпек тә ҡаҡмай үткәрҙем,
Ошо төндө мин.

Айгөл. Йәл, Салауат әкиәт яҙмаған. Ә мин әкиәт яратам.

Руслан, Гөлдәр (*бергә*). Мин дә яратам! Мин дә!

Зөһрә. Ҡайғырмағыҙ, балалар. Ә бына урыҫ шағиры Пушкиндың әкиәттәре беҙгә килеп еткән. Ул да беҙҙең Салауат Юлаев кеүек йәй көнө — июнь айында тыуған. (*Балаларға ике шағирҙың да тыуған йылын, көнөн әйтергә кәрәк.*) Шуныһы ҡыуаныслы, балалар, Пушкин бит беҙҙең Башҡортостанда булған. Уралдың матурлығын күргән, батыр кешеләренә һоҡланған. Балалар, Пушкин ҡарт олатаһына арнаған китабында уның исемен Ибраһим тип яҙған.

Урал. Зөһрә апай, минең олатайымдың да исеме Ибраһим бит! Пушкин — башҡортмо әллә?

Зөһрә (*йылмая*). Бәлки, кем белә, бик-бик алыҫта, бик-бик тәрәндә туғанлыҡ тамыры ла барҙыр. Пушкин ул — бөтә донъяға билдәле шағир, уның әкиәттәрен төрлө илдәге балалар уҡый. Балалар, һеҙ Пушкиндың ниндәй әкиәттәрен беләһегеҙ?

Б а л а л а р. «Салтан батша»,
«Алтын балыҡ»,
«Ете батыр менән үлгән батша ҡыҙы»,
«Балда менән поп»,
«Алтын Әтәс»!

З ө һ р ә. Дөрөҫ. Тағы берәү ҡалды.
«Өҫтә, болот араһында,
Бар халыҡтың күҙ алдында,
Сихырсы батырҙы алып,
Оса тау, диңгеҙҙәр аша...»

Р у с л а н. «Руслан менән Людмила!»

З ө һ р ә. Бына бит, Пушкин батырына һинең исемеңде ҡушҡан, Руслан, тимәк, ысынлап та, туғанлығы барҙыр шағирҙың. Ҡара, бөтә-бөтә әкиәттәрен дә беләһегеҙ бит!

А й г ө л. Зөһрә апай, Пушкиндың берәй әкиәтен уҡығыҙ әле!

З ө һ р ә. Ултырып, арып китмәнегеҙме? Ярай, мин һеҙгә шағирҙың «Салтан батша» әкиәтенән өҙөк уҡыйым. Тыңлағыҙ.

Борон-борон заманда,
Батша торған ҡалала,
Өс сибәр йәшәгән, ти,
Һәр кис йөн иләгән, ти.
Тәҙрә төбөндә генә
Ултырғандар үҙҙәре.
Буйҙаҡ батша хаҡында
Булған мәңге һүҙҙәре.
Олоһо әйтә: «Булһам
Батшаның ҡатыны мин,
Бар әҙәмгә етерлек
Табын әҙерләр инем».
«Мин, — тигән уртансы ҡыҙ,
Батша ҡатыны булһам,
Ғаләмде кейҙерерлек
Туҡыма туҡый алам».
«Батша ҡатыны булһам, —
тигән, ти, кесе ҡыҙ ҙа.
Батыр ул табыр инем,
Һөйөклө батшабыҙға».
Уның әйтеүе була,
Ишек асылып китә.
Салтан батша йылмайып,
Үҙе лә килеп инә.
Ҡойма буйынан ғына
Ҡыҙҙарҙы тыңлап торған.
Кесеһенең һүҙендә
Һөйөү ялҡыны тойған.
«Һин миңә бик оҡшайһың,
Һаумы, сибәр ҡыҙ, — ти ул.
Сентябрь аҙағында
Табырһың баһадир ул.
Һеҙ, апай-күгәрсендәр,
Тиҙерәк йыйыныгыҙ.
Кәләш менән кейәүҙең —
Һеңлегеҙ менән минең
Артынан йүгерегеҙ.
Булыр берәү ашнаҡсы,
Икенсегеҙ туҡыусы».
Өйҙән сығалар былар,
Һарайға юл алалар.
Батша күп уйлап тормай —

Шул кисте үк туй яһай.
Ижабын уҡыткандар,
Йәш кәләш менән бергә
Салтанды ултырткандар.
Мәжлестән һуң йән атып,
Фил һөйәкле койкала,
Икәүҙән-икәү генә
Йәштәр үҙҙәре ҡала.

Аш өйөндә ашнаҡсы
Ярһыған асыуынан.
Туҡыусы апайы ла
Арыған илауынан.
Үлеп көнләшкәндәр, ти,
Йәш батша ҡатынынан.
Һеңлеләре шул төндә
Бәпәйгә буйға ҡалған.

Б а л а л а р. Тағы ла уҡығыҙ, тағы ла уҡығыҙ!

З ө һ р ә. Балалар, беҙҙең аҡлан төрлө мөғжизәләргә бай, шуға ла мин һеҙҙе бында алып килдем. Ишеткәнгә ҡарағанда, күреү яҡшыраҡ, тиҙәр, әйҙәгеҙ, Пушкин иленә ҡунаҡҡа барып ҡайтайыҡ! Шағирҙың яратҡан имәне бар, унда бөтә әкиәт геройҙары ла осраша. Йәгеҙ әле, усығыҙ менән күҙегеҙҙе ҡаплағыҙ ҙа, тын ғына тороғоҙ! Хәҙер... хәҙер... Һау бул, аҡлан! Беҙ имәнгә юл алдыҡ.

Иркен, тын ғына музыка уйнай, шаршау асыла. Һул яҡ ситтә ҙур имән тора. Төбөндә ғалим Бесәй ята. Әлбиттә, ул кешесә һөйләшә. Пушкин әкиәттәренең эпизодтарына ярашлы рәүештә сәхнә төрлө күренештәр менән тула. Һәр кем уны үҙенсә йыһазландыра. Сағыу, матур биҙәктәр күҙҙең яуын ала.

З ө һ р ә. Балалар, күҙегеҙҙе асығыҙ! Әйҙәгеҙ әле, Пушкин имәненә яҡыныраҡ барайыҡ... Ниңә ғалим Бесәй асыулы мырылдап, күҙҙәрен ялтыратып ята икән? (*Балалар уның янына килә, аптырап китәләр.*) Бесәй, йә, Бесәй, ниңә һин шул тиклем асыулы күренәһең? (*Бесәй өндәшмәй, ҡулын һелтәй.*) Балалар, әйҙәгеҙ, Бесәй менән һаулыҡ һорашайыҡ, бәлки, һөйләшер.

Б а л а л а р. Һаумы, Бесәй!

Б е с ә й (*һаулыҡ ала ла урынынан тора*). Нисек асыуланмаҫҡа ла, нисек мырылдамаҫҡа, ти! Ошо имән ботаҡтарында минең яҙыусы Хужам — Бөйөк Пушкиндың әкиәт геройҙары йәшәй ине!

З ө һ р ә. Шунан? Ҡайҙа һуң улар?

Б е с ә й. Ғүмер буйы мин уларҙы һаҡланым, ә бөгөн саҡ ҡына серем итергә ятҡайным.

Б а л а л а р. Нимә булды, Бесәй?

З ө һ р ә. Ҡайҙа булған, ысынлап та, Пушкин әкиәттәренең геройҙары? Бер ерҙә лә күренмәй?

Б е с ә й. Урлағандар! Үҙем эҙләр инем, бынау алтын сынйыр ебәрмәй. Имәнде ташлай алмайым, Пушкин рухы тота.

З ө һ р ә. Кем урлаған икән?

Б е с ә й. Кем булһын — йә Үлмәҫ Кащей батшалыр, йә Мәскәй әбейҙер. Сөнки, Пушкин үҙе лә уларҙы яратмай торғайны. Минең кеүек.

З ө һ р ә. Бесәй, бәлки, беҙ һиңә ярҙам итә алырбыҙ.

Б е с ә й. Миңә ярҙам итер өсөн Пушкин әкиәттәрен бик яҡшы белергә кәрәк шул.

А й г ө л. Ҡайғырма, Бесәй, Зөһрә апай беҙгә Пушкин әкиәттәрен һәр саҡ уҡый ул.

У р а л. Бөтә әкиәттәрен дә беләбеҙ!

Б е с ә й. Шулаймы? (*Ҡыуанып китә.*) Улайһа, эҙләгеҙ геройҙарҙы!.. Мин түҙемһеҙлек менән көтәм. Аҙашмаҫ өсөн һеҙгә яратҡан йомғағымды бирәм. Ул ҡайҙа тәгәрәй — шунда юл тотоғоҙ. Шағирҙың тыуған көнөнә бөтә әкиәт геройҙары ла ул яратҡан имән янында булырға тейеш. Хәйерле юл, балалар! Мин һеҙгә ышанам!

Бесәй балалар менән хушлаша. Зөһрә йомғаҡты алға ташлай. Улар барған яҡта тулҡын тауышы ишетелә. Тимәк, был урын — диңгеҙ буйы.

З ө һ р ә. Балалар, тыңлағыҙ әле, диңгеҙ тулҡынының тауышы ишетелә. Пушкин диңгеҙ ярында йөрөргә яратҡан, ял иткән, шиғырҙар яҙған. Эй, ҡарағыҙ әле, һуҡрана-һуҡрана бер әбей кер йыуып тора. Әллә ялғашы ярыҡ инде, һыуы түгелә лә түгелә.

Р у с л а н. Ярыҡ шул, Зөһрә апай! Был бит «Алтын балыҡ» әкиәте. Теге мыжыҡ әбей тора.

У р а л (*ҡулын маңлайына ҡуя*). Емерек кенә өйҙәре лә күренә.

А й г ө л. Теүәл 33 йыл йәшәй ул бабайы менән яр буйында.

Г ө л д ә р. Бабайы балыҡсы булған, ашарға балыҡ тотҡан.

З ө һ р ә. Эйе шул. Бына, шундуҡ әкиәттең исемен дә белдек. Йомғаҡ дөрөҫ тәгәрәгән икән. Тимәк, әкиәт яланына килеп еттек. Әкиәт геройҙарын да ошонан эҙләргә кәрәк. Әйҙәгеҙ, тыңлайыҡ, ни турала һөйләнеп тора икән ҡарсыҡ. (*Балалар шыма, алғы планда — ҡарсыҡ.*)

Ә б е й (*кер йыуа. Арый, билен яҙа ла ҡулын маңлайына ҡуйып, яр буйын күҙәтә*). Ана, ҡайтып килә, тағы бер нәмә лә тотмаған. Тфү! Балыҡ күберәк булһа, һатып, аҡсаһына яңы ялғаш алыр инек. Бынығы ярылып бөттө. Ошо иҫке өйҙә ғүмер

иттек, яңы өй ҙә һатып ала алманыҡ. Ғүмер буйы йөн иләнем, үҙем һаман туҙған кейем кейәм! Эх, байҙар кеүек атлас, ебәк кейем кейһәм ине, батшалар кеүек прәник ашаһам ине! Эх-ма! Тағы буш ҡул менән ҡайтып килә! Тфү!

Арып, ах та ух итеп, балыҡсы инә, түмәр өҫтөнә ултыра.

Б а б а й. Бөгөн ғәжәп балыҡ тоттом,
Ябай түгел, алтын тоҡом.
Кешесә һөйләште балыҡ,
Диңгеҙгә, ти, ташла алып.
Ни теләһәм дә бирмәксе —
Үҙ хаҡы бик ҡиммәт зәһәр.
Кире ебәрҙем диңгеҙгә —
Ҡыйманым һорарға мәһәр...

Ә б е й (*асыулы, ҡулы — бөйөрөндә, баш һелкеп тыңлап тора*).

Асыҡ ауыҙ, һин — алйот!
Бараңмы әллә алйып.
Ялғаш күптән ярылған,
Торма, һора яңыһын,
Кит диңгеҙгә яңынан!
Асыҡ ауыҙ, алйыған!..

Әбей бабайҙы ҡулындағы кере менән туҡмай-туҡмай алып сығып китә.

З ө һ р ә. Бына ҡарт диңгеҙ ярында,
Балыҡтан һорап ялына.

Балалар, алтын балыҡтан әбей тағы ла нимәләр һорай? (*Яуап.*) Ни өсөн әбей тағы ла ошо ярылған ялғашы менән тороп ҡала? (*Яуап.*) Дөрөҫ, ҡомһоҙлоҡ бына нимәгә алып барып еткерә!.. Эй, Пушкин, ниндәй фәһемле һинең был әкиәтең! (*Балалар менән Зөһрә әңгәмәләшкән арала Бесәй имәнгә «Алтын балыҡ» геройҙарының уйынсыҡтарын элә.*) Балалар, Пушкин һәр саҡ диңгеҙҙең көслө тулҡындарына һоҡланған һәм сал диңгеҙ кеүек мәңге иректе булырға хыялланған. (*Ҡулындағы йомғаҡҡа күрһәтә.*) Балалар, йомғаҡ бер ергә лә ынтылмай, тимәк, яр буйында тағы бер әкиәт бар. (*Тулҡын тауышы тағы көслөрәк ишетелә.*) Ҡарағыҙ әле, ҡарағыҙ, был яҡҡа ҙур бер мискә йөҙөп килә түгелме һуң?.. Ҡыҙыҡ, эсендә нимә бар икән, белмәйһегеҙме?

Б а л а л а р. Беләбеҙ, Зөһрә апай!

У р а л. Салтан батшаның ҡатыны менән улы ултыра унда!

Г ө л д ә р. Батшаға ялған хат яҙып, көнсөл апайҙары диңгеҙгә ташлата уларҙы. Үлтерергә уйлайҙар!

З ө һ р ә. Әйе, Салтан батша, уның улы Гвидон, һылыу аҡҡош хаҡында был әкиәт. Тыңлағыҙ әле, тулҡын ниндәй көслө, мин һиҙәм, балалар, мискәләге батша улы тулҡындарға нимәлер тип ҡысҡыра. Әйҙәгеҙ, беҙ ҙә уға ярҙам итәйек. Тиҙерәк ҡотолһон был бәләнән.

Б ө т ә һ е: Ирекле тулҡынҡайым,
Уйнайһың, туҡтамайһың,
Диңгеҙ ташын шымартып,
Теләгәнсә шаярып,
Караптар күтәрәһең,
Ер ярҙарын күмәһең.
Беҙҙең йәнгә ҡағылма,
Ташласы ҡағып ярға!

Тулҡын тауышы йышыраҡ ишетелә, музыка яңғырай.

З ө һ р ә. Тулҡын уны тыңлаған,
Мискәне ярға ҡыуған.
Ипләп кенә этәреп,
Ергә сығарып ҡуйған.
Бәләнән ҡотолалар,
Ҡаты ер тоя улар.

Бына улар ярылған мискәнән сыҡтылар һәм утрау буйлап киттеләр. Ә буш мискә беҙҙең янға килеп ятты. (*Буш мискәнең алғы яғы күренә.*) Балалар, был әкиәттә тағы ниндәй геройҙар бар? (*Яуап.*) Әкиәттең аҙағы нисек бөтә? (*Яуап.*) Пушкин үҙе лә был әкиәтте бик яратҡан, тиҙәр.

А й г ө л. Ул әкиәтте мин дә яратам, Зөһрә апай!

Б а л а л а р. Мин дә, мин дә!

Арҡан тотоп, диңгеҙ ярында йөрөгән Балданы күреп ҡалалар.

З ө һ р ә. Балалар, ҡарағыҙ әле, бер егет диңгеҙ яры буйында арҡан тотоп йөрөй, ни эшләргә уйлай икән ул?

У р а л. Мин беләм, Зөһрә апай! Ул да беҙҙең Әбйәлил ағай кеүек шайтандарҙы кәкре ҡайынға терәтергә йөрөй.

З ө һ р ә. Нисек? Был әкиәттең дә исемен беләһегеҙме?

А й г ө л. Беләбеҙ, Зөһрә апай! Ул әкиәт поп менән хеҙмәтсе Балда тураһында.

Г ө л д ә р. Поп Балданы үлтереү өсөн шайтандар янына ебәрә.

З ө һ р ә. Эйе, шул, һалым һората. Улайһа, әйҙәгеҙ, күҙәтәйек. Балда менән шайтан осрашырҙармы икән?

У р а л. Ана, ана, шайтан менән Балда был яҡҡа килә.

З ө һ р ә. Осрашҡандар! Әйҙәгеҙ, ҡыуаҡ эсенә йәшенәйек!

Балалар йәшенә, Балда менән шайтан инә.

Ш а й т а н. Ниңә һин, Балда,
Йөрөйһөң бында?

Б а л д а. Арҡан менән аҫып ҡуям диңгеҙҙе,
Ҡоротам, ҡәһәрле зат, үҙегеҙҙе!

Ш а й т а н. Аңламайым һис тә үҙеңде,
Рәнйеттекме әллә үҙеңде?
Асыу тотаң, ниңә, әйт инде!

Б а л д а. Ниңә, ниңә — һорап тора!
Һалым тигән бурыс тора!
Онотҡанһың бирер мәлде —
Күптән үткән түләр мәле!

Ш а й т а н. Аҫма, диңгеҙҙе, Балда!
Беҙҙе әҙерәк аңла!
Түләрбеҙ барыһын да,
Бирәм!.. Бирәм барын да!
Тик килешәйек алда...
Шартым бар минең, Балда!

Һөйләнә-һөйләнә сығып китәләр.

З ө һ р ә. Ниндәйҙер килешеү тураһында һөйләйҙәр, балалар, һеҙ беләһегеҙме был турала?

Р у с л а н. Беләбеҙ. Шайтан әйтә: «Әйҙә, Балда, күлде уратып йүгерәйек: әгәр мин беренсе килһәм, бурыс һалымын түләмәйем, әгәр һин беренсе килһәң — бер тоҡ алтын бирермен», — ти.

З ө һ р ә. Ярышта кем еңә һуң?

Урал. Беҙҙең Әбйәлил ағай кеүек Балда: «Башта минең бәләкәй ҡустым менән ярышып ҡара, уны уҙһаң — алтының үҙеңә ҡала», — ти.

Зөһрә. Шунан ярышта кем еңә?

Руслан (*көлә*). Балданың ҡустыһы — ҡуян! (*Көлөшәләр.*)

Зөһрә. Был әкиәтте лә һеҙ беләһегеҙ! Әй Пушкин, халыҡ әкиәттәрен үҙе лә ныҡ яратҡан икән шул! Яратмаһа, был тиклем матур әкиәттәр яҙмаҫ ине!

Серле, яғымлы көй ишетелә. Зөһрә балаларҙы ултырырға саҡыра. Ҡапыл көйҙө Әтәстең хәүефле ҡысҡырған тауышы бүлә. Балалар ҡурҡып китә, Зөһрә уларҙы тынысландыра.

Зөһрә. Алтын Әтәс был яҡҡа осоп килә, үҙе ниңәлер бик хәүефле күренә.

Әтәс (*ярһып килеп инә*). Әй, халыҡ! Тиҙерәк яуға әҙерлән! Көнсығыштан яу килә! Яу килә!

Гөлдәр. Мин ҡурҡам. Тағы көнсығышта һуғыш буламы?

Урал. Ҡурҡма, Гөлдәр! Был бит Алтын Әтәс — Пушкин геройы. Хәтерләйһеңме әкиәтте? Ҡурҡма.

Әтәс. Яу килә! (*Сәхнә буйлап, «осоп»-йүгереп йөрөй.*) Көнсығыштан яу килә! Яу килә! Яуға әҙерләнегеҙ! Яу килә!

Айгөл. Кит, Әтәс, беҙҙе ҡурҡытып йөрөмә! Һиңә арналған әкиәтте лә беҙ беләбеҙ. Һуғыш килмәй көнсығыштан, ул яҡтан беҙгә тылсымлы әкиәттәр килә! Аңланыңмы?

Әтәс. Яу килә! Яу килә! Ҡуҙғал, батшам! Яу килә!

Әтәс ҡысҡыра-ҡысҡыра сығып китә. Серле көй уйнауын дауам итә, матур итеп биҙәлгән (алғы планы) сатыр «пәйҙә» була.

Зөһрә. Көнсығышта, ысынлап та, бер ниндәй ҙә һуғыш булмай, бар нәмәгә ышанған батша, Әтәстең һүҙен тыңлап, ғәскәр йыйып, яуға китә һәм...

Һәм ҡапыл сатыр асыла,
Шамахан батша-ҡыҙ сыға,
Алһыу таң кеүек йылмайып,
Батшабыҙҙың ҡаршыһына.

Көн яҡтыһына баҡҡандай,
Төн ҡошолай шыма батша.
Ҡыҙ күҙенә ҡараған да
Һүҙ әйтә алмаған башҡа.

(*Зөһрә шиғыр уҡый, серле көйгә Шамахан батша-ҡыҙ үҙенең көнсығыш бейеүен бейей һәм һиҙҙермәй генә юҡ була.*) Алдана, батша, алдана. Әкиәт аҙағында Пушкин нимә, ти, балалар?

Урал. Әкиәт — алдыҡ һымаҡ,
Ләкин йәштәргә һабаҡ!

Зөһрә. Дөрөҫ, балалар! Юҡ-барға ышанып, ялтырауыҡҡа ҡыҙығып, илде, халыҡты һәләк итергә ярамай. Ил башлығы аҡыллы булырға тейеш. Пушкин беҙгә шул турала иҫкәртә. (*Бесәй ҡыуана-ҡыуана әкиәт геройҙарын иманға әлә.*) Балалар, тыңлағыҙ әле, ат тояҡтарының тауышы ишетелә. (*Бер батыр урман-тауҙар ҡыҙып елдерә, ҡысҡыра-ҡысҡыра кемделер эҙләй.*)

Руслан. Зөһрә апай, мин дә ишеттем ул тауышты. Король улы Елисей ул. Батша ҡыҙын — кәләшен эҙләй.

Зөһрә. Елисей?! Ниндәй әкиәттән ул?

Айгөл. Зөһрә апай, был бит «Ете батыр менән үлгән батша ҡыҙы» әкиәтенән.

Зөһрә. Эйе шул. Минеңсә, Елисейгә лә ярҙам итергә кәрәк. Балалар, тиҙ генә әкиәтте хәтерләгеҙ әле, кемдәрҙән ярҙам һорай король улы?

Балалар. Ҡояштан, Айҙан, Елдән.

Зөһрә. Дөрөҫ. Гөлдәр, һин түңәрәк битле, бик матур ҡыҙыҡайһың, әйҙә, һин Ҡояш бул. Ә Урал — Ел батыр булыр.

Уларға ҡояш, ел маскалары кейҙерә. Ат туҡтаған тауыш ишетелә. Арыған Елисей инә. Ҡояшҡа мөрәжәғәт итә.

Елисей. Ҡояшҡайым, һин йөрөйһөң,
Күктә йыл әйләнәһенә.
Тоташтырып ҡышты яҙға
Беҙҙе күрәһең һәр ерҙә.
Йәп-йәш кенә батша ҡыҙын,
Күрмәнеңме был донъяла?
Мин кейәүе булам уның,
Яуап бирсе һорауыма.

Ҡояш. Ҡәҙерлем, һылыуың менән,
Бер ерҙә лә күрешмәнем.
Бәлки, ул тере түгелдер,
Күрһә-күргәндер Ай — күршем.
Осраҡкандыр берәй ерҙә,
Тап иткәндер, йә, эҙен дә.

Елисей башын аҫҡа эйеп, сығып китә.

З ө һ р ә. Елисей ҡара төндә саҡ көтөп ала. (*Сәхнә әҙерәк ҡараңғылана, бер яҡта «Ай» балҡый.*) Ягымлы һүҙҙәр менән король улы Айға өндәшә, кәләшен эҙләп йөрөүен әйтә. Балалар, Елисейҙең Айға әйткән ягымлы һүҙҙәрен иҫкә төшөрәйек әле.

У р а л. Айҙы алтын мөгөҙ менән сағыштыра.

Р у с л а н. Дуҫҡайым, тип өндәшә.

А й г ө л. Түңәрәк, нурлы йөҙ, ти.

Г ө л д ә р. Йондоҙҙар һине ярата, ти.

З ө һ р ә. Әйе, тик Ай ҙа күрмәгән икән шул батша ҡыҙын. Елгә мөрәжәғәт итергә ҡуша, Елисей Елде эҙләп китә.

Урал кейгән маска сәс кеүек елберләп, ҡыштырлап тора. Елисей инә.

Е л и с е й. Ел-дауыл! Һин көслөһөң,
Болоттарҙы ҡыуаһың.
Диңгеҙ тулҡынландырып,
Яландарҙа туҙаһың!
Бер Алланан ҡурҡаһың,
Башҡаларға хужаһың.
Күрҙеңме Ер йөҙөндә,
Кәләшем — батша ҡыҙын?
Кейәүе булам уның.

У р а л. Күрҙемме икән... Туҡта!
Тын аҡҡан йылға артында,
Күкһел бейек тау аҫтында,
Ҡайғы баҫҡан мәмерйәлә,
Сынйырлы бағаналарҙа,
Гәлсәр табут тирбәлә.
Бер ниндәй эҙ юҡ тирәлә.
Кәләшең бушлыҡ эсендә —
Ята шул табут эсендә.

Елисей башын аҫҡа эйеп, йәшле күҙҙәрен һөртә-һөртә сығып китә.

З ө һ р ә. Ел ары йүгергән, ти,
Илай-илай король улы
Шул яҡҡа йүнәлгән, ти.

Ҡыҙҙар илай.

Р у с л а н. Ҡыҙҙар, иламағыҙ, әкиәттең аҙағы һәйбәт бөтә.

У р а л. Кейәү кәләшен таба, үгәй әсәнең сихыры юҡҡа сыға.

З ө һ р ә. Батшалыҡҡа ҡайталар һәм туй яһайҙар. Пушкин былай ти.

Мин дә булдым был туйҙа,
Бал, һыра эстем унда.
Мыйыҡ буйлап аҡһа ла
Тәтемәне ауыҙға!

(*Балалар көлөшә, Зөһрә һиҙҙермәй генә йомғағын кирегә тәгәрәтә.*) Балалар, ҡарағыҙ әле, йомғаҡ кирегә, Бесәй яғына тәгәрәп китте, тимәк, беҙгә лә имән янына ҡайтырға ваҡыт етте.

Бесәй уларҙы ҡыуанып, ҡолас йәйеп ҡаршы ала.

Б е с ә й. Рәхмәт һеҙгә, балалар! Пушкиндың тыуған көнөнә бөтә әкиәт геройҙары ла тылсымлы имән янына йыйылып бөттө! Әгәр ҙә һеҙ ул турала белмәһәгеҙ, бик ҡыйын хәлгә ҡалыр инек. Бәләнән ҡотҡарҙығыҙ! Ә хәҙер ҡарағыҙ әле имәнгә! Мөғжизә!

Киртләс диңгеҙ ҡултығында,
Йәшел имән ҡуйынында,
Алтын сынйыр буйлап йөрөй,
Ғалим бесәй көн-төн унда (*үҙенә күрһәтә*).
Уңға боролһа — йыр һуҙа,
Һөйләй әкиәтен — һулда.
Бында мөғжизә: шүрәле
Йөрөй ҡаңғырып урманда.
Һыу инәһе тын ултыра
Йәшел имән ботағында.
Күрелмәгән кейек эҙе,
Ята серле һуҡмаҡтарҙа.
Ишеге юҡ, тәҙрәһе юҡ
Йорт тора тауыҡ ботонда.
Урман, үҙәндәр күренә.
Таң алдынан диңгеҙ бөркә,
Тулҡынын ҡомло буш ергә.
Һыу һөлөгө кеүек матур,
Утыҙ өс ғәйрәтле батыр,
Һыу өҫтөнә күтәрелә,
Ағалары менән бергә.
Өҫтә, болот араһында,
Бар халыҡтың күҙ алдында,
Сихырсы батырҙы алып,
Оса тау, диңгеҙҙәр аша.
Король улына һоҡланып,
Ауыҙ асып ҡала батша.
Ҡараңғы зиндан эсендә,
Ҡайғыра һылыу бер үҙе.
Тоғро хеҙмәт итә уға,
Ҡарауылсы — һоро бүре.
Һөйләнә-һөйләнә килә,
Мәскәй әбей менән килә.
Алтын өсөн һушы китеп,
Кащей батша — ҡомһоҙ үлә.
...Геройҙар күп — бары һеҙгә!

Музыка яңғырай, имән өҫтөнә яйлап ҡына А. С. Пушкиндың һүрәте төшә. Балалар шатланып ҡул саба.

Пушкин булды был урында,
Эсте тәмләп ҡорт балын да.
Йәшел имәнде лә күрҙе,
Зәңгәр диңгеҙҙең ярында.

Шағирға әкиәттәремде
Һөйләнем шунда барын да.
Пушкин рухы был урында!

Күңелле музыка аҫтында Бесәй үҙенең дә һүрәтен Пушкин һүрәте янына элә лә балалар менән хушлашып, сығып китә.

З ө һ р ә. Балалар, бына беҙ Пушкин имәне янында ҡунаҡта булдыҡ. Әкиәттәрҙең геройҙары менән осраштыҡ. Бик күңелле булды. Беҙҙе үҙебеҙҙең аҡлан да көтә торғандыр инде. Күҙҙәрегеҙҙе тағы йомоғоҙ. Хуш бул, Пушкин имәне! Беҙ һине онотмабыҙ!

Арттағы шаршау төшә, алда тағы аҡлан күренеше.

Бына тағы Уралға ҡайттыҡ! Йәгеҙ... (*Балалар күҙҙәрен аса.*) Бына беҙҙең аҡлан!

А й г ө л. Зөһрә апай, ниңәлер беҙҙең аҡлан тағы ла матурыраҡ булып киткән кеүек күренә!

Г ө л д ә р. Эйе, ниңә икән?

З ө һ р ә. Пушкин имәне янында йөрөгәндә һеҙ аҡланығыҙҙы һағынып өлгөрҙөгөҙ, шуға ла ул тағы ла матурыраҡ, күңелегеҙгә яҡыныраҡ күренә. Ғәзиз тыуған ер мәңге кешене үҙенә тарта шул.

Ай Уралым, Уралым,
Күгәреп ятҡан Уралым...

Б а л а л а р. Минең изге төйәгем,
Һеҙҙе һөйә йөрәгем.

З ө һ р ә. Мәңге маҡтар инем мин.

Б а л а л а р. Мәңге маҡтар инем мин,
Мәңге данлар инем мин!

# ҺАУМЫ, ҺАУМЫ, ҠЫШ БАБАЙ!

ҠАТНАШАЛАР:

| | |
|---|---|
| Ҡыш бабай | Айыу |
| Ҡарһылыу | Төлкөбикә |
| Һайыҫҡан-почтальон | Тейен |
| Етеҙаяҡ | Ҡыҙ |
| Оҙонғолаҡ | Малай |
| Ҡыҫҡағойроҡ | Ҡар бөртөктәре |
| Бүре | Клоундар |
| Ҡуян балалары | |

Зал. Артҡы планда әле уттары янмаған, биҙәлгән йәшел шыршы ултыра. Алғы планда — «урман». Бер нисә яһалма бәләкәй шыршы төбөндә, аяҡ аҫтында мамыҡ ҡар ята. Бер яҡ ситтәрәк матур биҙәктәр менән биҙәлгән өй. Урын тарыраҡ булһа, өйҙөң алғы ягын ғына күрһәтергә мөмкин. Ул — ҡуяндарҙың өйө. Урманға һайыҫҡан-почтальон килеп инә.

### БЕРЕНСЕ КҮРЕНЕШ

Һайыҫҡан-почтальон. Һаумыһығыҙ, ҡуяндар! (*Тирә-яғына ҡарай, ләкин берәү ҙә күренмәй.*) Әһ-һә! Әле былар уйнарға сыҡмаған икән. Минең ниңә килгәнемде белһәләр, ҡыуаныстарынан бынау шыршы бейеклеге һикерерҙәр ине. Әйтһәм, әйтәйем инде, бөгөн мәктәптәрҙә, балалар баҡсаларында иҫке йылды оҙатып, Яңы йылды ҡаршы алалар. Ҙур байрам буласаҡ. Шул кисәгә бик күп ҡунаҡтар саҡырылған. (*Сумкаһынан бер саҡырыу билетын алып күрһәтә.*) Бына ошондай саҡырыу билеттарын бө-

тә урман буйлап таратып йөрөйөм. Сумкам бушап та бара. Бүре, Айыу, Ҡуяндарға бирһәм — бөттө. Бына ошо өйҙә әсәләре менән өс ҡуян балаһы йәшәй. Әле әсәләре тау итәгендә төшкөлөккә ағас ҡайырылары, төрлө тубырсыҡтар йыйып йөрөй. Моғайын, бәләкәстәренә өйҙән алыҫ китмәҫкә, шауламаҫҡа ҡушҡандыр. Бүренән бик ҡурҡа улар. Ярай, мин дә шауламай торайым, һуңыраҡ килермен. Ҡыйын булһа ла Айыу ағайҙы уята торайым, бәлки, юлда Бүре лә осрап ҡуйыр.

Ул китеү менән өйҙән ҡуян балаһы килеп сыға, етеҙ генә шыршылар араһында йүгереп ала.

Етеҙаяҡ. Минең исемем Етеҙаяҡ! Әсәйем ниңә ул исемде ҡушты тиһегеҙме? Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ. (*Яуап.*) Дөрөҫ. Сөнки, мин бик шәп йүгерәм, аяҡтарым бик етеҙ! (*Тағы йүгергеләп ала.*) Минең Оҙонғолаҡ исемле ағайым, Ҡыҫҡағойроҡ исемле ҡустым бар. Хәҙер уларҙы ла уйнарға саҡырам. (*Ҡысҡыра.*) Оҙонғолаҡ ағай! Ҡыҫҡағойроҡ! Әйҙәгеҙ, уйнарға сығығыҙ! Өй тирәһендә тыныс!

Оҙонғолаҡ менән Ҡыҫҡағойроҡ килеп сығыу менән уларға «ҡар» бәрә.

Оҙонғолаҡ. Ә! Әле һин шулаймы?!

Ҡыҫҡағойроҡ. Етеҙаяҡ беҙҙең сыҡҡанды ғына көтөп торған икән! (*Ҡар бәрешеп уйнайҙар.*)

Бөтәһе бергә (*бәләкәй шыршы тирәләп уйнап алалар*).

Күңелле беҙҙең урманда,
Ап-аҡ ҡына ҡар яуған.
Һоро тунybыҙҙы һалып,
Ағын кейҙек яңынан.
Беҙгә әсәй шауламаҫҡа,
Китмәҫкә ҡушты алыҫ.
Ҡапыл Бүре ос(о)рар ҙа
Үҙенә китер алып.

Ҡапыл ағас ботаҡтары һынған, Бүре олоған тауыш ишетелә. Бер аҙҙан Бүре үҙе күренә. Ҡуяндар шыршы аҫтына боҫалар.

Бүре. Мин ялбыр һоро Бүре.
Тештәрем минең эре.
Аа-ам!..

Ҡулыма ҡуян эләкһә,
Ҡотолалмаç ғүмере.

(*Ҡуяндар дерелдәп ултыра.*)

Ҡ ы ç ҡ а ғ о й р о ҡ. Мин ҡурҡам.

О ҙ о н ғ о л а ҡ. Нимә эшләрбеҙ икән, әсәй ҙә өйҙә юҡ!

Е т е ҙ а я ҡ. Ҡурҡмағыҙ. Мин хәҙер сығам да йүгерә-йүгерә эҙҙәремде бутармын, юл яҙҙырырмын, ә һеҙ шул арала өйгә һыҙығыҙ, аҙаҡ мин ҡайтырмын.

Етеҙаяҡ шыршы артынан сыға ла йүгерә башлай. Бүре уның артынан төшә, шул арала Оҙонғолаҡ менән Ҡыçҡағойроҡ өйҙәренә ҡаса.

Б ү р е. Һин минән ҡотола алмаçһың! Шәп йүгермә, ниндәй ҡуян булып сыҡты был? Ғүмере күргәнем булманы быңдай етеҙ аяҡлыны!

Е т е ҙ а я ҡ. Барыбер тота алмаçһың! Беҙ барыбыҙ ҙа етеҙ! (*Тауышҡа һайыçҡан-почтальон килеп инә.*)

Һ а й ы ç ҡ а н-п о ч т а л ь о н. Был ниндәй тауыш тағы, янғын сыҡҡанмы әллә урманда! Ә, Бүре Ҡуянды баçтыра икән. Туҡта Бүре!

Б ү р е. Кит бынан! Ҡамасаулама! Бар, икенсе урында шыҡырла!..

Һ а й ы ç ҡ а н-п о ч т а л ь о н. Туҡта тим! Мин һине ҡунаҡҡа саҡырырға килдем!

Б ү р е. Алдашма! Мине берәү ҙә ҡунаҡҡа саҡырмай, яуыз, тиҙәр!

Һ а й ы ç ҡ а н-п о ч т а л ь о н. Яуызлыҡ эшләмә һуң, саҡырырҙар. Мә, саҡырыу билеты, ышанмаһаң, ҡара.

Б ү р е (*йүгереп килеп билетты тартып ала ла еçкәй*). Тәмле генә бәлеш еçе сығып тора. Ура! Хәҙер үк китәм байрамға!

Һ а й ы ç ҡ а н-п о ч т а л ь о н. Бүре, шул тиклем ашыҡма, саҡырыу ҡағыҙында килеү ваҡыты күрһәтелгән, үҙең дә маскарад кейемендә түгелһең икән, бар, әҙерлән.

Б ү р е (*маңлайына һуғып ала*). Эй, баш тигәнең. Яңы йыл килгәнен бөтөнләй онотҡанмын бит! Бынау шыршыны алып ҡайтып, тубырсыҡтар эләйем, кисәгә әҙерләнәйем! (*Бер шыршыны алып, саҡырыу билетын болғай-болғай сығып китә.*)

Һ а й ы ç ҡ а н-п о ч т а л ь о н. Эй, ҡуяндар, тиҙерәк килегеҙ, һеҙгә лә саҡырыу хаты бар!

Бүре менән Һайыҫҡан һөйләшкән арала ҡуяндар өйгә инеп киткән була, баштарын сығарып, алмашлап, тәҙрәнән ҡарап торалар, хәҙер барыһы йүгереп килеп сыға.

Оҙонғолаҡ. Беҙҙе лә байрамға саҡыралармы?..

Һайыҫҡан-почтальон. Эйе, һеҙ ҙә әҙерләнегеҙ. (*Ҡуян балалары һайыҫҡанға рәхмәт әйтеп, сәпәкәй итәләр.*) Йә, мин киттем. Балаларыма бутҡа бешереп ашатаһым бар әле. Урман буйлап, бик оҙаҡ йөрөп киттем.

Ҡуян балалары уны уратып йыр йырлайҙар. Көй — үҙ ҡарамаҡта.

Ҡуян балалары:

Аҡ түшле һайыҫҡан
Ҡайтып төшкән алыҫтан.
Тәмле бутҡа бешергән,
Һары майҙы төшөргән.
Балаларын ашатҡан,
Аҙаҡ йырлап йоҡлатҡан.
Әлли-бәлли — бәү-бәү!
Бәү-бәү!

Һайыҫҡан-почтальон. Ниндәй матур йыр, рәхмәт! (*Күңелләнеп, ҡулын болғай-болғай сығып китә.*)

Оҙонғолаҡ. Беҙҙең дә әсәй хәҙер ҡайта.

Етеҙаяҡ. Әйҙәгеҙ, әсәй килгәнсе беҙ ҙә ошо шыршы менән өйҙө балҡытып биҙәп ҡуяйыҡ.

Ҡыҫҡағойроҡ. Эй, ҡайһылай һәйбәт буласаҡ! Аҙаҡ, күмәкләп, байрамға барырбыҙ.

Бөтәһе бергә. Әйҙәгеҙ, әйҙәгеҙ! (*Улар ҙа шыршы алып, өйҙәренә инеп китә.*)

## ИКЕНСЕ КҮРЕНЕШ

Залда ут алына. Барыһына ла матур итеп биҙәлгән шыршы күренә. Ашығып урман йәнлектәре килеп инә.

Айыу. Икенсе ҡабырғама әйләнергә уйланып ята инем. Һайыҫҡан-почтальон шыршы байрамына саҡырыу хаты ҡалдырып китте. Юрған аҫтынан сығырға тура килде. Шулай ҙа һаман йоҡо килә. Балалар әле барыбер күренмәй, шыршы төбөнә ятып, әҙерәк кенә серем итеп алайым.

Т е й е н. Айыу ағай, йоҡламай тор, аҙаҡ уята алмабыҙ.

А й ы у. Уянырмын... уянырмын... Саҡ ҡына. Саҡ ҡына... (*Шыршының икенсе яғына сығып, йоҡларға ята.*)

Т ө л к ө б и к ә. Бүре ҡоҙа, һин беҙҙе бик иртә алып килдең бит әле. Өйрәк бәлештәре ҡуйылғас та өлгөрөр инек.

Б ү р е. Алда килгән — урын өсөн, артта килгән — һый өсөн, тиҙәр, миңә байрамдың башы ҡыҙыҡ, бөтә булған таныштарҙы осратаһың, ул арыҫланмы, ул ишәкме тигәндәй. Их, ҡасан башлана инде байрам.

О ҙ о н ғ о л а ҡ. Бүре ағай, шаулама, ана, тауыш ишетелә, тиҙ генә Айыу олатай янына барып йәшенеп торайыҡ. Хужаларҙан алдан килгәс, уңайһыҙ.

Б ү р е. Улайһа, әйҙәгеҙ. Мине ғүмер буйы тәртипкә өйрәттеләр инде. Байрам хөрмәтенә тыңларға тура килер.

Йәшенәләр. Малай менән ҡыҙ инә.

Ҡ ы ҙ.

Нindәй матур биҙәлгән зал,
Буласаҡ бында карнавал.
Килегеҙ бөтәгеҙ ҙә,
Ҡалмағыҙ өйөгөҙҙә.
Маскарад костюмдарында
Ҡупшы шыршы эргәһендә,
Бергәләп әйләнергә
Килегеҙ бөтәгеҙ ҙә.

М а л а й.

Шыршыбыҙ көлөп тора,
Осонда йондоҙ яна.
Гәлсәр өйө эргәһендә
Тейен тубырсыҡ яра.

Ҡ ы ҙ.

Йәшел шыршы бәҫләнгән,
Ай нурына күмелгән.
Яңы йыл байрамы килә,
Шатлыҡ таша күңелдән.

Ҡ ы ҙ, м а л а й.

Күңелдәрҙә йыр ғына,
Тынғы бирмәй урғыла.

Күңелле көйгә шыршы тирәләй бейеп алалар.

Ҡыҙ. Беҙгә хәҙер тиҙерәк
Йыйылышырға кәрәк.
Ҡунаҡтарыбыҙ ҡайҙа,
Тик тороуҙан ни файҙа?
Яңы йыл байрамына
Саҡырҙыҡ бит барын да.
Ҡыш бабай килеп етер,
Күңелһеҙ бит, тип әйтер.

М а л а й. Саҡырыу билеттарын
Биргәнмен һайыҫҡанға,
Адрестары ла дөрөҫ,
Килмәйҙәр бит һаман да.

Ҡ ы ҙ. Бошонма, ҡара тәҙрәгә,
Бейешеп матур көйгә,
Ҡар бөртөктәре талпына,
Ашыға беҙҙең өйгә.

Ҡар бөртөктәре костюмдары кейгән кескәй генә ҡыҙҙар йүгереп килеп инә. Ҡулдарында — ап-аҡ елпеүестәр, шыршы тирәләй бейейҙәр.

1-с е ҡ а р б ө р т ө г ө.

Саҡырыу ҡағыҙы алғас,
Ултырып талғын елгә,
Елпенеп-елпенеп төштөк
Беҙ зәңгәр күктән ергә.

2-с е ҡ а р б ө р т ө г ө.

Бөтәбеҙ ҙә аҡ күлдәктән,
Беҙ бит ҡар бөртөктәре.
Сибәр Ҡарһылыу апайҙың
Беҙ ынйы бөртөктәре.

3-с ө ҡ а р б ө р т ө г ө.

Тик һеҙҙә йылы икән,
Иремәбеҙме икән?

Ҡ ы ҙ. Тәҙрә эргәһенә генә
Килегеҙ бөтәгеҙ ҙә.
Ҡурҡмағыҙ, һылыуҡайҙарым,
Һалҡынса булыр һеҙгә.

Ҡар бөртөктәре, һеҙ Ҡарһылыу менән урман йәнлектәрен күрмәнегеҙме, ниңәлер улар оҙаҡланы.

1-се ҡар бөртөгө. Күрҙек, күрҙек, ҡыр йәнлектәре беҙҙән дә алда байрамға китте.

2-се ҡар бөртөгө. Ә Ҡарһылыу апайыбыҙ хәҙер килә. Ана, кескәй генә ҡыңғырау тауыштары ла ишетелә башланы.

3-сө ҡар бөртөгө. Аҙашып йөрөмәһен, әйҙәгеҙ, саҡырайыҡ. Урамда шыршылы өйҙәр бик күп.

Бөтәһе бергә. Эй, Ҡарһылыу, Ҡарһылыу,
Ҡар кеүек ап-аҡ һылыу.
Беҙ бында күптән, килсе,
Тиҙерәк күренһәңсе!

Алыҫтан Ҡарһылыуҙың: «Киләм, киләм, һеҙ ҡайҙа?» — тигән тауышы ишетелә. Балалар: «Ҡарһылыуҡай, беҙ бында!» — тиҙәр. Ҡарһылыу күренә, ҡар бөртөктәре уны уратып ала, бөтәһе лә ҡыуанып ҡул саба.

1-се ҡар бөртөгө. Бөтә урам ағарған,
Ап-аҡ ҡына ҡар яуған.
Өйөрөлдөк ҡар һымаҡ,
Бергә түңәрәк яһап.

Ҡар бөртөктәре түңәрәк яһап өйөрөлә. Бер төркөм, маскарад кейемдәрендәге балалар, Ҡарһылыуҙы уратып ала.

Ҡарһылыу. Яңы йыл менән ҡотлайым,
Барығыҙҙы ла, дуҫтар!
Тик ниңә һуң шыршығыҙҙа
Күренмәй нурлы уттар?
Эй шыршы, нурлы шыршы,
Нур сәсеп, көлөп ебәр.
Мең төрлө уттар ҡабыҙып,
Беҙҙең күңелде күтәр.

Шыршыла ҡапыл уттар ҡабына, бөтәһе шатланып ҡул саба.

Ҡарһылыу. Ниндәй матур шыршы! Байрам күңелле булаҡ! Балалар, мин ниңәлер урман йәнлектәрен күрмәйем, ҡайҙа улар?

Һайыҫҡан-почтальон. Ҡарһылыу апай, мин уларҙың барыһына ла саҡырыу хаты ебәрҙем. Күбеһенә үҙем алып барҙым.

М а л а й. Ә мин Айыу ағайҙың ниңә килмәгәнен беләм. Уның тураһында матур ғына шиғыр ҙа бар, һөйләйемме?

Ҡ а р һ ы л ы у. Һөйлә, бәлки, берәй сер барҙыр!

М а л а й.

Тау башында — ҡар, ҡар,
Тау аҫтында — ҡар, ҡар,
Шыршы аҫтында ла — ҡар,
Унда бер айыу ҙа бар.
Шауламағыҙ, йоҡлаһын,
Тауышығыҙ сыҡмаһын!

Ҡ а р һ ы л ы у. Белдем, беҙҙең шыршы төбөндә лә берәйһе йоҡлайҙыр әле, әйҙәгеҙ, ҡарайыҡ. (*Ҡарайҙар, йәнлектәрҙе күрәләр.*)

Кемдең күҙе ялтырай,
Ә ҡолағы ҡалтырай?

Б а л а л а р.

Ул — беҙҙең аҡ ҡуяндар,
Иң хөрмәтле ҡунаҡтар!

Ҡ а р һ ы л ы у.

Тағы ла кем тегенән —
Ҡарай шыршы төбөнән?

Б а л а л а р.

Ҡалмаған Бүреһе лә,
Айыуы, Тейене лә!
Улар килгән бейергә,
Йыр йырлап әйләнергә!

Балалар ҡул саба, йәнлектәр сығып, еңел көйгә бейейҙәр.

Ҡ а р һ ы л ы у. Ә Айыу һаман йоҡлай, әйҙәгеҙ, уятайыҡ! (*Айыуҙы уяталар, ул һис тә тормай.*) Нимә эшләйек, балалар?

К л о у н д а р. Беҙ уға арнап йыр сығарҙыҡ, тыңлағыҙ!

Был хәл шыршы байрамында,
Йәй уртаһында булды.
Тауҙа балыҡ тотҡан саҡта,
Эҫелә Айыу туңды.

Б а л а л а р.

Эйе шул, шулай шул,
Эҫелә Айыу туңды.

К л о у н д а р.

Был хәл булды ғинуарҙа,
Айыу бейей урамда.

Бесәйҙәр сәпәкәй һуға,
Эттәр уйнай ҡурайҙа.

Айыу башын күтәрә лә, әле бер ҡулын, әле икенсе ҡулын ҡолағына ҡуйып тыңлай. «Эт тауышы ишетелмәй бит...» — тип мығырлай ҙа, икенсе яғына әйләнеп, кире ята.

Клоундар. Был хәл Яңы йыл алдынан,
Булды апрель айында.
Бал яратмай йоҡлап ята,
Беҙҙә ҡунаҡ Айыу ҙа!

Балалар. Эйе шул, шулай ул,
Бал яратмай, ти, Айыу!

Айыу. Яратам мин, яратам,
Йоҡламайым, тик ятам!

(*Тора, тирә-яғына ҡарай, балалар көлә, Айыу ғәжәпләнә.*) Бал тип йырлайҙар ҙа йырлайҙар, ә балдары юҡ. Ә-һә, белдем, балды миңә тик Ҡыш бабай ғына алып килә! Ә ул һаман килмәгәнме ни? Ҡыш бабай, һин ҡайҙа, беҙ һине күстәнәс менән көтәбеҙ! Ҡыш ба-бай!

Ҡарһылыу. Эйе, Ҡыш бабай барығыҙға ла күстәнәстәр, бүләктәр алып килер, саҡ ҡына көтөгөҙ. Ә мин ҡыҙҙарға төрлө төҫтәге шыршы фонарҙары бүләк итәм. Әйҙә, шыршы тирәләп, йырлап-бейеп алһындар!

Ҡыҙҙар (*Ҡарһылыу менән бергә йырлап, бейейҙәр*).

Ҡарһылыу беҙҙең ҡыҙҙарға,
Бүләк итте фонарҙар.
Йәшел шыршы ботағында
Улар балҡып янырҙар.

Ҡушымта: Бына, бына, ҡарағыҙ,
Шат фонарымды минең.
Ҡыҙыл, йәшел, зәңгәр нурҙа
Күңелле әйләнәм мин!

Шыршы тирәләй торалар, ҡулдарында — фонарҙар. Торған урында әйләнеп, фонарҙарын аҫҡа тотоп, матур хәрәкәттәр яһап бейейҙәр.

Шыршы беҙҙе саҡыра
Әйлән-бәйлән уйнарға.

Фонарҙарыбыҙҙы тотоп,
Бергәләшеп йырларға.

Ҡ у ш ы м т а: Бына, бына, ҡарағыҙ,
Шат фонарымды минең.
Ҡыҙыл, йәшел, зәңгәр нурҙа
Күңелле әйләнәм мин!..

Ҡыҙҙар шыршы тирәләй йөрөйҙәр, был юлы фонарҙарын өҫкә күтәреп, һығылмалы хәрәкәттәр яһап, еңел итеп бейейҙәр.

Йәшел ботаҡта бейешеп,
Беҙҙең фонарҙар яна.
Уларҙың яҡты йөҙөнән
Бөтә донъя нурлана.

Ҡ у ш ы м т а: Бына, бына, ҡарағыҙ,
Шат фонарымды минең.
Ҡыҙыл, йәшел, зәңгәр нурҙа
Күңелле әйләнәм мин.

Торған урында бейейҙәр. Ике ҡулдағы фонарҙы алмашлап, бер аҫҡа төшөрөп, бер өҫкә күтәреп, әйләнәләр. Йырҙың аҙағында фонарҙарын шыршыға эләләр.

Ҡ а р һ ы л ы у. Ҡарағыҙ әле, шыршыбыҙ тағы ла матурайып китте. Тик бына... Ҡыш бабай ғына һаман юҡ.

Ҡыш бабай беҙҙең турала,
Әллә оноткан инде.
Олатай, әй, олатай,
Ау!.. Ишетәһеңме?
Тиҙерәк килһәң ине!

Балалар, әйҙәгеҙ, Ҡыш бабайҙы бергәләп саҡырайыҡ. (*Бергәләп.*) Ау!.. Ҡыш бабай!.. Ау!.. Беҙ һине көтәбеҙ! Ҡыш бабай! (*Тыңлайҙар, көтәләр, тауыш юҡ.*) Ҡайҙа минең әкиәт геройҙарым — Ҡыҙыл Башлыҡ, Итекле Бесәй, Алтынсәс, сәскә-ҡыҙҙар, серле ҡыңғырауҙарығыҙҙы ҡағығыҙ, Ҡыш бабайҙы саҡырығыҙ!

Әкиәт геройҙары шыршы тирәләп ҡыңғырау, шалтырауыҡтарын ҡағып, бейейбейей түңәрәк яһап, өйөрөләләр. Бүләк, күстәнәс һалынған биҙәкле тоғон йөкмәп, Ҡыш бабай килеп инә. Бөтәһе тороп, ҡул саба.

Ҡ ы ш б а б а й. Һаумыһығыҙ, балалар! Һаумы, Ҡарһылыу! Шыршы байрамына саҡырған ҡыңғырау тауышын ишеттем дә, ярһыу Аҡбуҙатыма ултырып, һеҙҙең янға ашыҡтым.

Эйе, ашыҡтым килергә
Яңы йыл ҡаршыларға.
Ҡупшы шыршығыҙ тирәләй
Бейеп күңел асырға.
Яңы йыл менән, дуҫтарым,
Ҡотлайым барығыҙҙы.

Ҡунаҡтарҙы, йәнлектәрҙе
Бындағы һәр баланы.
Бынан теүәл бер йыл элек
Ҡунаҡ булғайным һеҙҙә.
Ашҡынып тағы ла килдем,
Һағындығыҙмы һеҙ ҙә?

Б а л а л а р. Эйе, эйе, Ҡыш бабай,
Һағындыҡ һине беҙ ҙә!

Ҡ ы ш б а б а й: Буйға тағы үҫкәнһегеҙ,
Матур булып киткәнһегеҙ.
Ә мин шул көйө һаман —
Аҡ һаҡаллы аҡ бабаң!
Ә шулай ҙа бейегәндә
Йәштәрсә дәртле баҫам.
Бейейем таң атҡансы,
Тирем сығып аҡҡансы!

Балалар шаулап ҡул саба, күңелле көй ишетелә.

Ҡ а р һ ы л ы у. Улайһа, түңәрәккә
Торайыҡ бергә-бергә.
Дәртләндереп ҡул сабайыҡ
Ҡыш бабайҙың үҙенә.
Ҡыуанып бейеп йөрөһөн
Беҙҙең менән үҙе лә.

Б а л а л а р. Әйҙә, әйҙә, Ҡыш бабай,
Бейе, бейе, Ҡыш бабай!

Балалар шыршы тирәләп торалар, бер урында торған көйө бейейҙәр, ҡул сабалар, Ҡыш бабай түңәрәк эсендә бейей, арый, алдан әҙерләнгән урынға килә.

Ҡ ы ш б а б а й (*ултыра*).

Арымаһам да тирләтте,
Ҡайҙа ҡар бөртөктәре?
Бейегеҙ, бабайығыҙға
Һалҡын бөркөгөҙ әле!

Ҡ а р һ ы л ы у. Олатай, ошо урында
Ултырып тор әҙ генә.

Ҡар-ҡыҙҙар менән һибәйек
Һалҡын нурҙар үҙеңә.

Ҡарһылыу менән ҡар бөртөктәре уны тирәләп, елпеүестәре менән елпеп, һәлмәк көй аҫтында, талпынып-талпынып бейейҙәр. Бер нисә бала ҡысҡырып шиғыр уҡый. Ҡыш бабай рәхәтләнеп йылмайып ултыра.

Ҡарһылыу төштө бейергә —
Орсоҡтай бөтөрөлә.
Аҡ сәскәләй ап-аҡ ҡарҙар
Артынан өйөрөлә.
Кет-кет көлөп ситтән генә
Ҡарап тора Ҡыш бабай.

Минең ҡыҙым, Ҡарһылыуым,
Оҫта бейей, ти, ҡалай.
Айыуҙар һоҡланып тора,
Ҡарһылыуҙың һынына.
Аҡ шыршы бейегән кеүек
Йәшел шыршы янында.

Ҡ ы ш  б а б а й. Рәхмәт, рәхмәт, тын алдым,
Һалҡынса булып ҡалды.

Балалар, ҡар бөртөктәре миңә бик оҡшай. Улар минең туныма, кәпәсемә йәбешеп бында инделәр. Бына, ҡарағыҙ әле, бейәләйемдә лә бар! Эй, ҡайҙа булып бөткән улар? Һыу тамсылары ғына ялтырай. Кем әйтә, кем белә, балалар? (*Балалар яуап бирә.*)

Ҡ а р һ ы л ы у. Олатай, ҡар бөртөктәренең ҡайҙа булғанын балалар белмәй тип уйлайһығыҙмы? Бына хәҙер мин уларға бер һорау бирәм, бәлки, белмәҫтәр ҙә. Кисә мин ҡоштар тағарағына икмәк валсығы, кипкән миләш һалдым. Бәләкәй генә һоро ҡоштар осоп килде. Улар миләшкә теймәне, ә бына икмәк валсығын рәхәтләнеп ашанылар. Ҡарап торам, тағы икенсе ҡоштар килеп ултырҙы. Уларҙың түштәре ҡыҙыл, ҡанат, ҡойроҡ остары ҡара ғына. Бер аҙҙан миләш емештәренең береһе лә ҡалманы. Әйтегеҙ әле, тағараҡҡа ниндәй ҡоштар осоп килгәндәр?.. (*Балалар яуап бирә.*)

Ҡ ы ш  б а б а й. Эй ҡыҙым, һинең дә һорауыңа яуап бирҙеләр. Бына нәмә, балалар, һеҙ ғинуар айының яңы йыл башы, ә ҡыштың уртаһы икәнен беләһегеҙ. Ҡар — аҡ ҡағыҙ төҫлө, ҡыряландар, урман араларында ап-аҡ булып ята. Бына әле һеҙгә ҡунаҡҡа килгәндә тирә-яғыма күҙ һалам. Ҡар өҫтө серле нөктәләр: нөктә, өтөр, һыҙыҡтар менән тулы. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ, улар нимәне аңлата икән?.. (*Балалар яуап бирә.*) Дөрөҫ, бик күп нәмә беләһегеҙ икән.

Ә хәҙер шыршы тирәләй
Рәхәтләнеп уйнағыҙ.

Минең ҡыҙым Ҡарһылыуҙы
Арағыҙға алығыҙ.

Балалар шатланып Ҡыш бабай, Ҡарһылыу тураһында йыр йырлап әйләнәләр.

Ҡ а р һ ы л ы у. Йырығыҙ бик оҡшаны,
Табып булмаҫ башҡаны.

Ҡ ы ш б а б а й. Беҙ бейенек — күрҙегеҙ,
Ә хәҙер, йә, үҙегеҙ
Ниндәй һөнәр беләһегеҙ,
Шуларҙы күрһәтегеҙ.

Балалар шиғыр һөйләйҙәр, Ҡыш бабайҙың үҙе менән дә, Ҡарһылыу менән дә төрлө уйындар уйнайҙар.

Ҡ ы ш б а б а й.

Бик оҫта икәнһегеҙ,
Күп һөнәр беләһегеҙ.
Эшләгәндә лә шулай
Талмаһын беләгегеҙ.

Мин дә һеҙгә, балалар,
Ҡалмам бурыслы булып,
Бына, тоғомдо асайыҡ,
Бүләктәр ята тулып.

Ҡарһылыу ҡыҙым, әйҙә, тоҡто сисеп ҡарайыҡ, бүләккә Ҡар әбейең нимәләр һалды икән? (*Сисәләр, тоҡтоң ауыҙында ҙур шалҡан пәйҙә була.*) Кем һалған бында шалҡанды? Күстәнәскә был Ҡар әбейе башҡа нәмә тапмағанмы? Яңылыш һалып ебәргәндер инде, ҡана, алайыҡ әле. (*Алырға уйлай, ләкин ала алмай.*)

Ҡ а р һ ы л ы у. Олатай, әйҙә, мин һиңә ярҙам итәйем. (*Олатаһының биленән тотоп, икәүләп тарталар, ләкин шалҡан урынынан ҡуҙғалмай.*) Олатай, бында бер хикмәт бар, Ҡар өләсәй юҡҡа ғына шундай ҙур шалҡанды һалып ебәрмәгәндер, ул бит үҙе әкиәт һөйләргә ярата, әйҙә, шулай булғас, «Шалҡан» әкиәтенең геройҙарын ярҙамға саҡырайыҡ.

Ҡ ы ш б а б а й. Аҡыллыһың да инде, ҡыҙым. Йәгеҙ әле, Аҡтүш, Мыяубикә, Сысҡан, һеҙ ҡайҙа?.. (*Ҡыҫҡаса «Шалҡан» әкиәте уйнала.*) Уф, барыбер тартып сығарҙыҡ, бергәләгәс — булдырҙыҡ!

Ҡ а р һ ы л ы у (*шалҡанды аса*).

Олатай, ҡара әле!
Ҡайһылай күп бүләктәр:
Алма, кәнфит, ҡаластар.

Бал, таҫма, төрлө ептәр,
Ҡурсаҡтар, уйынсыҡтар!

Ҡыш бабай. Былар һеҙгә, балалар! Ни бирәйек Ҡуянға?
Балалар. Кишер бирәйек уға.
Ҡыш бабай. Ә һиңә, Тайыштабан?
Айыу. Ауыҙ итәйек балдан.
Ҡыш бабай. Ә һиңә, һоро Бүре?

Бүре. Арыганса уйнаным,
Яңы йылда иң тәмлеһе —
Бәлештер тип уйланым.

Ҡыш бабай. Нимә ярата Төлкө?

Төлкө. Ҡаҙ, өйрәк, тауыҡ ите!
Юҡ! Юҡ! Эй, яңылыштым,
Аҡ ҡалас булһа — етте.

Көлөшәләр. Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу бөтәһенә лә бүләк, күстәнәс бирә.

Ҡыҙ. Рәхмәт һиңә, Ҡыш бабай,
Рәхмәт һиңә, Ҡарһылыу.

Малай. Бүләктәрегеҙ өсөн,
Күңелле байрам өсөн!

Ҡыш бабай. Һау булығыҙ, йәнлектәр,
Һау булығыҙ, балалар!
Башҡа мәктәп, баҡсаларға
Беҙҙең бараһыбыҙ бар!

Ҡарһылыу. Унда ла бит балалар
Беҙҙе көтөп торалар.

Балалар. Һау бул, һөйөклө Ҡарһылыу,
Һау бул, Ҡыш бабай!

Ҡунаҡтарҙы оҙаталар.

# Әкиәттәр

# ШАМИЛ МЕНӘН ШАҠШАҠА

## Осрашыу

Яңауылда йәшәгән, ти, башҡорт малайы Шамил. Ҡыш буйы ҙур ҡалала уҡыған, ә йәй, атаһына хужалыҡта ярҙам иткән.

Бер кисте аталы-уллы урман ситендәге аҡланда бесән сапҡандар ҙа аттары Аҡбәкәлде үҙ яйҙарына ҡуйып, ҡайтырға сыҡҡандар. Атаһы арып, йоҡомһорап киткән, ял иткән, ә Шамил бесән өҫтөндә һуҙылып, әкрен генә йыр йырлап килә икән. Ҡапыл Аҡбәкәл шып туҡтаған. Малай күтәрелеп ҡараһа, үҙҙәрен иҫ киткес матур урында тороуын күргән. Тулҡынланып, бормаланып-бормаланып аҡҡан көмөштәй йылға ҡояштың һуңғы нурҙарында иркәләнгән, арғы ярҙағы тау теҙмәләрендә аҡ ҡайындар шаулаған йәйрәп ятҡан тигеҙлектә йәшел урман уратып алған, ти... Шамил атаһын уятҡан да шатланып ҡысҡырып ебәргән.

— Атай, ҡара әле, был ниндәй шәп урын, ә? Бында элек әллә ауыл булғанмы?

Атаһы ла аптырап килеп торған һәм малайына шауламаҫҡа ҡушҡан. Ләкин... ләкин һуң булған, ти. Урман шаулаған, геүләп, ҡот осҡос көслө ҡойон күтәрелгән. Күп тә үтмәгән, китеп өлгөрә алмай ҡалған Шамилдар алдында бер өйөр шайтан малайҙар пәйҙә булған. Көндөҙ йөрөргә лә ҡурҡмаған улар, кеше күҙенә лә күренер булғандар.

Өҫтәрендә ҡыҙыл бишмәттәре баҙлаған, күҙҙәре йәшкелт ут кеүек янған, ерән сәстәре бөҙрәләнеп торған. Кәзә бәрәсенеке кеүек

мөгөҙҙәре шыма, осло, үҙҙәренең бар тәне йөнтәҫ икән. Башлыҡтары булһа кәрәк, алға сығып, бөйөрөнә таянған да:

— Кем бында йөрөргә рөхсәт итте һеҙгә?! — тип ҡысҡырып ебәргән.

Аҡбәкәл ер тырнап кешнәгән, арбалағы бесән тирә-яҡҡа осҡан. «Быларҙан ҡотолоп булмаҫ...» — тип уйлаған Шамилдың атаһы, ләкин ҡурҡмаған, үҙҙәре кеүек ҡысҡырып:

— Рөхсәт итегеҙ, ҡунаҡҡа килдек! — тигән. Малай ҙа эштең ни икәнен тиҙ аңлаған, ти.

— Мин уҡыусымын, ялда йөрөйөм. Һеҙҙең менән дуҫлашып, йәйҙе бергә үткәрергә уйлағайным, — ти икән хәйләкәр йылмайып.

Башлыҡҡа яуап оҡшаған.

— Рөхсәт итәм, исемең нисек? — тип һораған.

— Сөләймән улы Шамил. Ә һинеке?

— Минеке Шаҡшаҡа. Оҡшаш икән исемдәребеҙ.

— Йәштәштәр бит. Ә һин уҡый-яҙа беләһеңме?

— Минме?!. — Шаҡшаҡа маһайып, башын юғары күтәреп, ҡара таяғын тауҙар яғына һуҙыуы була, ут бөркөлөп, таш ҡаялар ярылып, аҫҡа тәгәрәй.

— Мин — батша улы! Мине бар донъяның ғалим ен-пәрейҙәре уҡыта. Хаҡына тормайбыҙ. Алтын-көмөш етерлек беҙҙә. Сөнки олатайым байлыҡ сығанағы итеп Урал илен һайлаған! Уҡыу башланһа, бында йөрөмәйем мин. Ете диңгеҙ аръяғындағы берәү ҙә белмәгән утрауҙа белем алам. Башҡалар наҙан. Уларға уҡыу кәрәкмәй. Күп белһәләр үҙеңә баш бирмәҫтәр, ти атайым.

— Тимәк, икебеҙ ҙә белемле. Ә һин әкиәт яратаһыңмы?

— Нимәгә ул миңә әкиәт? Мин мөсһөҙ кеше түгел, ә көслө шайтан затынан!

— Ярай, ярай, мин былай ғына һорайым. Сөнки үҙем әкиәт китаптары уҡырға яратам. Бында, йәйгелеккә алып киләйемме?

— Кил. Тик ауылға ҡайтып йөрөмәйһең! Иртәгә атайың менән бер көн эсендә үҙеңә өй һалып алаһың да шуның менән — вәссәләм!

Шамилдың атаһы Шаҡшаҡаның шартына риза булған, ти.

— Һеҙ ҡайтып киткән саҡтарҙа миңә бик күңелһеҙ буласаҡ, —

тигән була Шамил, — ауылдағы дуҫтарымды үҙем менән алырға яраймы?

— Һинең дуҫтарың бармы? Кемдәр улар?

— Юлдаш исемле этем, Иркәбикә исемле бесәйем, йәнә буҙтурғайым бар, — тигән малай.

— Һе! Уларымы ни, ал әйҙә, — тигән Шаҡшаҡа. — Тик дуҫтарың менән бер көн дә бында тора алмаясаҡһың! Уйнағанда беҙ бер кемде лә йәлләмәйбеҙ! Ҡулыбыҙ ҡаты беҙҙең! Аҙаҡтан үкенерлек булмаһын! Ә! Оҡшаттыңмы был төбәкте? Олатайым тыуған көнөмә бүләк итте! Был ожмах киҫәге — минеке! Был ерҙәргә мин хужа! Башҡалар минең ҡылығыма ҡыҫыла алмай! Хатта атайым батша ла!

Сөләймән ағай Шаҡшаҡаның уҫал, ләкин маҡтансыҡ, аҡылға еңелерәк икәнен һәм үҙенең малайының шайтанға бирелмәҫен аңлаған, ти.

— Ҡунаҡсыллығың өсөн рәхмәт, — тигән Шамилдың атаһы Шаҡшаҡаға хушлашҡан саҡта. — Иртәгә өй әҙер буласаҡ!

— Саҡырылмаған ҡунаҡты көтәбеҙ! Ха-ха-ха! — тип көлгән Шаҡшаҡа һәм тағы ҡойон күтәреп, күҙҙән юғалған. Тирә-яҡ шайтан малайҙарҙың көлгән тауышынан яңғырап торған, ти.

Аҡбәкәл ҡайтыр юлға төшкән. Атаһы ауыҙынан Шамил ауыл тарихын ишеткән.

— Әйе, был, ысынлап та, беҙҙең ауылдың нигеҙе. Ул саҡта мин сәңгелдәктә генә ятҡанмын. Туғандар бәхетле көн күргән. Баҫыуҙарында иген үҫтергәндәр, йылғаһында балыҡ тотҡандар, урманында кейек-ҡош аулағандар, ағас эше, ҡортсолоҡ, малсылыҡ менән дә шөғөлләнгәндәр. Күршелә, ҡара урман эсендә, кеше аяғы баҫмаған шырлыҡ араһындағы ҙур батша һарайында йәшәгән Шаҡшаҡаның нәҫеле. Берҙән-бер көндө ҡарт батшаның күҙе беҙҙең төбәккә төшкән. Тынғылыҡ бөткән ауылға: төндәрен өй нигеҙҙәре һелкенгән, мал-тыуар ҡырылған, йәш сабыйҙар урланған, ғәриптәр күбәйгән, һыуҙар бысранған, тау башында меңәр йылдар ятҡан оло-оло таштар шартлап, баҫыуға тәгәрәгән, көнөн-төнөн урман геүләгән, ҡош-ҡорт ҡасҡан. Халыҡ зары ерҙә иңрәп, Урал тауҙарына күтәрелгән. Олатайҙарың тыуған төбәкте һаҡлап ҡаршы торған, тик көстәр тигеҙ булмаған. Бер көндө ҡанһыҙ батша ауылды яндырырға бойороҡ биргән. Аҡ нигеҙ таштары ғы-

на тороп ҡалған йорт-ҡуранан. Халыҡты һаҡлап ҡалыу өсөн олатайың ауылды икенсе урынға күсерергә мәжбүр булған. Яланғас тауҙар итәгендә йәшәһәләр ҙә, янында көн итерлек күле булғас, бирешмәгәндәр. Бөгөн килеп, Аҡбәкәлдең юлы атай-олатайҙар нигеҙенә тартылған икән, аптырама, улым, аттың тоҡомо — иҫке ыҙманан, — тигән атаһы көрһөнөп.

— Бисара хайуан да тыуған яҡҡа тартыла икән — тигән малай. — Атай, ә беҙ — кешеләр. Ниңә беҙгә кире ауылға ҡайтмаҫҡа?

Йөрәге сабырһыҙланып типкән Шамилдың күҙҙәре ялтырап киткән. Шаҡшаҡанан ҡотолоу өсөн генә булған ризаһыҙлығына ниндәйҙер үсле асыу тойғоһо ла килеп ҡушылған.

— Атай! Олатайымдың ауылын кире тергеҙергә кәрәк! Халыҡҡа ер-һыуҙы ҡайтарып бирергә ине.

— Шайтандарҙы нисек еңәһең, улым? Улар бит ҡара көскә эйә. Атаһын, әлбиттә, шайтандарҙың иҫ киткес күп булыуы, кеше ышанмаҫлыҡ яуызлығы ҡурҡытҡан.

— Атай, Шаҡшаҡа беҙгә бер көн ваҡыт бирҙе. Олатайымдың нигеҙенә өй һалайыҡ. Ул үҙе лә кәңәштәре менән ярҙам итер.

— Дөрөҫ әйтәһең, улым, — тип ризалашҡан атаһы. — Ҡарттар һүҙенә лә ҡолаҡ һалайыҡ. Өләсәйең ни әйтер?

— Өләсәйем Шаҡшаҡанан ҡотолоу юлын әйтер! — тип шатланып ҡысҡырып ебәргән Шамил. — Уның тылсымлы әкиәттәре бар! Ә шайтандар әкиәт белмәй, тимәк, улар шыр алйот!

## Тәүге һынау

Ҡояштың тәүге нурҙары күренеү менән Яңауылдағы бөтә ират боронғо ауыл — иҫке ыҙма урынына килеп, Шамилға бер көн эсендә өй һалып бирәләр. Өләсәһе малайға — бесәй, олатаһы — эт, әсәһе — буҙтурғай, атаһы — ҡурай бүләк итә.

— Был бесәй, — ти өләсәһе, — өйөңдөң ҡото булыр, шайтандар нигеҙеңә яуызлыҡ ҡыла алмаҫ. Муйынына алтын сылбырлы доға һыҙылған ҡабырсаҡ тағам, үҙеңә лә ҡағыла алмаҫ дошмандар. Ҡылған изге эштәреңә Хоҙай үҙе, халыҡтың аҡылы ярҙам итһен, балаҡайым.

— Эт һиңә тоғро юлдаш булыр, үҙеңде яңғыҙ тоймаҫһың, — тигән олатаһы. — Бурҙай һиҙгер, бик батыр, бер ваҡытта ла хужаһын ташламаҫ.

— Мин һинең өсөн бик борсолам, — тигән әсәһе улын ҡосаҡлап. — Буҙтурғайың бер-беребеҙгә сәләм тапшырып торор, күңелеңде йыуатыр. Насар хәл яҡынлашһа, алдан хәбәр итер.

— Ҡурайыңдың көсөн үҙең беләһең, — тигән атаһы Шамилдың арҡаһынан ҡағып. — Иң мөһиме — йөрәгеңә ҡурҡыу һалма, еңерһең Шаҡшаҡаны.

Ҡояш байыр алдынан Шамил менән хушлашып, халыҡ ҡайтып киткән, ти.

— Иртәгә шайтандар өй туйларға киләсәк, — тигән эте күҙҙәрен мөлдөрәтеп. — Ни эшләрбеҙ, хужам?

— Ҡурҡма, — тип Юлдашының башынан һыйпаған малай, — өләсәйемдең доғаһы елпеүҙәренән һаҡлаясаҡ, әкиәттәре ни эшләргә кәрәклеген өйрәтәсәк. Ә хәҙергә ял итәбеҙ, иртәгә таң менән урманға сәтләүек йыйырға сығабыҙ. Өй туйларға килгән Шаҡшаҡаны һыйларбыҙ.

Иртә таң менән этен эйәртеп, Шамил урманға сәтләүек йыйырға китә. Бесәйе менән буҙтурғайы өй һаҡлап, береһе ҡыйыҡ башында, икенсеһе нигеҙ буйында, ятып ҡалды, ти.

Күп тә үтмәй, йоҡоларын туйҙырған шайтан малайҙар шарылдап, ҡойон бурандары уйнатып, өй эсенә килеп тулдылар, ти. Саҡ һынмай ҡалған ҡанаттарын көскә күтәреп, буҙтурғай урман яғына ашығып осҡан, ә бесәй ҡото осоп, һике аҫтына инеп боҫҡан.

— Өй хужаһы ниңә беҙҙе ҡаршы алмай?! — тип хихылдап көлгән Шаҡшаҡа бөтә тишек-тошоҡтарҙы әҙләтеп. — Әллә ҡурҡыуынан Ер аҫты батшалығына ҡасҡанмы?!.

— Ҡайҙа ҡасһа ла, һә тигәнсе табырбыҙ! — тигән шайтан малайҙар хужаларына. — Тик әҙерәк күңел асырға рөхсәт ит! Ҡыҙыл бишмәттәре ялпылдап, ҡулдары уйнап тора, ти, үҙҙәренең.

Бер аҙҙан уларҙың кәйеф-сафа ҡороуҙарынан өй эсе дер һелкенеп торҙо, ти. Ҡот осҡос бейеү еленә, имәнес йыр тауыштарына яҡын-тирәләге ҡош-ҡорттар ҡурҡып, урман ышығына йәшенеп бөтәләр.

Шамил ҡайтҡанда шайтан малайҙар тәҙрәнән баштарын сыға-

рып, бер туҡтауһыҙ һыҙғырып, ҡурҡышынан ней үле, ней тере түгел бесәйҙең ҡойроғонан тотоп, зыр өйөрөлдөрәләр икән. Юлдаш бер туҡтауһыҙ өрөргә тотонған, ә Шамил Иркәбикәһен нык йәлләһә лә был хәлгә иҫе китмәгәнен күрһәтергә тырышҡан. Тегеләрҙең күҙе алдында сәтләүек тоғо янына тағы ике тоҡ алып килгән. Береһе бәләкәй таштар менән тулы, икенсеһе, ҙур ғынаһы, буш икән.

— Тоғоң эсендә алтын ятамы әллә? — тип ҡысҡырған Шаҡшаҡа уйынды туҡтатып. — Был төбәктә хазина тулып ята, ти олатайым.

Шамил эре генә ҡиәфәт менән түмәр өҫтөнә барып ултыра ла яйлап ҡына, шартылдатып, сәтләүек яра башлай. Түҙмәгән Шаҡшаҡа, ялт итеп малай янына килеп сыҡҡан.

— Нимә яраһың? — тип һораған түмәр тирәләй өйөрөлөп, сабырһыҙланып бейей-бейей. — Ҡайһылай тәмләп ашайһың, бик тәмлеме?

— Күрмәйһеңме ни? Сәтләүек ярам.

— Беҙгә лә бир!

— Ниңә бирмәҫкә? Мин һаран түгел, һеҙгә лә бер тоҡ йыйғанмын.

Шаҡшаның күҙҙәре ялтырап китә, алан-йолан ҡаранып, иң беренсе булып, таш тоғона ташлана.

— Һеҙ ҙә рәхим итегеҙ, ҡунаҡтар, мин барығыҙға ла йыйҙым. Оялмағыҙ, ашағыҙ!..

Шаҡшаҡа иптәштәре менән тештәрен һындыра-һындыра таш яра башлай.

— Ниңә беҙҙең сәтләүек бик ҡаты? — тип һорай Шаҡшаҡа һынып, атылып киткән тешен эҙләй-эҙләй — Мин батша улы, тештәрем теүәл булырға тейеш!..

— Тешең йомшаҡтыр! — тип үсектерә уны Шамил. — Улайһа, ярып ашағыҙ! Ана теге тоҡта сүкеш ята — алығыҙ! Тик ул берәү генә, кем өлгөрә, шул сүкешкә хужа!

Шайтан малайҙар бер-береһен төртә-төртә тоҡ эсенән сүкеш эҙләй башлағандар. Тапмағас, хатта, эсенә үк инеп киткәндәр. Шамилға шул ғына кәрәк икән!.. Тиҙ генә тоҡ ауыҙын сүс бау менән бәйләп ҡуя ла, рәхәтләнеп сәтләүек ярыуын дауам итә. Эте менән бесәйе, буҙтурғайы рәхәтләнеп көлә, ти.

— Шамил, тоҡ эсенән сығар беҙҙе! — тип бойора Шаҡшаҡа. — Кәрәгенде алаһың Шаҡшаҡанан! Мин һиңә ауыл малайы түгел!

— Ултырығыҙ әле, ял итегеҙ! — тип үсектерә тағы Шамил тегеләрҙе. — Өй эсендә нәмә туҙҙырып, арығанһығыҙҙыр. Батырға ла ял кәрәк!

Шайтан малайҙар бер аҙға тынып ҡалалар ҙа тағы шаулаша башлайҙар.

— Шамил, беҙ ял итеп туйҙыҡ, сығар!

— Шамил, беҙ тонсоғоп үлеп барабыҙ, сығар!

— Шамил, беҙ һиңә алтын бирәбеҙ, сығар!

— Шамил! Шамил...

Илаған, шыңшыған тауыштар ишетелә.

— Шамил, беҙ башҡаса һинең өйөңә яҡын да юламабыҙ, һүҙ бирәбеҙ, — ти Шаҡшаҡа ҡарлыҡҡан тауыш менән. — Өй, әйҙә, һинеке булһын!

— Беләм мин һеҙҙең биргән вәғәҙәгеҙҙе нисек үтәүегеҙҙе!

— Юҡ... юҡ... Шамил... Ҡағыҙ бир... Башҡа өйөгөҙгә яҡын килмәйем тип, яҙыу ҡалдырам. Ҡултамғамды ла ҡуям.

— Тик онотма, Шаҡшаҡа! Вәғәҙәңде боҙһаң, упҡын йотор үҙеңде! Шаһиттар бар: ана, Ҡояш, бына, Ер! Тамуҡ утында янырға теләмәйһеңдер бит! Уйла!

— Ой-ой-ой! — тип тоҡ тишерҙәй булып ҡысҡыра Шаҡшаҡа, — бир ҡағыҙыңды.

— Ә һин ашыҡма, — ти Шамил, ҡул һыйырлыҡ ҡына итеп тоҡто асҡас, — ҡарайыҡ әле, мәктәптә нисек уҡығанһың икән? Күрмәйенсә лә матур яҙа алаһыңмы икән?

Шаҡшаҡа ҡулын ғына сығарып, ант ҡағыҙы яҙып, ҡултамғаһын ҡуйҙы, ти. Шамил тағы бер тапҡыр иҫкәртә.

— Әгәр ант ҡағыҙы яҙманым, тип танһаң, мөһөр баҫҡан бармаҡтарың өҙөлөп төшәсәк, аңланыңмы?..

— Юҡ, юҡ... танмайым... Үләм, сығар... Тиҙ бул...

Тонсоғоп, хәле бөткән шайтан малайҙары Шаҡшаҡаны саҡ күтәреп, көскә-көскә, ҡойонһоҙ ғына осоп киттеләр, ти. Бер нисә көн өй тирәһендә уларҙың күләгәһе лә булмаған. Шул тыныслыҡтан файҙаланып, Шамил рәхәтләнеп, башҡорт халыҡ әкиәттәрен көндәр буйы уҡып ятҡан.

## Кем көслө?

Шайтан — шайтан инде, бер эйәләһә, һис ҡотолормон тип уйлама, Шамил да ул турала яҡшы белә. Өс көн үткәс, буҙтурғайы тәҙрә ҡаҡҡанға уянып китһә, ни күҙе менән күрһен, ҡаршылағы сәтләүек урманын шайтан малайҙары ҡыҙыл бау менән уратып алған, ти.

— Эй һеҙ, нимә ҡыланаһығыҙ, әллә бөгөн берәй байраммы? — тип ҡысҡырып һораған Шамил.

Бесәйе малайға һыйынған, эте шым ғына солан эсенә инеп ятҡан, ти. Хужаһына берәй хәл булып ҡуймаһын, тип ҡурҡҡан ул.

— Был урман беҙҙеке!.. Ниңә һин унда сәтләүек йыйҙың? — тип һораған бөйөрөнә таянып, түмәр өҫтөндә маһайып баҫып торған Шаҡшаҡа. — Һин беҙҙе алдап, сәтләүек тип, йылға ташын ярҙыртҡанһың бит! Ҡара, сәтләүек ағас башында үҫә, һыу эсендә түгел, алйот малай! Икенселәй, минең урманыма аяҡ баҫаһы булма!

— Ғәфү ит мине, Шаҡшаҡа! — тип елкәһен тырнай Шамил. — Урман һинеке инде, беләм. Күмәк, шаулап үҫеп ултырған ағастарҙы урман тиҙәр, шулаймы?.. Ә бына ҡош-ҡорт, кейек-йәнлектәр кемдеке икән? Улар ағас түгел бит! Шаҡшаҡа уйланып, ауыҙын асып, ағас баштарына ҡарап тора.

— Бына шулай... — ти Шамил. — Ағастар ғына урман була. Шайтан малайҙар дыу килеп, шаулап ала. Батша малайы бирешергә теләмәй.

— Урманда йәшәгәс, барыбер минеке улар! — тип сәбәләнә башлай.

— Үҙең уйлап ҡара, Шаҡшаҡа, һин уҡымышлы зат, йәнлек, ҡоштар икенсе яҡҡа күсеп китһә, улар һаман да һинеке булып иҫәпләнәме? — тип ныҡыша Шамил да. — Ағастар ғына һинеке шул!

— Барыбер минеке! Барыбер минеке улар!

— Ярай, ярай, бәхәсләшмәйек, ҡысҡырыуҙан ни файҙа? Урмандың һинеке булыуын күрһәткән дөрөҫләү ҡағыҙы ла юҡ! Шулай бит, Шаҡшаҡа!

— Дөрөҫләү ҡағыҙы булмаһа ла урман минеке! — тип ярһыған Шаҡшаҡа. Мин хужа! Теләһәм, ҡыҙыл әтәс ҡундырам мин был ергә!

— Ҡыҙма, егет бул, Шаҡшаҡа! Ҡырағай урманда йәшәһәң дә һин уҡымышлы, башҡаларҙан айырылып торған мәҙәниәтле зат!.. Урманды яндырыу — аҡылһыҙҙар эше. Бөтә нәмә — Ер законы буйынса эшләнә. Сит ил ғалимдары һиңә был турала һөйләмәнеме әллә?

Әлбиттә, Шаҡшаҡа үҙен уҡымышлы итеп күрһәтергә теләгән.

— Һөйләнеләр! Беләм законды. Шунан?

— Тәк... Урманға хужаны белдергән раҫлау ҡағыҙы булмағанда сит илдә бәхәсте ярыш ойоштороп хәл итәләр, беләһеңдер был турала?..

— Эйе, эйе, беләм! Ҡурҡытыу, хәйлә ҡороу, көс ҡулланыу!

— Оһо, Шаҡшаҡа, һин үҙең закон эйәһе икәнһең! Әйҙә, улайһа, көс һынашайыҡ! Дуҫтарымды алып, хәҙер мин һинең яныңа киләм! Көт!

— Әйҙә, әйҙә, кил. Мин риза, мин риза, мин барыбер һине еңәм! — тип ҡулдарын бер-береһенә шап-шоп итеп һуҡҡан Шаҡшаҡа.

Эште яйға һалғас, дуҫтарын эйәртеп, бер аҙҙан Шамил да килеп етә.

— Аҡыллы батша улы менән килешеү төҙөү — үҙе бәхет! Ярыштар күп төрлө була, башта ниндәйен һайлайһың, Шаҡшаҡа?

— Иң алда ҡайынлыҡ араһынан йүгерәйек!

— Ярышҡа иптәштәрең дә ҡушыламы?

— Юҡ, юҡ! — ти Шаҡшаҡа ҡырҡа. — Урман минеке, шулай булғас, тик мин генә ярышта һине еңергә тейеш!

— Дөрөҫ фекер, баш бар үҙеңдә!.. Урман минеке булмағас, әйҙә, минең урынға бәләкәй ҡустым йүгерһен. Һин уны, моғайын, бер-ике һикереүҙә уҙып китерһең. Бәләкәй генә бит әле ул. Килештекме?

— Була, ниңә булмаһын!

Шаҡшаҡа түҙемһеҙләнеп, ары-бире йүгерергә тотона. Ә Юлдаш өрөп, ҡыуаҡ эсендә йоҡлап ятҡан ҡуянды ҡурҡытып, өркөтөп ебәрҙе, ти. Ҡуян йән-фарманға, алдын-артын ҡарамай, тоҡайып сығып киткән. Шаҡшаҡа уның артынан төшкән, шайтан булһа ла, иптәштәре ярҙам итмәгәс, сусҡа шикелле һимеҙ булғас, шәп йүгерә алмай икән үҙе. Эй, ҡуянды ҡыуып етеп буламы һуң инде!.. Шаҡшаҡа хәлдән тайып, телен сығарып, Шамилдың аяҡ аҫтына килеп ауҙы, ти.

— Йә, ни әйтерһең, Шаҡшаҡа, бәләкәй генә ҡустыны ла уҙа алмағас, мине уҙа алыр инеңме икән? Бәхәсте хәл иттек, урман миңә күсә! Минең ҡағыҙ әҙер, ҡулыңды ҡуй ҙа...

— Туҡта... туҡта... Саҡ ҡына тын алайым да... Ярыш ойошторғанда һәр саҡ бер нисә шарт була. Хәҙер... хәҙер...

— Мин ни, риза, — тигән Шамил. — Әйт үҙең! Һин батша улы...

— Былай итәйек... Һауаға таш ырғытайыҡ! Кемдеке бейегерәк оса, урман шуныҡы була...

— Бөтәгеҙ ҙә ишеттегеҙме ярыш шартын, — тигән Шамил бер шайтан малайҙарға, бер үҙенең дуҫтарына ҡарап һәм һиҙҙермәй генә буҙтурғайын кеҫәһенә һалып ҡуйған. Ял итеп алған Шаҡшаҡа бар көсөнә үргә таш атҡан. Бик бейеккә осҡан таш, хәтһеҙ күҙҙән юғалып торғандан һуң ғына ергә килеп төшкән, ти.

— Күрҙеңме, — тип маҡтанған Шаҡшаҡа, — урмандан ҡолаҡ ҡаҡтың, малай.

Иптәштәре ҡыуанысынан Шаҡшаҡаны күтәреп, урман өҫтөнән бер нисә тапҡыр әйләнеп килде, ти.

— Иртә ҡысҡырған кәкүктең башы ауырта тиҙәр беҙҙең Яңауылда, — тигән дә Шамил, кеҫәһендә йомарланып ятҡан буҙтурғайын һауаға сөйөп ебәргән. Ҡошо осоп киткән дә башҡаса күренмәгән... Әй көткәндәр, әй көткәндәр ташты, көтә-көтә көтөк булып бөткәндәр, төш еткергәндәр, ти.

— Төшөп килгәндә берәй болотҡа эләккәндер, — тигән була икән Шамил, — һинең ташың кеүек тәпәштә генә булһа, күптән аяҡ аҫтында ятыр ине. Йә, бәхәсте хәл итәйек, Шаҡшаҡа!

— Ашыҡма, Шамил, беҙ әле көрәшмәнек! Ҡул көсөн дә һынашманыҡ. Әйҙә, хәҙер көс һынашайыҡ! Кем көслө икән?

— Әйҙә, — тигән Шамил, — тик ул көс һынашыуың ни нәмәнән тора һуң? Ярыш өс тапҡыр була, моғайын, быныһы һуңғыһылыр?

— Әйе, һәр бәхәстә өс шартты үтәйҙәр! Быныһы — һуңғыһы! Шаҡшаҡа бер йомро ташты ала ла, усына һалып, ҡыҫа башлай. Иптәштәре уны түңәрәтеп, көс-кеүәт биреп, ҡысҡырып тора, ти. Эштең айышына тиҙ төшөнгән Шамил бесәйенә нимәлер шыбырлай. Уныһы шым ғына юҡ була. Он кеүек онтап ташлай Шаҡшаҡа ташын, усын асып, елгә осороп ебәрә. Барыһының да

иçе китә быға. Шул саҡ Шамил, бесәйе алып килгән эремсекте ҡулына ала ла:

— Бик көслөһөң икән, күрҙем, — тип башын сайҡап, тешен шартлата. — Ә был аҡ нәмә — минең өйҙөң аҡ ташы. Һин, Шаҡшаҡа, ташты он кеүек онтаның, тик, барыбер, эште аҙағына тиклем алып барып еткерә алманың. Ташыңдың һыуы сыҡманы бит. Сығарырға көсөң етмәне, онтаның ғына, бына, ҡара әле!

Шамил эремсекте ныҡ итеп һыға башлай, ергә сөбөрләп һыу ҡойола.

— Таш шул тиклем йомшарҙы, хатта, ашап була, — ти ҙә, күп уйлап тормай, һоғоноп та ебәрә Шамил. Шаҡшаҡаның быға иçеаҡылы китә, ҡолап барғанда саҡ тотоп алып ҡала иптәштәре тегене.

— Бына шулай, мин ҡыçылманым, һин үҙең ҡуйған шарттар минең тарафтан үтәлде. Хәҙер ни әйтерһең, урман кемдеке?

Шаҡшаҡаның бер ҙә урманды биргеһе килмәгән, тиҙ генә иптәштәре менән кәңәш ҡороп ала ла:

— Ни булһа ла булыр, быныһы һуңғыһы, көрәшәйек, — ти.

— Ярай, — тип риза була Шамил. — Күреп торам, һин арының, шуның өсөн башта минең ҡарт ҡына, йөҙйәшәр олатайым менән көрәшеп ҡара, уны еңһәң, сауҙалашып тормайым, урман ғүмерлеккә һинеке була! — ти.

Ҡарт олатайҙы еңеүенә ныҡ ышана, сыҙамай, үҙен күрһәтергә теләп, бер-ике иптәшенең биленән тотоп, ергә быраҡтырып ебәрә.

— Ҡайҙа олатайың, ниңә күренмәй, Шамил?

— Ҡарт бит инде, йоҡонан башы сыҡмай, мин уятһам асыуланыр. Үҙең уят, Шаҡшаҡа. Анау имән төбөндә йоҡлап ята ул. Таяҡ менән бар ҙа төрт!.. Ҡулдарын күтәреп, көрәшергә үҙе килеп сығыр.

Йоҡоһо туймаған айыу, маҙаһыҙлағандарын тойоп, асыуынан аяғүрә тора ла, яман итеп үкереп, Шаҡшаҡаға ташлана. Китә көрәш бер заман!.. Түҙеп кенә тор!.. Ярһыған айыу шайтан малайына тын алырға ла ирек бирмәй, ти. Тороп өлгөрә лә алмай теге, хәле бөтә башлағас, бер туҡтауһыҙ ҡысҡыра үҙе. Иптәштәре ҡурҡышынан ағас башына менеп бөтәләр. Шамил үкенесле тауыш менән:

— Шаҡшаҡа, минең менән көрәшергә әҙерәк көсөңдө ҡалдыр инде, — тип әйткән була, ти.



— Түҙер хәлем ҡалманы, олатайыңды тый, — ти икән тегеһе.

— Ярыштарҙа еңелеүеңде таныйһыңмы? — тип ҡысҡыра Шамил. — Урман — Шамилдыҡы, тигән дөрөҫләү ҡағыҙы әҙер, ҡултамғаң ғына кәрәк.

— Урман — һинеке... Һинеке... Ҡулым күтәрелһә, ҡултамғамды ҡуйырмын. Үләм, ҡотҡар! Көрәш тамам...

— Юлдаш, олатайға әйт, Шаҡшаҡаны ебәрһен, югиһә, батша малайының билен һындырып ҡуйыр! — Эттең барып, бер-ике өрөүе була, айыу алпан-толпан баҫып, йылға буйына төшөп китә.

— Рәхмәт, олатай! — тип ҡулын болғай Шамил. — Ярай әле Шаҡшаҡа менән һин көрәштең, югиһә, асыуланһам, мин уны үлтереп ҡуйыр инем. Йә, әйтегеҙ, кем хужа урманға?..

— Һин... Һин хужа урманға. — тип көс-хәл менән яуап бирә шайтан малайы, — ҡана, ҡағыҙыңды... ҡулымды ҡуям. Бөтә тәнем күгәреп бөттө, йөҙ йәшлек олатайыңдан көс-хәлгә ҡотолдом, һинең менән көрәшһәм, аяғыма ла баҫа алмаҫ инем. Рәхмәт бабайыңа.

Шул ваҡиғанан һуң, урман, тип, ауыҙҙарын да асмаған шайтан малайҙары. Ә ҡош-ҡорт, кейек-хайуан улар ҡоллоғонан ҡотолоп, иркен тын алып ҡалған, ти.

## Саҡырылмаған ҡунаҡтар

Хәтһеҙ көндәр үтеп киткән, ти. Шаҡшаҡа менән дуҫтары һаман күренмәгән. «Айыу олатайҙың табаны ҡаты булды шикелле, һуғылған урынының күге бөтмәгәндер, ахыры», — тип уйлаған Шамил ҡәнәғәтлек кисереп, ләкин тора-бара күңеленә шик төшкән. Буҙтурғай аша әсәһе лә: «Улым, Шаҡшаҡа еңелеүен күтәрә алмаҫ, оҙаҡ күренмәгәс, берәй этлек уйлап яталыр, һаҡ бул, бигерәк тә уның ҡулынан ашамлыҡ ауыҙ итмә», — тигән. Әлбиттә, Шамил батша улының ниндәй хәйлә ҡороп ятҡанын белмәгән, шулай ҙа уйға ҡалған, ти. Күңелен күтәреү өсөн эленән-әле ҡурай уйнаған, уны буҙтурғай ғына түгел, башҡа ҡоштар ҙа йотлоғоп тыңлаған. Юлдашы ҡойроғон болғап, күҙҙәрен хужаһынан алмай, янында ятҡан, ә Иркәбикәһе йоҡомһораған булып, нигеҙ буйынан

килгән ниндәйҙер тауыштың эйәһен һағалап, шым ғына ултырған.

Ҡапыл буҙтурғай сырҡылдап ебәргән, ти. Эте һиҫкәнеп, ҡолаҡтарын торғоҙған, бесәйе асыуынан күҙҙәрен ялтыратҡан, ҡурай моңо өҙөлгән.

— Шаҡшаҡа килә. Саҡырылмаған ҡунаҡтар килә. Ҡаршы алырға әҙерләнәйек, дуҫтар... Был юлы ниндәй әкәмәт күрһәтер икән батша балаһы?.. — тигән Шамил яуға әҙерләнгән кеүек етди тауыш менән. Барыһы ла ишек алдына, шайтан малайҙарын ҡаршы алырға сыҡҡан. Күп көттөрмәгән тегеләр, йылға буйҙарын, тау баштарын шаулатып, ҡара ҡойон уйнатып, ниндәйҙер күтәренке күңел менән, өй янына килергә ҡыйыулыҡтары етмәй, йылға буйында үҫкән йомшаҡ бәпкә үләне өҫтөнә килеп төшкәндәр, ти. Шаҡшаҡа Шамилды эре генә саҡырып алған. Әлбиттә, малайҙан дуҫтары бер аҙым да ҡалмаған. Ниндәй сәбәптәндер, бик күркәм, байрамса кейенгән, ти, Шаҡшаҡа. Мөгөҙөнә эленгән бәләкәй тажы, өҫтөндәге ялтырап торған яңы ҡыҙыл бишмәте башҡаларҙыҡынан айырылып, күҙҙең яуын алып тора, ти.

— Беҙ һиңә ҡунаҡҡа килдек!.. Етмәһә, күстәнәс тә алып килдек!.. Ҡунаҡ ашы — ҡара ҡаршы, ти, бит әҙәм заты, беҙгә лә һый әҙерлә!

— Ә беҙҙең Яңауылда ҡунаҡты кеше һый әҙерләгәс кенә үҙе саҡыра. Килер көнөгөҙҙө алдан әйтһәгеҙ, бишбармаҡ бешереп, сәй табыны әҙерләп ҡуйыр инем. Саҡырылмаған ҡунаҡ — башҡа ауыр таяҡ, белдеңме?.. Хәҙер бына, бешкәнсе көтөргә тура килер үҙегеҙгә. Башҡа барыр ерегеҙ булмаһа, ашыҡмаһағыҙ, көтөгөҙ!

— Көтәбеҙ, көтәбеҙ! — тип ҡысҡырған шайтан малайҙары.

— Ярай, улайһа, килештек, тик мин һеҙҙе, үҙегеҙ беләһегеҙ, өйгә индерә алмайым. Минең йортҡа һеҙҙең елегеҙ ҙә ҡағылырға тейеш түгел, шулаймы?

— Шулай, шулай, беҙ уны онотманыҡ. Хәтеребеҙ яҡшы беҙҙең.

— Улайһа, һәйбәт. — Шамил дуҫтары менән кәңәш ҡороп алды, ти. — Аш табынын йылға буйында әҙерләргә тура киләсәк.

— Беҙ риза!.. Беҙ риза!.. — тип шаулашҡан шайтан малайҙары.

— Иркәбикә, — тигән Шамил. — Һинән дә уңған ашнаҡсы юҡ донъяла, бишбармаҡ бешереү-һинең өҫтә. Юлдаш, һин самауыр

ҡайнат, ашъяулыҡ алдына тәм-томдо ла һалырға онотма. Тик тиҙерәк бешерегеҙ, минең ҡунаҡтарым оҙаҡ көтөргә яратмай!

Эте менән бесәйе йүгерешеп, тиҙ генә өйгә инеп китте, ти. Шаҡшаҡа күҙҙәрен ялтыратып, Шамилға иҫ киткес матур, алтын ялатылған бер һауыт һуҙған.

— Әсәйем һиңә күстәнәс ебәрҙе, шәрбәт һыуынан ауыҙ ит! — Шамилдың яурынында ултырған буҙтурғай хәүефле сырҡылдай башлаған. Нимәлер әйтергә теләп, шәрбәт һыуына ҡағылып-ҡағылып ала икән.

— Тыныслан, дуҫым, борсолма! — ти малай буҙтурғайын усына ултыртып. — Һин бит Яңауыл башҡорттарының ҡунаҡты нисек ҡаршы алғанын беләһең. Алыҫ ерҙән күстәнәс килгән икән — уны ҡунаҡтар менән бергә ашарға, эсергә кәрәк. Табын әҙер булһа, аш алдынан тәүге аяҡты (шәрбәт һыуы һалынған беренсе хөрмәт бокалы) күстәнәс хужаһына бирербеҙ. Ул күпме эсә, мин дә шул саҡлы эсергә тейеш, аңланыңмы? Ҡалғанын — иптәштәренә!..

Шамил ҡапыл шайтан малайҙарына төртөп күрһәтә. Улары ҡурҡып, ҡойроҡтарын бот араһына ҡыҫтырған. Барыһының да күҙҙәре Шаҡшаҡала, ти.

— Эйе, эйе, Шаҡшаҡа, күстәнәсеңдә иң алда үҙең ауыҙ итәһең!

Шаҡшаҡаның ҡалтыраған ҡулынан һауыты төшөп киткән дә селпәрәмә ярылған. Шәрбәт түгелгән урында сәскә, үлән һарғайып, ҡороп, ҡара тупраҡ ҡына ятып ҡалды, ти.

— Эх, әрәм иттең күстәнәсте, һауыты бигерәк матур ине... — тигән була Шамил. — Аш алдынан эсеп ебәргәндә, күңел күтәрелеп китер ине. Мин ҡурайҙа уйнаһам, һеҙ бейер инегеҙ. — Көрһөнгән була малай. — Өләсәйемдең буҙаһын ғына эсербеҙ инде.

Шамил йәшел үлән өҫтөнә ашъяулыҡ йәйеп ебәрә, ҡунаҡтарын ағыулы ергә ултырта.

— Ошонда ултырығыҙ, ҡунаҡтарым, ошонда ултырығыҙ. Тәмле шәрбәт еҫен һулап туйырһығыҙ!..

Ултырыуын-ултырҙы, ти, шайтан малайҙары, тик арт һандарының йөнө ҡойолоп, яланғасланып ҡалды, ти. Ә Шамил өй яғына ҡарап ҡысҡыра.

— Эй, Юлдаш, ҡунаҡтар ултырып бөттө, ниңә һаман аш алып килмәйһегеҙ?

Эте асмалы тәҙрәне асып, башын сайҡай.

— Ниңә оҙаҡ бешерәһегеҙ? — тип аптыраған була Шамил. — Моғайын, былар ҡарт шайтандың итен һалғандарҙыр... Минһеҙ бер нәмә лә эшләй алмайҙар, һәр саҡ әйтеп торорға кәрәк, үәт, әй! Йәш шайтандың башын ташларға кәрәк булған ҡаҙанға.

Шайтан малайҙары бер-береһенә ҡарап ҡатып ҡалғандар ҙа, һүҙ мәғәнәһенең асылына ныҡлап төшөнгәс, ҡалтырана башлағандар. Йөрәк ҡурҡыуы табандарына төшкән.

— Ә... Ә... — тигән генә өн сыға икән ауыҙҙарынан.

— Утты ҡыҙыуыраҡ яғығыҙ! Тиҙерәк бешһен ашығыҙ! Ҡунаҡтарым, ана, түҙемһеҙләнеп, ҡалтырай ҙа башланылар. Төш етте бит, ас ҡарын менән үҙегеҙ ҡаҡ ерҙә ултырып ҡарағыҙ әле! Ялҡауҙар! — тип асыуланып ҡысҡыра башлаған Шамил. — Юлдаш, кил әле бында!

Башын аҫҡа эйеп, ғәйепле төҫ менән, эте малай янына килгән.

— Асыуланма, хужам, бая әйтергә ҡурҡтым, һинең ҡунаҡтарың күп, ә ит әҙ генә. Бөтәһенә лә ит етмәйәсәк.

— Ниңә башта уҡ шуны әйтмәнең, алйот! Ҡаҙан оҙағыраҡ ҡайнаған һайын бишбармаҡ күбәйә тип уйлайһыңмы? Эй, бешмәгән, мине хөрмәтле ҡунаҡтар алдында оятҡа ҡалдыраһың бит!

— Хужам, ғәфү ит мине, асыуланма, хәҙер, бер минутта хатамды төҙәтәм! Һау-һау!

Юлдаш яман итеп ырылдап, өрөп ебәргән дә, Шаҡшаҡаның ҡыҙыл бишмәтенең салғыйын умырып, йолҡоп алған, ти. Ул-был булғансы, ҡойроҡ осон да эләктергән.

— Әйҙә, Хужам, ошо шайтанды бешерәйек!..

Шаҡшаҡа ауыртыуына сыҙай алмай, әсе итеп ҡысҡырып ебәрә, башҡалары ҡото осоп, кемуҙарҙан ағас башына менеп китә.

— Алйот хайуан! Ебәр хәҙер! Ул бит батша малайы! Бөткәнме һиңә башҡа шайтандар? Ана, теләгәнеңде һайлап ал!

Шайтан малайҙары ағас ботаҡтарын һындыра-һындыра тағы өҫкәрәк менеп киттеләр, ти. Ни тиһәң дә, һәр кемгә йән аяулы бит!

— Ебәр, ебәр! — тип зыр өрөлгән Шаҡшаҡа. — Хужаңдың әйткәнен тыңла! Ниңә мин, ана, башҡаларҙы һайла! Кемде теләһәң, шуны ал! Мин һиңә бойорам, теләһә кемде һайла, ебәр мине!

— Минең эт — бүре кеүек йыртҡыс, йәне көйһә, табышын ғүмере ысҡындырмай, — тигән була Шамил ҡурҡып. — Өҙгөләп кенә ташламаһа ярар ине үҙеңде. Бигерәк йылғала һыу инергә ярата шул! Ә йылға һинеке... Йыуынмағанға ҡоторона! Каникул бөтмәйенсә, ауылға ҡайтып булмай.

Арып-талып, шыр һыуға батһа ла, Юлдаш Шаҡшаҡаны һис тә ысҡындырмай.

— Шамил, ал этеңде! Йылғаны ла бирер инем, атайым ҡушмай!

— Эт алйот бит ул! Хәҙер, хәҙер, Шаҡшаҡа, ярҙам итәм үҙеңә! — Шамил йыуан ғына бер таяҡты тотоп ала ла, этенә һуҡҡан булып, Шаҡшаҡаның елен елгәрә башламаһынмы?! Сыҙап ҡына тор! Ҡайһы ерең ҡысый!

— Шамил! Үлтермә! Йылғаны ла һиңә бирәм. Дөрөҫләү ҡағыҙы ла яҙам! Тик этеңде генә тыңлат. Йәне теләгән шайтанды бешерһен. Ризамын! Батша һүҙе — бер.

— Юлдаш! Ебәр батша малайын! Ағас башынан һайла! Мaһ! — Шамилдың бойороуы була, шайтан малайҙары Шаҡшаҡаны ташлап, күҙ асып йомғансы, юҡ та булдылары, ти. Уларҙың тырымтырағай ҡасҡандарын күреп, батша малайы асыуынан ҡып-ҡыҙыл булған.

— Ниңә мине ташланығыҙ? Ҡайҙа һеҙҙең батша алдында биргән антығыҙ? Ҡайтҡас, атайҙан кәрәгегеҙҙе аласаҡһығыҙ! Тфү!

— Бишбармаҡҡа һине бешерһендәр, тип ҡасты улар, — тип Шаҡшаҡаны нығыраҡ ҡыҙҙыра Шамил. — Тик беҙ алйот түгел дә инде, аҫыл затты ниңә рәнйетергә? Ҡурҡма, Шаҡшаҡа, беҙ һиңә теймәйбеҙ. Тик шуныһы йәл, күстәнәстән ауыҙ итеп булманы, йылға буйында рәхәтләнеп сәй эсер инек. Юлдаш һыу төшөр ине.

Шаҡшаҡа нимәлер әйтергә теләй ҙә ауыҙын баҫа... һәм яй ғына, күңелһеҙ йөҙ менән бәләкәй алтын тажын ҡуйынына тығып, ҡайтыр яҡҡа сығып китә. Шамил уның:

— Шамил... Мине йәлләгәнең өсөн — ғүмеремдә алмағаның өсөн йылғаны һиңә бүләк итәм. Дөрөҫләү ҡағыҙы — ҡайын төбөндә, — тип ыңғырашҡан тауышын ғына ишетеп ҡала.

## Тау башындағы уйын

Йылға аръяғында, Шамилдың өйө ҡаршыһында, бик матур тау булған, ти. Ниндәй генә дарыу үләндәре, ниндәй генә еләк үҫмәгән унда. Сәскәләрҙең хуш еҫенә баштар әйләнгән. Һөҙәк тау итәге осонан башланған иген баҫыуы әллә ҡайҙарға йәйрәп ята икән.

Йылғала рәхәтләнеп һыу төшөп, ҡомло ярында ял иткәндә Шамил оҙаҡ-оҙаҡ шул тауға ҡарап ятҡан. Сығып, еләк йыйырға, түбәһенә менеп, тирә-яҡты байҡап торорға форсаты булмаған. Сөнки, тау, һаман да, Шаҡшаҡаныҡы булып иҫәпләнгән. «Ниндәй ҡанһыҙлыҡ был, — тип уйлаған малай, — кеше ерен тартып алырға, йортон яндырырға, байлығын таларға ниндәй хоҡуҡтары бар уларҙың! Шайтан менән дуҫлашһаң, айбалтаң билеңдә булһын, тип олатайым дөрөҫ әйтәлер. Өйҙән алып килгән әкиәт китаптарын да уҡып бөткән ул, тыуған өйөн дә һағынған, тик һаман да шул тауҙың шайтан ҡулында булыуы тынғылыҡ бирмәгән. Шаҡшаҡаның һаман күренмәүе лә борсоу һалғандан-һала барған. Ниндәй хәйлә, ниндәй боҙоҡлоҡтар уйлап ята икән ул? Барыбер буш ятмайҙыр яуыз. Тау өсөн дә тауыш сығасағын һиҙгән малай алдан хәстәрлек күрергә тотонған. Өләсәһенең әкиәте ярҙам иткән уға. Түҙемлеген йыйып, ҡара урман артынан ҡара ҡойондоң күтәрелеүен көткән. Һәр бәхәстең аҙағы була. Шамил менән Шаҡшаҡа араһындағы оҙайлы тартҡылаштың да ебе өҙөләр мәле етә.

Бына, бер көндө, зәңгәр офоҡто ҡаплап, урман өҫтөндә тағы ҡойон күтәрелгән. Ағас баштарынан, йылға буйлап, өйөрөлөп-өйөрөлөп, геүләп килә, ти. Тау башына еткәс, әҙерәк олоп тора ла, шап итеп, ағаслыҡ араһына төшә. Бер аҙҙан шайтан малайҙарҙың яман итеп аҡырған, Шамилды үсектергән тауыштары ишетелә башлай.

— Шамил! Шамил! Ҡара, тау барыбер беҙҙеке! Беҙ һинән ҡурҡмайбыҙ! Кеше шайтан ашамай! Һин беҙҙе ҡурҡытып, ауыл биләмәһен үҙеңә алғанһың! Тауҙы беҙ бер ваҡытта ла һеҙгә бирмәйәсәкбеҙ! Ғүмер буйы ошонда, ауылыңа ҡурҡыныс яһап, һиңә күрше булып торасаҡбыҙ!

Шайтан малайҙары хәлдәре бөткәнсе туҙынғандар, төрлөсә ҡыланғандар. Ахыр, арып, ҡайын араһына йығылғандар. Ә Шамил,

былай ҙа, уларҙың ауғанын күтөп, туҡ та туҡ итеп, йылға аша баҫма һалып йөрөгән була. Тотоноп сығыр өсөн оҙон таяҡ әҙерләп, бер осон баҫма башындағы бағанаға ҡаҡҡан да, икенсе осон тау ярына һуҙған. Тик унда әле икенсе бағана әҙер булмаған.

— Шамил, ниңә беҙҙең янға килмәйһең?

— Алдағас ҡурҡаһыңмы?

— Һеҙҙең яҡҡа сығыр өсөн баҫма һалам! — тип ҡысҡырған Шамил. — Арғы башҡа бер генә бағана ултыртам да...

Шамил туҡмағын биленә ҡыҫтырып, оҙон таяғын арғы ярға һуҙып, яйлап ҡына шайтан малайҙар янына сыҡҡан, ти.

— Мин эш менән мәшғүл булып йөрөйөм әле, шуға сығып киләм. Ауылға сығыр өсөн һеҙгә баҫма һалам. Ул һеҙҙең тау менән минең ауылды тоташтыра. Шуның өсөн эш уртаҡ булырға тейеш. Бына ошонда бер бағана ултыртырға кәрәк буласаҡ. Кисә ике ағас йыҡтым: береһен төҙөлөшкә ҡулланһаҡ, икенсеһенән һеҙгә суҡмар эшләп бирермен...

— Ниңә минең тауҙан ағас йыҡтың? — тип ҡысҡырып ебәрә Шаҡшаҡа. — Кем рөхсәт итте һиңә? Тауға мин хужа, оноттоңмо? Бар, дуҫтарыңа ла әйт, мин хужа тауға, ишеттеңме?

— Ҡыҙма, Шаҡшаҡа, мин бит һеҙгә, киреһенсә, хеҙмәт итәм!.. Әйттем бит инде, ошо бүрәнәнән суҡмар эшләйем дә бүләк итәм үҙегеҙгә!..

— Нимәгә кәрәк ул беҙгә суҡмар!

— Йортоғоҙҙо дошман баҫһа һуғышырһығыҙ!

— Һе! Эшлә, улайһа, — тип ризалашҡан Шаҡшаҡа. — Беҙ бит һинең менән уйнарға килдек!

— Эш бөткәс кенә уйнарға ярай, шуны ла белмәйһегеҙме әллә?

— Ярай, ярай, тик тиҙерәк бул, беҙҙең уйнағыбыҙ килә!

Шайтан малайҙар уйнаған булып, Шамилды ерҙә түгел, һауала, үҙҙәре менән, үлтергәнсе, өйрөлтөп алып йөрөргә булғандар икән.

— Был юлы ла отолоп ҡуймайыҡ, — тип шыбырлаған Шаҡшаҡа башҡаларға. — Атай батшаның бойороғон үтәргә кәрәк.

— Тауҙан да ҡолаҡ ҡаҡһаҡ, теге көндәге кеүек сәнскеле сыбыҡтар менән арт һанды һыҙырасаҡтар... — тигән икенсеһе дер ҡалтырап.

— Ҡурҡмағыҙ, — тигән Шаҡшаҡа, — суҡмарҙарын ғына эшләп

бөтһөн әле. Ғүмерҙә күрмәгән уйынын күрһәтербеҙ беҙ уға. Шымығыҙ...

— Туҡ та туҡ! Туҡ та туҡ! Туҡмаҡ һуҡ! Туҡмаҡ һуҡ! — Шамил әле бер ағасын, әле икенсеһен туҡ та туҡ итеп, туҡылдата икән.

— Эшлә, тиҙерәк бөт! — тип бер туктауһыҙ ҡысҡырған Шаҡшаҡа, — беҙҙең уйнағыбыҙ килә!

— Тырышам бит, — тигән була Шамил. — Эште күмәкләп эшләһәң генә тиҙ була.

Шамилдың «эше» оҙаҡҡа һуҙылған. Түҙемлеге бөткән Шаҡшаҡаның.

— Бигерәк оҙаҡ ҡыланаһың! Төш етте, ә беҙ уйын башламағанбыҙ! Тиҙ эшлә!

— Мин — бер үҙем, ә һеҙ күмәк! Ярҙам ит һуң, улайһа, суҡмар һеҙҙең өсөн бит. Ағастың ошо өлөшө — һинең суҡмарың буласаҡ. Кил!

Ирекһеҙҙән Шаҡшаҡа риза булған. Тиҙерәк уйын башлап, тиҙерәк Шамилдан ҡотолорға уйлаған ул.

— Суҡмар бүрәнәһенең ярығына ҡулдарыңды тыҡ та, ағастың яртыһын тотоп тор. Мин тиҙ генә шына менән һинең өлөшөңдө ҡағып сығарайым. Икәүләһәк, эш тиҙ булыр!

Шаҡшаҡаның бүрәнә ярығына бармаҡтарын тығыуы була, туҡмағы менән шынаны һуғып, ҡағып та ебәрә Шамил! Шына әллә ҡайҙарға атылып китә, яман итеп ҡысҡырған тауыштан, хатта, үлән-сәскә йығыла. Ҡоттары алынған шайтан малайҙары тағы ҡайын эйелтеп, ботаҡтарына эленә. Ярҙам һорап аҡырған Шаҡшаҡаға бер кем дә килә алмай, ҡурҡышынан үҙҙәренең йөрәге үксәләренә төшә.

— Ни теләһәң — шуны бирәм, — тип ялына башлай Шаҡшаҡа. — Алтын һора — алтын, көмөш һора — көмөш бирәм! — Башын бер туктауһыҙ болғай, ауыртыуына сыҙай алмай, ти. — Тик бармаҡтарымды ғына ярыҡтан сығар, суҡмар кәрәкмәй миңә! Сығар!

Шамил елкәһен тырнаған була, шул саҡ Юлдаштың өргәне ишетелә.

— Эһә! Төшкө ашҡа саҡыралар! Киттем, дуҫтар көтә! — Шаҡшаҡа бөтә кәүҙәһе менән бүрәнәне һөйрәтеп, унда-бында һуғыла, хәле бөтөп, башы һалынып төшә, тауышы ла сыҡмай башлай.

— Ағас башынан төшөгөҙ! — тип бойора Шамил шайтан малайҙарға. — Ҡурҡмағыҙ, мин һеҙгә теймәйем! Шәм кеүек киләсәкке батшағыҙ алдына баҫығыҙ һәм мин әйткәнде тыңлағыҙ! Ишетмәнек тип әйтмәгеҙ!

Шайтан малайҙары Шаҡшаҡаның алдына тып итеп килеп баҫтылар, ти.

— Әгәр ҙә ҡулын ярыҡтан сығара алмаһа, ярты сәғәттән батша малайы үләсәк! — тип белдерә Шамил. — Уны ҡотҡарырға кәрәк! Ул һәләк булһа — бөтәгеҙгә лә үлем!

Ҡалтыранған шайтан малайҙары Шамилдың аяҡ аҫтына килеп йығылды, ти. Кәңәш биреүен, ярҙам итеүен һорайҙар.

— Ярай, былай итеп ҡарағыҙ, — тигән була Шамил. — Икегеҙ ботонан тартығыҙ, ҡалғандарығыҙ бүрәнәгә ултырығыҙ!

Тегеләр шулай эшләй ҙә. Шаҡшаҡаны өҙгөләп, йолҡҡолап бөтәләр, тамам хәлдән яҙҙыралар. Шамил туҡмағы менән һауаны ярып, ҡысҡырып ебәрә.

— Эшкинмәгәндәр! Батша малайын ҡотҡарырға береһенең дә ҡулынан килмәй! Ярай, ярҙам итәм, тик был һуңғыһы булһын! Ишеттегеҙме, үҙ ғүмере өсөн ул миңә нимә вәғәҙә итте?

— Алтын-көмөш! Алтын-көмөш, Шамил! Ҡотҡар, зинһар, ҡотҡар!

— Ә һеҙ беләһегеҙме, алтын-көмөштөң ошо тау аҫтында ятҡанын?

— Юҡ, юҡ, Шамил, беҙгә берәү ҙә әйтмәне. Беҙ белмәйбеҙ...

— Мин беләм... — ти Шаҡшаҡа көскә тын алып. — Олатайым әйтте... Алтын-көмөш ошо тауҙың аҫтында... Ал... Алтын тауын да ал... Тик мине хурлыҡлы үлемдән ҡотҡар. Раҫлау ҡағыҙы яҙырмын. Барыһы ла... Барыһы ла һинеке булыр. Ҡотҡар...

— Ә һин, Шаҡшаҡа, белмәйһеңме ни был ерҙең кемдеке икәнен!.. Минең ата-олатайҙарымдың иле был! Ер яралғандан бирле Хоҙай үҙе бүләк иткән! Бынан һуң да, минең төбәгемә ҡулыңды һуҙһаң, тоҡомоң ҡороясаҡ, Шаҡшаҡа! Сөнки һеҙ Хоҙайҙың бүләген тартып алдығыҙ! Аңланыңмы, Шаҡшаҡа! Ә хәҙер барығыҙ ҙа ҡабатлағыҙ! Бөтә донъя ишетһен! Урал иле кемдеке?

— Һинеке! Һинеке, Шамил!

— Ейәндәрегеҙгә лә был турала әйтергә онотмағыҙ! Үҙегеҙ күрҙегеҙ, суҡмар һуғышы теләмәйем мин, шуға ла эшләмәнем. Тик

бынан һуң, яуызлыҡ менән, минең йортта аяғығыҙҙың эҙе булмаһын!

— Ант итәбеҙ, ант итәбеҙ, Шамил.

— Ерегеҙ үҙегеҙгә булһын, — ти Шаҡшаҡа һәм яраланған ҡулдары менән тағы бер ҡағыҙға ҡултамғаһын һала.

## Һуңғы көрәш

Шайтан малайҙарын еңһә лә, ата-олатайҙарының ерен кире ҡайтарһа ла, йөрәгенә урын таба алмай Шамил. Төбәге өсөн яңынан-яңы тартҡылаштар сығып торор төҫлө. Икенсе көндө, дуҫтары менән йорт алдына сығып ултырһа, нигеҙ буйынан бәләкәй генә, ап-аҡ һаҡаллы, теремек кенә ҡартлас килеп сыға. Иркәбикә наҙлы итеп мырылдай.

— Көн һайын нигеҙ буйында ҡыштырлаған һин булған икәнһең. Сысҡан тип, яңылышҡан икәнмен. Ғәфү итегеҙ. Һеҙ кем атлы?

— Ҡурҡмағыҙ минән, — ти, ҡартлас. — Мин Шамил, һинең олатайыңдың йорт нигеҙенең эйәһе. Бынан күп йылдар элек, шайтандар ер-һыуҙы баҫып алып, ауылды яндырғас, халыҡ күсеп киткәс, мин ер аҫты батшалығына ҡастым. Бөгөн килеп, йорт тергеҙелгәс, шатлығымдан илай-илай кире ҡайттым. Улым, минең һиңә әйтер һүҙем бар. Иғтибар менән тыңла. Малайҙарының еңелеүе — ҡарт батшаның һарыуын ҡайната, һинән үс алырға теләй. Был юлы һинең йортҡа улар үҙҙәре киләсәк. Кәңәшем шул: төнгөлөккә өләсәйең уҡыған доғаны әйтеп, ишегеңде ябып ят. «Бисмиллаһир-рәхманир-рәхим» улар өсөн ун ике ҡат йоҙаҡ булыр! Дуҫтарыңды ла сығарма. Шайтан елпеүе ҡағылып, үлерҙәр. Төрлө-төрлө һүрәткә инеп, тәҙрә аша ҡыланырҙар. Олатайың-өләсәйең, атайың-әсәйең булып, тышҡа сығарыр өсөн ымһындырырҙар. Ҡурҡма ла, ышанма ла уларға. Төнө буйы ҡотоңдо алырҙар. Таң атҡас ҡына юҡ булырҙар. Мин һиңә иптәшкә әтәс ҡалдырам. Ул өс тапҡыр ҡысҡырһа, таң атҡан булыр. Иң мөһиме: ҡурҡма, таң атмайынса, тышҡа сыҡма. Быны онотма, улым. Ғүмерең сәғәттәре — Хоҙай менән үҙеңдең ҡулыңда... Иҫеңдән сығарма...

Ҡапыл нисек килеп сыҡһа, шулай юҡ була ҡартлас. Дуҫтар янында ем сүпләп йөрөгән матур ҡойроҡло әтәс пәйҙә була. Юлдаштың ояһы янында уға ла кетәк эшләп бирә Шамил. Әҙер

төшә, төн яҡынлаша. Өй эйәһенең әйткәндәре ысынға сыға. Алыҫтан, ҡара урман артынан, күкле-йәшелле ҡойон күтәрелә. Ер һелкенә, йәшен йәшнәй, күҙ асҡыһыҙ туҙан бураны уйнай. Шамил дуҫтарын өй эсенә йыя ла өләсәһе өйрәткән доғаны уҡып, ишектәрен яба. Түбәтәйен кейә, ҡулына атаһы бүләк иткән ҡурайын ала. Ғәләмәт көслө, имәнес тауыштар өйгә яҡынлаша. Ысынлап та, малайҙары эш сығара алмағас, Шамилды юҡ итер өсөн аталары үҙҙәре килә икән. Уларҙың елпеүенә өй саҡ күккә осмаған, нигеҙенең аҡ һәм ныҡ булыуынан ғына емерелмәй тороп ҡалған, ти. Бына бер саҡ өй ишеген ҡаға башлағандар. Ҡыйыҡ һелкенеп, тәҙрәләр зыңлап торған. Ниндәйҙер ҡырағай бейеү көйө ҡолаҡты тондорған, өй бүрәнәләре шартлап ярылған. Тирә-яҡ дер һелкенеп, ер ҡыбырлап торған. Шамил шым ғына, күңелгә ятышлы көй уйнай башлаған. Уның янында ҡурҡып ултырған дуҫтарына йән ингән. Хатта, бер-береһенә ҡарап, йылмайышып та ҡуйғандар. Ҡапыл ҡаршылағы тәҙрәнән ҙур бер баш күренгән. Күҙҙәре ут кеүек яна, ике мөгөҙөнә уралып, йыланы ыҫылдай, оҙон ҡыҙыл теле быяланы ялап, тишергә теләй, ти. Ауыҙы бер асылып, бер ябылып:

— Шамил, тышҡа сыҡ! Шамил, тышҡа сыҡ! — тип шапылдай икән. Әлбиттә, бик ҡурҡыныс булған был күренеш, ләкин Шамил ҡурайҙа уйнауын дауам иткән, яғымлы ҡарашы менән дуҫтарын тынысландырған. Ниһайәт, баш юғалған, уның урынына олатаһы менән өләсәһе пәйҙә булған. Шайтандар уларҙы һөйрәтеп йөрөтөп, таяҡ менән туҡмайҙар икән. Күгәрмәгән, шешенмәгән тән өлөшө ҡалмаған, ти, бахырҙарҙың. Һыҙланыуҙан ыңғырашыуҙары ишетелеп торған. Бына өләсәһе ярҙам һорап, ҡулын болғаған. Шул саҡ эте менән бесәйе түҙмәгән, лауҡылдап өрөп, асыулы мырылдап, тышҡа ташланған, ти. Ҡапыл әтәстең беренсе ҡысҡырыуы ишетелгән. Бер аҙға ишек алды тынып ҡалған: ҡойон ергә ятҡан, тәҙрә таҙарған, шәүләләр юғалған. Битенән тире ағып ултырған Шамилдың да ҡурайы ял иткән... Буҙторғай ғына арлы-бирле сырҡылдаған, ти. Төн ауышҡаны һиҙелгән, таң яҡынлашҡан, ләкин һаман ҡараңғы булған әле. Әҙләп-әҙләп шайтандарҙың тауышы көсәйә башлаған. Өйҙөң һелкенеүенән, урындыҡ таралып төшкән. Асыҡ ҡалдырылған тышҡы ишектән соланға шайтандар инеп тулған, ти. Эске ишеккә лә көн бөткән. Туҡылдатыуҙары-

нан, тартыуҙарынан тотҡаһы төшкәне ишетелгән, бына-была асылып китерҙәй тойолған. Ләкин Шамилдың өләсәһенең ишек доғаһы барыһынан да ныҡ булған, шайтандарҙы эскә үткәрмәгән, ғәзиз ейәнен һаҡлаған, ти. Малай ҙа юғалып ҡалмаған, кире ҡурайын ҡулына алған, өй эсе сәңгелдәк моңона тулған. Шуны ғына көтөп торғандай, тәҙрә алдында әсәһенең һыны пәйҙә булған. Шамилдың күңеле тулған, күҙенән борсаҡ-борсаҡ йәше аҡҡан. Буҙторғай ҙа шымып, тынып ҡалған. Һағынған ул да әсәне, көн һайын уның ҡулынан ем ашағаны иҫенә төшкән. Ә тәҙрә аша шайтандар әсә һынын мыҫҡыл иткәндәр: аяҡ-ҡулдарын борғандар, башын шаҡарғандар, сәсен йолҡҡандар, аяғынан аҫып ҡуйғандар. Бер туҡтауһыҙ ҡысҡырған әсә малайын ярҙамға саҡырған. Инәлеп-инәлеп һорай, ти. Шамил үҙенең түҙә алмаҫлыҡ хәлгә еткәнен аңлаған. Ҡапыл ҡурай көйө, үҙенән-үҙе, сәңгелдәк моңонан мәшһүр Урал көйөнә күскән! Буҙторғай түҙмәгән, ярһыуынан сырҡылдап, мөрйәнән тышҡа атылған! Шул саҡ икенсе тапҡырға әтәс ҡысҡырған, һиҙелер-һиҙелмәҫ таң беленгән. Бер мәлгә генә тынып ҡалған шайтандар, киреһенсә, оторо ҡыҙған. Өсөнсө әтәс тауышына тиклем хәл иткес көрәшкә әҙерләнгәндәр улар. Донъяның тыныслығы бөтөнләйгә бөткән. Шамилға иптәш булып, өй эйәһе уның янына сығып ултырған, ти.

— Ҡурҡма, ҡурҡма, улым, ҡурайыңды шәберәк, көслөрәк тарт, — тигән. Һин олатайыңдың нигеҙендә, берәү ҙә еңә алмай һине, ышан миңә!.. — Тәҙрәнән Шамилдың атаһы күренгән. Шайтандар уның танауын, ҡолағын, телен ҡырҡҡандар, ти. Баяғы йәмһеҙ баш энә менән тереләй тиреһен һыҙыра башлаған. Асыуынан ярһыған Шамил, аяғүрә баҫҡан, ҡурай тауышы шайтан тауышын күмеп киткән. Өсөнсө тапҡыр әтәс ҡысҡырған. Тик шайтандар шул тиклем ҡыҙған булған, таң беленгәнен дә һиҙмәгәндәр, бер туҡтауһыҙ:

— Шамил, сыҡ! Күҙҙәрен соҡойбоҙ атайыңдың! Сыҡ!.. — тип ҡысҡырғандар.

— Хәҙер һиңә бер нәмә лә ҡурҡыныс түгел, ҡарт шайтандар шәүләгә әйләнде, — тигән өй эйәһе. — Тик ҡурайыңды ғына ташлама, улым!..

Ҡурай уйнай-уйнай Шамил тышҡа сыҡҡан. Шәүлә-шайтандар уға ташланайым ғына тигәндә ҡояштың тәүге нурҙары тау ба-

шына ҡаҙалып, ауыл нигеҙенең аҡ таштарын балҡытып ебәргән. Көслө шартлау яңғыраған һәм күҙ асып йомғансы шайтандар юҡҡа сыҡҡан. Тик... Ләкин ҡарт батшаның башындағы алтын тажы, ҡыҙыл бишмәт салғыйына йәбешеп, ҡара урман артындағы шырлыҡҡа ҡарай, йәш хужаһын эҙләп, ҡасып киткән, ти.

Шамил хәлһеҙләнеп, йорт нигеҙенә ауған. Шул ятыуҙан өс көн, өс төн ял иткән ул. Уның тыныслығын һаҡлап, өй эйәһе йән өргән ышаныслы, тоғро дуҫтары янында ултырған, ти.

# САЛАУАТТЫҢ КИР АТЫ

Борон-борон замандан алып, Ер йөҙө барлыҡҡа килгәндән бирле, сал Урал тауҙарында йәшәгән, ти, башҡорт тигән халыҡ. Шуға күрә бар донъя был төйәкте Башҡорт иле, тип атаған. Ни өсөн тиһәң, матурлыҡҡа тиңдәше булмаған был бай ерҙе уларға Хоҙай Тәғәлә үҙе бүләк иткән икән. Ә Хоҙай бүләген һатырға ла, икенселәргә бирергә лә, хаслыҡ уйлаған әҙәмдәрҙән тапатырға ла ярамай, ти. Быны яҡшы аңлаған халыҡ үҙ Ватанын күҙ ҡараһы кеүек һаҡлаған, моңло ҡурайын уйнап, батырҙарын ҡеүәтләп: «Һис бирмәгән башҡорт Уралын», — тип йырлаған. Ләкин ҡомһоҙ, яуыз бәндәләр ҙә әҙ булмаған тирә-яҡта. Уларҙың күҙе һәр саҡ Башҡорт иленә төшөр булған. Күҙҙең яуын алып торған сәскәле болондарҙы, аҫыл ҡоштары һайрап, емеш-еләге ҡыҙарып бешкән туғайҙарҙы, аҡҡоштар ҡаңҡылдашҡан, балыҡҡа мул түңәрәк күлдәрҙе, кейеге күп йәшел урмандарҙы, йылҡылары эркелеп, өйөр-өйөр булып йөрөгән иҫертерлек хуш еҫле яландарҙы, тере һыулы йылға-шишмәләрҙе, ер байлығы тулып ятҡан тауҙарҙы үҙенеке итеү теләге менән янған дошмандар.

Бына шундай заманала йәшәгән яугир Юлай Аҙналин тигән бер ил старшинаһы. Уның өс улы булған, ти. Берешенән-береһе матур, береһенән-береһе батыр икән үҙҙәре. Сөнки аталары малайҙарын өс йәшендә атҡа ултыртҡан, ете йәшендә уҡ-һаҙаҡ тотторған, ун ике йәшендә хәнйәр биргән, ун ете йәшендә һелтәгәндә йәшен уттары сығара торған алмас ҡылыс бүләк иткән. Ә әсәләре Аҙнабикә шундай сәсәниә, йыраусы икән, уның һымаҡ, ҡобайыр, бәйеттәрен тыңлап, аҡылына ил ҡарттары ла аптырап

ултырған, йырын ишеткән талдарҙағы һандуғастар тынып ҡалған, ти. Кесе улына Салауат тип исем ҡушҡан атаһы, башҡа улдарына ҡарағанда нығыраҡ яратҡан. Кесе малай әҙәпле лә, ҡурайсы ла, әсәһенә оҡшап, сәсән дә икән. Шул уҡ ваҡытта батырлығы менән дә дан алған: кеше ышанмаҫлыҡ йәшендә, ун дүрттә генә үҙенә ташланған йыртҡыс — ҙур айыу менән алышҡан һәм еңгән. Атта ла бик оҫта елгән, берәү ҙә ҡыуып етә алмаған уны. Көрәштә лә ал бирмәгән. Үҙен бер һылыуҡай — Әминә исемле ҡыҙ яратып йөрөгән. Салауат та һөйөүен йәшермәгән, кәләш итеп алырға хыялланған, ти.

Тик Башҡорт иле генә тыныс булмаған. Әле бер яҡтан, әле икенсе яҡтан яу сығып ҡына торған, ти. Ил байлығын талағандар, өйҙәрҙе яндырғандар, ҡыҙҙарҙы урлағандар, ерҙәрҙе баҫып алғандар. Бер мәл һуғыш уты тоҡанған. Был — Азатлыҡ өсөн көрәш тип аталған. Салауаттың ике ағаһы ла дошман менән алышҡан. Сират старшинаның кесе малайына ла еткән.

— Атай, миңә ат һайлап бир! — тип өндәшкән Салауат атаһына.

— Улым, аттарҙың араһына бар ҙа йүгәнеңде шылтырат, ҡайһы ат үҙеңә әйләнеп ҡарай, шул һинеке булыр, — тигән атаһы. Салауат атаһы әйткәнсә эшләгән, ти. Бер матур ғына кир ат боролоп ҡараған уға.

— Был ат Урал батыр менгән Аҡбуҙат тоҡомонан, — тигән атаһы, — ул һине бер ваҡытта ла ташламаҫ, үлемдән һаҡлар.

Старшина улын яугир егеттәрҙең башлығы итеп ҡуя. Хушлашҡан саҡта Салауат атаһына ҡурайын ҡалдыра.

— Атай, ҡурайымды һеҙгә ҡалдырам. Әгәр мин тере булһам, ҡурай осонан һөт тамыр, әгәр яраланһам, ҡурай осонан ҡан тамыр, — тигән һәм кир атына атланып, егеттәре менән бергә дошман менән алышырға киткән. Уралда кемдәр генә йәшәй — барыһы ла халыҡ бәхете, азатлығы, ер-һыу өсөн яуға күтәрелгән, ти. Алыш ҡаты барған.

Ә йәйләүҙә ҡалған ата-әсәһе көн һайын ҡурай осон ҡарап ҡына тора, ти. Нык борсолғандар улар, бер туҡтауһыҙ малайҙарының иҫән-һау йөрөүен теләгәндәр. Бер саҡ шулай ҡурай осонан һөт тамды, ти. Быны күргән әсәһе Аҙнабикә бик һөйөнгән һәм үҙенсә күрәҙәлек тә ҡылған. «Улыбыҙ Урал халҡына азатлыҡ

бирергә вәғәҙә иткән бер батшаға ҡушылған», — тигән ул һәм һамаҡлап ебәргән.

Ерһеҙ ҡалған башҡортҡа
Ерен бирәм, тигән ул.
Һыуһыҙ ҡалған башҡортҡа
Һыуын бирәм, тигән ул.

Ләкин ҡыуаныс оҙаҡҡа бармаған, һайрап торған һандуғастар тынып ҡалған, өйөрҙәге ҡолонсаҡтар инәһенә һыйынған, аҡҡоштар һарғайған ҡамыштарға йәшенгән, йәшел үлән ергә йығылған, урмандағы кейектәр олоған, тауҙар ыңғырашҡан. Был ваҡытта ҡурай осонан ҡан тамған, ти. Юлай старшина быны күреп бик ҡайғырған һәм күп уйлап тормай, ҡатынын йыуата-йыуата, үҙе лә кесе малайына ярҙамға ашыҡҡан, ти. Атаһының үҙ ғәскәре менән һуғышсыларға килеп ҡушылыуына Салауат һөйөнһә лә, борсолоуы ла ҙур булды, ти. «Моғайын, ҡурай осонан ҡан тамғандыр, өс-дүрт тапҡыр яраландым, атай, — тип әйтте, ти Салауат. — Тик, һин, зинһар, йортҡа ҡайт, өйҙәгеләр ҡарауылсыһыҙ ҡалды бит». Атаһы күрә, дошман бар нәмәне емереп, үҙе булған ерҙә халыҡты яҙалап, әсирлеккә алып, ауылдарҙы яндырып йөрөй, ти. Салауаттың ғәскәре лә көндән-көн һирәгәйә икән. «Ауыр саҡта мин һине ташлай алмайым, улым», — тигән атаһы. Салауат атаһын яратып ҡосаҡлаған, ярҙамы өсөн рәхмәт әйтеп, яурынынан ҡаҡҡан. Ләкин көстәр тигеҙ булмай: дошман яуы көсәйгәндән-көсәйә. Батыр егеттәр арыҫландай көрәшә. Бына бер ваҡыт Салауаттың кир аты яралана һәм батырына: «Салауат, мине Шүлгәнташтың күленә төшөр, һауыҡкас, ҡайҙа ғына булһаң да үҙем һине эҙләп табырмын», — тигән. Егет кир атының үтенесен атҡарған, уны мәмерйә күленә төшөрөп ҡуйған. Ғәскәр башлығының кир аты юҡлығын күреп, дошман нык шатланған, сөнки үлемдән Салауатты кир аты ҡотҡарып алып йөрөгәнен белгән. Ләкин был нимә — ғәскәргә тирә-яҡтан егеттәр ҡушылып ҡына тора икән һәм еңелергә уйламайҙар ҙа, ти. Аҙаҡ аңлаған дошман: Салауаттың шиғырҙары яугирҙәргә көс-дарман өҫтәп, батырлыҡ ғәйрәте бирә, ти. «Иң беренсе Салауат менән атаһын ҡулға төшөрөргә кәрәк! — тип ҡысҡырып ебәргән дошман башлығы. — Бөтә бәлә Аҙналиндың батырлығында ғына түгел, шиғырҙарында ла!» Шымсыларға көн бөтә: улар көнөн-төнөн атаһы

менән Салауатты әҙәрләйҙәр һәм бер саҡ, һатлыҡ йәндәр ярҙамында тотоп алалар, ситлеккә ултыртып, кеше аяғы баҫмаған диңгеҙ утрауының зинданына алып барып ябалар. Ҡулдарына-аяҡтарына бығау һалалар, таш сығарырға, ҡәлғәләр төҙөргә ҡушалар. Тотҡонлоҡта атаһы менән Салауат бик ыҙа сигә, илен һағына, төштәрендә яҡындарын, туғандарын күрә. Егет һәр саҡ кир аты хаҡында уйлай, һауығып, яу үткән ерҙәрҙән мине эҙләйҙер инде, сит ерҙәргә килеп етә лә, таба ла алмаҫ, ти бошоноп. Көндәр, айҙар, йылдар үтә... Шулай бер саҡ, тыуған яҡтан һыҙылып ҡына һары таң атып килгәндә, иҫ киткес шартлау яңғырап китә. Тотҡондарҙы һаҡлаған һаҡсыларҙың бер туҡтауһыҙ йүгергәне, зыҡ ҡупҡаны ишетелә. Ҡапыл Салауат ятҡан зиндан емерелә һәм ярһып ат кешнәгәне тирә-яҡты тетрәтә. Егет алдына элеккенән дә көслөрәк, элеккенән дә етеҙерәк булып һауыҡҡан кир аты килеп баҫа.

— Салауат!.. Батырым! — ти ул ер тырнап. — Уралға ҡайтайыҡ — Башҡорт иленә!.. Ултыр тиҙерәк!

Салауатҡа ниндәйҙер иҫ киткес көс ҡуна, аяҡтарындағы, ҡулындағы бығауҙарҙы өҙөп ташлай һәм ул үҙен элеккесә, яу кейемендә, ҡулына ҡамсы тотҡан килеш күрә. Шул саҡ аты тағы телгә килеп:

— Салауат, миңә бар көсөңә бер һуҡ — тиремә үтһен, ике һуҡ — итемә үтһен, өс һуҡ — елегемә үтһен, — ти. Салауат йөрәкһенеп атының бойороғон үтәй. Шунан кир ат:

— Ә хәҙер күҙеңде йом, батырым, тик зинһар, мин ҡушмайынса асаһы булма! — тип иҫкәртә. Салауат күҙҙәрен йома һәм үҙен алға, тик ҡайҙалыр алға елеүен тоя... Әйтерһең дә, улар Ер шарын урап, әйләнеп осоп йөрөй...

— Күҙҙәреңде ас, Салауат! Беҙ Башҡорт иленең йөрәгендә торабыҙ, тик беҙҙең ваҡыт әҙ ҡалды, — ти кир аты. Үҙе шыбыр тиргә батҡан, ҡыҙыу тимер кеүек эҫе, ти. Салауат күҙҙәрен асып ебәрһә, үҙҙәрен Уралтауҙың бормаланып-бормаланып аҡҡан йылғаһы — Ағиҙелдең бейек ярында күрә.

— Һаумы, Уралым! Һаумы, Башҡорт иле! Азатлыҡ өсөн көрәшкән батырҙарҙан, Юлай Аҙналиндан сәләм, һағышлы сәләм! — тип ҡысҡыра Салауат.

— Ҡайтыуың менән ҡотлайбыҙ, батыр! — тип яуап бирә Баш-

ҡорт иле. — Беҙ батырҙарҙы онотманыҡ, уларҙың исемдәре ҡая таштарҙа, халыҡ күңелендә мәңгелек!

— Салауатым! — ти кир аты йыш-йыш тын алып. — Беҙ Уралға быуаттар аша азатлыҡ рухы, батыр һыны булып ҡайттыҡ!.. Ә хәҙер бер тултырып тыуған яҡтың һауаһын һула ла, үткән яуҙарҙы хәтерләп, Азатлыҡ оранын иҫеңә төшөр!

Кир атының ярһыулығы Салауатҡа ла күсә, егет ҡамсыһын юғары күтәрә һәм ... мәңгелек Азатлыҡ һәйкәле булып, Ағиҙел ярында тороп ҡала.

Борон-борон замандан алып, Ер йөҙө барлыҡҡа килгәндән бирле, Урал тауҙарында йәшәгән халыҡтың Салауат исемле яугир батырына, уның ҡурҡыу белмәҫ кир атына ҡуйылған һәйкәле Ағиҙелдең иң бейек ярынан бөтә Башҡорт иленә күренеп тора, ти. Ул халыҡтың ирекле, батыр, Тыуған еренә ҡарата мөхәббәтле булыуын сағылдыра икән.

# УРАЛ ИЛЕ – АРҠАЙЫМ

Борон, бик-бик борон заманда, Ер йөҙөнөң изге бер үҙәгендә, иҫ киткес гүзәл ҡала булған, ти. Уны беҙҙең ата-бабаларыбыҙ тәгәрмәсҡала — Арҡайым тип атаған. Арҡайымдың тирә-яғы, ғөмүмән, шул илдә йәшәгән халыҡтың ере бик ҙур, иркен булған. Ҡояш нурҙары аҫтында йәйрәп ятҡан киңлектең төньяҡ осондағы яланғас ҡаялы тауҙарында буран уйнаған, көньяғындағы шау сәскәле далаларында өйөр-өйөр йылҡылар утлаған, көнсығышында йырып үткеһеҙ ҡара урман булһа, көнбайышында тулы һыулы йылғалар, саф шишмәләр сылтырап аҡҡан. Урмандары кейеккә, йылғалары балыҡҡа, сикһеҙ яландары мал-тыуарға тулы булған. Ожмахҡа тиңләгәндәр был Урал тип аталған ғәжәп серле илде.

Ана шул ил ҡалаларының, ҡәлғәләренең баш ҡалаһы булып та һаналған тәүтөйәгебеҙ Арҡайым. Ҡаланың аҫылташтар менән биҙәлгән семәрле Ҡәнифә менән Ҡуңыр буға ҡапҡаларынан дүрт тарафҡа һуҙылған, Ай менән Ҡояш нурҙарына ҡойонған юлдар ялтырап ятҡан.

Каруан-каруан байлыҡ тейәгән атаҡлы сауҙагәрҙәр, күңелдәрендә бөтмәҫ-төкәнмәҫ халыҡтың тел хазинаһын һаҡлаған сәсән-аҡындар, оҫта һөнәрмәндәр Арҡайымға ағылған, ти. Ҡала сауҙа үҙәге генә түгел, ғилми үҙәк тә булған. Уның тау-убала күркәм урынлашыуы Йыһан төҙөлөшө менән тап килгән, ҙур тәгәрмәсте хәтерләткән. Мәрмәр, йәшмә таштар менән биҙәлгән өйҙәрҙә аҡыл эйәләре — ғалимдар, руханиҙар йәшәгән. Улар Ер менән Ҡояш араһының аныҡ оҙонлоғон, Ерҙең түңәрәк икәнен,

йыл миҙгелдәрен, ай, аҙна, көндәрҙе яҡшы белгәндәр. Илаһи көскә табынып, Йыһан менән бәйләнеш тотор өсөн ҡала стеналарында утыҙ ике нөктә балҡып янған.

Арҡайым үҙенең оҫта һөнәрмәндәре менән дә донъя йөҙөн таң ҡалдырған. Ҡала буйлап бер кем дә биҙәүесһеҙ йөрөмәгән. Ҡатын-ҡыҙҙар баштарына, муйындарына, түштәренә, ҡолаҡтарына, ҡулдарына алтын-көмөш, ынйы-мәрйендәр менән биҙәлгән сулпы, йөҙөк, беләҙек, ҡашмау кейгәндәр. Ә ирҙәр өҫкө кейемдәренә аҫыл таштар менән бик зауыҡлы итеп эшләнгән ҡәмәр таҡҡандар. Оҫталар илдең иң күренекле ғалимдарының, батырҙарының, сәсәндәренең һынын аяғүрә баҫҡан килеш таштан соҡоп яһағандар. Һынташтар ҡала баҡсаларында, зиннәтле һарайҙарҙа урын алған.

Бына ошо ҡалала Арҡайым башлығы Тимер Ҡаҙыҡ үҙенең йондоҙ кеүек сибәр Зөһрә исемле ҡатыны менән ғүмер иткән, ти. Уларҙың береһенән-береһе һылыу ете ҡыҙы булған. Тимер Ҡаҙыҡ, ҡыҙҙары ете йәшкә етеп, алтын ялатылған еңел күнәктәр менән һыу ташырлыҡ булғас, эңерҙән иртә таңғаса һандуғастар һайраған, алланып бешкән һутлы емешле йәм-йәшел гөл-баҡсала ҡоҙоҡ ҡаҙҙыртҡан, ти. Һәр береһенә ҡыҙҙарының исемен ҡушҡан. Ҡоҙоҡтар бик серле булғандар: тәүге ҡоҙоҡтоң һыуы һуҡырҙың күҙен асҡан, икенсеһенән ауыҙ итһәң — аяҡ-ҡулдарыңдың һыҙлауы баҫылған, өсөнсөһө — һаңғырауҙы дауалаған, дүртенсеһе — сихыр көсөн ҡайтарған, бишенсеһе — изге кешегә матурлыҡ өҫтәгән, алтынсыһы — бөтмәҫ көс биргән, етенсеһе — етмеш төрлө сир-елпеүҙе һыпырып ташлаған.

Тимер Ҡаҙыҡтың ғәжәйеп зиннәтле һарайынан кешеләр өҙөлмәгән. Илдең һәр тарафынан белемгә һыуһаған шәкерттәр ағылған. Һарайҙа донъяла тиңе булмаған ҙур китапхана булған. Тимер Ҡаҙыҡ күп ваҡытын шунда уҙғарған, ә ҡунаҡтар өсөн һәр ваҡыт тәмле һый-хөрмәт, иҫ киткес татлы эсемлектәрҙең хуш еҫе аңҡып торған аш урыны әҙер булған. Ҡаланың матурлығы, баҡсаларының гүзәллеге, ил халҡының татыулығы, ултырған урындың серлелеге хаҡындағы хәбәр Ер йөҙөн генә түгел, бар Йыһанды урап сыҡҡан, ти. Бигерәк тә Арҡайымдың ете ҡоҙоғо, сатлама һыуыҡтарҙа ла һыуының йомшаҡлығы, аяуһыҙ селләлә лә еләҫ һиллелеге, ер йөҙөндә тиңдәше булмаған ете ҡыҙының һылыулығы барыһын да хайран ҡалдырған. Ҡала эсендә саҡта бер

кемгә лә бәлә-ҡаза, ҡайғы килмәгән. Ҡоштар, йәнлектәр, кешеләр — барыһы бер бөтөн булып, үҙ-ара иғтибарлы, татыу, һөйкөмлө булғандар.

Бына Тимер Ҡаҙыҡ менән Зөһрәнең күптән көткән һигеҙенсе улы донъяға килгән, ти. Ҡала байрам төҫөн алған. Ә бәпес туйын улар ҡырҙа, йылға буйындағы туғайҙа үткәрергә булғандар. Ат еткән ергә ат, хат еткән ергә хат ебәреп, ҡунаҡ саҡырған Тимер Ҡаҙыҡ. Билдәләгән ваҡытта халыҡ байрам буласаҡ туғайға әркелгән. Алдан ат уйнатып һыбайлылар, улар артынан матур көймәле арбала улын алып Тимер Ҡаҙыҡ, ҡыҙҙары, ҡатыны Зөһрә барған. Туғайҙа ир-ат ҡорбан салған, ҡатын-ҡыҙҙар ут яғып, ҙур-ҙур ҡаҙандар аҫҡан. Тирә-яҡта халыҡ гөрләй, шау килә. Туҫтаҡ-туҫтаҡ ҡымыҙ эселә, ҡурай моңо яңғырай. Бер аҙҙан уйындар, йыр, таҡмаҡ әйтеүҙәр, бейеү башлана. Тимер Ҡаҙыҡ аҡ тирмә эсендә кесе ҡыҙы Гәүһәр менән уйнап ятҡан улына Ел батыр тип исем ҡуша. Аҡыл эйәләре, руханиҙар бәпескә аҡ бәхет юрай, уның батыр, аҡыллы, гәҙел, көслө булып үҫеүен теләй. Көнө буйы туғай өҫтөндә шат тауыштар яңғырай. Бар халыҡ күңел аса.

Тимер Ҡаҙыҡ бер генә аҡ һаҡаллы ҡунаҡ ҡарттың уйланып, моңһоу ултырғанын күреп ҡала. Ул ҡарт алдында баш эйгән дә:

— Ҡәҙерле ҡунағым, һеҙ ниңәлер бик моңһоу ултыраһығыҙ. Әллә һый-хөрмәтем, төҙөгән ҡалам, әллә сабый туйы оҡшамаймы? — тигән.

— Һый-хөрмәтең ашъяулыҡҡа һыймай, Тәгәрмәс ҡалағыҙ — Йыһан төҙөлөшөнөң көҙгөһө, бындай оҫталыҡ Хоҙай ярҙамында ғына тыуа торғандыр, — тигән ҡарт. — Йыйын йыйып, халыҡтан һауап алыуыңа рәхмәтем икһеҙ-сикһеҙ, изге төйәгебеҙ — Арҡайым ғүмере — Ер дәүеренә тиң булһын. Мин беләм, һин, Тимер Ҡаҙыҡ ергә атылған Йыһан улы, был донъяла эшеңде бөтөргәс, Урал халҡына аң-белем, һөнәр юлын күрһәткәс, йондоҙ булып, тағы күктә янасаҡһың. Ете ҡыҙыңдың яҙмышы ла Йыһандыҡылар менән бәйләнгән.

— Эйе, минең яҙмышым Ерҙең баш халҡы менән бәйләнгән, — ти Тимер Ҡаҙыҡ. — Ә бына уланым, Ел батыр өҫөн борсолам, уны нимә көтә, Аҡһаҡал?

— Ул ут-һыуҙарҙы кисеп, сынығып, батыр егет булып үҫә-

сәк... — тигән ҡарт. Тик ниңәлер әйтер һүҙен әйтеп бөтмәгән кеүек күренгән Тимер Ҡаҙыҡҡа Аҡһаҡал. Ул тынысһыҙланған.

— Борсолма, — тигән ҡарт. — Ел батыр ысын Ер улы булып йәшәйәсәк. Халыҡ уға таяныр.

— Ел батыр — үлемһеҙ Йондоҙ!.. Ул Ер менән Йыһанды тоташтырыусы нур — еп буласаҡ! — тигән Тимер Ҡаҙыҡ.

Ҡарт ризалығын белдереп баш ҡаҡҡан, йылмайып, байрамды дауам итеүҙе үтенгән.

Кискә тиклем ял итеп, көнөн күңелле үткәргән халыҡ, ҡояш байып барғанда кире ҡалаға юл алған. Әсәһе алдында малай, Ел батыр, иҙерәп йоҡлаған, арыған апайҙары ла тынып ҡалған, аталары байрамдан ҡәнәғәт булып, күңелләнеп таралған халыҡты күҙәтеп барған.

Ҡәнифә ҡапҡаһына етеп барған саҡта ҡапыл көслө ел сыҡҡан, бер аҙҙан ҡойон күтәрелеп, тирә-яҡҡа йәшен шарҙары атыла башлаған. Һыбайлылыр алдында ҙур ҡарасҡы пәйҙә булған.

— Тимер Ҡаҙыҡ, көймәңдән сыҡ! — тип ҡысҡырып ебәргән ҡарасҡы имәнес тауыш менән. — Һинең менән һөйләшә торған һүҙем бар!..

— Һин кем? — тип аптыраған Тимер Ҡаҙыҡ тынысһыҙланып. Бығаса мин һине күргәнем дә, һинең хаҡында ишеткәнем дә булманы.

— Ха-ха-ха! Ҡайһы берәүҙәр мине Ҡара Йөрәк тиҙәр! Ха-ха!

Уның тауышына Ел батыр ҡурҡып уянған, ҡыҙҙар бер-береһенә һыйынған, Зөһрәнең йөрәге ниндәйҙер шом буласағын һиҙеп, ҡабынып киткән, малайын нығыраҡ күкрәгенә ҡыҫҡан.

— Мин һине күптән һағалап йөрөйөм. Арҡайым эсендә һөйләшеп булмағанға күрә, бына, уңайы сыҡҡас, ҡала ситенә килдем.

— Ниндәй йомошоң бар миндә, Ҡара Йөрәк? Һөйлә, тыңлайым.

Ҡара Йөрәк ер һелкетеп көлгән.

— Йомош! Ундай нәмә кеше затында ғына була! Йомош алғас, уны кире ҡайтарырға кәрәк, ә мин кире ҡайтарырға йыйынмайым! Миңә һинең малайың, әле генә исем ҡушылған Ел батыр кәрәк! Яңыраҡ минең дә ҡыҙым тыуҙы, киләсәктә уға Ерҙе дер ҡалтыратып торған ир кәрәк буласаҡ.. Мин дә бөгөн иблис заты-



нан булғандарҙың барыһын да мәжлескә йыйҙым һәм йыйындың ҡарарын һиңә еткерәм: малайың беҙҙең ҡулда ир етергә тейеш, һинең тәрбиәңдә ул ҡаты бәғерле, ҡара йөрәк булып үҫмәйәсәк, аңланыңмы?

Ҡара Йөрәк һалҡын ҡарашы менән Тимер Ҡаҙыҡҡа ҡарай һәм йөнтәҫ, оҙон ҡулдарын һуҙып, көмөш көймәгә ҡара нурҙар ебәрә. Ҡара Йөрәккә ташланған ҡыйыу һаҡсылар ҙа, йыйылып киткән халыҡ та үҙен көсһөҙ һиҙә. Тимер Ҡаҙыҡ менән Зөһрә һылыу таш һын кеүек ҡатып ҡала. Ҡапыл Ел батыр әсәһенең ҡулынан ысҡына һәм ҡара нур көсө менән Ҡара Йөрәккә тартыла. Уның илаған тауышы тирә-яҡты һиҫкәндереп ебәрә. Ҡайһы аралалыр, ҡайҙандыр килеп сыҡҡан Аҡһаҡал ҡарт бала менән Ҡара Йөрәк уртаһына тора һәм ҡара нур ҡылысҡа киҫелгән кеүек икегә ҡырҡыла.

— Һин! Һин тағы ла миңә ҡамасаулайһыңмы? — тип ҡысҡырып ебәргән Ҡара Йөрәк ажғырып. — Күпме минең юлыма арҡыры торорға була! Икегеҙҙе лә юҡ итәм мин хәҙер!

Аҡһаҡал да ҡулдарын алға һуҙған һәм аҡ нур менән ҡара нур бәрелешеп, ергә утлы йәшен яуҙырған. Күҙ асып йомған арала Ел батырҙы ҡара ҡойон күтәреп алған да болоттарға күтәрелеп, зыр әйләндерә башлаған, ти. Бер нәмә лә эшләй алмай, иҫен юғалтып торған халыҡ малайҙың ҡара бесәйгә әйләнгәнен күреп ҡалған. Шул саҡ Аҡһаҡал үҙе лә аҡ ҡуласа нурға әйләнеп, ыҙа сиккән бесәйҙе ҡурсалап, уратып алған һәм ҡара ҡойон эсендә ҡайҙалыр китеп юғалған, ти. Бер аҙҙан ғәрәсәт тынған: Аҡһаҡал да, Ел батыр ҙа, Ҡара Йөрәк тә юҡҡа сыҡҡан. Ҡан-йәш ҡойоп, ҡала халҡы Арҡайымға йүнәлгән. Тирә-яҡты ҡайғы баҫҡан. Үҙенә тартып торған семәрле ҡапҡалар ябылған. Гүзәл баҡсаларҙа һандуғастар тынған, Гәүһәр ҡоҙоғонан башҡа ҡоҙоҡтар һыуҙарын ер аҫтына йәшергән, мәрмәр, яҡут, зөбәржәт таштар йәйғоронда балҡып торған өйҙәр төҫһеҙләнгән, мөһабәт, яҡты нур балҡытҡан ҡала өҫтөн күкһел томан баҫҡан. Бер кем дә өйөнә ашыҡмаған, бар халыҡ Тимер Ҡаҙыҡ һүҙен көтөп, майҙанға йыйылған.

— Шатлыҡ менән бергә ҡайғы ла килде ҡалабыҙға, — тип һүҙен башлай Тимер Ҡаҙыҡ. — Беҙ Арҡайымда таңға тиклем генә ҡала алабыҙ. Ҡалһаҡ, халыҡ та, Арҡайым да һәләк буласаҡ. Ҡара Йөрәк ҡаланы ер менән тигеҙләйәсәк. Урал илендәге бар

Аҡһаҡалға үтенсе хаты яҙырмын, әгәр теләһәгеҙ, һеҙ уларға барып ҡушыла алаһығыҙ, әгәр Арҡайым ерен ташлап китә алмаһағыҙ, тирә-яғындағы ер-һыуға ултырығыҙ.

— Ә ниңә беҙ Ҡара Йөрәк менән көрәшмәйбеҙ? — тигән батырҙар.

— Баш халыҡ — батыр халыҡ, ҡыйыу халыҡ, — тип һүҙен дауам иткән Тимер Ҡаҙыҡ, — уның ҡатнашлығында донъя йөҙөндәге яуызлыҡтар еңеләсәк. Ләкин Арҡайым эсендә бер ваҡытта ла һуғыш булмаясаҡ. Ул — изгелек, гүзәллек үҙәге. Шул уҡ ваҡытта бер кем дә ҡалаға инә лә, сыға ла алмаясаҡ. Һеҙ беләһегеҙ, әгәр ҙә ырыу ҡаны алмашынмаһа, халыҡ һәләк буласаҡ. Халыҡ һәләк булһа, уның аңынан гүзәл ҡалабыҙ ҙа юйыласаҡ. Ҡара Йөрәк Ел батырҙы тапмайынса тынысланмаясаҡ. Үс итеп, уны беҙҙең күҙ алдында бесәйгә әйләндерҙе. Ҡалабыҙға бер ваҡытта юл тапмаһын өсөн Арҡайымды уратып, туғыҙ тапҡыр ҡара нур һуҙасаҡ. Был яуызлыҡ булмаһын өсөн барыбыҙға ла ашығырға кәрәк. Ҡалала йән эйәһе ҡалмағас, мин уны Ҡара Йөрәк күҙенән ҡасырып, изге зәңгәр томан менән күмәсәкмен.

— Ел батыр һәләк булмаҫмы, хәҙер ул ҡайҙа, беҙгә уны эҙләп табырға рөхсәт ит, — тигән халыҡ Тимер Ҡаҙыҡҡа.

— Ел батырҙың ҡайҙа икәнен мин дә белмәйем, — тигән Тимер Ҡаҙыҡ башын аҫҡа эйеп. — Хәҙер ул Ер улы, малайҙы баш халыҡ Аҡһаҡалының етегә бүленгән йәне — ете ураү аҡ нур һаҡлай...

Тимер Ҡаҙыҡ һәр ырыу Аҡһаҡалына төбәп, үтенес хаты яҙа һәм Арҡайым халҡы менән мәңгелеккә хушлаша. Нуры һүнгән һарайына ҡайта, моңайып ҡалған ҡыҙҙары, малайының сәңгелдәге янында башын эйеп ултырған Зөһрәһе янына килә.

— Һөйөклө ҡыҙҙарым, Зөһрәм, беҙҙе баҡсала нур-көймә көтә, — ти. Ҡыҙҙары теләр-теләмәҫ кенә нур-көймәгә сығып ултыра, тик әсәләре генә сәңгелдәк янынан тора алмай.

— Ашығайыҡ, Зөһрә, беҙҙе күккә саҡыралар, — ти Тимер Ҡаҙыҡ.

Ҡатыны уның күҙҙәренә ялбарыулы ҡарай.

— Һин, ҡәҙерлем, ҡыҙҙарҙы алып китә тор, ә миңә саҡ ҡына сәңгелдәк янында ҡалырға рөхсәт итсе. Был минең Ерҙәге һуңғы үтенесем.

Тимер Ҡаҙыҡ ҡатынының һуңғы үтенесен кире ҡаға алмаған һәм нур-юлдан нур-көймәлә ҡыҙҙары менән бергә күккә күтәрелгән. Бына, ҡапыл күк көмбәҙе асылған һәм нур-көймә осҡон кеүек тирә-яҡҡа сәсрәгән. Тимер Ҡаҙыҡ ете ҡыҙын ҡулынан тотоп, йондоҙ булып балҡып киткән. Йондоҙ-ҡыҙҙар Ергә бағалар һәм үҙҙәренең ете ҡоҙоғон юҡһынып һағыштан сүмес рәүешле теҙелеп баҫалар. Зөһрә һылыу ғына төн уртаһын үткәреп, Ел батыр сәңгелдәге янында бәүелеп ултыра. Ҡайғыһы, балаһына булған һөйөүе Ерҙә тота уны. Ә ҡыҙҙары, әсәләрен һағынып, аталары тирәһендә өйөрөләләр. Тимер Ҡаҙыҡ түҙмәй:

— Зөһрә һылыу, Ерҙә түгел, Йыһанда ла мин һинһеҙ йәшәй алмайым, тиҙерәк килсе... — тип алыҫтан нур-тауыш менән ялбара.

Зөһрә һылыу, таң алдынан ғына, теләр-теләмәҫ кенә, Ерҙән айырыла, яп-яҡты таң йондоҙо булып, күккә үрләй. Таң ата. Ошо көндән башлап, ғүмер буйы бер-береһен яратыусы Тимер Ҡаҙыҡ менән Зөһрә һылыу, ҡыҙҙары — Етегән йондоҙ Ерҙе күҙләй, ҡайҙалыр аҙашып, мәңгелеккә баш халыҡ менән ҡалған Ел батырҙы эҙләй, ти. Арҡайымдан төньяҡҡа күскән халыҡ аҙашмаған, сөнки юлды уларға Тимер Ҡаҙыҡ үҙе күрһәтеп торған. Урал иле уны хөрмәтләп иҫкә алған, йәштәр, Зөһрә йондоҙға ҡарап, ярһыу йөрәктәрендә һөйөү хисе йөрөткән. Олораҡтары ете ҡоҙоҡтоң шифалы һыуын онотмай: «Етегән тигән ете йондоҙҙо ете уратып әйтһәң һауап була», — тип һамаҡлап йөрөгән.

...Һәр иртә таң һайын Ер йөҙөнә Ҡояштың нурҙары ҡойола, бар Урал илен иркәләй, тик Арҡайым — тәгәрмәсҡала ғына зәңгәр томан аҫтында быуаттар тәрәнлегендә бәүелеп, баш халыҡтың серле ҡомартҡыһы булып, беҙҙең көнгә үрелеп ҡарай, ти.

# ӘСӘ БӘХЕТЕ

Йәшәгән, ти, бер ҡатын. Уның бик һылыу телһеҙ ҡыҙы, бәхет эҙләп сығып китеп тә һаман ҡайтмаған, хәбәрһеҙ юғалған улы, ниндәйҙер сәбәп менән аяҡһыҙ булып йығылған ире булған, ти. Ҡатын үҙен донъяла иң бәхетһеҙ кеше итеп хис иткән. Ирен һауыҡтыра алмай ҡайғырып, йәшләй сәстәре ағарған, тилмереп, улы киткән юлға ҡарап илап, күҙҙәре насар күрә башлаған, көндө көнгә ялғай алмай, хәйерселектән иҫе киткән, ти.

Бер мәл ул, арып-талып, урман ситендәге аҡланда бесән сабып йөрөгәндә, дауыл аҫтында ҡалған. Ҡатын япраҡтары һарғайып бөткән йыуан ҡайын аҫтына һыйынған. Баш өҫтөндә йәшен йәшнәгән, көслө ел йәш ағастарҙы ергә әйгән, ҡороларын шатыр-шотор һындырып, осороп алып киткән. Ҡапыл аяҡ аҫтында ер ярылып киткән һәм ярыҡтан ҙур башын секәйтеп, ажғырып, бер быуар йыландың сығып килгәне күренгән. Ҡатындың ҡурҡыуынан ҡото осҡан. Йылан бер нәмәгә лә әһәмиәт бирмәгән, ағас олоно буйлап, өҫкә үрмәләгән. Шул саҡта ғына ҡатын бер ҡош ояһының ботаҡта һелкенеп торғанын күреп ҡалған. Йәйғор ҡанатлы инә ҡош ярһып-ярһып, йөрәк өҙгөс тауыш менән, баш өҫтөндә өйөрөлә башлаған. Кәйелеп-кәйелеп, йыландың ауыҙына үҙе инә яҙырҙай булып, ярһыған. Оя эсендәге ҡошсоҡтарының ҡыҙғаныс сырылдауы ҡатынға үҙенең балаларын хәтерләткән. Уларҙың да килер бәхетен ошо йылан — аждаһа йотор кеүек тойолған. Ниндәйҙер, атылып сығып барған нәфрәт-көс, уны йыланға ҡарай атлатҡан. Йәшен менән бергә салғы йөҙө ялтырап киткән. Күҙ



асып йомғансы йыландың өҙөлгән башы ут сәсрәтеп, ер ярығына тәгәрәгән, кәүҙәһе ҡанһырап, һурылып, кирегә шыуышҡан, ти. Ер бөтәшкән, дауыл тынған, йәйғор ҡанатлы ҡош ҡатындың баш осона, ҡайын ботағына килеп ултырған да кешесә тауыш менән:

— Эй мәрхәмәтле, батыр ҡатын, рәхмәтемдең иге-сиге юҡ һиңә. Нимә менән генә лә бүләкләргә белмәйем үҙеңде. Йәнең теләгәнде һора, бирермен, — тигән. Ҡатын ҡайғылы рәүештә башын аҫҡа эйгән, ҡапыл ғына нимә тип әйтергә лә белмәгән.

— Күреп торам, — тип талпынған ҡошсоҡ, — һеҙ бик ярлы йәшәйһегеҙ, шуның өсөн бер көршәк алтын аҡса бирәм.

Ҡошсоҡтоң ҡайынды өс тапҡыр урап сығыуы була, ҡатын янына алтын аҡсалар менән тулған көршәк килеп ултырған, ти. Тик ҡатын ниңәлер шатланмаған, киреһенсә, күҙенән йәше тәгәрәгән.

— Ireңә ат алырһың, ҡыҙыңа бай бүләктәр йыйырһың, малайыңды өйләндереп, өй һалырһың, — тип йыуатҡан уны ҡошсоҡ. — Ал, ал...

— Ғәфү ит, — тигән ҡатын ауыр һулап, — алтын аҡсаларың миңә кәрәкмәй. Баш ҡайғым — алтындан көслөрәк. Ярҙам итсе.

Ҡатын ҡошсоҡҡа көндән-көн баҫа барған ҡайғыһын һөйләп биргән.

— Минең бәхетем алтын аҡсала түгел, ә күҙ ҡараһы кеүек ҡәҙерле, яҡын кешеләремдең бәхете менән бергә. Ярҙам итсе, ҡошсоҡ. Ана шул булыр һинең изгелеккә яҡшылыҡ менән яуап биреүең.

Алтын аҡсалар менән тултырылған көршәк юҡ булған. Ә ҡошсоҡ иһә атылып йә күккә күтәрелгән, йә ергә төшөп, оҙаҡ ҡына үлән араһында юғалып торған, нимәләр тыңлаған. Аҙаҡ, ҡатын янына килгән дә:

— Ҡайғыңдың сәбәптәрен белдем, — тигән, — ул да минең тормош ебемә бәйле булған икән. Әле генә һин үлтергән йылан йыл һайын ер аҫтынан күтәрелде лә, ҡошсоҡтарым осор өсөн ҡанат йәйгәндә генә тереләй йотоп торҙо. Өс көн үткәс, дүртенсе төндә, ер ярып сығып, ҡайынға йәбешеп, ояма башын һалып, үҙенең балаларын тыуҙырҙы. Улары ҡаса торҙо, йәш үлән, сәскә һутын һурып, үҫә барҙы, аҙаҡ, ер аҫтына инеп юғалды. Быуар йыланға, ер йөҙөнөң ҡара көстәре, үлемең салғынан булыр, тип иҫкәрткән.

Шуның өсөн ул аҡлан хужаһы, бесән сабыусы ирендe сихырлап, аяҡтан йыҡҡан. Ә ҡыҙың төшөндә ошо хәлде күреп, ҡурҡыуынан телһеҙ ҡалған. Йылан бөгөн һине күрһә лә ҡурҡманы, ҡатын кешенең саялығына, көсөнә ышанманы. Был батырлыҡты тик ҡатын кеше генә, йөрәк ярып сыҡҡан бала өсөн үлемгә ташланған әсә генә, эшләй алғанын аңламаны. Сөнки йылан, ҡасып өлгөрмәгән балаларын үҙе үк йота ине.

Ҡошсоҡ йәйғор ҡанаттарын балҡытып, тағы өс тапҡыр ҡатынды урап сыҡҡан.

— Беҙ икебеҙ ҙә — әсә. Минең ғазабымдың дауамы — һинең ҡайғың. Ер йөҙөндәге изге көстәр — минең дуҫтар, йыландың яуыз сихырынан нисек ҡотолорға өйрәтте. Аҡлан ситендә бер бәләкәй генә түбә бар, итәге осонда, ап-аҡ таштар араһынан сылтырап ҡына бәләкәй шишмә ағып ята. Мин һиңә көмөш һауыт бирәм, шул һауытты тултырғансы һыу ал да ҡыҙыңдың йөҙөн, иреңдең аяғын йыу. Сихыр ҡайтыр.

Ҡатын көмөш һауытты алып, аҡлан ситенә юл алған, ти. Ул был шишмәне ғүмере күрмәгән булған. Түбә итәгендә, ысынлап та, ап-аҡ таштар аҫтынан урғылып сығып, саф һыулы шишмә ағып ята икән. Ҡатындың эйелеүе була, һыу үҙенән-үҙе көмөш һауытҡа тула ла ҡуя. «Мөғжизә...» — тип уйлаған ул һәм рәхмәт йөҙөнән үҙенең берҙән-бер ире йәш саҡта бүләк иткән йөҙөгөн, һыуға һалған. Ләкин шишмә йөҙөктө алмаған, үҙеңә ҙур рәхмәт, аҡланды йылан хакимлегенән ҡотҡарҙың, тигәндәй ялтыратып, өр-яңы балҡыш һалып, кире ҡайтарған. Ҡатын ҡайтыр юлында тағы ҡошҡа һуғылған, ти. Елһеҙ ҙә ергә ҡойолоп, һарғайған япраҡлы ҡайын уға бик йәл булып киткән. Күп уйлап тормаған, көмөш һауыттағы һыуҙы уртлап алған да ҡайынға бөркөп ебәргән. Күҙ асып йомғансы ағас йәм-йәшел ыуыҙ япраҡтарға ҡапланған, ҡошсоҡтар шатланып, сыр-сыу килеп осоп киткән, йәйғор ҡанатлы ҡош ҡатынға бер ҡауырһын төшөргән.

— Һинең изгелегеңдең сиге юҡ. Минең ҡайынымды ла терелттең. Йәйғор ҡауырһын бирәм. Ҡауырһын улыңа юл күрһәтер. Аяҡҡа баҫҡан ирең хәтәр юлға үҙе сығырға теләр, һорауын кире ҡаҡ. Сөнки... балаңды һин генә бәләнән ҡотҡара алаһың.

Ҡатын өйөнә ашыҡҡан. Килеп етеү менән иренең аяҡтарын йыуған икән, уныһы һауығып, урынынан торған да, хөрмәт йөҙө-

нән ҡатынының сәстәрен һыйпаған, ти. «Ишек алдына бәхет килде», — тип уйлаған ҡатын һәм ҡыҙының да битен йыуырға ашыҡҡан. Ҡыҙы ла һауығып, шатлығынан ҡысҡырып ебәргән, ти. Ишек алдында ат кешнәгән, байлыҡ тулы ике һандыҡ ҡыҙ янына килеп ултырған. «Бәхет тупһаға ҡунды. Сәстәремдең дә төҫө ҡайтты...» — тип шыбырлаған ҡатын һәм ауырлыҡтан ҡаҡшаған кәүҙәһен турайтып, түкмәй-сәсмәй, үҙе менән булған хәлде өйҙәгеләргә һөйләп биргән. Ауыр кисерештәргә дусар булған ҡатынын хәтәр юлға бер үҙен генә сығарып ебәрергә һис кенә лә риза булмаған ире. Аҙаҡ аптырап, борсолоп, ҡыҙы менән бергә, хәйерле юл теләп, оҙатып тороп ҡалған, ти.

Йәйғор ҡауырһын киң яландар аша, ҡуйы урмандар араһынан, тәрән күлдәр ситенән үткән. Ҡатын унын артынан ҡалмаҫҡа тырышҡан. Бына ул ҡот осҡос булып янған, тирә-яғында бер генә йән эйәһе лә күренмәгән, бер бөртөк үлән дә үҫмәгән ҡола яланға килеп сыҡҡан. Йәйғор ҡауырһын шып туҡтаған, ҡатын уны ҡош өйрәткәнсә күкрәгенә йәшергән, иҫе-аҡылы китеп, ғәжәп күренешкә аптырап торған. Ҡолас етмәҫлек йыуан, олоно күккә олғашҡан тимер япраҡлы тирәк ботағында ғәләмәт ҙур өй аҫылынып тора икән. Уның тәҙрәһенән моңһоу йөҙлө матур ҡыҙ ҡарап ултыра, ти. Ә ағас тирәләп, кешегә оҡшаш таш һындар ҡатып торған. Тирәккә яҡынлашҡан һайын ҡатын үҙенең ойоуын, ниндәйҙер көс йоҡоға тартыуын һиҙгән. «Йоҡламаҫҡа... Йоҡламаҫҡа, улымды табырға», — тип уйлаған ул һәм бер-береһенә тамсы һыу кеүек оҡшаған, һалҡын бәреп торған һындарҙы ҡарарға тотонған. Алыҫта ҡаты гөрһөлдәү ишетелгән. «Ҡасығыҙ! — тип ҡысҡырған ҡыҙ, — өс башлы аждаһа-йылан һунарҙан ҡайтып килә, ул да һеҙҙе таш һынға әйләндерәсәк!» Ҡатын тертләп киткән, ҡапыл уның ҡулы йылы таш һынға тейгән. Текләп, йәшле күҙҙәре менән уға ҡараған һәм үҙ улы торғанын күргән. Ҡосаҡлаған, күҙ йәштәре таш һындың күкрәгенә тамған, әкренләп, егет өҫтөнән таш киҫәктәре айырылып төшә башлаған. Ә был ваҡытта өйөрмәле ҡойон менән бергә өс башлы аждаһа-йылан яланға яҡынлашҡан. Ул, йыл һайын бесән аҡланына балаларға сыҡҡан быуар йыландың ире икән. Бисәһе үлгәс, батша ҡыҙын ҡатын итергә урлап ҡасҡан, ти. Тегеһе риза булмағас, таш өйгә бикләгән һәм уны ҡотҡарырға килгән бер егетте таш һынға әй-

ләндереп торған, ти. Күҙ асҡыһыҙ ҡойон яланды ҡаплап алған. Шул саҡ ҡатын күкрәгендәге ҡауырһындың яндырып алып барғанын тойған. Ғәжәпкә ҡалып, осло, йәйғор төҫтәре менән балҡып торған уҡ тартып сығарған. Ҡанаты менән ҡояшты ҡаплап, ут яуҙырып, таш һындарҙы көйҙөрә-көйҙөрә, аждаһа-йылан яланға ташланған. Егет сос булған, йәйғор төҫө балҡыған уғының керешен тартҡан. Әсә менән улды ҡурҡыныс тырнаҡтарына эләктерәм, генә тигәндә аждаһа-йылан янып, юҡҡа сыҡҡан. Тимер тирәк гөрһөлдәп ергә ауған, таш һын эсенән әкренләп егеттәр сыға башлаған, ватылған йомро өй янында матур батша ҡыҙы баҫып торған. «Әсәйең — беҙҙе, һин — донъяны аждаһа-йыландан ҡотҡарҙың, — тигән ҡыҙ егеткә ҡулын һуҙып. — Атайымдың шарты буйынса, һин батша кейәүе, батыр егет». «Улымды ҡотҡарҙым, бәхет өйөмә инде», — тип уйлаған ҡатын һәм шатлығынан илап ебәргән. Күҙ йәштәре ҡайғы томанын йыуып төшөргән, ҡатын күҙҙәренең яҡшы күреүен тойған.

Аждаһа-йыландың пар атына ултырып, буласаҡ килене менән улы янында барған ҡатын үҙен бик бәхетле әсәгә һанаған. Уларҙы ҡоллоҡтан азат ителгән сая егеттәр — һыбайлылар оҙата килгән, ти.

# ТАМСЫГӨЛ

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер көтөүсе. Уның яғымлы ғына ҡатыны, берҙән-бер Йәноҙаҡ исемле улы булған. Иртә яҙҙан ҡара көҙгә тиклем байҙың һарыҡтарын көткән улар. Ас та булмағандар, туҡ та булмағандар, ләкин бошонмағандар. Сөнки урман-ҡырҙарҙа, йылға-күлдәрҙә, тау итәктәрендә ҡош-ҡорт, емешеләк күп булған. Атаһы йомош менән ауылға ҡайтҡан саҡта Йәноҙаҡ көтөүҙе бер үҙе ҡараған. Ул ер-һыуҙы яҡшы белгән, ти.

Бер саҡ, шулай, атаһын бай саҡыртып алған. Йәноҙаҡ һарыҡтарын тауға алып сыҡҡан: иртә менән битләүҙә йөрөткән, төшкөләккә матур ғына аҡлан ситендәге ҡайынлыҡҡа алып төшкән. Малдар һыу эсеп, саңдауға урынлашҡас, малай ҙа ял итергә булған. Сәй эсеп, ҡоштар йырын тыңлап, тирә-яҡты күҙәтеп ята торғас, ҡапыл уның күҙенә ҙур аҡ сәскә өҫтөндә йоҡлап ятҡан иҫ киткес матур күбәләк салынған, ти. Нур сәсеп торған нескә ҡанаттарын һалындырып, оҙон керпекле күҙҙәрен йомоп, серем итә ул. Малай һоҡланыуынан ҡатып ҡалған, хатта, быуар йыландың телдәрен сығарып, күбәләккә яҡынлашҡанын да һиҙмәгән. Ҡапыл йылан ыҫылдап, күбәләккә үрелгән. Быны күргән күбәләктең ҡото осҡан, күҙ асып йомған арала, сыбыртҡыһы менән йән асыуына йыландың башын һыҙырып ебәргән, ти, малай. Уныһы әсе тауыш сығарып, тәгәрәп киткән дә ауыҙынан ағыу бөркөп, шунда уҡ йән биргән. Матур күбәләк тә юҡҡа сыҡҡан, малай алдында йыртыҡ күлдәкле, таяҡ таянған, кәлтерәп бөткән әбей пәйҙә булған, ти.

— Улым, — тип өндәшкән әбей хәлһеҙ тауыш менән, — мең-мең рәхмәт үҙеңә, үлемдән ҡотҡарҙың, күбәләктәй генә йәнемде һаҡлап алып ҡалдың. Ҡайғы ла баҫып, ҡояш аҫтында ла ятып, эҫе алдыртҡанмын, тамағым кипте, сәй генә эсереп ебәрмәҫһеңме икән?

Йәноҙаҡ күбәләктең ҡапыл ҡарсыҡҡа әйләнеүенә аптыраһа ла ҡурҡмаған, хөрмәт итеп, табынға саҡырған. Үпкәһе йөҙгәнсе сәй эсеп, доға ҡылғас, иҫ киткес һылыу ҡыҙға әүерелгән, ти, ҡарсыҡ. Йәноҙаҡ шаян малай булған. «Минең буласаҡ кәләшем дә ошолай матур булһасы!» — тигән һоҡланып. Ҡыҙ йылмайған һәм малайҙы бер ҡалҡыу түбәгә алып менгән.

— Бына был ҡала минеке! — тигән тирә-яҡты байҡап. Ләкин Йәноҙаҡ бер нәмә лә күрмәгән.

— Йәшел урмандан башҡа нәмә күҙгә эленмәй, — тигән малай. Һылыу ҡыҙҙың ебәк елән еңен һелкеп ебәреүе була, алдарында һоҡланғыс мәрмәр ҡала хасил була. Аптырауынан, Йәноҙаҡтың иҫе-аҡылы китә.

— Был минең өсөнсө ҡалам... — ти ҡыҙ урта йәштәрҙәге матур ҡатынға әүерелеп. — Әле төҙөлөп бөтмәгән, буласаҡ хужаһын көтә. Бая буласаҡ кәләшеңдең бик һылыу булыуын теләгәйнең. Йәноҙаҡ улым, матур матур булмай, тик яратҡан кешең генә матур була.

— Нисек инде, — тип аптыраған малай. — Матур ҡыҙ матур булмаһын да, тик яратҡан ғына матур булһын? Аңлашылмай бер ҙә...

Ҡатын яғымлы тауыш менән:

— Егет ҡорона ингәс, үҙең яратҡан иң матур ҡыҙҙы етәкләп ошо түбәгә кил һәм бар донъяға уны яратыуыңды белгерт. Һин мине яуыз сихырсынан, үлемдән ҡотҡарҙың. Бурыслымын үҙеңә, ошо ҡалам һиңә туй бүләге булыр. Тик осрашыу хаҡында берәүгә лә һөйләмә, мин — әүлиә... — ти.

Ҡапыл әүлиә лә, мәрмәр ҡала ла юҡҡа сыға, малай бер үҙе түбәлектә тороп ҡала. «Әллә төш булды инде...» — тип уйлай һәм ял итеп ятҡан һарыҡтары янына ҡайта. Ғәжәпләнеп, күбәләк йоҡлап ятҡан аҡ сәскә янына килә. Ә сәскә нурҙар балҡытып, тирә-яҡты йәмләп ултыра, ти.

Кискеһен атаһы көтөүҙе ҡаршы сығып ала.

— Улым, — ти ул сәйер тауыш менән. — Мин һиңә һеңле алып ҡайттым. Әсәйеңә лә ярҙамсы булыр...

— Ҡайҙа ул ҡыҙыҡай? — тип шатланып китә малай. — Тирмәләме?

— Бар, ҡыҙым, сыҡ, ҡурҡма, ағайың менән таныш, — тигән әсәһенең тауышы ишетелә. Бөтә тәне йомшаҡ йөн менән ҡапланған, кейек тиһәң, кейек түгел, ләкин кешегә оҡшаған йән эйәһе сыға. Өҫтөнә кейенгән кейеменә ҡарап, уның ҡыҙ затынан икәнен саҡ айырып булған, ти. Ҡыҙыҡай тартынып, Йәноҙаҡҡа бер аҙ ҡарап торған да, йүгереп кире тирмәгә инеп киткән. Малай уның моңло ҡара күҙҙәрен, оҙон, тамсыгөл кеүек нур сәсеп, бөгөлөп торған керпектәрен шәйләп ҡалған, ти.

— Атай, уның исеме нисек? — тип һорашҡан ғәжәпләнеп.

— Исемен бәрәү ҙә белмәй, сөнки ул һөйләшмәй.

— Әсәй уға исем ҡушмағанмы әллә?

— Юҡ, улым, һине көттөк.

— Атай, уның исеме Тамсыгөл бит.

— Ҡайҙан белдең, улым?..

— Ҡапыл... Күңелгә шул исем килде.

— Ярай, һинеңсә булһын, — тигән атаһы. — Былай ҡыҙыҡай яҡшы ишетә. Ҡош-кейектең телен аңлай тиҙәр.

Йәноҙаҡҡа атаһы ауылдағы булған хәлде һөйләп биргән.

— Мин ауылға ҡайтҡанда бай йорто янында ниндәйҙер тамаша бара ине. Ҡысҡырышалар, көлөшәләр, түңәрәк яһап ултырғандар. Яҡыныраҡ килһәм, сиғандар кәмит ҡуя икән. Үҙҙәре лә шул ыңғайға ҡыланалар. Бына бер ваҡыт, кибеткәләре эсенән һөйрәтеп тигәндәй ошо ҡыҙҙы алып сыҡтылар. Әллә ҡурҡып, әллә аптырап, әллә йәлләп, халыҡ аһ итте. Тамашаны алып барған сиған уны йылға буйынан табып алыуҙарын, әле бер һөнәргә лә өйрәтә алмауҙарын әйтте. Ҡыҙҙы айыу менән бейергә ҡуштылар. Балаҡай бер-ике әйләнде лә ҡасырға ынтылды. Шул саҡ сиғандың ҡамсыһы уның арҡаһын һыҙырып үтте.

— Беҙҙә бушлай ашатмайҙар! — тип ҡысҡырҙы үҙе. — Айыуҙы өйрәткәндә, һине генә бейетә алырбыҙ!

Ҡапыл ҡыҙыҡайҙың ҡарашы миңә төбәлде, ҡаушауҙан ҡойолоп төштөм. Ҡотҡарыуҙы һорай ине уның күҙҙәре. Халыҡ та ризаһыҙлыҡ белдерҙе.

— Уны ла Хоҙай яратҡан, йән эйәһе бит, ниңә йәберләргә? — тип һөйләнеп алдылар. Мин сиған янына барҙым да, әгәр риза

булһа, ҡыҙыҡайҙы ике баш ҡуйға һатып алырға тигән теләгемде белдерҙем. Сиған шарҡылдап көлдө лә шундуҡ риза булды. «Әрәмтамаҡ беҙгә кәрәкмәй, балаларҙы ҡурҡытып бөтөрҙө, ә ҡуй итенә байрам итербеҙ», — тине. Бер ҡорҙаштан көҙгә тиклем ике ҡуй алып торҙом да сиғандарға бирҙем. Ҡыҙыҡай яныма үҙе үк йүгереп килде. Бай мине саҡырып алғас, йомошон әйтте лә: «Был хайуанды һарыҡ көтөүенә ҡуш, ҡышҡылыҡҡа ауылға алып ҡайтһаң да урамға сығарма, беҙҙең дә балалар ҡурҡыр, минең Бикәм наҙлы ҡыҙ, йөрәге ярылыр», — тине. Бына шулай, улым. Әсәйең генә ятһынманы, һөйә-һөйә тамағын туйҙырып алды ҡыҙыҡайҙың, һин дә рәнйетмә.

Шул көндән башлап, ҡыҙыҡай көтөүсе ғаиләһендә йәшәй башлаған, ти. Тиҙ ылыға ул Йәноҙаҡҡа. Йылдар үтеү менән ағалы-һеңлеле кеүек, матур итеп үҫеп китәләр.

Бер мәл, ауыл халҡы йәйләүгә сығып, ҡуйҙар һимертеп, батмандар май менән тула башлағас, бай ҡыҙы Бикә үҙенә кейәү һайлаясағын белдергән, ти. Хат еткән ергә хат, ат еткән ергә ат ебәрелә. Төҫкә матур бай ҡыҙын бер күреү менән егеттәр ғашиҡ була ла ҡуя икән. Тирә-яҡтан күршенән дә, алыҫ-алыҫ ырыуҙарҙан да кейәү булырға теләгән йәш егеттәр йәйләүгә ағылған, ти. Бикә уларҙы сәләмләп, һәр береһен күҙҙән үткәреп, ҡаршы алып торған. Уны атаһының көтөүсеһе, Йәноҙаҡтың булмауы ғәжәпләндергән. Егеттең көслө, батыр һунарсы, төҫкә таҙа, мәргән булыуына күп ҡыҙҙарҙың күҙе төшкән, ти. Егеттең килмәүе Бикәне ярһытҡан һәм кәмһеткән, ләкин ул ояլып тормаған, сапҡын ебәргән, ярышты ҡарарға Тамсыгөлдө лә алып килергә ҡушҡан. Сөнки ул, ошоға тиклем, ауыл халҡы яратып өлгөргән ҡыҙҙы күргәне булмаған икән. Кеше аша, был икәүҙең игеҙәктәр кеүек, айырыла алмауын белгән. Шуға күрә, ҡарасҡы йәнәшәһендә, үҙенең матурлығын Йәноҙаҡ алдында балҡытаһы килгән Бикәнең. Оҙон толомло, һомғол буйлы, йөнтәҫ ҡыҙ менән һыбай килеп төшкән Йәноҙаҡты күреп, бай ҡыҙы шарҡылдап көлөп ебәргән. Һәм ярыштың өс шартын әйткән: көрәшергә, бәйгелә ҡатнашырға, алтын балдаҡҡа уҡ кейҙереп, уны ҡыҙға алып килергә һәм уң битенән үбергә тейеш икән. Йәноҙаҡ ярышта ҡатнашмаған, ҡарап торорға ғына теләк белдергән. Күп егеттәр үҙҙәрен күрһәткән: ҡайһылары көрәштә, ҡайһылары ат бәйгеһендә еңгән, ти.

Тик береһе лә уҡ менән балдаҡҡа тейҙерә алмаған. Быға Бикә ныҡ шатланған. Йәноҙаҡҡа ҡараған да: «Ниңә бер ярышта ла ҡатнашмайһың, әллә дәртеңде ошо ҡарасҡы ҡыҙ һурып бөттөмө?» — тип һораған. Йәноҙаҡ бер һүҙ ҙә өндәшмәгән, йылмайған ғына. Ә Тамсыгөл күҙҙәрен мөлдөрәтеп, уға ҡараған. Ҡарашы: «Бар, һин кемдән кәм, егеттәр араһында мәхрүм булма», — ти икән. Егет уғын алған да нөктәләй генә булып күренеп торған алтын балдаҡҡа атып ебәргән. Уҡ сыжлап, балдаҡты эләктереп алған да ҡайынға барып ҡаҙалған. Тик Бикәнең сикәһенән үпмәгән егет. Хөрмәт йөҙөнән балдаҡты ҡайтарған да: «Бәхәсте бәйгелә, көрәштә еңгән ике ҡорҙашым хәл итһен, ә минең йәрем бар», — тип Тамсыгөлгә күрһәткән. Майҙандағы йәштәр, аһ, итеп ҡалған: ҡайһы берәүҙәр аптырап, егетте йәлләгән, ҡайһы берәүҙәр Бикәгә ҡушылып, хихылдап көлгән, ти. Асыуынан ярһыған бай ҡыҙы еләнен елпелдәтеп Тамсыгөл янына килгән һәм мыҫҡыллы тауыш менән: «Ташландыҡ мәхлүк икәнеңде һин үҙең беләһеңме?.. Әллә Йәноҙаҡты сихырланыңмы, урман ҡарасҡыһы?» — тип ҡысҡырған. Көтөүсе йортонда йәберле һүҙҙәрҙе ишетмәгән Тамсыгөлдөң күҙҙәренән йәш атылған, башы әйләнеп, иҫтән яҙған, ти. Ярһыған Йәноҙаҡ та, хәлһеҙләнгән Тамсыгөлдө алдына ултыртып, Бикә йәйләүен ташлаған. Бай ҡыҙының тәртипһеҙлеген күргән ҡорҙаштары ла кейәү таҫтамалдарын сисеп, ҡайын төбөнә ырғытҡандар. Йәштәр был өсәү тураһында һүҙ ҡуйыртып, аптырап таралышҡандар, ти.

Шул хәлдән һуң түшәккә ята Тамсыгөл: ашамай-эсмәй, күҙҙәрендә йәш ялтыратып, көндән-көн һурыға бара икән. Ни эшләргә лә белмәгәндәр: дарыу үләндәре лә ярҙам итмәгән, имтомсолар ҙа һауыҡтыра алмаған, бер туҡтауһыҙ йыуатыуҙары ла бушҡа булған. Ҡыҙға ҡарап Йәноҙаҡтың да донъя шатлыҡтары һүнә барған. Сөнки ул был ҡара күҙле, ебәк толомло ҡыҙҙы шул тиклем яратҡан, унһыҙ йәшәй алмауын аңлаған, ти. Шулай бер көн, алйып йөрөй торғас, әүлиә менән сәй эскән ҡайын янына килеп сыҡҡан. Уйланып, йомшаҡ үлән араһында ятҡан һәм үҙе лә һиҙмәҫтән, йоҡлап киткән. Төшөндә ул әүлиәне күргән. «Йәноҙаҡ, минең баҡсамда һутлы алмалар үҫә, шуларҙы ашаһа, Тамсыгөл һауығыр», — ти. «Ә мин һеҙҙең баҡсағыҙҙы ҡайҙан табырмын?» — ти егет. — «Уралдың иң бейек түбәһендә минең

һарайым. Үҙ ҡулың менән өҙөргә тейешһең алмаларҙы. Тик унда бер кешенең дә аяҡ баҫҡаны юҡ. Юлың бик хәтәр: йылан-сихырсының ике һеңлеһе ҡалды, ағалары өсөн үс алырға тырышасаҡтар. Аң бул, хәйләләренә бирешмә. Батыр бул, бер нәмәнән дә ҡурҡма! Тамсыгөлдөң ғүмере һинең ҡулда». Егет ҡапыл уянып китә. Аптырап, тирә-яғына ҡараһа, бер аҡ сәскәнең нур сәсеп, бәүелеп ултырғанын күрә.

Егет, барыһы менән дә хушлашып, атаһы өйрәткән урман һуҡмағынан төньяҡҡа ҡарай юл тотҡан, ти. Көн-төн барған, бейек-бейек тауҙар, ҡалын-ҡалын урмандар, йылға-күлдәр артта ҡалған, алда бик текә, мәғрур, болоттарҙан аша ҡарап торған тау күренгән. Егет ныҡ арыған була. Тауға артылырҙан алда әҙ генә ял итеп алырға уйлай. Ҡапыл уның янында йомшаҡ түшәкле, ҡабарынҡы мендәрле урындыҡ хасил була. «Был ни хәл, атам ултыртҡан урындыҡ, әсәм йәйгән урын түгел — йоторға әҙер тора», — тип уйлай егет һәм барыһын да аңлай. «Ә юхалар, һеҙ ҡорған тоҙаҡмы әле был!» — тип ҡысҡырып ебәрә лә уңға-һулға ҡылысы менән түшәк-мендәрҙәрҙе саба башлай. Әсе тауыш ишетелә, ҡара ҡан атыла, урындыҡ юҡҡа сыға. Йәноҙаҡ әкренләп тауға күтәрелә, уйында тик Тамсыгөл була. Ҡыҙ кипкән ирендәрен саҡ-саҡ ҡыбырҙатып: «Йәноҙаҡ ағай, табырһыңмы икән алмаларҙы? Мин көтәм... Тиҙерәк ҡайт...» — тигән кеүек. «Тамсыгөләм... йәнем... Мин менәсәкмен был тауға. Һин һауығырға тейешһең!» — тип аҙым һайын ҡабатлаған егет. Тауға күтәрелгән һайын юл ауырлашҡан, башы әйләнгән, маңлайынан тирҙәре сөбөрләп аҡҡан, бер туҡтауһыҙ һыу эсәһе килгән. Шулай бара торғас, ҡапыл егет алдында, тик томалға, үрҙән йылтырап, һыу ҡойола башлаған. Тик ағышы ниңәлер Йәноҙаҡты һурып алырҙай булып, мыҫҡыллы көлгән кеүек күренгән. Хикмәтле күренешкә оҙаҡ аптырап тормаған, янына уғын ҡуйып, төпкә, һыу эсенә атып ебәргән, ти. Башта шарҡылдап көлгән, аҙаҡ ыңғырашҡан тауыш ишетелгән. Күҙ асып йомған арала йылҡылдаҡ юҡ булған, һыуһау ғәләмәте лә бөтә. Тау аҡландары, аҡ ҡайын sауҡалыҡтары артта ҡала. Ҡуйы, ылыҫлы ҡалын урман башлана. Тирә-яҡта имәнес йыртҡыс, ҡош-ҡорттоң тауыштары ишетелә. Кейемдәре йыртылып, ялбырап бөтә егеттең. Урманды йырып, оло-оло таштар янына килеп сыға. Таштар кеп-келән, ҡараһаң, кәпәс осоп китер-

лек бейек, ҡойма кеүек юлды кәртәләп, быуып тора, ти. Уңға ла, һулға ла, алға ла барырлыҡ түгел икән. Егет бер аҙ уйланып тора ла өҫкә ҡарап, сылбыр епкә теҙгән кеүек, бер-береһенә тейҙереп, уҡтарын ата башлай. Аҙаҡ, уҡтарына тотоноп, үргә үрмәләй. Көсөргәнештән хәле бөтә, етмәһә, бер уҡ оҙонлоғо ара буш булып сыға. Егет барыбер ҡулдарын алға һуҙа, Тамсыгөлдөң йомшаҡ толомдарына тотонғандай була. Бер аҙҙан ҡаяның башына менеп етә. Өҫтә сағыу, ҡар өйөмдәре теҙмәһе башлана. Түҙеп торғоһоҙ һыуыҡтың әсе еле әсендә барған Йәноҙаҡтың ҡаршыһына иҫ киткес ҙур, күҙҙе сағылдырған ут шары тәгәрәй башлай. Ни эшләргә белмәгән егет, һөңгөһөн алға һуҙған килеш, күҙҙәрен йома. Шарҙың яҡынайғаны һиҙелә һәм һөңгө осона тейгәс, ҡаты шартлау яңғырай. Йән өҙөлгәндәй әсе тауыш тирә-яҡты шаңҡыта. Егет күҙҙәрен аса һәм үҙенең бер нәмә лә күрмәгәнен аңлай. «Тамсыгөлөм, һин борсолма, мин барыбер алға барасаҡмын!» — ти ул. Йәноҙаҡ ҡулдарын алға һонған килеш, билдән ҡарға батҡан килеш, бара ла бара. Бер аҙҙан аяҡ аҫтындағы ҡарҙы аҡ болоттар алмаштыра. Томан эсендә барған кеүек тоя егет үҙен. Алға әйҙәгәндәй, Тамсыгөлдөң тауышы әле тегендә, әле бында ишетелә. Килә торғас, болоттарҙың таралыуы һиҙелә, иркенлек тойола, саф һауа, сәскәләрҙең хуш еҫе бөркөлә. Ҡоштар тауышы, шишмәләрҙең сылтырап ағыуы, ҡыҙҙарҙың көлөүе ишетелә. Йәноҙаҡ әүлиә иленә килеп еткәнен аңлай, тубыҡланып, күҙҙәрен баҫып, йомшаҡ үләнгә ултыра.

— Йәноҙаҡ улым, иҫән-һау килеп еттеңме, рәхим ит минең ҡалама, — тигән яғымлы тауыш һирпелә. Егет шатлана, ләкин бер нәмә лә күрмәүенә борсола. Шул саҡ йылы ямғыр яуа башлай.

— Йәноҙаҡ, хәҙер һин күрәһең, — ти тауыш. Егет күҙҙәрен аса һәм үҙен иҫ киткес ғәжәп, күркәм баҡса эсендә торғанын күрә. Мең төрлө сәскәләр күҙҙең яуын ала, гүзәл ҡоштарҙың тауышы хайран ҡалдыра, төрлө таштар өҫтөнән һикереп, тирә-яҡҡа сәсрәп, йәйғор төҫтәре уйнатҡан саф шишмәләре һоҡландыра, ҡала эсенән ишетелгән талғын музыка тауышы иҫтән яҙҙыра, ти. Ә емеш-еләктең төрлөлөгө... былдай байлыҡ ер йөҙөндә бер урында ла юҡ икән. Әүлиә нурҙар бөркөлөп торған алма ағасы янына Йәноҙаҡты алып килә.



— Һайлап ал, был ауырыу һеңлеңдең дарыуы, — ти.

Егеттең балҡып торған ике алманы өҙөүе була, өҫтөндәге йыртыҡ кейемдәре юҡҡа сыға һәм үҙен бик матур, байрамса кейенгән ҡиәфәттә күрә. Етмәһә, күҙ асып йомғансы үҙен һылыу-һылыу ҡыҙҙар уратып ала.

— Йәноҙаҡ, һинең йәрәшелгән кәләшең дә юҡ, һайла ошо һылыуҙарҙың береһен, — ти Әүлиә йылмайып. — Ашыҡма, берәй аҙна һарайымда байрам ит.

Егет тынысһыҙланып китә, барыһы өсөн дә рәхмәт әйтә лә, бер минут та ҡала алмаясағын белдереп, ғәфү үтенә.

— Ярай... — тигән Әүлиә. — Юлыңды бүлеп, тота алмайым. Мин һиңә бер ҡумта бүләк итәм. Аптырама, унда алтын көмөш тә, аҫыл таш та юҡ, бары өс бөртөк алма орлоғо ғына. Һин уны ҡасан теләһәң, ҡайҙа теләһәң — шунда сәс, ҡәҙерләп үҫтер. Алмағастың емешен ашаған кеше үҙен ғазаплаған ауырыуҙарынан ҡотолор.

Бер аҙҙан аҡ болотҡа ултырып, барыһы менән дә хушлашып, Йәноҙаҡ аҫҡа оса, шатлығының иге-сиге булмай.

Был ваҡытта Тамсыгөл, Йәноҙаҡты һағынып, тағы ла нығыраҡ ауырып киткән, ти. Ҡыҙҙың түшәктә ятҡанын, егеттең һаман да ҡайтмағанын ишеткән бай ҡыҙы Бикә әхирәттәре менән һыбай ял итергә сыҡҡан булып, һарыҡ көтөүлегенә килеп еткән, ти. Арығандарын белдереп, ял итергә туҡтағандар. Шул саҡ аҡ болоттоң үҙҙәре яғына осоп килгәнен күргән бер ҡыҙ ҡурҡыуынан яман итеп ҡысҡырып ебәргән. Ҡыҙҙар аптырап, ҡайҙа ҡасырға белмәй торған арала күркәм кейенгән Йәноҙаҡ болоттан төшөп, ашығып тирмә яғына атлаған. Бикә уның ҡаршыһына йүгереп сыҡҡан, ләкин иғтибарһыҙ ҡалған.

— Ҡарасҡыһын һағынған! — тип мыҫҡыллы көлгән ғәрлегенән. Әхирәттәре лә уға ҡушылған. Ә инде ҡапыл ғына һауыҡҡан Тамсыгөлдө етәкләгән Йәноҙаҡты күргәс, шартлар сиккә еткән. Ҡыҙҙы тағы аяҡтан йығырға теләп:

— Һеперткегә яулыҡ ябындырып, күлдәк кейҙерһәң дә һинең ҡарасҡыңдан матурыраҡ булыр! — тигән асыуынан ярһып. — Әллә кәләш итеп һайланыңмы? Ер йөҙөндә унан да матурҙы тапманыңмы? Ха-ха-ха!

— Матур матур булмай, һөйгән матур була, — тигән Йәноҙаҡ йылмайып һәм Тамсыгөлдө Әүлиә ҡалҡыулығына алып киткән.

Ҡыҙыҡ күреп, ҡыҙҙар ҙа улар артынан эйәргән, ти. Ҡайындар шаулап торған ҡалҡыулыҡ түбәһенә менгәс, егет баш эйеп сәләмләгән дә:

— Донъялағы иң матур ҡыҙҙы етәкләп, һинең янына килдем, Әүлиә. Тамсыгөл — минең кәләшем, — ти.

— Аҡылынан яҙған инде!.. — тип аптырай ҡыҙҙар. — Алдында берәү ҙә юҡ, кем менән һөйләшә ул?

— Ҡарасҡының әсәһе менәндер! — тип шарҡылдап көлгән Бикә. — Алйыған кешенең күҙенә төрлө һүрәт күренә тиҙәр!

— Эйе, һөйөүҙән алйығанмын, мин кәләшемде бик яратам, — ти Йәноҙаҡ һәм Тамсыгөлдө ҡосағына ала. Ҡыҙҙар, аһ, итеп ҡала. Ҡапыл тирә-яҡ нурланып китә һәм алда күренгән күркәм ҡаланың мәрмәр баҫҡыстарынан Әүлиәнең төшөп килгәне күренә. Ул яҡынлашҡан һайын Тамсыгөлдөң тәне таҙара бара икән. Тик ҡара күҙҙәре, тамсы гөлөндәй бөгөлөп торған керпектәре, оҙон толомдары элеккесә, ти. Һылыуҙарҙан-һылыу ҡыҙҙы күреп, Бикә телһеҙ ҡала. Ҡатын Тамсыгөлдөң сәсенән һыйпап, Йәноҙаҡтың арҡаһынан ҡағып былай ти:

— Тамсыгөл — минең кесе ҡыҙым. Бәләкәй сағында Йылан батша урланы уны. Сөнки минең бар тереклеккә, кешеләргә изгелек ҡылып йөрөгәнемде яратманы. Иремде, Тау батырҙы хәйлә ҡороп үлтертеп, мине ҡатынлыҡҡа һораны. Ризалығымды ала алмағас, үс итеп, ҡыҙымды сихырланы, әҙәм ҡурҡырлыҡ ҡиәфәттә тотто, буй еткәс тә берәй егет яратмай тороп, сихыр көсө ҡайтмаясағын белдерҙе. Тамсыгөлдө һин, Йәноҙаҡ, бер туған һеңлең кеүек яҡын күрҙең, егет ҡорона ингәс, һөйҙөң, изге йөрәкле, аҡыллы булыуына һоҡландың. Йылан батшаны үлтереп, донъяны яуызлыҡтан ҡотҡарҙың. Буласаҡ кейәүемә, ҡыҙыма ошо ҡаланы бүләк итәм. Бәхетле булығыҙ. Әйҙә ҡалағыҙҙа һөнәрмәндәр, аҡыл эйәләре, руханиҙар йәшәһен. Бындағы халыҡҡа һин башлыҡ, Йәноҙаҡ. Уралтауҙың байлығын, матурлығын арттырығыҙ.

Әүлиә ҡатын егеттең башына алтын-көмөш ептәр менән һырылған, аҫыл таштар менән биҙәлгән кәпәс кейҙерҙе, ти. Йәноҙаҡ менән һылыу Тамсыгөл Әүлиә алдында баш эйеп, хөрмәт йөҙөнән рәхмәт белдереп, шатланып бөтә алманылар, ти. Мәрмәр ҡапҡаның семәрле ҡапҡалары үҙенән-үҙе йәйғор нурҙары уйнатып, шар асылып киткәс, ҡатын бөтәһен дә ҡунаҡҡа саҡырҙы, ти.

Ҡыҙҙар ҡыуана-ҡыуана аҫыл баҫҡыстарҙан ҡалаға юл алған, тик Бикә генә илай-илай ярһып, бай йортона ҡарай сапҡан, ти. Үҙе бер туҡтауһыҙ:

— Матур матур булмай, һөйгән матур була... — тип ҡабатлай икән.

Бер аҙҙан Йәноҙаҡ, атаһы менән әсәһен үҙ янына алып, баҡсаһына йәшәү орлоҡтарын сәсеп, Уралтауын тағы ла йәшеллеккә күмеп, халҡына хеҙмәт итеп, Тамсыгөлө менән татыу, бәхетле тормош ҡороп ебәрҙе, ти.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

### Пьесалар

Салауат батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 7
Яҙ бүләге . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 38
Наҙлыгөл . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 42
Бал ҡорто — Нәҙекәйбил . . . . . . . . . . . . . . . . 48
Хушлашыу . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 51
Бөҙрәкәй . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 57
Кемдең күлдәге матур . . . . . . . . . . . . . . . . . . 69
Күстәнәс . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 76
Алтын тараҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 83
Ҡайнар ҡояш аҫтында . . . . . . . . . . . . . . . . . . 90
Шүлгән батшала ҡунаҡта . . . . . . . . . . . . . . . . 96
«Ҡарға бутҡаһы» байрамында . . . . . . . . . . . . 109
Пушкин имәне янында . . . . . . . . . . . . . . . . . 125
Һаумы, һаумы, Ҡыш бабай! . . . . . . . . . . . . . 138

### Әкиәттәр

Шамил менән Шаҡшаҡа . . . . . . . . . . . . . . . . 152
Салауаттың кир аты . . . . . . . . . . . . . . . . . . 177
Урал иле — Арҡайым . . . . . . . . . . . . . . . . . . 182
Әсә бәхете . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 190
Тамсыгөл . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 196

*Для детей среднего школьного возраста*

**Литературно-художественное издание**

**ЯГАФАРОВА Айсылу Шайхитдиновна**

**ТИРМЭКЭЙ**

**Пьесы и сказки**

*(на башкирском языке)*

Мөхәррире *Гөлназ Фазлиәхмәтова*
Рәссамы *Рәшит Рамазанов*
Биҙәлеш мөхәррире *Фазлетдин Ислахов*
Техник мөхәррире *Зәйтүнә Сыңғызова*
Корректорҙары *Әлфиә Илекәева,*
*Әлфиә Теләмова,*
*Зөһрә Абдуллина*

Нәшр. лиц. № 04380; 26.03.01. Йыйырға бирелде 20.06.05. Баҫырға ҡул ҡуйылды 14.09.05. Ҡағыҙ форматы $70 \times 90\,^{1}/_{16}$. Офсет ҡағыҙы. Мәктәп гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 15,21+0,29 форз. Шартлы буяу отт. 31,30. Иҫәп-баҫма таб. 10,48+0,525 форз. Тиражы 2500 дана. Заказ № 1.0087.05.

Башҡортостан Республикаһының «Башҡортостан «Китап» нәшриәте»
дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Левченко урамы, 4а.

Әҙерләп бирелгән файлдарҙан баҫылды.
Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.